10. Кетенчиев М.Б., Додуева А.Т., Хуболов С.М. Названия месяцев в карачаево-балкарском языке // Вестник Череповецкого государственного университета. 2019. № 6 (93). С. 109–118.

11. Лобкова Е.В. Образ-концепт «любовь» в русской языковой картине мира: дисс. … канд. филол. наук. Омск, 2005. 288 с.

12. Самситова Л.Х., Байназарова Г.М. Любовь как лингвокультурный эмоциональный концепт (на примере башкирских народных скорых песен-четверостиший о любви) // Мир науки, культуры, образования. № 6 (49). 2014. С. 382–385.

13. Сепир Э. Избранные труды по языкознанию и культурологии. М.: Прогресс, 1993. 655 с.

14. Сибгаева Ф.Р. Лингвокультурный концепт «МӘХӘББӘТ» (Любовь) в татарской языковой картине мира: автореф. дисс. … канд. филол. наук. Казань, 2009. 24 с.

15. Толковый словарь карачаево-балкарского языка. В 3 т. Т. 3. С–Я. / под ред. А.А. Жаппуева, Л.Ж. Жабеловой, И.М. Отарова. Нальчик: «ЭЛЬ-ФА», 2005. 1157 с.

16. Улаков М.З., Хуболов С.М. Конструкции с предикатами, выраженными одновалентными фразеологическими единицами со значением отношения, в карачаево-балкарском языке // Вестник Дагестанского научного центра РАН. 2013. № 50. С. 80–83.

17. Улаков М.З., Хуболов С.М. Полупредикативные конструкции как облигаторные компоненты фразеологизированных предложений в карачаево-балкарском языке // Вестник ВЭГУ. 2013. № 1 (63). С. 140–145.

18. Хуболов С.М. Структурно-семантические особенности предложений с предикатами, выраженными трехвалентными фразеологизмами со значением отношения в карачаево-балкарском языке // Филологические науки. Вопросы теории и практики. 2016. № 1-2 (55). С. 190–193.

19. Ketenchiev M.B., Dodueva A.T., Uzdenova F.T., Khubolov S.M. Names of months and national linguistic picture of the world on material of Karachai-Balkarian folklore and literature// Dilemas contemporáneos: Educación, Política y Valores. 2019. Vol. 6, iss. S7. Article Number: 13.

© Ахматова М.А., Хуболов С.М., 2024

**УДК 81-2**

***Ахмедьянова Лейсан Радиковна,***
*магистрант, ФБФВиЖ,*
***Бахтиярова Альфира Нурисламовна,***
*канд. филол. наук, доцент,УУНиТ, г. Уфа, РБ*

## Языковые особенности слогана в рекламе с элементами юмора и черного юмора (на материале китайской печатной, телевизионной и интернет-рекламы)

В настоящее время реклама заполнила все информационное пространство. Наши современники ежедневно неосознанно потребляют огромное количество рекламной информации, к тому же рынок отличается высокой конкуренцией. В результате потребителям порой трудно вникнуть в большое разнообразие предлагаемых товаров и услуг [1].

Мы знаем, что основными функциями рекламы являются информирование, убеждение и напоминание. Наиболее привлекательные образы в рекламе, как правило, связаны с культом силы и власти, а самые эффективные и запоминающиеся образы, которым люди хотят подражать и наслаждаться, – это образы известных и популярных персонажей [2]. При этом образ, рожденный рекламой, не должен иметь однообразную структуру; необходимо разнообразие и целостность, гармония, чтобы он не «потускнел» и не стал скучным [3: 32]. Согласно нашим наблюдениям, некоторые неприятные темы рекламодатели сглаживают при помощи грамотной шутки, то есть юмор выступает в роли инструмента воздействия.

Юмор в рекламе – это вид художественного выражения, который нравится людям, развлекает и воспитывает, может поднять настроение, унылое чувство и отношение сопротивления у аудитории, упростить процедуру обработки информации и заставить читателя породить комические ассоциации о бренде или продукте при помощи улыбки.

Основная же цель юмористической рекламы – создать позитив и «приклеить» его к рекламируемому товару или услуге. Юмор может быть использован для повышения эффективности рекламного сообщения только в том случае, если он используется с умом.

Рассмотрим приемы подачи юмористической рекламы.

1. Каламбур – юмористический эффект, производимый одним и тем же словом или фразой, подразумевающей два значения. Это способ добавления связанного с продуктом значения к первоначальному значению слова с помощью омофонных слов, который тонко смешивает первоначальное значение слова с новым значением продукта.

2. Маскировка – выражение чего-либо правдоподобными средствами. Без навязывания, а с тонкими намеками. Кадры с определенным лимонадом в любимых телесериалах, фото известного актера с телефоном конкретной марки и многое другое – все это скрытая реклама.

3. Шутка – относится к поведенческим действиям или разговорам и смеху, которые не являются серьезными.

4. Комизм – абсурдная, нелепая речь или поведение.

5. Ирония – представление события в виде глупого, абсурдного или несовершенного поступка.

6. Антитеза – язык, выражающий полную противоположность своему буквальному значению [3: 72].

Искусство юмора в рекламном языке привлекает все больше внимания, поскольку оно может заставить потребителей воспринимать рекламные сообщения в непринужденной и приятной атмосфере.

Рассмотрим несколько категорий рекламных слоганов с примерами:

1. Показывает эффективность продукта. Этот тип рекламного слогана в основном используется в категории товаров повседневной необходимости. Например, реклама термоса под названием 热心永驻rèxīn yǒngzhù «Вечный энтузиазм». Вечный энтузиазм: описывает человека, который полон энтузиазма и любит помогать людям. В рекламе используется для иллюстрации того, что термос хорошо сохраняет тепло, жидкость в нем всегда горячая, а не холодная. Таким образом, используется тавтологический каламбур.

2. Акцент на качество продукции. Качество продукта находится в центре внимания потребителей, поэтому производители и предприятия должны представить общественности качество своей продукции, например, 雪豹羽绒，温暖寒冬xuěbào yǔróng, wēnnuǎn hándōng «Пух снежного барса согревает зимой» (雪豹羽绒服xuěbào yǔróngfú пуховая куртка «Снежный барс»). Все предложение не только идентифицирует бренд, но и рифмуется с ним.

Еще один рекламный слоган ресторана 请来本店用餐吧，不然你我都要挨饿了 «Приходите поесть в наш ресторан, иначе мы оба останемся голодными» [6].

Использование юмора в китайской рекламе началось гораздо позже, чем в западных странах, в результате чего качество китайской юмористической рекламы, естественно, значительно отстает. На данном этапе общий уровень юмористической рекламы в Китае относительно низок, она полагается на «перефразирование» устоявшихся зарубежных юмористических реклам, не обладая креативностью и мудростью [4: 88].

Большинство выдающихся шуточных реклам приходят из-за границы. В Китае очень мало своих уморительных «фишек», которые можно назвать классическими. Многие из того, что люди видят каждый день, и кажущиеся пришедшими из Поднебесной, являются просто «китайскими копиями» из других стран. Например, такие раскрутки, как ролик Сникерс «Ты голоден?» адаптированы из оригиналов по причине разницы между китайской и зарубежной культурами [5].

Юмористическая реклама попала в поле зрения каждого человека и получила признание общественности за свой неповторимый шарм, отражающий ее собственную ценность. Это показывает, что такой подход является неотъемлемым выражением современной рекламы и ее незаменимым присутствием.

Хорошая уморительная реклама может заставить аудиторию невольно обратить внимание и охотно потреблять без какого-либо сопротивления со стороны потребителей.

Юмористический маркетинг является эффективной стратегией продвижения брендов и продуктов в Китае, так как многие рекламодатели преследуют цель – показать потребителю, что они «свои» и тоже умеют веселиться. Ведь легче общаться с потребителями, вызывая эмоциональный отклик через шутки, соответственно повышая узнаваемость бренда. Можно сделать вывод о том, что юмористические образы в рекламе КНР, как и везде, повышают настроение объекта и подталкивают его к выбору и покупке предлагаемого товара, создавая у объекта положительные ассоциации.

**Литература:**

1. Абдуллина Г.Р., Ганиева З.Ю. Лексические особенности рекламных текстов в башкирском языке // Мир науки, культуры, образования. 2023. № 4 (101). С. 234–236.

2. Ганиева З.Ю., Абдуллина Г.Р. Морфологические и синтаксические особенности башкирских рекламных текстов (на материале периодических изданий) // Филологические науки. Вопросы теории и практики. 2023. Т. 16. № 8. С. 2389–2394.

3. Макиенко И.И. Юмор в рекламе // Маркетинг в России и за рубежом. 2002. № 5. С. 54–61.

4. Цзя Сючжэнь. Сравнение китайской рекламы и западной культур в английском и китайском языках рекламы. Материалы VII Международной научно-практической конференции. М.: Ин-т стратегических исслед. 2011. С. 381–385.

5. Как устроен рынок рекламы в Китае. URL: https://vc.ru/marketing/92568-kak-ustroen-rynok-reklamy-v-kitae (дата обращения: 07.02.2024).

6. Китайская реклама: опора на традиционное потребительское поведение URL: https://cyberleninka.ru/article/n/kitayskaya-reklama-opora-na-traditsionnoe-potrebitelskoe-povedenie/viewer (дата обращения: 12.01.2024).

© Ахмедьянова Л.Р., Бахтиярова А.Н., 2024

**УДК 37.035.6**

***Байымова Гөлдәр Абдулла ҡыҙы,***

*педагог-психолог, баланы үҫтереү үҙәге –*

*«Айыукай» балалар баҡсаһы, Баймаҡ к., БР*

## Йәш быуынды тәрбиәләүҙә башҡорт халыҡ уйындары

Балаларҙы тәрбиәләүҙә уйындар айырыуса ҙур урын тота. Уйын улар өсөн донъяны танып белеү сараһы, хеҙмәт мәктәбе һәм һәр яҡлап гармониялы үҫеү сығанағы. Ысынлап та, уйнаған саҡта бала өҙлөкһөҙ хәрәкәттә була, ә был хәл инде уның бөтә яҡлап йылдам үҫеүен тәьмин итә. Был физиологик процесс булһа, балаларҙы йәмғиәтебеҙ өсөн кәрәкле кешеләр итеп тәрбиәләүҙең икенсе бер күренеше – психологик процесс та уйындың айырылғыһыҙ өлөшө булып тора.

Халыҡ уйындарының йәш быуынды тәрбиәләүҙә тотҡан урыны баһалап бөткөһөҙ. Уйындар баланы күп яҡлап үҫтерә, уларҙың фекерләүен, хәтерен, ихтыяр көсөн арттыра һәм физик яҡтан нығыта. Уйын барышында һәр кем етеҙҙәрҙән, көслөләрҙән өлгө алыуҙы, үҙе лә беренселеккә ирешеүҙе маҡсат итеп ҡуя һәм төрлө ҡаршылыҡтарҙы еңеп сығырға тырыша, уңышҡа ирешһә, үҙенең еңеүе менән ләззәтләнә. Күмәк уйындар дуҫлыҡ, берҙәмлек сифаттарын тәрбиәләргә булышлыҡ итә.

Ҡатмарлы нанотехнологиялар йәки инновацион технологиялар заманы булһынмы, уйындар үҙенең урынын һаман да юғалтмай, уйындар физик тәрбиәүи яҡтан да ҙур әһәмиәткә эйә.

Башҡорт халыҡ уйындары – башҡорт халҡының тарихи яҡтан нығынған күңел асыу, уйын-көлкө, тамаша ҡылыу саралары һәм спорт, бейеү, йыр бәйгеләре ул. Башҡорт халыҡ уйындары күсмә мәҙәниәт традицияларында формалашҡан һәм башҡорттарҙың тарихы, хеҙмәте, көнкүреше һәм йолалары менән бәйле үҫешкән. Уйындар кешелә ғәйрәтлелек, сыҙамлылыҡ, етеҙлек кеүек сифаттар үҫтерә һәм тәрбиәләй, башҡалар менән аралашырға, хеҙмәт һәм хәрби ҡоралдар менән эш итергә өйрәтә. Уйындарҙың берәүҙәре ҡатнашыусыларҙың уҙышыуына, ярышыуына, икенселәре оҫталыҡты күрһәтеүгә, өсөнсөләре донъяны танып белеүгә ҡоролған.

Уйындар түбәндәге төркөмдәргә бүленә:

- бала-саға уйындары (ҡалаҡҡа йомортҡа һалып йүгереү, уҡсы, баҡыр бүкән, күҙ бәйләш, гөрөлдәк, өс ҡуңыс, таяҡ ташлаш, өс эт, ҡул туп, тирмә – улар барыһы ла үҙҙәренең йөкмәткеһе буйынса рус халҡының жмурки, прятки, горелки, лапта һәм башҡа уйындарына оҡшаш);
- өлкәндәр уйындары;
- персонаждары булған сюжетлы-ролле («убырлы ҡарсыҡ», «айыу менән ҡуяндар», «йәшерәм яулыҡ» ) һәм сюжетһыҙ ярыш уйындары («йәмшәйгән уҡ», «аҡ тирәк, күк тирәк», «йәбешкәк түңгәктәр» һ.б.);
- йәнлектәрҙе һәм ҡош-ҡорттарҙы эләкләгән импровизациялы уйын-бейеүҙәр: «ҡорҙар уйыны», «кәкүктәр уйыны»;
- спорт уйындары: йүгереш, тоҡ кейеп йүгереү, тоҡтар менән һуғышыу, ҡолға буйлап үрмәләү, ҡалаҡҡа йомортҡа һалып йүгереү, һуғылған таҫтамалдарҙы тартыш һ. б.
- байрамдарҙы оҙатыусы уйындар (ҡарғатуй, һабантуй, майҙан, туй), шулай уҡ календарь байрам уйындары.
- ирҙәр (атлы спорт) һәм ҡатын-ҡыҙ уйындары.
- танып белеү уйындары.

Уйындарҙың балаларға оҡшағандарын өйрәнеп, таҡмаҡтарын ятлап, һанашмаҡтар өйрәнеп, яратып уйнайбыҙ.

**Һанашмаҡтар**

Әмбәл-төмбәл,

Ҡаҙыял-ҡуҙыял,

Сидыҡ сигәнәк,

Алабута, дегәнәк,
Майлы ҡалас,
Ярсыҡ-йорсоҡ,
Балтаңды алып,
Йүгереп сыҡ.

Алатыр, былатыр,
Тау яғынан таң атыр,
Алабуға-бүҙәнәк,
Ялпаҡ-ҡалпаҡ,
Ҡуян, ҡарға, сыпсыҡ,
Һин ҡал, мин сыҡ!

– Төй-төй, төйләгән,
Төндә ҡайҙа бараһың?
– Нәбиҙәргә барамын.
– Унда ниндәй йомошоң?
Унда бар осор ҡошом.
Осоп китте, юғалды,
Башы һыуға тығылды,
Аҡ суҡ, ҡара суҡ,
Бында торма, бар сыҡ!

**«Дүрт мөйөш»** уйыны (таҡмаҡлы уйын)

Дүрт ҡыҙ дүрт мөйөшкә баҫа, бишенсеһе уртала – артыҡ. Бер ҡыҙ таҡмаҡ әйтешеп бейегән арала икенсеһе менән керпек ҡағып ҡына һөйләшә. Шунда кинәт кенә урындарын алышырға тейештәр. Алышҡан саҡта, бишенсеһе артыҡ мөйөшкә тора алһа, теге урынһыҙ ҡала, үҙе ҡарауыллай башлай. Шулай уйын дауам итә.

**«Шылдыр китте»** уйыны

Уйында бер төркөм балалар ҡатнаша ала. Был уйынды элек киске уйынға сыҡҡан йәштәр уйнаған. Иң тәүҙә һынашмаҡ ярҙамында көтөүсе һайлана. Балалар бер рәткә теҙелешеп, тубыҡтары аҫтында урын ҡалдырып бөкләп ергә (иҙәнгә) ултыралар. Көтөүсе тубыҡтар аҫтынан «Шылдыр китте, шылдыр китте, шылдыр китте» тип һамаҡлап шылдырған яулыҡты тотоп алырға тейеш. Араларынан яулыҡты алған ике уйынсыны ярыштыралар.

Мәҫәлән, арҡан тартышалар, йә таяҡ тартышалар, кем еңелә, шул көтөүсе була. Яңы көтөүсе менән уйын шулай дауам итә.

**«Сокор туп»** уйыны

Әҙерлек.

Уйын башланыр алдынан аралары 1-1,1 м булған йоҙроҡ ҙурлығындағы туп һыйырлыҡ ике соҡор ҡаҙыла. Соҡорҙарҙың ситенә кипкән балсыҡ һалына (туп тәгәрәп китмәһен өсөн). Туп һыйыр йөнөнән әүәләп эшләнелә.

Соҡор туп уйынын уйнар өсөн ике тигеҙ төркөмгә бүленәбеҙ. Ике төркөмгә бүленеп уйнай торған уйындың башы. Бындай уйындар башҡорт халыҡ ижадында ҙур ғына урын ала. Мәҫәлән, йәшкә олораҡ, абруйлыраҡ ике баланы «ағай» итеп һайлайбыҙ. Улар икеһе бергә торалар, ә ҡалғандар парлашып, үҙ-ара исем билдәләйҙәр ҙә килеп «ағай»ҙан һорайҙар. Мәҫәлән: аймы-ҡояшмы, ерме-күкме. «Ағай»ҙар алмаш-тилмәш үҙҙәренә оҡшаған исемде әйтеп, һәр береһе үҙенә төркөм туплай. Уйнаусылар шундай ысул менән ике тигеҙ төркөмгә бүленгәс, төп уйын башлана.

Уйындың аңлатмаһы.

Ике яҡтан берешәр уйнаусы сығалар ҙа бер-береһенә ҡапма-каршы булып соҡорҙар эргәһенә ултыралар. Уйын башланыу менән улар тупты ҡаршы яҡтағы соҡорға тәгәрәтә башлайҙар. Уйын туп соҡорға төшкәнсе дауам итә. Ҡайһы уйнаусының тубы соҡорға төшә шул еңеүсе була, ә еңелеүсе тороп йүгереп ҡаса башлай. Әгәр еңелеүсе баҫтырыусынан тотолһа уға наказ бирелә. Әгәр тотолмай кире килеп урынына ултырһа наказ булмай, уйынды икенсе пар дауам итә. Уйын үрҙәгесә дауам итә. Кемдең тубы соҡорға төшә, ул уйынсыға бер мәрәй бирелә. Уйындың аҙағында һәр төркөмдөң дөйөм мәрәйҙәре һанала, ҡайһы яҡтың мәрәйҙәре күберәк шул яҡ еңеүсе була.

Халыҡ уйындарының быуындан-быуынға тапшырылып, әлегә тиклем һаҡланып ҡалғандарына иғтибар итһәң, улар халыҡтың уҙған тормошон, культураһын, көнкүрешен күҙ алдына баҫтырырға ярҙам итәлер. Халыҡ уйындары ваҡыт һынауынан ҡурҡмайҙар, оҙаҡ йылдар һуҙымында бер аҙ үҙгәреш кисерһәләр ҙә, һаман да киләсәк быуынға хеҙмәт итеүен дауам итәләр. Шуныһы ла ҡыуаныслы – уйындар тел барьерына ла дусар түгелдәр. Әйтәйек, башҡорт малайҙарының уйындарын рус, сыуаш, мари, мордва, удмурт һәм башҡа милләт халҡы улдары ла кинәнеп уйнайҙар.

**Әҙәбиәт:**


1. Абдуллина Г.Р., Саньярова Р.Р. Современные проблемы преподавания башкирского языка как родного и государственного в Республике Башкортостан и других регионах Российской Федерации. Свидетельство о регистрации базы данных RU 2022621174, 23.05.2022. Заявка № 2022620947 от 04.05.2022.

2. Абдуллина Г.Р., Бахтиярова А.Н. Вопросы тюркологии и востоковедения в полиэтническом пространстве. Свидетельство о регистрации базы данных RU 2022621540, 29.06.2022. Заявка № 2022621465 от 23.06.2022.

3. Бикбулатов Г.Ф., Абдуллина Г.Р. Термины национальных видов спорта в башкирском языке (лексико-семантическая группа «саңғы ярышы») // Актуальные проблемы современной филологии: сборник материалов региональной (с международным участием) научно-практической конференции, посвященной 130-летию известного башкирского педагога, ученого, общественного деятеля Габбаса Давлетшина. Уфа, 2022. С. 80–84.

4. Бураҡаев И.Д., Бураҡаева М.С., Юлмөхәмәтов М.Б. Башҡорт мәҙәниәте (Тормош һабактары): 7-се синыф өсөн дәреслек. Өфө: Китап, 2007.

5. Живые родники (ИКБ). Уфа: Китап, 2009.

6. Культура Башкортостана: справочное пособие для учащихся. Уфа, ГУП «Уфимский полиграфкомбинат», 2002.

© Байымова Г.А., 2024

**УДК 37.035.6**

***Баймырҙина Римма Фәйзулла ҡыҙы,***
*Республика балаларҙы һауыҡтырыу-белем биреү,*
*туризм, тыуған яҡты өйрәнеү һәм экскурсиялар үҙәге,*
*Өфө ҡ., БР*

## Йәйләү – ул рухи тәрбиә шишмәһе

Республикала «Йәйләү» профилле лагеры – һәр уҡыусы эләгергә теләгән ял урыны ул. Эпидемиологик хәлгә бәйле, профилле смена хатта онлайн форматта «Бәйләнештә» селтәрендәге төркөмдә лә үтте. Төп маҡсат булып, башҡорт халҡының ғөрөф-ғәҙәтен, тарихын, мәҙәниәтен, традицияларын өйрәнеү, һаҡлау тора. «Йәйләү» онлайн төркөмөндә балалар ун көн эсендә Башҡортостаныбыҙҙың тарихын, ғөрөф-ғәҙәттәрен, милли аш-һыуын, экиәт-эпостарын, музыка ҡоралдарында уйнарға өйрәнде. Илебеҙҙең төрлө тарафтарынан Һомай ҡыҙҙай һылыу, аҡыллы ҡыҙҙар, Урал батырҙай көслө егеттәребеҙ тупланды. «Йәйләү – ул рухи тәрбиә шишмәһе», – ти программаға нигеҙ һалыусы һәм тормошҡа ашырыусы яҙыусы Мәрйәм Бураҡаева.

Ике йыл рәттән онлайн дәрестәр биреү, уҡыусыларҙың эштәрен баһалауҙа ҡатнаштым. Үҙем өсөн яҡшы тәжрибә тупланым. Һеҙҙең менән шул осор иҫтәлектәр менән бүлешергә теләйем.

«Йәйләү» онлайн сменаһының етәксеһе итеп Йәмилев Инсаф Рим улы тәғәйенләнде. Беренсе көн «Йәйләү» профилле сменаның гимны тәҡдим ителде. Һәр көнгә Инсаф Рим улы ҡыҫҡаса һығымта яһаны. Икенсе көн «Бейемәгән башҡорт юҡ» тип исемләнде. Башҡортостандың Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт халыҡ бейеүҙәре ансамбле солисткаһы Муллағолова Эльвира Ильяс ҡыҙы «Зарифа» бейеүен бейергә өйрәтте. Был көндө бейеү буйынса викторина уҙғарылды. 7 йәштән алып 17 йәшкә тиклемге балалар ихлас ҡатнашты. Таһир Кусимов исемендәге гимназияһынан Гөлназ Нөғәмәнова, Илзидә Шәйәхмәтова, Гүзәл Хәйбуллина «Зарифа» бейеүен бик оҫта башҡарып, видеоларын һалды. Шулай уҡ «Аҡбуҙат» журналының баш мөхәррире Абдуллина Лариса Хашим ҡыҙынан блиц-тур уҙҙы. Был конкурста Таһир Кусимов исемендәге гимназия уҡыусыһы Нәркәс Баймырҙина еңеүсе, тип иғлан ителде. Өсөнсө көндө ҡурай дәресе булды. Йәйләүҙә ҡурай, ҡумыҙ түңәрәктәрен етәкләүсе Ейәнсура егете Ишмырҙин Инйәр Илфар улы оҫталыҡ дәресе бирҙе. Балалар ҡурай буйынса һорауҙарға яуап ебәрҙеләр. Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры Башҡортостандың халыҡ шағиры Мәжит Ғафуриҙың тыуыуына 140 йыл тулыуға арналған блиц-турнир үткәрҙе. Бында Таһир Кусимов исемендәге гимназияның уҡыусылары

Нәркәс Баймырҙина – беренсе урын, Гөлназ Нөғәмәнова, Ралина Мостафина икенсе урын алып, ҡиммәтле бүләктәр менән бүләкләнде. Башҡортостан Республикаһының Милли музейынан да һорауҙар ҡуйылды. Бында ла гимназистар һынатманы. Нәркәс менән Гөлназ иҫтәлекле бүләктәргә лайыҡ булды. Дүртенсе көндө йәйләүселәр Башҡортостандың ете мөғжизәһенә сәйәхәт итте. Уҡыусылар Салауат Юлаев һәйкәле янында, Янғантау, Красноусол һәм Шүлгәнташ мәмерйәһе янында төшкән фотолары менән уртаҡлашты. Бишенсе көн – «Ҡумыҙ һәм ҡумыҙсылар» көнө – ифрат мәғлүмәттәргә бай булды. Башҡортостан Республикаһының халыҡ артисы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Башҡортостандың Шәйехзада Бабич исемендәге йәштәр премияһы лауреаты Зәйнетдинов Миңлеғәфүр Миңлеәхмәт улы алып барҙы. Ҡумыҙҙың ниндәй төрҙәре генә юҡ икән. Алтынсы көн шәжәрә көнө исеме менән үтте. Уны Әбйәлил районы Таһир Кусимов исемендәге гимназияһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Баймырҙина Римма Фәйзулла ҡыҙы үткәрҙе. «Шәжәрә. Башҡорт халҡының тарихи шәхестәре». Был көндө 50 ашыу шәжәрә килде. Үҙ тамырҙарын тәрән белеүе менән ҡыуандырҙы Йәйләүселәр. Етенсе көн «Урал батыр» һабаҡтары буйынса Инсаф Рим улы кәңәштәр бирҙе. Эпос буйынса уҡыусыларҙың һорауҙарына яуап бирҙе.Һигеҙенсе көн «Ағы барҙың туғы бар» исеме аҫтында уҙҙы. Уны Таһир Кусимов исемендәге гимназияның уҡытыусыһы Римма Фәйзулла ҡыҙы алып барҙы. Уҡыусылар ҡорот, ҡыҙыл эремсек эшләү серҙәренә төшөндө. Һәр кем ризыҡ эшләү буйынса фотолар менән бүлеште. Балалар тағы «Һүрәт төшөрөүселәр» дәресен ҡараны, батыр һүрәтен эшләп ебәрҙе. Туғыҙынсы көн һабантуй булды. Таһир Күсимов исемендәге гимназияның башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Муллахмәтова Альбина Ринат ҡыҙы бик үҙенсәлекле итеп алып барҙы. Уҡыусылар онлайн форматта белемдәрен камиллаштырҙы, ярыш ҡомары менән ихлас янды. Унынсы көн йомғаҡлау көнө ине. Йомғаҡлауҙы республикабыҙҙың Мәғариф һәм фән министрлығының Милли мәғариф идаралығы етәксеһе Зинуров Булат Илшад улы менән берлектә «Йәйләү» сменаһының етәксеһе Йәмилев Инсаф Рим улы алып барҙы, еңеүселәр билдәләнде. Был сара тура эфирҙа уҙҙы. Артабан инде ҡатнашҡан һәр бер уҡыусының мәрәйҙәре һаналды.

Республиканың төрлө төбәктәренән уҡытыусылар дәрес бирҙе. Онлайн форматта ла нигеҙ һалыусы яҙыусы Мәрйәм Бураҡаева эштең уртаһында ҡайнаны, кәңәштәрен бирҙе. Бындай шарттарҙа рухи ял ойошторғаны өсөн Мәғариф министрлығына айырыуса рәхмәт белдерге килә. Лагерь сменаһының онлайн булыуы бер яҡтан ҙур форсат асты. Артабан да был форматта үткәреүҙе дауам итеү мөһим, тип һанайым. Йәй һәм каникул тип торманылар, ихлас эштәрен ебәрҙеләр, бер-береһенә дуҫтар таптылар.

Һәр баланың «Йәйләү»гә эләгәһе килә бит ул. Ә бында илдең һәр мөйөшөнән ҡарай, һәләттәрен үҫтерә алдылар. Йәйләү йомғаҡланды, барығыҙҙа ла ошо дәрт-дарман, рух көсө һүнмәһен. «Йәйләү»ҙә бер генә тапҡыр булһа ла ял иткән балалар үҙҙәрен шундай бәхетле тоя! Балаларға ҡанат та ҡуя, маҡсатлы йәшәргә көс-дәрт тә бирә «Йәйләү». «Йәйләү»ҙән айырылыуы бик ауыр ине балаларға, артабан да уҡыусыларға уңыштар юлдаш булһын. Киләһе «Йәйләү»гә тиклем.

© Баймырҙина Р.Ф., 2024

**УДК 372.881.1**

***Батталова Таңһылыу Зиннәт ҡыҙы,***
*башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы,*
*Мәләүез күп профилле һөнәри колледжы, БР*

**Башҡорт телмәрен аңларға өйрәтеү**

Өйрәнелгән телдә аралашыуҙың мөһим шарты булып әңгәмәләшеүселәрҙең бер-береһен аңлауы тора.

Башҡорт телендә ишеткәнде аңлау түбәндәге күнекмәләрҙең формалашҡан булыуын күрһәтә:

– өндәрҙең ағымын ишетеү һәм таныу;

– ишеткәндең мәғәнәһен аңлау;

– телмәрҙән кәрәк мәғлүмәтте айыра алыу.

Рус телле студенттарҙың ишетеп аңлау дәрәжәһе башҡорт теленең фонологик системаһын, грамматика, лексикаһын үҙләштереүгә бәйле. Билдәле булыуынса, ят телдең өндәрен телмәр ағышында ишетеү өндәрҙең айырым әйтелгәндә сифат яғынан айырылыуы менән генә түгел, ә студенттарҙа башҡорт телендә ишетеү күнекмәләренең етерлек булмауы менән дә ҡыйынлаша. Шуға күрә һәр дәрестә рус балаларында ишетеү күнекмәләрен үҫтереү, башҡорт телмәрен ишетеп аңларға күнектереү зарур.

Тыңлау өсөн материал биргәндә, билдәле бер эҙмә-эҙлеклелек һаҡланырға тейеш.

Ишеткәнде аңларға өйрәтеү дәрестең ойоштороу моментынан уҡ башлана. Уҡытыусы тәүге дәрестәрҙән үк дәресте үткәреү өсөн кәрәкле ябай һүҙбәйләнеш һәм һөйләмдәрҙе әйләнешкә керетә. Был осраҡта механик хәтер өҫтөнлөк итеүе мөмкин.

Икенсенән, тәүге дәрестәрҙе рус телендә үткәреү мөмкин булһа ла, артабан әсә телен дәрестәрҙә ҡатнаштырыу кәмей бара, бөтә уҡытыу процесын тулыһы менән башҡортса үткәреүгә күселә.

Аңлау өсөн тәҡдим ителгән хәбәрҙәр күләме этаптан этапҡа арта бара. Тәүге осорҙа уҡытыусының хәбәре дәрестә үтелгән яңы материалға, таныш булған лексикаға нигеҙләнһә, һуңға табан таныш булмаған һүҙҙәр индерелгән текстар ҡулланырға мөмкин.

Тексты аңларға өйрәтеүҙә иң киң таралған алым – уҡытыусы телмәрен тыңлау. Һәр дәресте бәләкәй текстар тыңлау күнегеүҙәренән башларға була. Һуңынан текст буйынса төрлө эштәр үткәрелә: һорауҙарға яуап биреү, йөкмәтке буйынса әңгәмә, ҡыҫҡартып йәки тулыһынса һөйләү, һорауҙар биреү, тексты дауам итеү һ. б.

Икенсе киң таралған алым – уҡытыусының ҡушҡан эштәрен үтәү. Кәрәкле эште үтәү студенттың уҡытыусыны аңлауын күрһәтә.

Дәрестә дидактик уйындар ҡулланыу тел өйрәнеүселәрҙе әүҙемләштерә.

Мәҫәлән, уҡытыусы дәрестә студенттарға төрлө картиналар тарата һәм улар тураһында бер нисә һөйләм әйтә. Кемдең картинаһы тураһында һүҙ барыуын студенттар аңлап, картиналарын күрһәтәләр.

Ошо уҡ күнегеүҙе ҡатмарландырып, дәресте «дөрөҫ һәм дөрөҫ булмаған раҫлауҙан» башлау отошло. Студент уҡытыусының картиналар буйынса тәҡдим иткән раҫлауҙарынан үҙҙәренең фекере буйынса «тап килгән раҫлауҙы» һайлай, үҙенең фекерен дәлилләй. Йәки уҡытыусы үҙ телмәренә йөкмәткегә тап килмәгән һөйләм өҫтәй, ә студенттар артыҡ һөйләмде табалар.

Әммә дәрестә уҡытыусының телмәре генә өҫтөнлөк итергә тейеш түгел, студенттар бер-береһен дә тыңларға тейеш. Дәрестә бының өсөн маҡсатлы эш үткәрелә. Диалогтарҙа ҡатнашыу, төрлө текстарҙың йөкмәткеһен һөйләү, бер-береһенең һорауҙарына яуап биреү – һөҙөмтәле эш төрҙәре. Әлбиттә, аудиояҙмалар тыңлау, видео ҡарау кеүек эштәр ҙә ярҙам итә.

Дәрестә «һорау-яуап» алымы йомғаҡлау этабында, зачет ваҡытында үткәрелә. Студенттар парлап бер-береһенән тема буйынса һорау ала йәки тема буйынса иптәшенә һөйләй. Был алым шулай уҡ һүлпән өлгәшеүселәр менән эш өсөн уңайлы. Ундай студенттар уҡытыусыға ҡарағанда төркөмдәшенә еңелерәк һөйләй, яңылышлыҡтан ҡурҡмай, ҡаушап та ҡалмай, үҙен иркенерәк тота. Балалар бер-береһен тыңларға һәм аңларға, хатаны дөрөҫләргә, объектив булырға өйрәнә.

Традицион методикалар менән бергә яңы технологиялар ҡулланыу ҙа бик отошло. Мәҫәлән, тәнҡитле фекерләү технологияһы буйынса эшләү студенттарҙың эшмәкәрлеген әүҙемләштерә. «Идеялар кәрзине», кластер, «Буталған логик сылбыр», «Фараздар ағасы», «Дөрөҫ һәм дөрөҫ булмаған фекерҙәр», «Түңәрәк буйлап хат», «Һөйләмде тамамла», «Йыуан һәм йоҡа һорауҙар» кеүек алымдар йыш ҡулланыла. Был алымдар телмәрҙе ишетеүҙе, аңлауҙы һәм башҡорт телендә мөмкин тиклем күберәк аралашыуҙы талап итә.

Студенттар шулай уҡ «Буталған логик сылбыр» кеүек эш төрөн дә яратып башҡара. Былдай эштең ике варианты бар.

I вариант: Асҡыс һүҙҙәр һәм һөйләмдәр эҙмә-эҙлекле түгел, буталып биреләләр. Текст өҫтөндә ентекле эш үткәрелгәс, рефлесия этабында буталған сылбырҙы дөрөҫләргә ҡушыла.

*Ул, йоҡоһонан, ҡышҡы, уянғайны. Сыбыҡтар, көтмәгәндә аҡландағы ҡыштырланы, өйөмө аҫтында нимәлер. Был – терпе ине. Үләндәр, уның, энәләренә, һәм, ҡоро, йәбешкәйне, япрактар. Баҫты, терпе, яй ғына, аяҡтарына, тирә-яғына, еҫкәнде, һәм, ҡаранды.*

II вариант: Айырым ҡағыҙҙа өҙөктән 5-6 ваҡиға эҙмә-эҙлекһеҙ рәүештә таратып бирелә. Студенттарға хронологик йәки эҙмә-эҙлеклелекте тергеҙергә тәҡдим ителә.

*Бына балыҡ сиртте.*

*Күл өҫтө тып-тын.*

*Ҙур ғына алабуға Камилдың биҙрәһенә инеп ятты.*

*Балыҡсылар ҡармаҡтарын һалдылар.*

*Рифҡәткә лә балыҡ эләкте.*

*Ҡалҡыуыс батып китте.*

Уҡытыусы студенттарҙың ишеткәнде аңлау кимәлен үҫтерерҙәй ниндәй генә алымды дәрестәрҙә ҡулланһа ла, был эш төрө уларҙы ялҡытмаҫҡа, ҡыҙыҡһындырырға, телде өйрәнеү теләге булдырырға тейеш. Бары шунда ғына ул һәйбәт һөҙөмтә бирә.

**Әҙәбиәт**:

1. Баһауетдинова М.И., Йәғәфәрова Г.Н. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә яңы технологиялар ҡулланыу (методик ҡулланма). Өфө: НМЦ «Педкнига», 2018. 204 бит.

2. Башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡытыуҙың эффектив формалары, метод һәм алымдарын асыу һәм практикаға индереү: ғилми-ғәмәли конференция материалдары. Өфө, 2017.

3. Вәкилова Д.Т., Абдуллина Г.Р. Башҡорт телендә «төҫ» компонентлы фразеологик берәмектәр // Башҡортостан Республикаһының һәм Рәсәй Федерацияһы субъекттарының мәғариф арауығында башҡорт теле. Сборник материалов VI Всероссийской (с Международным участием) научно-практической конференции, посвященной 80-летию со дня рождения ученого-методиста Р.Г. Азнагулова. Уфа, 2021. С. 101–104.

4. Вәкилова Д.Т., Абдуллина Г.Р. Донъяуи тел картинаһында төҫтәрҙең әһәмиәте // Теория урало-алтайского языкового сообщества и аспекты ее развития в современной отечественной лингвистике = Урал-алтай тел берләшмәһе теорияһы һәм хәҙерге ватан тел ғилемендә уның үҫеш аспекттары: материалы Всероссийской научно-практической конференции (с международным участием), посвященной 110-летию доктора филологических наук, профессора, известного тюрколога-алтаиста, выдающегося ученого-языковеда и видного башкирского писателя Дж. Г. Киекбаева. Уфа, 2021. С. 121–124.

© Батталова Т.З., 2024

**УДК 373.24**

***Буранбаева Әминә Рафиҡ ҡыҙы,***
*тәрбиәсе, МАМББУ Баланы үҫтереү үҙәге –*
*«Айыуҡай» балалар баҡсаһы, Баймаҡ ҡ., БР*

**Дөрөҫ тын алыу күнегеүҙәренең балаларҙың һаулығы өсөн әһәмиәте**

«Тын алыу – ул тормоштоң нигеҙе». Ошолай тип әйтеү менән барыбыҙ ҙа килешербеҙ, моғайын. Сөнки беҙ аҙыҡһыҙ – бер нисә аҙна, һыуһыҙ – бер нисә көн, һауаһыҙ бары бер нисә минут ҡына йәшәй алабыҙ.

Шундай шәп тиҙлекле заманда йәшәйбеҙ. Ваҡиғаларҙың тиҙ үҙгәреүе ололарға ғына түгел, балаларға ла ныҡ тәьҫир итә. Һуңғы ваҡыт хатта тын алырға ла онотоп барабыҙ һымаҡ. Элекке ауыр эштәр юҡ, заманса техника ҡорамалдары эштәрҙе еңелләштерә. Ата-бабаларыбыҙҙың, өләсәйҙәребеҙҙең, ата-әсәйҙәребеҙҙең, беҙҙең йәшәйешебеҙ ҡул көсөнә тура килде, үҙебеҙ ҙә һиҙмәҫтән тәрән тын алып эш башҡарғанбыҙ. Ошо тын алыу диафрагмаға, үпкәгә үҙе үк әһәмиәтле булған. Шулай уҡ һуңғы йылдарҙа килеп сыҡҡан Covid-19 вирусы ла беҙҙең тын алыу юлдарына насар тәьҫир итә, ныҡ ауырығандарҙың үпкәләрен зарарлай, ә ауырыуҙы еңел үткәргәндәрҙең бер нисә аҙна тын алыуҙары ауырлашып ҡала. Шулай уҡ беҙҙең һуңғы ваҡытта интернетта үткәрелгән ваҡытыбыҙ ҙа тын алыуға ауыр йоғонто яһай. «Иғтибарыбыҙҙы гаджеттарға туплағанда беҙ аңһыҙ рәүештә тын алмайбыҙ», – ти Эйми Хартли (йога буйынса инструктор). «Был электрон хат яҙыуға иғтибарҙы йүнәлткәндә лә һәм социаль селтәрҙәрҙе күҙәткәндә лә була ала. Бынан тыш

ноутбукка, телефонға башығыҙҙы эйеп йә бөгөлөп ултырыуығыҙ ҙа тын алыуығыҙҙы ауырлаштыра», – ти ул.

Һуңғы ваҡытта үҫешендә төрлө етешһеҙлектәр, уҡыуҙа ҡыйынлыҡтар, яраҡлашыуҙа ауырлыҡтар булған балаларҙың артыуы күҙәтелә. Ундай балаларҙың иғтибары тарҡау, йыш ҡына сәбәпһеҙ агрессив, бер эштән икенсеһенә тиҙ күсергә һәләтһеҙ, үҙҙәрен һәм тирә-йүндәгеләрҙе кире ҡабул итә, кире хистәрҙе үҙ аллы баҫа, күңеле һәм тәне менән идара итә алмайҙар. Ошондай етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү, патологик хәлдәрҙе иҫкәртеү, психик һәм физик һаулыҡты нығытыу өсөн комплекслы коррекция эше үткәрергә кәрәк. Был йәһәттән тын алыу күнекмәләре, тын алыу гимнастикаһы иң мөһим компоненттарҙың береһе булып тора.

Балаларҙың тын алыуына иғтибар итеп торорға кәрәк. Уның һулышы ни тиклем яйыраҡ һәм тигеҙерәк икән, ул шул тиклем сәләмәтерәк. Мәктәптә уҡығанда балалар күберәк ултыра, аҙыраҡ хәрәкәт итә һәм тын алыуға тәьҫир иткән стрессорҙарға дусар була башлай. Ошондай хәлдәр булмаһын өсөн беҙ балаларҙы балалар баҡсаһынан уҡ дөрөҫ тын алырға өйрәтергә тейешбеҙ. Сөнки дөрөҫ тын алыу балаға тыныс, шыма, ашыҡмай һөйләшергә өйрәнергә ярҙам итә. Танау аша дөрөҫ тын алырға өйрәтеп беҙ балаға йыш тымауҙан, гриптан, ангинанан ҡотолорға ярҙам итәбеҙ.

Балаларға тын алыу гимнастикаһын эшләтеүҙең маҡсаты – ул, тәү сиратта, уларҙың һаулығын нығытыу.

Дөйөм физик үҫешкә быдай гимнастиканың әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ:

– тын алыу органдарына күнегеүҙәр эшләү барышында бала организмының һәр күҙәнәге кислород менән байытыла;

– бала үҙенең тын алышы менән идара итергә өйрәнә, тимәк, ул үҙе менән дә идара итә аласаҡ;

– дөрөҫ тын алыу баланың мейе, йөрәк һәм нервы системаһының, тын алыу һәм аш һеңдереү системаларының эшмәкәрлеген яҡшырта. һаулыҡты нығыта;

– тын алыу гимнастикаһы – тын алыу органдары ауырыуҙарына яҡшы гимнастика.

Дөрөҫ тын алыу телмәр үҫешендә бик мөһим. Ул тауыш әйтелешенә, артикуляцияға һәм тауыш үҫешенә тәьҫир итә. Телмәр етешһеҙлектәре булған балалар менән эшләгән тәрбиәсе булараҡ, беҙ тын алыу күнегеүҙәрен төрлө режимлы моменттарҙа йыш ҡулланабыҙ:

– физкультура, музыка дәрестәренән һуң;

– иртәнге гимнастикала;

– физик күнекмәләр менән бергә көндөҙгө йоҡонан һуң;

– сыныҡтырыу сараларында;

– балаларҙың төрлө хәрәкәт эшмәкәрлегендә;

– өй шарттарында.

Күнегеүҙәрҙе эщләткәндә айырым ҡағиҙәләрҙе иҫтә тоторға кәрәклеген әйтеп үтер инем:

– дәрестәрҙе, балаларҙың йәшенә ҡарап, көн һайын үткәрергә мөмкин, ләкин уларҙың оҙайлығы 3-6 минуттан артыҡ булырға тейеш түгел, сөнки балалар тиҙ арый, ҡайһы бер балаларҙың башы әйләнеүе ихтимал;

– күнегеүҙәрҙе үткәрер алдынан төркөмдө елләтергә, туҙандарҙы һөртөргә кәрәк;

– төшкө аш йәки киске аш ашағандан һуң эшләтергә ярамай. Күнегеүҙәр һәм һуңғы ашау араһында ваҡыт бер сәғәт булырға тейеш, ас ҡарынға үткәрелһә тағы ла яҡшыраҡ;

– күнегеүҙәрҙе ҡыҫмаған, иркен кейемдә башҡарырға кәрәк;

– танау менән тын алырға. Тынды «йомшаҡ» һәм ҡыҫҡа, шул уҡ ваҡытта тәрән итеп алырға, һауаны талғын һәм оҙаҡ сығарырға, күнегеүҙәрҙе эшләгәндә ҡул. муйын, күкрәк мускулдарын көсөргәндермәү яҡшы, яурындарҙы күтәрмәҫкә һәм сикәләргә һауа тултырмаҫҡа тырышырға кәрәк;

– һауа һулағанда яурындарҙы күтәрмәҫкә, ә һауаны сығарғанда яурындарҙы төшөрмәҫкә;

– тынды сығарғандан һуң, икенсе һауа һулағансы 2-3 секунд ял итергә;

– бөтә күнегеүҙәрҙе лә уйын формаһында үткәрергә;

– предметтарҙы устан, өҫтәлдән йәки епкә бәйләнгән предметтарҙы өрөргә мөмкин.

Төркөмдә ҡулланылған тын алыу күнегеүҙәрен һеҙҙең иғтибарға тәҡдим итәм:

**«Япраҡтар бейеүе»**

Төҫлө ҡағыҙҙан япраҡтар ҡырҡып алабыҙ һәм өҫтәлгә һалабыҙ. Тын алабыҙ ҙа әкрен генә өрөп сығарабыҙ. «Япраҡтар» осоп китергә тейеш. Күнегеү барышында елкәнең тура һәм тигеҙ булыуы мотлаҡ.

**«Стаканда шторм»**

Был уйынға стакан һәм таяҡса кәрәк. Стаканға һыу ҡоябыҙ һәм таяҡсаның бер яғын шунда төшөрәбеҙ, икенсе яғын ауыҙға ҡабабыҙ. Бала таяҡсаға өргән ваҡытта стаканда «буран» уйнарға тейеш. Күнегеүҙе башҡарғанда сикәләр ҡабармай.

**«Тупты ташла»**

Тупты алабыҙ һәм ҡулдарҙы өҫкә күтәреп торабыҙ. Бала тын ала һәм тынын сығарған ваҡытта тупты күкрәк тирәһенән алға ташлай, шул ваҡытта «у-х-х» тип әйтә. Һәр күнегеүҙе 4-6 тапҡыр эшләргә.

**«Кәмә»**

Ҙур һауытҡа һыу ҡоябыҙ, унда ҡағыҙҙан кәмә эшләйбеҙ, тын алабыҙ ҙа тынды сығарғанда өрөп кәмәне хәрәкәтләндерәбеҙ.

**«Футбол»**

Был уйынға мамыҡ киҫәге һәм ике ҡәләм алабыҙ. Мамыҡтан туп йомарлайбыҙ һәм ике ҡәләмдең уртаһына өрөп индерәбеҙ.

**«Хуш еҫле сәскәләр»**

Беҙ үҙебеҙҙе хуш еҫле гөл-сәскәле баҡсала сәскәләрҙең тәмле еҫтәрен еҫкәйбеҙ тип хис итәбеҙ.

**«Бәпембә өрөү»**

Танауҙан үпкә тулғансы тын алабыҙ һәм бәпембәнең мамыҡтарын өрөп төшөрәбеҙ.

Шулай уҡ үҙ эшебеҙҙә А.Н. Стрельникованың тын алыу гимнастикаһы буйынса күнекмәләрен дә ҡулланабыҙ. Мәҫәлән, «Вагондар», «Бесәй», «Насос», «Яурындарҙы ҡосаҡла» һ. б. Тын алыу күнегеүҙәре буйынса ата-әсәйҙәр менән дә тығыҙ эшләйбеҙ. Уларға коллектив, индивидуаль аңлатыу эштәре алып барыла: консультациялар, әңгәмәләр үткәрелә. Балалар менән өйҙә шар өрәләр, һабын ҡыуығы менән уйнайҙар, япраҡтар, ҡар бөртөктәре, күбәләктәр осоралар, кәмәләр йөҙҙөрәләр һ. б.

Шулай итеп, тын алыу күнекмәләрен системалы файҙаланыу йыш ауырыған балаларҙың ыңғай динамикаһын күрһәтә. Шул рәүешле файҙаланылған тын алыу күнекмәләре һалҡын тейеүҙе иҫкәртергә, йәшәү тонусын күтәрергә, балаларҙың психофизик сәләмәтлеген нығытырға, балаларҙың ижади күҙаллауын һәм фантазияһын үҫтерергә ярҙам итә. Балалар рухи күнекмәләрҙе механик рәүештә түгел, ә аңлы рәүештә яһарға тейеш.

**Әҙәбиәт**:


1. Аслаева Ғ.Ғ. Телмәр һәм зиһен. Өфө, 2005. 96 бит.
2. Каримова Р.Н., Абдуллина Г.Р., Яхина М.М., Нарынбаева А.А. Башкирско-русский словарь башкирских украшений. Свидетельство о регистрации базы данных RU 2023623944, 14.11.2023. Заявка от 03.10.2023.
3. Нищева Н.В. Комплексная образовательная программа дошкольного образования для детей с тяжелыми нарушениями речи (общим недоразвитием речи) с 3 до 7. СПБ.: Детство-пресс, 2015.
4. Тимергалиева А.Р., Абдуллина Г.Р. «Кейек», «януар» концепттары хаҡында // Медиапространство Российской Федерации: глобальный и национальный аспекты: материалы V Международной научно-практической конференции. Уфа, 2023. С. 155–161.


© Буранбаева Ә. Р., 2024 йыл.

**УДК 372.881.1**

***Валишина Лена Галимхановна,***
***Кужина Лейсан Ахметовна,***
*преподаватели, ГАПОУ Ишимбайский нефтяной колледж, г. Ишимбай, РБ*

## Изучение башкирского языка как государственного в учебных заведениях среднего профессионального образования

*«Многоязычие – это главное. Это достаточно широко открывает окно в мир. И возможностей у многоязычных детей намного больше, чем у моноязычных»*

Р. Хамитов

Изучение родного языка в колледже имеет особое значение, так как родной язык является самым ярким признаком национальной принадлежности, национальной самостоятельности. Люди мыслят на родном языке. Чем лучше они владеют родным языком,

тем ярче, красивее и богаче выражают свои мысли в устной и письменной речи. Чем больше языков знает человек, тем шире его возможности умственного и духовного обогащения.

И сегодня мы хотели бы поделиться со своей практикой в решении этих педагогических задач. Ученые-методисты И.Я. Зимняя, С.А. Арутюнов разрабатывали эффективные методы преподавания родного языка в условиях двуязычия. Но прежде чем взяться за нашу методику, мы должны довести до наших ребят ту истину, что связь с родной речью нужна им не только сегодня, но и в дальнейшей жизни как источник вдохновения, очищения и совести. Ведь каждый народ (большой он или малый по численности) хранит и бережет свой язык с одной целью – передать его своим потомкам, чтобы сохранить его как источник самой жизни отдельного народа или нации. Так, на наших занятиях студенты должны учиться гордиться своим родным языком как языком своего народа, научиться бережно относиться к его звучанию, слышать, ощущать красоту и прелесть, глубину и богатство, силу и величие родной речи. Наша основная цель совпадает здесь и с психолого-педагогическими задачами, когда решаются проблемы возраста отрочества. Всем известно, что на сегодня это повышенное задание для каждого, кто не только интересуется преподаванием своего предмета, но и воспитанием наших детей на лучших традициях и обычаях своего народа, вооружив их знаниями о жизни, формируя у них самостоятельность мышления. По психологии известно, что человек способен творить чудеса именно в своем мире, где язык имеет главнейшую роль. Как справедливо заметил академик Д.С. Лихачев, «язык, на котором он пишет, говорит, думает», должен помочь идти дальше по жизни. И потому для нас преподавание родного языка и литературы решает следующие задачи:

– во-первых, развивает в человеке ту врожденную душевную способность, которую называют даром слова;

– во-вторых, вводит молодых людей в сознательное обладание сокровищами родного языка, так как они становятся в ряды хранителей языка и культуры своего народа;

– в-третьих, помогает усвоить логику, историю этого языка, что тесно связано с историей нашей прекрасной Республики Башкортостан.

Эти цели и задачи достигаются в совместном сотрудничестве со студентами. И по опыту знаем, что нужно приложить немало сил, чтобы наши занятия по предмету превратились в радость общения, творчества на родном языке. Как это сделать на уроках, какие новые формы работ заинтересуют ребят, элементы каких технологий ввести в свою практику? Чтобы ответить на эти непростые вопросы, мы должны быть готовыми показать в первую очередь красивую, грамотную речь. Ведь речь человека – зеркало его самого, его души и потому стараемся развивать трогательное отношение к своей языковой компетенции. А для этого обращаемся к народной мудрости: пословицам, поговоркам, фразеологизмам. Они не только обогащают речь ребят и учат их жизненным мудростям. Поэтика башкирской литературы, богатое литературное наследие всегда позволяют найти пути сотрудничества. Никого не может оставить равнодушным слова Рами Гарипова о родной речи или строки Расула Гамзатова:

И если завтра мой язык исчезнет,

То я готов сегодня умереть.

Ведь родное слово является основой всякого умственного развития и всех знаний. Именно родное слово является связующим звеном с народом, представителем которого является сам студент. Именно об этом говорил и известный народный поэт Республики Башкортостан Рами Гарипов:

Әсәм теле миңә – сәсән теле,

Унан башҡа минең халҡым юҡ,

Йөрәгендә халҡы булмағандың

Кеше булырға ла хаҡы юҡ!

Занимаясь своими сложными предметами по профессии, чертежами, зачетами, семинарами, они получают полноценное образование, в чем родная речь поможет творчески подходить к будущей профессии. Серьезный подход к предмету развивает ответственность у ребят, позволяет шире высказывать свои мысли, используя его возможности в познании действительности, содержательнее, полноценнее и активнее строить взаимоотношения со сверстниками и взрослыми. Так происходит зрелая социализация и психическое развитие юношества. Чем лучше они владеют родным языком, тем ярче, красивее и богаче выражают свои мысли в устной и письменной речи. И мы получаем не только диплом по профессии, но и зрелого человека, ответственного за свой родной язык. Но возлагать задачу сохранения и развития родных языков только на систему образования, снимая ее с других институтов воспитания, в частности с семьи, прежде всего с родителей, значит, обречь наши языки на искусственное существование или тихое вымирание. Задачи гуманизации общества решают в основном только учебные заведения и учреждения культуры. Однако язык нельзя сохранить насильственным путем, его можно сохранить, если представители этноса любят родную словесность, говорят на ней, гордятся ею, а чувство любви может быть заложено только в семье.

Проблемы обучения родному языку связаны с вопросами формирования национального самосознания учащихся. Думается, необходимость их решения не может не повлиять на характер наших сегодняшних занятий, в чем мы желаем всем успехов. Привлечение студентов к предмету через сотрудничество начинается, таким образом, от момента мотивации. Ребята должны видеть плоды своего труда, и аналитический подход самостоятельных молодых людей к практическим задачам, новым проектам в изучении языка становится осознанным и целенаправленным. При этом большую роль в лучшем овладении родным языком, в стимулировании интереса к его изучению играют конкурсы, олимпиады, круглые столы, семинары, научно-практические конференции. Как приятно видеть радость своих студентов от завоеванных вершин, увидеть в их глазах гордость за свои знания, что стимулирует и других ребят. Они с удовольствием участвуют в этих состязаниях, потому что готовы показать свои знания. Популяризации родных языков, усилению интереса студентов к родным языкам, повышению их качества знаний, а также поддержке творчески работающих специалистов способствует проведение ежегодных районных, городских,

республиканских мероприятий, традиционно проводимый «Международный день родного языка» и др. Хотя наш колледж имеет техническую направленность, я не перестаю выявлять среди моих студентов одаренных, талантливых ребят.

Поддержка талантливой молодежи предполагает создание специальной системы по выявлению и поддержке одаренных студентов и формированию среды для проявления и развития способностей каждого из них. В будущем мы планируем выход на такие проекты с нашими способными студентами на уровне не только республики, но и страны. Использование знаний ребят цифровых образовательных ресурсов позволяет лучше применять их в индивидуальном и дифференцированном подходе в обучении. Это позволит расширить возможности достижения нашей основной цели – освоение студентами убеждения, что они не только учатся и разговаривают на родном языке, но и сами являются носителями языка – самобытного, колоритного, живого и естественного.

Таким образом, только активизация работы по внедрению инновационных подходов в преподавании родных языков, развитие системного подхода к научным, методическим и психолого-педагогическим проблемам в процесс сотрудничества является необходимым условием практического усвоения родного языка.

**Литература**:

1. Арутюнов С.А. Народы и культуры: развитие и взаимодействие. М.: Наука, 1989.

2. Габитова З.М. Формирование универсальной учебной деятельности на уроках башкирского языка. Уфа: ИРО РБ, 2013.

3. Зимняя И.Я. Психологические основы двуязычия // Русский язык в национальной школе.1984. № 3.

4. Рахматуллина З.А. Современный башкирский язык. Виды анализов. Уфа: ИРО РБ, 2013. 28 с.

5. Рахматуллина З.А. Современный башкирский язык. Синтаксис. Уфа: ИРО РБ, 2014. 36 с.

6. Сулейманов Р.Ф. Особенности анализа художественных произведений. Лирика. Уфа: ИРО РБ, 2013. 28 с.

7. Нестерова Н.А. Информационные технологии в национальном образовании: механизмы реализации // Родной язык в современных условиях двуязычия: сб. материалов междунар. конф. Сыктывкар, 2014. С. 65–70.

8. Щеглова Л.В., Шипулина Н.Б. Культура и этнос. Волгоград, 2002.

9. Что значит знать язык и владеть им / под ред. Н.М. Шанского. М., 1990

© Валишина Л.Г., Кужина Л.А., 2024

**УДК 372.881.1**

***Газизова Айгуль Явдатовна,***
*учитель-логопед, детский сад «Курай»,*
*г. Сибай, РБ*

# «Буквабук» как эффективный инструмент формирования фонематического восприятия речи и звукового анализа слов на русском и башкирских языках у детей дошкольного возраста с ограниченными возможностями здоровья

*«Знание букв без чувства звуков – это то же самое,*
*что знание цветов при дальтонизме»*
*(Е.А. Бугрименко, Г.А.Цукерман)*

В соответствии с Федеральным государственным образовательным стандартом дошкольного образования необходимо создать равные возможности для получения качественного дошкольного образования независимо от жизненных ситуаций и здоровья ребенка, что указывает на создание необходимых условий для реализации детей с ОВЗ, которые включают использование специальных образовательных программ, пособий и дидактических материалов.

Наибольшую категорию детей с ОВЗ составляют дети с нарушениями речи. Среди них значительная часть – это дети 5-6–летнего возраста, не овладевшие звуковой стороной языка. Проблема речевого развития ребенка с ограниченными возможностями здоровья заключается в несформированной способности различать на слух звуки речи – фонемы. Имея слух и интеллект, они, как правило, не готовы к усвоению программы образования из-за недостаточного развития фонематического слуха. Эти дети составляют основную группу риска по неуспеваемости, особенно при овладении письмом и чтением.

Проблема развития фонематического слуха и восприятия у детей актуальна тем, что он является неотъемлемым составным элементом звукового анализа и синтеза. В связи с этим встает важная задача развития фонематического слуха и восприятия у детей дошкольного возраста. Развитый фонематический слух является важным составляющим элементом в развитии речи ребенка.

Поиски путей устранения нарушений фонематического восприятия детей дошкольного возраста привели меня к методике модельного обучения по дидактическому пособию «Буквабук».

Методики и технологии формирования фонематического восприятия и звукового анализа слов нашли отражение в работах таких авторов, как Л.Е. Журова, Е.И. Тихеева, Ф.А. Сохин, Н.А. Короткова.

По мнению известного психолога Д.Б. Эльконина, «чтение – есть воссоздание звуковой формы слова по его графической (буквенной модели)». Д. Ушинский отмечал, что «сознательно читать и писать может только тот, кто понял звуко-слоговое строение слова».

**Цель:** формирование фонематического восприятия и звукового анализа слов у детей дошкольного возраста с ограниченными возможностями здоровья посредством дидактического пособия «Буквабук».

Работа по дидактическому пособию «Буквабук» построена в соответствии с возрастными и психологическими особенностями развития детей дошкольного возраста, с опорой на следующие **принципы**:

1. Научности (учет современных достижений науки и практики).
2. Целостности (гармоничное воздействие на всех участников).
3. Целенаправленности (цель и результат являются регуляторами направлений работы по пособию, творческий рост педагогов).
4. Динамичности (изменения и развитие педагогической деятельности).
5. Преемственность взаимодействия с ребенком в условиях детского сада и семьи.

**Ожидаемые результаты:**

– создание системы работы по формированию фонематического восприятия речи и звукового анализа слов у детей дошкольного возраста с ограниченными возможностями здоровья;

– положительная динамика по результатам диагностики формирования фонематического восприятия речи и звукового анализа слов.

Для работы по пособию мы использовали **методы** наглядного моделирования, моделирования, метод проблемного обучения и практический метод.

В чем же заключаются особенности работы по дидактическому пособию «Буквабук»? **Комплект «Буквабук» представляет собой** органайзер с кармашками, где расположены по 198 карточек с предметными картинами, касса букв с комплектом всех букв алфавита, карточки синего, зеленого и красного цвета для обозначения гласных и согласных звуков (т.е. для звукового анализа), и наборное полотно для работы и демонстрации педагогу выполненных работ. Это очень удобно для индивидуальных занятий, где каждый ребенок перед собой заполняет карточки необходимой картинкой на тот или иной звук и демонстративное наборное полотно. Дидактическое пособие многоразовое, отвечает санитарно-гигиеническим и эстетическим требованиям. Обучать детей определять место звуков в слове, звуковому анализу слов с дидактическим пособием «Буквабук» очень удобно.

Һүҙ сәнғәте өсөн күсмә мәғәнәле һүҙҙәрҙең әһәмиәте айырыуса ҙур. Улар эмоциональ-экспрессив яҡтан көслө яңғырайҙар, төрлө стилистик биҙәктәргә бай булалар, әҫәрҙең формаһы һәм йөкмәткеһе менән туранан-тура бәйләнештә тороп, әҫәр йөкмәткеһен тәрән асырға ярҙам итәләр. Тел саралары ярҙамында яҙыусы үҙ фекерҙәрен уҡыусыға еткереп кенә ҡалмай, үҙенең геройҙары менән шатлыҡты ла, ҡайғыны ла кисерергә мәжбүр итә.

*Һынлы метафоралар,* күркәм телмәрҙә һүрәтләү саралары сифатында ҡулланылып, образлы тел барлыҡҡа килтереүҙә мөһим урын тота. Уларҙы бүлергә мөмкин:

1. Исем метафоралар. Мәҫәлән: *тормош һуҡмағы, һөйөү ялҡыны, белем шишмәһе* һ. б.

2. Сифат метафоралар. Мәҫәлән*: аҡ бәхет, ҡайнар һөйөү, бөҙрә ҡайын* һ. б.

3. Ҡылым метафоралар. Мәҫәлән: *ҡояш көлә, диңгеҙ ҡайнай, дәрт уяна* һ. б.

4. Форма оҡшашлығына нигеҙләнгән метафоралар. Миҫалдар: *ҡылыс танау, көрәк һаҡал* һ. б.

5. Күләм, киңлек, хәрәкәт оҡшашлығына нигеҙләнгән метафоралар. Мәҫәлән: *күңел даръяһы, ғишыҡ уты* һ. б. [3: 19–20].

Т. Килмөхәмәтов әҫәрҙәренән һынлы метафораларға миҫалдар: Ҡара аҡылым менән әйтәм: һин дөрөҫ юлда! («Ғүмер бераү, донъя мәңгелек»). Исламды тимер рәшәткәле таш йортҡа алып барып тығырға тигән уйы бойомға ашмаған бер төйөн булып йөрөмәнеме ни ғүмер буйы? («Ғүмер бераү, донъя мәңгелек»). Эт йәнле кеше булып сыҡтым мин

(«Турайғыр»). Ауыл осонан унар саҡрым ярым самаһында Оло зыяратҡа саҡлы тере коридор хасил булды («Ғүмер берәү, донъя мәңгелек»). Кемдәрҙең генә аҫыл һөйәктәре ятмай бында («Ғүмер берәү, донъя мәңгелек»). Ә икенсе берәүҙәр мөхәббәт шарабын татып ҡарарға ла өлгөрмәгәндер («Ғүмер берәү, донъя мәңгелек»).

Сифат метафораларҙы *эпитет,* ҡылым метафораларҙы *йәнләндереү* тип тә йөрөтәләр.

*Эпитет* грек һүҙе, беҙҙеңсә *ҡушымта* мәғәнәһенә тура килә. Ул исемдәргә аныҡлаусы һүҙ рәүешендә ҡушылып йөрөй. Йәғни үҙендә аныҡлаусы сифат һүҙ төшөнсәһен тота. Әммә сифат һүҙ ҙә төрлө мәғәнәлә ҡулланылырға мөмкин. Әйтәйек, *алтын сәғәт* тигәндә ул сәғәттең алтындан ялатылған икәнен аңлатһа, *ул кешенең ҡулы алтын* тигәндә кешенең ҡулы эшкә оҫта икәнлекте аңлата. Әгәр *акылың алтын* тиһәләр, был юлы *алтын* һүҙенең ирония менән әйтелгәнен төшөнәһең.

*Алтын сәғәт* тигәндә *алтын* һүҙе сәғәттең сифатын аңлатыр логик аныҡлаусы булып килгән. *Ул кешенең ҡулы алтын* тигәндә *алтын* һүҙе күсермә, образлы мәғәнәлә әйтелә. Өсөнсө миҫалда иһә *алтын* ироник мәғәнә ала. Һуңғы ике миҫалда аныҡлаусы һүҙҙең күсмә, кинәйәле мәғәнә алғанын әҙәбиәт ғилемендә *эпитет* тип исемләйҙәр ҙә инде.

Эпитет фольклорҙа һәм әҙәбиәттә һүрәтләү сараһы булараҡ художестволылыҡ функцияһын башҡара. Сағыштырыуҙар был функцияны башлыса ярҙамсы һүҙҙәр аша башҡарһа, эпитет аныҡлаусы һүҙгә күсмә поэтик мәғәнә һалыуы менән үтәй. Миҫалдар: Хәҙер ана күҙ һал: ҡара урман («Ғүмер берәү, донъя мәңгелек»). Ҡара аҡылы, йөрәге аша һиҙҙе быны Мәрхәбә («Берәҙәк»). Нәҙек оҙон кәүҙәле, алғыр аяҡлы, ҡамыш ҡолаҡлы, көмөш яллы туры айғыр («Ҡар яҡтан көн»). Көмөш тауышы ла ишетелеп киткәндәй итә («Турайғыр»). Таш ҡапсыҡҡа тулған дымлы һауа ҡайҙа барып бәрелергә белмәй өйөрөлә («Турайғыр»). Көмөш ялдары тиргә бешеләнде («Турайғыр»). Һаҡаллы сабый тиҙәрме? («Турайғыр»). Ундай әсе яҙмыш кисергәнсе, уны имсәк балалары йортона бирҙем («Турайғыр»). Көмөш тамсылар сәсрәтеп ике үҫмер йөҙә («Ҡар яҡтан көн»).

*Йәнләндереү* – кешеләргә хас сифаттар менән йәнле итеп һынландырырға ынтылыу. Быңдай осраҡтарҙа шағир фантазияһы ярҙамында тәбиғәт күренештәре лә, тирә-йүндәге әйберҙәр ҙә, кешеләрсә хәрәкәт итеп, хатта һөйләшеп китеүсән. Поэтик йәнләндереү сараһы йәнһеҙ нәмәләргә, гүйә, йән өрә. Тәбиғәт есемдәрен кешеләштереп тасуирлау әҫәрҙе йәнлерәк һәм йәмлерәк, эмоциональ тәьҫирлерәк итә.

Йәнләндереүҙең кереһе – тәбиғәт күренешен төҫһөҙләп йә әйберҙе, уй-тойғоно ҡатырып ҡуйыу ҙа ҡай саҡ көтөлмәгәнсәрәк эффект бирә. Йәнләндереүҙәр – метафорик һүрәтләү сараларының бер төрө ул асылда. Уларға йәнле күренештәрҙең сифаттарын йәнһеҙ күренештәргә күсереп биреү хас. Йәнләндереү һүрәтләү сараларының иң йәнлеһе ул. Миҫалдар: Тәнен зымбырлатып ут йүгерҙе («Ғүмер берәү, донъя мәңгелек»). Күҙенә ҡояш килтереп бәрҙе («Ғүмер берәү, донъя мәңгелек»). Ҡаршылағы Нөрәш тауы артынан йылмайып күтәрелгән ҡояш нурҙарының һаҡ ҡына итеп битемдән һыйпауы етте («Ағайымдың йондоҙо»). Йәйҙең һаман үҙ төҫөн ташлағыһы килмәй («Ҡар яҡтан көн»).

Метафораларҙың күбеһе телдә ныҕынған һәм традицияға әйләнгән. Был тип метафоралрҙан тыш художестволы әҫәрҙә яҙыусының үҙенә генә хас булған метафоралар ҙа

бар. Улар яҙыусының метафора ижад итеүенең индивидуаль һыҙаттарын билдәләйҙәр. *Индивидуаль-стилистик метафоралар* образлы метафоралар ҙан үҙҙәренең тәьҫир итеү көсө, эмоциональлеге менән айырылып тора. Мәҫәлән: Ҡара янған йөҙҙәр, ярылған ҡулдар он туҙанынан ап-аҡҡа әүерелде, шоморт сәстәр ағарҙы («Ғүмер бераү, донъя мәңгелек»). Ихма, болоттары ла ҡыҫыр... («Күк тояҡҡай»).

Шулай итеп, троптың бер төрө буларак, метафоралар яҙыусы ижадында шиғырҙың эмоциональлек дәрәжәһен көсәйтеп, авторҙың хистәрен, әйтергә теләгән фекерҙәрен тәрәнәйтеп киләләр, образдар асыуҙа ла ҙур роль уйнайҙар.


**Әҙәбиәт**:

1. Аристотель. Об искусстве поэзии. М., 1957. 183 с.

2. Псәнчин В.Ш. Телдең күркәмлек саралары. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1984. 128 бит.

3. Әхмәтйәнов К.Ә. Әҙәбиәт ғилеме һүҙлеге. Өфө, 1985. 344 бит.

**Сығанаҡ**:

1. Килмөхәмәтов Т. Һайланма әҫәрҙәр. Т. 1: повестар, хикәйәләр, драма. Өфө: Китап, 2011. 647 бит.



© Иҫәнғолова Г.А., 2024



**УДК 372.881.1**



***Иштуганова Лейсан Раисовна,***
*учитель башкирского языка и литературы,*
*МАОУ Лицей № 94, г. Уфа, РБ*


## Роль ИК-технологий на уроке башкирского языка

В современном образовательном процессе все большую роль играют информационно-коммуникационные технологии. Это важное направление в образовании, которое позволяет привлечь внимание учащихся и создать стимулирующую обстановку для овладения знаниями. Использование ИК-технологий позволяет создать интерактивную и мультимедийную обстановку в классе. Компьютеры, интерактивные доски, проекторы и другие средства помогают представить материал более наглядно и доступно для понимания учащихся [1].

В понятие информационно-коммуникативные технологии объединяются методы, средства и системы, связанные со сбором, производством, обработкой, передачей, распространением, хранением, эксплуатацией, представлением, использованием, защитой различных видов информации.

Использование информационно-коммуникационных технологий на уроке – это процесс активного внедрения информационно-коммуникационных технологий в образовательный процесс с целью улучшения качества обучения и повышения интереса учащихся к предмету. ИК-технологии на уроке имеют множество преимуществ. Во-первых, использование ИК-технологий позволяют сделать учебный материал более доступным и интересным для

учащихся. С помощью компьютерной графики, анимации, видеоуроков и интерактивных заданий ученики получают возможность визуально представить сложные концепции и явления. Это способствует лучшему запоминанию материала и повышает мотивацию к обучению. Во-вторых, позволяют расширить границы обучения за пределы классной комнаты. Учитель может использовать онлайн-ресурсы, электронные учебники и программы для выполнения заданий. В-третьих, способствует развитию ключевых компетенций учащихся. Умение работать с компьютером, эффективно использовать поисковые системы и анализировать информацию из различных источников – важные навыки в современном информационном обществе. Кроме того, работа с ИКТ также способствует развитию коммуникативных навыков и умений работы в коллективе [2].

С помощью проведения интерактивных занятий и заданий, которые активизируют мышление и развивают коммуникативные навыки, ученики могут работать в группах или индивидуально, решать задачи, отвечать на вопросы и обмениваться мнениями через специальные программы и платформы. Это помогает им развивать критическое мышление, учиться сотрудничать и аргументировать свои мысли.

Одной из самых распространенных ИК-технологий на уроке является использование интерактивной доски. Она позволяет преподавателю наглядно демонстрировать материал, а также активно взаимодействовать с учениками. Благодаря возможности рисовать, писать, перемещать объекты на доске преподаватель может создавать интересные задания и игры, которые помогут закрепить полученные знания. Интерактивная доска также способствует развитию коммуникативных навыков учеников и повышает их мотивацию к обучению.

Другой эффективной ИК-технологией на уроке является использование компьютерных программ и приложений [3]. Они позволяют создавать интерактивные уроки, тесты, тренировки и игры, которые делают процесс обучения более интересным и занимательным. Кроме того, такие программы могут быть адаптированы к разным уровням подготовки учащихся и предоставлять возможность индивидуального обучения. Использование ИК-технологий на уроке способствует активному взаимодействию участников образовательного процесса и помогает сделать его более эффективным.

На сегодняшний день ИК-технологии активно применяются на уроках различных предметов. Например, на уроке башкирского языка можно использовать различные методы, чтобы сделать обучение более интерактивным и увлекательным для учащихся. Использование различных мультимедийных презентаций, видеоуроков для демонстрации правильного произношения слов и фраз на башкирском языке. Это поможет ученикам лучше запоминать звуки языка и правильно воспроизводить их при общении.

Также можно воспользоваться интерактивными играми и заданиями, которые помогут проверить понимание грамматических правил, лексики и других аспектов башкирского языка. Это будет не только интересно для учащихся, но также способствует активному вовлечению их в учебный процесс.

На уроке башкирского языка можно использовать программу PowerPoint и осуществить все виды речевой деятельности. PowerPoint позволяет учителю структурировать

информацию и представить ее в логической последовательности. С помощью слайдов можно организовать материал таким образом, чтобы он был понятен и доступен для всех учеников. Кроме того, презентации могут включать в себя различные графики, диаграммы и иллюстрации, которые помогают визуализировать информацию и делать ее более запоминающейся.

В начале урока можно создать проблемную ситуацию с помощью видеозанятия по теме на башкирском языке, которая будет прикреплена на слайде в презентации, что помогает учителю сохранить целостность урока. После просмотра видеоурока следует представить на слайде все новые слова, которые будут проходить на уроке. И в конце урока для закрепления темы давать различные задания и игры. Например, соединить картинки со словами, предложить сопоставление, сортировку, поиск отличий или провести тестирование.

Программа PowerPoint является помощником для создания и представления учебных материалов при дистанционном обучении, где можно включить видеоурок, аудирование, работу с текстом, задания для запоминания новых слов.

Таким образом, использование ИКТ на уроках башкирского языка является эффективным и инновационным подходом к образованию. Он способствует повышению мотивации и интереса учащихся к учебному процессу, развитию и помогает ученикам лучше освоить язык и развить навыки его использования в реальных ситуациях общения. При правильном использовании ИКТ могут стать мощным инструментом для достижения образовательных целей и создания современных условий для обучения и развития учащихся.

**Литература:**

1. Балышова А., Абдуллина Г.Р. Термины информационных технологий, созданные методом метафоризации в казахском и башкирском языках // Медиапространство Российской Федерации: глобальный и национальный аспекты: материалы V Международной научно-практической конференции. Уфа, 2023. С. 27–31.

2. Балышова А.С., Абдуллина Г.Р. Терминосистема информационных технологий (на материале башкирского и казахского языков) // Актуальные проблемы современной татарской филологии: сборник статей Всероссийской научно-практической конференции, посвященной 95-летию со дня рождения известного языковеда, тюрколога, доктора филологических наук, профессора, первого заведующего кафедрой татарской филологии Башкирского государственного университета Габдулхая Хурамовича Ахатова (1927–1986). Уфа, 2022. С. 54–57.

3. Использование современных информационных и коммуникационных технологий в учебном процессе: учебно-методическое пособие / авторы-составители: Д.П. Тевс, В.Н. Подковырова, Е. И.Апольских, М. В, Афонина. Барнаул: БГПУ, 2006. 59 с.

© Иштуганова Л.Р., 2024

**УДК 372.88**

***Йылкыбаева Гөлсөм Урал ҡыҙы,***
*башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы,*
*Шаһи Ямалетдинов исемендәге Шығай ауылы*
*урта дөйөм белем биреү мәктәбе, Белорет районы, БР*

# Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә уҡыусыларҙың ижади һәләтен үҫтереү методикаһы

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә мөһим бурыстарҙың береһе булып уҡыусыларҙың һәләттәрен асыу тора.

Күренекле педагог А.С. Макаренко: «Айырым шәхес менән эшләү өсөн уны белергә һәм коллективта үҫтерергә кәрәк. Әгәр минең күҙ алдымда айырым шәхестәр, бында-тегендә һибелеп, коллективтан тыш йәшәй икән, әгәр мин уларға коллектив үлсәүенән башҡа ғына яҡын килһәм икән, мин бынан бер нимәлә сығара алмаясаҡмын», – тигән. Ысынлап та, коллективта ғына һәләтте айырып алырға, үҫтерергә мөмкин.

Ә беҙҙең уҡытыусыларҙың бурысы – уҡыусының һәләтен үҫтереү. Был иһә, бер яҡтан, хәҙерге заман белем биреү системаһында һәр баланың шәхси потенциалын үҫтереүгә шарттар барлыҡҡа килеүе тураһында һөйләһә, икенсе яҡтан, мәктәп фәндәрен эҙләнеү-тикшеренеү йүнәлешендә өйрәнеүҙең мөһимлеген билдәләй.

Мөһим бурыстарҙың береһе – уҡыусыларҙы ижади фекер йөрөтөргә һәм һығымта яһарға өйрәтеү, уҡыусының рухи үҫешенә, үҙ аллы фекерләү һәләтенә, аҡыл үҫешенә ирешеү.

Маҡсат: Башҡорт теле һәм әҙәбиәте предметынан һәләтле уҡыусыларҙы ижади бәйгеләрҙә ҡатнаштырыу методикаһын булдырыу.

Бурыстар:

1. Һәләтле уҡыусылар менән эшләүҙең актуаллеген асыҡлау.

2. Уҡыусыларҙы фәнни методтар менән таныштырыу.

3. Һәләтле уҡыусылар менән эште ойоштороуҙың яңы формаларын, алымдарын өйрәнеү.

4. Уҡыусыларҙы район, ҡала, республика кимәлендә ойошторолған төрлө сараларҙа ҡатнаштырыу.

Маҡсатты тормошҡа ашырыу өсөн түбәндәге эш төрҙәре алып барыла:

1. Уҡыусыларҙың һәләттәрен билдәләү диагностикаһы үткәреү.

2. Уҡыусыларҙың эҙләнеү, фәнни методтарҙы үҙләштереүе.

3. Олимпиадаларға әҙерләү, ҡатнашыу.

4. Түңәрәктәр асыу.

5. Кластан тыш саралар.

6. Мәктәп туры бәйгеләре ойоштороу.

7. Ваҡытлы матбуғатҡа яҙылыу.

8. Театр, музейҙар, экскурсияларға, осрашыуҙарға йөрөү.

Һәләтле бала төшөнсәһе – ул бик ҡатмарлы күренеш. Ғөмүмән алғанда, һәләтлелек ул һәр кешегә хас сифат. Шуға күрә һәр баланы ла мотлаҡ рәүештә һәләтле тип ҡарарға тейешбеҙ. Һәләтле бала категорияһына, бер яҡтан, ҡайһылыр йүнәлештә һәләттәре асылған, һәләттәре күренеп торған балаларҙы булыуы, икенсе яҡтан, һәләттәре әле асылмаған, әле потенциалда ғына күҙаллана торған балаларҙы индерәбеҙ. Балаға, һин һәләтле, ә бына һин һәләтһеҙ, тип һис әйтергә ярамай. Һәләттәре асылған балаларҙа яңы төр һәләттәр ҙә асылыуы ихтимал, сөнки бер йүнәлештәге һәләт икенсе йүнәлештәге һәләттәрҙе асыуға сәбәпсе була ала. Шул уҡ ваҡытта баланың һәләте юғалыуы, ваҡытлыса һүнеп тороуы ла ихтимал, быға ғәҙәти хәл тип ҡарарға, сәбәптәрен асыҡларға, кәңәштәр бирергә, ярҙам итергә кәрәк. Ата-әсәнән, уҡытыусыларҙан, дуҫтарынан дөрөҫ ярҙам, дөрөҫ ҡараш, мөнәсәбәт булырға тейеш. Шуға күрә һәләт үҫеше өсөн мотлаҡ үҫеш мөхите дөрөҫ һәм системалы ойошторолған булырға тейеш. Шул саҡта ғына уның һөҙөмтәһе уңышлы була.

Бөгөнгө көндә уҡыусыларҙың һәләтенең төрҙәрен, үҫешен, формалашыуын билдәләргә ярҙам иткән диагностика булдырылған. Һәләтлелек диагностикаһына күҙәтеү, әңгәмәләшеү, һорауҙарға яуап инә. Һәләт үҫеше өсөн кәрәкле шәхес сифаттары алымдарын ҡулланыу тора.

Һәләт үҙ өҫтөндә эшләгән кешелә генә юғары кимәлгә етеп, талант булып формалаша. Ни тиклем иртә эш башлаһаң, шул тиклем һөҙөмтә лә яҡшыраҡ. Ләкин был алымдарҙы, методиканы дөрөҫ ҡулланыу уларҙы өйрәтеү отошло.

Киң ҡулланылған инновацион алымдарҙың береһе – ул эҙләнеү-тикшеренеү алымы. Шул уҡ ваҡытта баланың фекерләү һәләтен тейешле кимәлдә үҫтереү технологияһы – ул баланы фекерләргә өйрәтеү дәрестәре. Был махсус курс аша үткән балаларҙың һәләттәре бик тиҙ асыла, мотивация – һәләтлелеккә ынтылышы көсәйә. Шул уҡ ваҡытта проблема ҡуйып уҡытыу, социаль компетентлылыҡ, лидерҙар мәктәбе дәрестәре лә балала шәхес үҫешендә кәрәкле сифаттар тәрбиәләргә ярҙам итә.

«Уҡыусыларҙың ижади һәләтен үҫтереү проекты» йүнәлеше буйынса мин ун йылдан ашыу эшләйем. Ул минең эш йүнәлештәремдең иң мөһим бер өлөшө булып тора. Был проект нисек башланды? Әлбиттә, уҡыусыларҙың тәүге эштәре матбуғат биттәрендә донъя күрә башлағас. Башта минең дәрестәр һаны әҙ булғас, миңә түңәрәк эшен йәйелдереп ебәрергә кәрәк ине. Шуға ла «Йәш хәбәрселәр» тигән түңәрәк эшен алып бара башланым. Балаларымдың яҙған шиғыр, иншалары балалар матбуғатында йыш баҫылыуы ла быға сәбәпсе ине. Ике йылдан һуң ике уҡыусым «Аманат» журналының «Йәш хәбәрселәр» исеменә лайыҡ булды. Шуға ла «һәләтле уҡыусылар менән эште дауам итергә кәрәк» тигән уйҙар тыуҙы. Минең «Уҡыусыларҙың ижади һәләтен үҫтереү проекты» үҙ эсенә түбәндәге дүрт
йүнәлеште ала:

1. Башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән төрлө ижади конкурстарға, бәйгеләргә, олимпиадаларға әҙерләнеү.
2. Иншалар яҙыу.
3. Уҡыусыларҙың «Йәш хәбәрселәр» түңәрәге ағзалары менән эшләү.
4. Уҡыусылар менән фәнни-тикшеренеү эштәре ойоштороу.

Был эштәрҙе нисек ойоштороорға икәнлеге шулай уҡ ҙур тәжрибәләр арҡылы бер нисә йылдар дауамында барлыҡҡа килде. Мәҫәлән, олимпиадаларға әҙерләнеү. Билдәле булыуынса, муниципаль был ярыш 7–11 класс уҡыусылары араһында үтә. Был эште 7-се синыфтан уҡ башлау мөһим. Һәләтле уҡыусы үҙенең хәтерле булыуы, тиҙ отоп алыуы, логик фекергә эйә булыуы менән айырылып тора. Бындай уҡыусыларға өйгә эш биргәндә үтелгән теманы тәрәндән белеү талап итеlә торған, ижади эштәргә урын ҡала торған ҡатмарлыраҡ эштәр тәҡдим итеlә. Класта башҡарыла торған эштәрҙә лә уларҙы ауырыраҡ, фекерләү талап ителгән осраҡтарҙы үтәгәндә йышыраҡ йәлеп итәм. Былай эшләү 7-се синыфтан башлана. Уҡыусылар бер нисә йыл дауамында үткәрелгән олимпиада һорауҙары буйынса ҡабатлау-күнегеүҙәр башҡара, улар менән тел һәм әҙәбиәттән генә түгел, Башҡортостан мәҙәниәте, тарихына ҡағылышлы һорауҙар тикшерәбеҙ, эштәрҙе анализлап, хаталар өҫтөндә эшләйбеҙ. Һөҙөмтәлә уларҙа ҡатмарлы һорауҙарға яуап бирә алырлыҡ белем кимәле үҫә, логик фекерләү дәрәжәһе юғары була, улар бындай бәйгеләрҙә уңышлы сығыш яһай. Һуңғы 4-5 йыл эсендә уҡыусыларым район, ҡала олимпиадаларында еңеүсе һәм призер булдылар. Шулай уҡ дистанцион «Аҡмулла олимпиадаларында» ла ҡатнашып, еңеүсе булып танылдылар (Хәйруллина Р., Ямалетдинова И., Сәлмәнова Ф.)

«Йәш хәбәрселәр» түңәрәге эшен ойоштороу.

Эштең маҡсаты:

- уҡыусыларҙың ижади һәләттәрен асыу, үҫтереү;
- уларҙың яҙыу, ижад итеү телмәрен үҫтереү;
- район, республика балалар матбуғаты менән тығыҙ бәйләнеш булдырыу.

Был түңәрәк 2009 йылда ойошторолдо, йыл һайын унда унлаған уҡыусы шөғөлләнә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, мәктәптәрҙә түңәрәк эштәре туҡтатылды. Ләкин башҡорт теле дәрестәре кәметелеп, сәғәттәр һаны кластан тыш эштәрҙе ойоштороуға бүленеп бирелде. Шунын өсөн дә түңәрәк эшен дауам иттем. Һәләтле балалар менән иркле, темаларға иншалар яҙабыҙ. Иншалар яҙыу. Ни өсөн һәләтле уҡыусылар менән генә һәм ни өсөн иркле темаға ғына? Эш шунда: иншалар яҙыу өсөн программа буйынса сәғәттәр бүленә. Был эш йылдар дауамында тел-әҙәбиәт дәрестәрендә алып барыла. Уҡыусылар унда бирелгән темаға инша яҙыу өсөн план төҙөй, материал туплай, уны системаға һала, камиллаштыра, яҙа. Ләкин ул сәғәттәр генә аҙ, шунлыҡтан беҙ күберәге әҫәрҙе өйрәнгәс, иншаларҙың әҙәби, әҙәби-ижади төрҙәрен яҙҙырабыҙ, йәғни әҫәр буйынса образ йә ваҡиғаларға ҡылыҡһырлама биреү, уның идеяһын асыу маҡсатынан сығып башҡарабыҙ. Иркле иншалар иһә уҡыусыларҙың көндәлек тормоштан, тирә-яҡты күҙәтеүҙәрҙән алған тәьҫирҙәренән сығып яҙыла. Бында уҡыусының үҙенең хистәре, кисерештәре һүрәтләнә. Мин уҡыусыларҙың ихлас күңелдән үҙ фекерҙәрен сағылдырған инша яҙыуҙарын маҡсат итеп ҡуям. Бындай иншаларҙы ижади фекерләү һәләте ярылып ятҡан, күп уҡырға, шиғырҙар ятларға, үҙҙәре шиғыр яҙырға яратҡан, ғөмүмән, әҙәбиәткә мөкиббән киткән уҡыусылар менән яҙабыҙ. Һуңғы йылдарҙа уҡыусыларымды төрлө әҙәби конкурстарҙа ҡатнаштырыуға ирештем. Әленән-әле төрлө уҡыу йорттары тәҡдим иткән конкурстарға, матбуғат биттәренә, интернет-конкурстарға

эштәребеҙҙе ебәреп, призлы урындар яулайбыҙ. Иң яҡшыларын төрлө ижади бәйгеләргә ебәрәбеҙ. Артабан ҡатнашырға теләүсе балалар менән темаларҙы билдәләйем, ирекле иншаның үҙенсәлектәрен аңлатып, унда төп иғтибарҙы шуға йүнәлтәм: инша ниндәй генә темаға яҙылмаһын, унда төп герой – уҡыусы үҙе. Иншала уның әйтергә теләгән фекере асыҡ билдәләнергә тейеш. Бының өсөн уҡыусы үҙәккә бер образ ҡуйып, төп теманы ошо образ аша сағылдыра. Иң ҡыйыны – был образды табып, яңы фекер әйтеү. Балаларға һүрәтләү саралары, образлылыҡ тураһында аңлатам, элек яҙылған иншаларҙы уҡып күрһәтәм. Төрлө алымдар ҡулланғанда ла, уҡыусыларҙың һоҡландырғыс образдар тыуҙырыуына ирешеү еңел түгел. Шулай ҙа мин уҡыусыларҙың матур образдар тыуҙырыуына ирешергә ынтылып эшләйем. Үҙенсәлекле уй-фекерҙәре булған, образлы тел менән яҙылған күркәм ижад емештәре шулай тыуа башлай. Һуңғы йылда уҡыусыларым «Йәшлек» гәзите ойоштороған Булат Солтангәрәев исемендәге үҫмерҙәр ижады конкурсында ҡатнашты, призлы урындар алды (Мөхәмәтйәрова Н., Нурмөхәмәтова А., Юнысов Р.).

Дүртенсе йүнәлеш – һәләтле уҡыусылар менән фәнни-тикшеренеү эштәре ойоштороу. Төп маҡсат – уҡыусыларҙы фәнни һәм популяр әҙәбиәт менән эшләргә өйрәтеү, тейешле материалдар тупларға һәм эшкәртергә өйрәнеү; бай әҙәби мираҫтан үҙҙәренә кәрәкле мәғлүмәтте айырып алырға һәм һайлаған теманың төп идеяһын асырға өйрәнеү, һәм, ахыр сиктә, уҡыусыларҙа фәнни эшкә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү. Уҡыусыларҙы бындай эштәргә йәлеп итеү 7–11 синыфтар менән ойоштора, уҡытыуҙың актив методы буларaҡ, бөтә класс менән рефераттар яҙҙырыуҙан башлана. Берәй яҙыусының юбилейы уңайынан, йә иһә ауыл, район, республикабыҙ тураһында мәғлүмәттәр йыйыу менән башланып киткән эштәр киләсәктә фәнни эшкә ҡыҙыҡһыныу уятыуҙа тәүге этәргес булып тора. Артабан шул эштәрҙе теләк һәм ҙур ҡыҙыҡһыныу менән башҡарған уҡыусыларға айырым темалар бирелә. Ғәҙәттә, класс һайын бер-ике бала был эшкә ҙур ҡыҙыҡһыныу менән тотона. Уҡыусылар менән план төҙөйбөҙ. Һәр пункт өсөн кәрәкле әҙәбиәт исемлеге асыҡлана. Уларҙы уҡыу, эшкәртеү, файҙаланыу, билдәле, уҡытыусы етәкселегендә бара. Яҙыу барышында уҡыусылар фәнни эш күнекмәләре туплай, иң мөһиме, тупланған материалға үҙ мөнәсәбәттәрен белдерергә өйрәнәләр. Былар бөтәһе лә эҙләнеүҙәр, көндәлек тырышлыҡ, әлбиттә, беренсе сиратта, уҡыусыларҙың ижади һәләтен үҫтереү йүнәлешендә фиҙаҡар эшләү һөҙөмтәһе. Уҡыусыларҙа уңышҡа ирешеү ситуацияһы булдырыу. Һүҙемдең башында әлеге проекттың барлыҡҡа килеүенә уҡыусымдың район кимәлендә беренсе ҙур уңышы сәбәпсе булғанын әйтеп үткәйнем. Бындай уңыш, әлбиттә, баланы ла ҡанатландыра. Шуға күрә уҡыусының эшкә, ижадҡа булған һәр бер ынтылышы, һәр бер уңышы күренмәй ҡалмаҫҡа тейеш.

Ошо түңәрәк эштәрендә әүҙем ҡатнашҡан уҡыусыларым юғары уҡыу йорттарын тамамлап, республика мәктәптәрендә эшләп йөрөй. Ҡыуатова (Шиһапова) Гөлкәйҙең шиғырҙары һаман да газета-журнал биттәрендә донъя күреп тора.

Тел һәм әҙәбиәт буйынса күп һанлы сараларҙа айырыуса актив ҡатнашҡан, ижади ынтылышлы уҡыусыларыбыҙҙы дәртләндереү маҡсатында беҙ түбәндәге сараларҙы ҡулланабыҙ:

– тыуған яҡты өйрәнеү музейҙарына алып барыуҙы ойоштороу;

– мөмкинселек килеп сыҡҡанда яҙыусылар менән осрашыуҙа ҡатнашыу;

– мәктәптә үткәрелгән тел һәм әҙәбиәт аҙналыҡтарында әүҙем ҡатнашыу.

Был саралар уҡыусылар күңеленә ҡанат ҡуйып, киләһе эштәргә этәргес булһа, алда һанап үтелгән төрлө йүнәлештәге бөтә башҡарылған эштәр улар өсөн белем йәки күнекмәләр сығанағы ғына түгел, ә тормош мәктәбе, киләсәктә үҙҙәренә юл һалыуға бер маяҡ. Ундай уҡыусыларҙың милләтебеҙ өсөн файҙалы, кәрәкле һәм бәхетле кеше булып үҫеүҙәренә иманым камил.

Уҡыусыларҙың ижади һәләтен үҫтереү бик мөһим мәсьәлә булып тора. Шуның өсөн бөгөнгө уҡытыусыға алдынғы педагогик тәжрибәне өйрәнеп, яңы технологиялар ҡулланып, уны көндәлек эштә файҙаланып, профессиональ яҡтан үҫешеп, ата-әсәләр менән яҡын мөнәсәбәттә булып ҡына яҡшы һөҙөмтәләргә, матур күрһәткестәргә өлгәшергә мөмкин. Ә тырышып эшләү, яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшеү өсөн бөтә мөмкинлектәр ҙә бар. Тик арымай-талмай, ҡанатланып, илһамланып, ең һыҙғанып эшләргә генә кәрәк.

**Әҙәбиәт**:


1. Федотова Н.К. Из опыта работы с одаренными детьми // Вестник НГУ. Серия: Педагогика. 2008. Т. 9. Вып. 1. С. 53–56.
2. 5–9 кластарҙа башҡорт телен уҡытыу методикаһы. Өфө: «Китап», 1996.
3. Шумакова Н.Б. Одаренный ребенок. Особенности обучения: пособие для учителя. М.: Просвещение, 2008.
4. Башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән традицион булмаған дәрестәр: методик ҡулланма. Өфө: Информреклама, 2003.
5. «Башҡортостан уҡытыусыһы» журналы, 2004, № 6.
6. «Башҡортостан уҡытыусыһы» журналы, 2009, № 4.
7. «Башҡортостан уҡытыусыһы» журналы, 2007, № 7.


© Йылҡыбаева Г.У., 2024

**УДК 37.035.6**

***Йыһангирова Фирүзә Ғәни ҡыҙы,***

*музыка етәксеһе, 75-се «Аҡбуҙат»*

*балалар баксаһы, Өфө ҡ., БР*

## Балаларҙы рухи тәрбиәләүҙә халыҡ уйындары

Балаларҙы тәрбиәләүҙә халыҡ уйындары айырыуса ҙур урын ала. Уйын улар өсөн донъяны танып белеү сараһы, хеҙмәт мәктәбе һәм һәр яҡлап гармониялы үҫеү сығанағы. Ысынлап та, уйнаған саҡта бала өҙлөкһөҙ хәрәкәттә була, ә был хәл инде уның бөтә яҡлап йылдам үҫеүен тәьмин итә. Был физиологик процесс булһа, балаларҙы йәмғиәтебеҙ өсөн кәрәкле кешеләр итеп тәрбиәләүҙең икенсе бер күренеше – психологик процесс та уйындың айырылғыһыҙ өлөшө булып тора. Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ: яңғыҙ ғына уйнап йөрөгән сабый уйындан бик тиҙ ялҡа, арый, унан ләззәт тапмай башлай. Ә күмәкләп уйнағанда балалар ғәжәп бер ансамбль тыуҙыра: сабый үҙенең коллективҡа мөнәсәбәтен билдәләй, күмәк

һәм уртаҡ уй менән эш итергә өйрәнә, унының күңелендә иптәшлек, дуҫлыҡ, нәфислек тойғолары тәрбиәләнә. Тимәк, баланың уйнай белеүе генә етмәй, ул дөрөҫ һәм матур итеп уйын ҡора ла белергә тейеш. Баланы тәрбиәләүҙә был бик мөһим мәсьәлә. Донъяны танып белеүҙең һәр өлкәһе халыҡ тормошон һәм тарихын үҙенә төп сығанаҡ итеп ала. Ошонан сығып, балаларға уйын ойоштороу ҙа халҡыбыҙҙың быуаттар буйына йәшәп килгән һәм хәҙер ҙә тәрбиәүи әһәмиәтен юғалтмаған милли уйындарын популярлаштырыуҙан башланып китә.

Халыҡ уйындары беҙҙең иң ҡиммәтле мираҫтарыбыҙҙың береһе бит! Уларҙың тәрбиәүи әһәмиәте бер ҡасан да кәмемәй, сөнки улар халыҡтың хеҙмәт итеүе барышында барлыҡҡа килгән. Башҡорт халыҡ эпосы, легенда һәм әкиәттәренән күренеүенсә, уйындар, төрлө ярыш-һынауҙар борон-борондан халыҡ тормошонда бик ҙур һәм мөһим урын алып килгән. Шулай итеп, халыҡ уйындары халыҡтың тормошона һәм шөғөлөнә тығыҙ бәйләнгән, борон-борондан баланы донъя көтөргө әҙерләү сараһы булып хеҙмәт иткән.

Халыҡ уйындары, йөкмәткеләренән сығып, ике ҙур төркөмгө бүленә: драмалы (сюжетлы йәки башҡарыусанлы) һәм хәрәкәтле (ҡағиҙәле) уйындар. Бынан тыш, балалар уйыны йыл миҙгелдәренә ҡарап та төркөмләнә, сөнки уларҙың ҡайһы берҙәре – ҡыш, икенселәре – яҙ, йәй һәм көҙ көндәрендә генә уйнала. Хәрәкәтле уйындарҙа билдәле бер маҡсатҡа ирешеү, һөҙөмтәгә килеү кеүек ынтылыштар ята. Бала үҙенә үҙе төрлө яҡлап баһа бирә, үҙ мөмкинселектәрен билдәләй ала. Баланың шәхес булып формалашыуында был бик мөһим мәсьәлә. Шуға күрә уйынды ойошторғанда ошо хәкикәтте күҙ уңынан сығарырға ярамай. Уйындарҙы ойошторғанда бигерәк тә түбәндәгеләрҙе иҫтә тоторға кәрәк: физик һәм рухи яҡтан тәрбиәүи әһәмиәттең дөйөм белем биреү ҡеүәтен. Был маҡсаттарҙың тормошҡа ашыуы уйынды ойоштора белеүгә бәйләнгән. Бер үк уйын менән баланы төрлөсә тәрбиәләргә мөмкин: сәләмәтлеген нығытыу; тормошҡа кәрәкле хәрәкәт күнекмәләрен үҙләштереү; ижад итеү һәләтлеген үҫтереү; ыңғай әхлаҡ сифаттарын, ихтыяр көсөн булдырыу; үҙаллылыҡ, активлыҡ, ойоштороусанлыҡ, ҡыҙыҡһыныусанлыҡ тәрбиәләү.

Уйындарҙы уйнатҡанда физик көсөргәнешлеккә айырыуса иғтибар итергә кәрәк: бала уйындан арырға тейеш түгел, киреһенсә, уйнағандан һуң ул үҙендә илһам һәм көс, дәрт тойһон. Уйынды белгәндә генә балалар араһында активлыҡ көслө бара. Уйындар балаларға үҙ-ара аралашырға ярҙам итә. Балаларға туп уйындары, уҡ атыш уйындары, йәшенмәктәр, йүгерешле, баҫтырышмаҡ уйындар, бейеүле-таҡмаҡлы һәм төрлө дидактик уйындар өйрәтергә була. Баланың тәнен сыныҡтырыу, рухын нығытыу өсөн туп уйындары: «Уртала уйыны», «Өйрәк һәм төлкө», «Туп ҡағыш», «Туп бәреш», «Мәргән туп», «Ашай торған – ашамай торған» һ. б. Туп уйындары һүҙһе: башҡарылған хәрәкәтле уйындарға инә. Был уйындарҙы балалар яратып уйнай. Сослоҡ, таҫыллыҡ, йылдамлыҡ тәрбиәләнә һәм тирә-яҡҡа йүнәлеш алыу, хәрәкәттәрҙе координациялау, тигеҙлек һаҡлай белеү күнекмәләрен нығыта. Уҡ атыш уйындары: йәйә менән уҡ – башҡорт халҡының боронғо ҡоралы. Элек ошо ҡорал менән халыҡ кейек аулаған һәм үҙ илен илбаҫарҙарҙан һаҡлаған. Мәргән булыу өсөн «Йәҙрә атыш уйыны», «Осҡор уҡ», «Балдаҡ атыш» уйындарын уйнатырға була.

Балаларҙың йәшенә ҡарап, уйынды ябайлаштырырға кәрәк, икенсе предметтар менән алмаштырыу ҙа уңышлы. Йәшенмәк уйындарын балалар айырыуса ярата. Был уйындар аша зирәклек, аңлылыҡ, уяулыҡ, тапҡырлыҡ, сослоҡ, йылғырлыҡ, ҡолаҡ, ҡулдарҙың һиҙеүсәнлеге, иғтибарлылыҡ кеүек сифаттар тәрбиәләнә. Был төр уйындар балаларҙың хәтеренә, тәртибенә һәм нервылар системаһына ыңғай тәҫьир иткән эмоциялар уята.

Йүгерешле, баҫтырышмаҡ уйындарҙы һүҙһеҙ башҡарылған һәм һүҙле, һамаҡлы уйындарға бүлергә мөмкин. Был уйындарҙа хәрәкәт, көс ҡулланыу беренсе урында тора. «Ҡатырғыс», «Көн менән төн», «Энә менән еп», «Айыу менән ҡуяндар», «Бесәй менән сысҡан», «Аҡ тирәк, күк тирәк», «Айыу-бүре юҡ икән», «Буяу һатыш» һәм башҡа уйындар инә. Балаларҙың организмындағы бөтә органдарҙың эшмәкәрлеген камиллаштырыуға булышлыҡ итә, буй-һындарының үҫешенә, мускулдар системаһының нығыныуына ярҙам итә.

Бейеүле-таҡмаҡлы уйындар уяулыҡ, тапҡырлыҡ, үткерлек, һиҙгерлек, хәрәкәтсәнлек, етеҙлек талап итә, һүҙҙә лә мәғәнәлек, оҫталыҡ һәм тапҡырлыҡ талап итә. «Көлдөргөс», «Наза», «Зинһар өсөн», «Йоҡосолар», «Ҡаҙ бәпкәләре һәм төлкө», «Сыйырсыҡ» уйындарын уйнарға була.

Башҡорт халыҡ уйындарын өйрәтеү балаларға туған телдең матурлығын, төҙөклөгөн, тапҡырлығын күрһәтә ала, уларҙа милли рух тәрбиәләүгә тос өлөш индерә.

© Йыһангирова Ф.Ғ., 2024

**УДК 81-2**

***Камалидин кызы Эркинайым,***
*аспирант, ФБФВиЖ, УУНиТ,*
*г. Уфа, РБ*

## Влияние культурных особенностей на язык и стиль общения в социальных сетях ВКонтакте и Wechat

**Аннотация**. В статье рассматриваются особенности общения в двух популярных социальных сетях – русскоязычном ВКонтакте и китайском WeChat. Автор исследует, как культурные различия могут влиять на язык и стиль общения в данных сетях. В статье проанализированы различные аспекты общения, включая использование эмодзи, языковых особенностей, чувства юмора и социальных норм.

***Ключевые слова***: культурные особенности, язык и стиль общения, социальные сети, ВКонтакте, Wechat, эмодзи и стикеры, китайские символы.

Захватывая суть сегодняшней глобализированной эпохи, социальные сети раскрыли новые горизонты для межкультурного общения, став своеобразным зеркалом, отражающим уникальную мозаику различных культур. Как два могучих столпа этих сетей, русскоязычный ВКонтакте и китайский WeChat во всей своей полноте представляют собою культурные особенности, которые раскрывают свои нюансы и изыски в осязаемых элементах общения – оттенках сленга, эмоциональном багаже эмодзи, до чувства юмора и социальных норм.

Проникая глубже в сердце ВКонтакте, мы обнаруживаем богатый словарь интернет-жаргона и уникальных выражений, словно палитра графити, переплетающаяся с рукотворными законами пользовательских сообществ. Любимые стикеры, музыкальные группы, киноклубы – их вклад в культурное оформление конструкции ВКонтакте неоценим. Пользователи ВКонтакте часто используют своеобразный сленг и интернет-жаргон. Термины вроде «лайкнуть», «репостнуть», «зашквар» или «шеймить» имеют конкретные значения в контексте сообщества ВКонтакте. Пользователи ВКонтакте активно используют эмодзи и стикеры для выражения своих эмоций и мыслей. Так, например, стикеры с котом и собакой из «Смешариков» стали весьма популярны. ВКонтакте активно используется для создания различных групп и сообществ по интересам. Это могут быть музыкальные группы, книжные клубы, киноклубы, сообщества любителей видеоигр, спортивных клубов и многого другого. Участие в этих сообществах стало значимой частью социального взаимодействия внутри ВКонтакте. ВКонтакте активно поддерживает культурные мероприятия и проекты, включая музеи, театры, филармонии, культурные порталы, планетарии, выставочные центры, цирки, дома культуры, арт-проекты. Многие пользователи используют ВКонтакте как платформу для прослушивания музыки или просмотра фильмов и сериалов. Пользователи ВКонтакте активно обсуждают актуальные темы, включая политику, культуру, науку и образование.

Однако, забегая вперед скажем, что чьи-то слова могут быть холодными и прямыми, пока другие – *агенты культур с высоким контекстом* – предпочитают более изящные формы выражения своих мыслей. Это ощущение подобно хрустальному экрану, за которым скрыты морфемы для величества культуры общения.

Китайский WeChat как своеобразный микрокосм культурного наследия вводит в оборот уникальные китайские символы и эмодзи, позволяющие юзерам выразить полный спектр своих эмоций и чувств. В китайском Wechat основной культурной особенностью является использование китайских символов. В Китае многие пользователи используют специфические для китайского языка символы и эмодзи. Один из примеров – символ 笑 («смех»), который часто используется для обозначения смеха или удовольствия в текстовых сообщениях. Это лишь немногие из множества способов, которыми эмодзи и символы могут отразить культурные различия в общении в социальных сетях. **Эмотиконы**, созданные из китайских символов. Они позволяют людям выразить свои эмоции и чувства в текстовых сообщениях. Символ **笑 («смех»)**, который часто используется для обозначения смеха или удовольствия в текстовых сообщениях. В частности, при создании эмотиконов широко используется иероглифичность: изначально имеющие идеографический характер китайские иероглифы наполняются новыми значениями при включении их в состав эмотиконов. Особенности использования иероглифов в китайских текстах также проявляются в наличии большого количества различных иероглифических ключей, которые являются неотъемлемыми составляющими иероглифов и могут быть использованы для создания новых текстовых сообщений.

Оказывается, культура может быть мостом между реальностью и виртуальной жизнью, определяя уникальные особенности каждого пространства. ВКонтакте испытывает ощутимое влияние русскоязычного общества – от приема сленга и создания интернет-мемов до обсуждения актуальных тем. В то же время WeChat как крепость китайской культуры раскрывает грандиозность своей родной культуры – от использования своих уникальных эмодзи до активного использования платформы для распространения своей культуры и образования.

В итоге наше исследование подтверждает, что культура оказывает большое влияние на манифестацию языка и стиля общения в этих сферах. Понимание этой динамики важно для более эффективного использования социальных сетей как инструмента межкультурного общения.

**Литература:**

1. Горошко Е.И. Интернет-коммуникация: проблема жанра // Жанры и типы текста в научном и медийном дискурсе. Вып. 4. Орел, 2006.

2. Муллағолова А.Р., Абдуллина Г.Р. FEATURES OF EPISTOLARY TEXTS // Башҡортостан Республикаһының һәм Рәсәй Федерацияһы субъекттарының мәғариф арауығында башҡорт теле: сборник материалов VII Всероссийской научно-методической конференции, посвященной 95-летию со дня рождения кандидата педагогических наук, заслуженного учителя школы БАССР Абдрахмана Абдрахимовича Галлямова / отв. ред. Г.Р. Абдуллина. Уфа, 2022. С. 206–212.

3. Овчинникова И.Г. Коммуникация и идентификация в социальных сетях: факторы, типажи, национально-культурная специфика (на материале социальной сети Твиттер) // Вестник Пермского университета. Серия: Политология. 2013. № 2. URL: https://cyberleninka.ru/article/n/kommunikatsiya-i-identifikatsiya-v-sotsialnyh-setyah-faktory-tipazhi-natsionalno-kulturnaya-spetsifika-na-materiale-sotsialnoy-seti (дата обращения: 01.02.2024).

4. Зорина А.В. Англицизмы в современном русском языке (на примере интернет-лексики) // Казанский лингвистический журнал. 2018. № 2 (1). URL: https://cyberleninka.ru/article/n/anglitsizmy-v-sovremennom-russkom-yazyke-na-primere-internet-leksiki (дата обращения: 22.08.2023).

© Камалидин К.Э., 2024

**УДК 81-2**

***Кетенчиев Мусса Бахаутдинович,***
*д-р филол. наук, профессор, Кабардино-Балкарский государственный университет им. Х.М. Бербекова, г. Нальчик, Кабардино-Балкарская Республика, РФ*

## Карачаево-балкарские и кумыкские паремии с зоокомпонентом лев: структура, семантика и этнокультурное значение

В филологических работах на материале различных тюркских языков большое внимание уделяется зоонимам, особенно в лингвокультурологическом аспекте [4]. В научных же трудах литературоведческой направленности актуализируются зоономинации в связи с их важностью для выявления в художественном тексте архетипов эпического плана [3] и этико-эстетических представлений этноса [6; 7]. Тем не менее многие названия представителей мира животных все еще остаются вне поля зрения языковедов, особенно их функционально-семантический потенциал в паремическом фонде, чем и обусловливается обращение в данной работе к зоолексеме *аслан* «лев».

В карачаево-балкарском языке рассматриваемая зоолексема употребительна в двух фонетических вариантах: *аслан, арслан*. В кумыкском же языке мы имеем второй вариант. Название данного дикого зверя обнаруживается и в других родственных тюркских языках (алтайском, ногайском, татарском, туркменском, турецком, узбекском и др.). Данное слово, как видно из этимологических исследований, образовано при помощи словообразующей морфемы -*лан* от лексемы *арс*, обозначающей рычание диких зверей, лай [5].

Во фразеологическом фонде карачаево-балкарского и кумыкского языков встречаются сочетания типа *аслан (арслан) жюрекли (юрекли)* «мужественный, отважный, бесстрашный» (букв. с сердцем льва), которые употребляются по отношению к человеку, носят оценочный характер и традиционно рассматриваются в научных работах по фразеологической семантике [8; 9; 10].

Рассматриваемая лексема прочно вошла в тюркский антропонимикон, как личное имя употребляется больше всего в своей основной форме – *Аслан (Арслан)*. Обнаруживается и ряд производных антропонимов. Например, личное имя *Асланукъ* имеет значение «потомок льва», компонент -*укъ(-окъ)* которого означает «род, семя». Ср. также его уменьшительно-ласкательную форму: *Асланукъа*. В ряд сложных имен в качестве составных элементов включаются названия таких титулов, как *бек, бий* и *мурза*: *Асланбек*, *Асланмырза*, *Бияслан*. Имя *Асланалий* же появилось под влиянием восточной культуры (*Алий* – имя одного из пророков в исламе). Хоть и редко, в состав имен входят и имена прилагательные: *Аслантокъ* «сытый лев». Как правило, такого рода имена являются мужскими, так как в тюркской культуре лев ассоциируется с мужчиной. Нельзя обойти вниманием и фамилию *Арсланлары* «Аслановы (Львовы)».

Как в карачаево-балкарском, так и в кумыкском паремическом фондах наличествуют по 35-36 пословиц и поговорок с конституентом *аслан/арслан*, которые отличаются структурным многообразием. В основном в формальном плане они имеют структуру полного

простого предложения, как глагольного, так и именного: *Аслан къапханнга тюшмез* (карач.-балк.) // *Арслан къапгъынгъа тюшмес* (кумык.) «Лев в капкан не попадется»; *Ёлген арслан – сау чычхан* (карач.-балк.) «Умерший лев – живая мышь»; *Арсланны оьлгени – чычкъанны тириси* (кумык.) «Умерший из львов – живая из мышей».

Паремические высказывания рассматриваемого типа распространяются за счет различных оборотов: *Аслан баланы тутар ючюн, асланны уясына кирирге керекди* (карач.-балк.) // *Арсланны баласын тутмакъ учун, арсланны уясына гирме герек* (кумык.) «Чтобы поймать львенка, надо в его нору зайти»; *Асланны азгъаны айгъа секирир* (карач.-балк.) // *Арсланны азгъаны айгъа секирир* (кумык.) «Отощавший лев на луну прыгнет».

Употребительны сложносочиненные паремические высказывания: *Арсланны азгъаны айгъа секирир – тавукъну азгъаны хораз болуп къычырыр* (кумык.) «Отощавший лев на луну прыгнет, исхудавшая курица петухом закукарекает»; *Арсланны артындан юрю, къатынны артындан юрюме* (кумык.) «Позади льва ходи, позади женщины не ходи»; *Аслан ач да, тюлкю – токъ* (карач.-балк.) «Лев голоден, да лиса сыта».

Паремии представлены и сложноподчиненными предложениями: *Арслан ач буса, тюлкю – токъ* (кумык.) «Если лев проголодается, то лиса – сытая»; *Аслан ызындан къайтмаз, эр сёзюнден къайтмаз* (карач.-балк.) «Лев со следа не свернет, мужчина от слов не откажется».

Они выражают различные универсальные и специфические когнитивные характеристики льва, которые стереотипны для карачаево-балкарской и кумыкской культур. Так, например, лев интерпретируется как зверь, относящийся к высшей иерархии: *Аслан – жаныуарланы бийи* (карач.-балк.) // *Арслан – гьайванлар бийи* (кумык.) «Лев – князь зверей». Такой статус льва сопряжен и с его питанием: *Арслан чычхан тутмаз, илячин чибин жутмаз* (карач.-балк.) «Лев на мышей не охотится, сокол мух не глотает»; *Арслан итден къалгъанны ашамаз* (карач.-балк.) «Лев не ест то, что от собаки остается»; *Ит ийисгеген сууну аслан ичмез* (карач.-балк.) «Лев не выпьет той воды, которую собака нюхала»; *Арслан чычкъан тутмас, къаракъуш жибин тутмас* (кумык.) «Лев мышей не ловит, беркут мух не ловит»; *Арслан чычкъан тутмас* (кумык.) «Лев мышей не ловит»; *Арслан жибин тутмай* (кумык.) «Лев мух не ловит»; *Арслан итден къалгъанны ашамас* (кумык.) «Лев не есть собачьи объедки».

Мысли же льва недосягаемы для других животных: *Асланны муратын къаплан билмез* (карач.-балк.) «Намерения льва тигр знать не будет». Его мысли об охоте, т. е. живет охотой: *Арсланны оюнда – гъав* «В мыслях льва – охота». Тем не менее рядом со львом находится место и для других животных: *Арслан болгъан жерде къаргъала да жашайдыла* (карач.-балк.) «Где лев обитает, там и вороны живут»; *Арсланлар той этегенде, чагъанлар да пайсыз къалмай* (кумык.) «Когда львы пируют, и шакалы без доли не остаются».

При характеристике льва не различают по полу: *Асланны эркеги, тишиси болмаз* (карач.-балк.) // *Арсланны эркеги, тишиси болмас* (кумык.) «Не бывает льва мужской, женской особи»; *Арсланны эркеги де – арслан, тишиси де – арслан* (кумык.) «И лев-самец – лев, и львица-самка – лев».

Он не теряет своих достоинств ни при каких условиях: *Аслан бугъоуда турса да, асланды* (карач.-балк.) // *Арслан, бугъавда буса да, арсландыр* (кумык.) «Лев, даже если находится в оковах, львом остается»; *Арслан чалдиш ичинде да арсланды* (карач.-балк.) // *Арслан челтирни ичинде де арсландыр клетка* (кумык.) «Лев и в клетке – лев».

Указанное присуще и для львиного потомства: *Арсланны баласы арслан болур* (карач.-балк.) // *Арслан баласы арслан болур* (кумык.) «Детеныш льва львом будет»; *Аслandан аслан тууар* (карач.-балк.) // *Арсландан арслан тувар* (кумык.) «От льва лев рождается»; *Асландан туугъан аслан болур* (карач.-балк.) // *Арсландан тувгъан арслан болур* (кумык.) «Родившийся от льва львом будет».

О силе льва обычно судят по его внешнему виду, крепким клыкам, острым когтям: *Асланны кючю – бойнунда* (карач.-балк.) *Арсланны гючю – бойнунда* (кумык.) «Сила льва в его шее»; *Арслан – тиши булан, адам иши – булан* (кумык.) «Лев – клыками, человек – делами»; *Арсланкъапланны гючю – тырнагъында* (кумык.) «Сила льва и тигра в когтях». Он пугает и своим рыком: *Асланны тауушу таудан ауар* (карач.-балк.) «Рев льва через горы перевалит». Храбрый, сильный лев пытается достичь невозможного: *Асланны жюреклиси айгъа секирир* (карач.-балк.) // Арсланны юреклиси айгъа секирир (кумык.) «Храбрый лев на луну прыгнет (нападет)». В силу указанных и иных причин не рекомендуется его провоцировать: *Жукълагъан асланны уятма* (карач.-балк.) «Не буди спящего льва»; *Арслангъа къол узатсанг – къолунг, баш узатсанг, башынг алар* (кумык.) «Протянешь льву руку – без рук, протянешь голову – без головы останешься».

Льву в целом не присуще такое понятие, как страх: *Аслан къапландан къоркъмаз* (карач.-балк.) «Лев тигра бояться не будет»; *Аслан къапландан къачмаз* (карач.-балк.) «Лев от тигра не побежит»; *Аслан артына турмаз* (карач.-балк.) «Лев отступать не станет». На это указывается и в других работах [2]. Однако он тоже боится того, кто сильнее: *Кесинден кючлюден арслан да къоркъады* (карач.-балк.) «Лев тоже боится того, кто его сильнее». Его может одолеть болезнь: *Ауруу арсланны да жыгъады* (карач.-балк.) «Болезнь и льва валит (с ног)».

Есть целый ряд компаративных конструкций, в которых сравнению подвергаются и другие животные: *Чычханлагъа киштик да арслан кибик кёрюнеди* (карач.-балк.) «Для мышей и кошка кажется львом»; *Ит да кеси жеринде арслан кибикди* (карач.-балк.) «Собака тоже на своей земле на льва похожа»; *Тюлкю ашагъандан эсе, арслан ашасын* (карач.-балк.) «Пусть лев съест, чем лиса». Такого рода синтаксические конструкции употребительны и в других жанрах фольклора в качестве интертекстем [1]. Подобные компаративные высказывания в кумыкском языке широкого распространения не получили, они единичны: *Арсланлардай агъалардан айрылгъан орамларда етим болуп гёрюнюр* «Оставшийся без старших, похожих на львов, на улице сиротой покажется». Есть условия, при которых другое животное в льва превращается: *Къоянны къоркъутсанг, арслан болур* (карач.-балк.) «Напугаешь зайца – в льва превратится». Правда, обличье льва не способствует тому, чтобы стать храбрым: *Арслан терини сыртынга къаплагъанлыкъгъа*

*жигит болмазса* (карач.-балк.) «Оттого, что набросишь на спину львиную шкуру, храбрым не будешь».

Как известно, храбрый мужчина уподобляется льву, поэтому он выступает гарантом покоя для родной стороны: *Эл аллында аслан жатар* (карач.-балк.) «У въезда в село лев будет лежать». Богатыри ассоциируются со львами и тиграми: *Мен – Ыбчыкъ тауну къапланы, сен – Эки-Араны асланы* (карач.-балк.) «Я – тигр горного перевала, ты – лев двуречья».

Итак, как видно из проанализированного выше фактического материала, зоолексема *аслан/арслан* «лев» характеризуется значительными функционально-семантическими возможностями как в карачаево-балкарском, так и в кумыкском языке. Паремические высказывания с таким конституентом в обоих языках имеют в целом одинаковую структуру, обнаруживают близость в лингвокультурологическом и этнокультурном планах, способствуя отражению значимого сегмента во многом единой картины мира. Это вполне очевидно, поскольку кумыки, карачаевцы и балкарцы являются наиболее близкими родственными народами, что накладывает свой отпечаток на их языки, фольклор и культуру.

**Литература:**

1. Ахматова М.А. Вербализация сравнения в карачаево-балкарском нартском эпосе // Вестник Челябинского государственного университета. 2011. № 28 (243). С. 20–23.

2. Ахматова М.А., Салчак А.Я., Чертыкова М.Д. Средства выражения эмоции страха в тюркских языках (на примере тувинского, карачаево-балкарского и хакасского языков) // Новые исследования Тувы. 2022. № 2. С. 224–238.

3. Бауаев К.К. Этно-культурный статус и эпические архетипы // Современные проблемы науки и образования. 2015. № 2-1. С. 406.

4. Кетенчиев М.Б. Зоолексемы как репрезентанты карачаево-балкарской языковой картины мира // Motif Akademi Halkbilimi Dergisi. 2015. № 16. С. 623–635.

5. Севортян Э.В. Этимологический словарь тюркских языков (Общетюркские и межтюркские основы на гласные). М.: Наука, 1974. 767 с.

6. Узденова Ф.Т. Понятие воинской чести в системе этико-эстетических представлений народов Северного Кавказа // Нартоведение в XXI веке: современные парадигмы и интерпретации. 2012. № 1. С. 257–261.

7. Узденова Ф.Т., Кетенчиев М.Б. О принципах реализации образа в литературе карачаевцев и балкарцев: семиотика цветообозначений // Филологические науки. Научные доклады высшей школы. 2020. № 5. С. 40–44.

8. Улаков М.З., Хуболов С.М. Семантически двукомпонентные предложения с предикатами, выраженными именными фразеологизмами, в карачаево-балкарском языке // Вестник Дагестанского научного центра РАН. 2014. № 52. С. 113–116.

9. Улаков М.З., Хуболов С.М. Управляемые фразеологизмы как репрезентаторы объекта в карачаево-балкарском языке // Известия Кабардино-Балкарского научного центра РАН. 2014. № 5 (61). С. 240–244.

10. Хуболов С.М. Предложения с моновалентными предикатами-фразеологическими единицами в карачаево-балкарском языке. Нальчик: Книга, 2002. 177 с.

© Кетенчиев М.Б., 2024

**УДК 372.881.1**

***Ҡоҙашева Сулпан Раувил ҡыҙы,***
*башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы,*
*Нижегородка ауылы мәктәбе, Өфө районы, БР*

**Башҡорт телен дәүләт теле итеп уҡытыуҙа заманса технологиялар ҡулланыу**

Бөгөнгө донъя ҡатмарлы, тиҙ үҙгәреүсән. Шуның менән бәйле рәүештә мәғарифтың дә яңы шарттарҙа йәшәргә һәләтле кеше тәрбиәләү үҙәге яуаплылығы арта бара. Социаль-тарихи һәм мәҙәни процестың шундай субъекты булып һәр яҡтан камил, рухи яҡтан үҫкән шәхес тора. Ул шул мөхиттә йәшәргә һәләтле булыу менән бергә унда актив эшләү күнекмәләренә лә эйә булырға тейеш.

Һуңғы йылдарҙа туған тел буйынса уҡыусыларҙа икенсе быуын белем биреү стандарттарында билдәләнгән күләмдә һәм кимәлдә белем, күнекмә һәм компетенциялар, универсаль уҡыу эшмәкәрлеге комплексын формалаштырыу өсөн уҡыу-уҡытыу системаһында яңы технологиялар ҡулланыу талап итәлә [1: 194].

Хәҙерге заман балалары кәрәкле мәғлүмәтте китаптан уҡып белеүгә ҡарағанда телевизор, интернет аша алыуҙы өҫтөнөрәк күрә. Шуға дәрестәрҙә яңы метод һәм алымдарҙы, заманса технологияларҙы ҡулланырға кәрәк. Мәҫәлән, уҡыу-уҡытыуҙың эффектив алымы булған компьютер технологияһы дәрестәрҙе күпкә һөҙөмтәлерәк үткәреү, уҡыу-уҡытыу сифатын күтәреү мөмкинлеген бирә.

Беҙ компьютер технологиялары үҫешкән заманда йәшәйбеҙ. Интерактив технологиялар хәҙер тормошобоҙға ныҡлы үтеп инде. Белеүегеҙсә электрон дәреслектәр, китаптар, электрон көндәлектәр, журналдар барлыҡҡа килде. Дәрестәрҙә интерактив таҡталар ҡулланыу заман талабына әүерелде. Интерактив таҡта уҡытыуҙың иң мөһим бурыстарының береһе – уҡыусыла предметҡа ҡарата ҡыҙыҡһыныу уята. Улар ҙур теләк менән дәрескә йөрөй, һәр береһендә таҡтаға сығып эшләү, яуап биреү теләге тыуа. Интерактив саралар ярҙамында төҙөлгән тест, викторина, сканворд, анаграмма кеүек эш төрҙәре уҡыусыларҙың белем кимәлен таҡта янында тикшереү өсөн дә уңайлы [2: 65].

Үҙ эшен яратҡан һәр бер башҡорт теле уҡытыусыһы, заманса технологияларҙы өйрәнеп, уларҙы эш тәжрибәһендә ҡулланып, бөтә уҡыусыларҙың да башҡорт телендә аралашыуын, уларҙың индивидуаль һәләттәрен үҫтереп, халҡыбыҙға һәм телебеҙгә ихтирам тәрбиәләй ала.

Компьютер ярҙамында башҡорт теле дәресендә бер төркөм дидактик мәсьәләләрҙе хәл итеп була: компьютер һүҙлектәрен файҙаланып, лексиканы өйрәнеү; дөрөҫ әйтелеш өҫтөндә эш; орфографик һүҙлекте һәм копмьютерҙың орфографияны тикшереү программаһын файҙаланып, орфографик күнегеүҙәр эшләү һәм башҡалар. Шулай уҡ дәрестә яңы материал аңлатҡанда компьютер ярҙамында күп мәғлүмәт бирергә, төрлө фото, портреттар, күргәҙмә әсбаптары күрһәтергә мөмкин. Мәҫәлән, яҙыусылар, шағирҙар тураһында фоторәсемдәр, видеофильмдар, видеороликтар, әҙиптәр үҙҙәре уҡыған әҫәрҙәрҙе тыңлау, сәнғәтле уҡыу күнекмәләрен булдырыу, әҙәби әҫәр мотивтары буйынса төшөрөлгән спектакль,

кинофильмдар күрһәтеү. Башҡорт телен һәм әҙәбиәтен уҡытыуҙа яңы, заманса информацион технологиялар, компьютер ҡулланыу уҡытыу сифатын күтәрергә ярҙам итә, уҡыусыларҙың үҙ алдына эшләү һәләтен үҫтерә, үҙ-үҙеңә ышаныс, телде өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу уята. Дәрестә компьютер ҡулланыу уҡытыусы эшен бик күпкә еңеләйтә [2: 74].

Дәрестең темаһынан сығып төрлө программалар ярҙамында (Microsoft Power, Irfan, Photo shop, Corel Draw) һүрәттәр ҡулланып ҡыҙыҡлы материал эшләргә була. Ә киностудия Windows live программаһы ярҙамында ҡыҙыҡлы сюжеттар төҙөргә мөмкин. Дәрес барышанда слайдттар күрһәтелеп тора, күрмә хәтер аша ныҡлы белем биреүгә өлгәшә [3: 164].

Иллюстратив материалдар әҙерләү уҡыусыға шулай уҡ ҡыҙыҡлы һәм отошло була.

Sun Rav Test Office Pro программалары менән компьютер ярҙамында уҡыусыларҙың белем кимәлен тикшереү отошло.

Хамелеон 8.1 программаһы ярҙамында уҡыусыларҙы дөрөҫ яҙырға өйрәтергә, орфографик грамоталыҡ, хаталар өҫтөндә эш эшләргә була.

Электрон һүҙлектәр ярҙамында уҡыусыларҙың һүҙлек байлығын арттырырға була, һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе, текстарҙы тәржемә иткәндә бик әһәмиәтле. Электрон дәрестәр иһә урыҫ телле балаларға бик ҡулайлы әсбап, сөнки уларҙа бер эш төрө генә бирелмәй, ә тотош бер материал бирелә [3: 164].

Дәрестә яңы һүҙҙәрҙе тиҙ хәтерләп алырға, өндәрҙе дөрөҫ әйтер өсөн «Play market»тан балалар өсөн бушлай мобиль ҡушымталар күсереп алып, дәрестә файҙаланыу. Миҫалға, «Бала баш», «Башкирский филворд», «Башҡортса тест һорауҙары» кеүек мобиль ҡушымталар.

Уҡыусыларҙың коммуникатив компетенцияһын үҫтереүҙә иң кәрәкле эштәрҙең береһе – һүҙлек запасын байытыу өсөн WORD CLOUD ресурсы аша һүҙҙәр болотон ҡулланам. Был программала башҡарылған эштәр ғәҙәти булмаған, ҡыҙыҡлы һәм ассоциатив фекерләүҙе үҫтереү өсөн, һүҙлек байлығын арттырыу өсөн бик файҙалы.

Телмәр үҫтереүҙә шиғырҙар, ике юллыҡ тиҙәйткестәр ятлатыуҙың да роле ҙур. Уларҙы ятлағандарын магнитофонға яҙҙырып тыңлатыу һәм үҙ-үҙеңә анализ яһау. Улар хәрефтең, телмәрҙә өндөң дөрөҫ әйтелешен тойорға ярҙам итә. Балаға үҙе күреп белгән әйбер тураһында фекер йөрөтөүе еңелерәк. Шуға күрә лә дәрестәрҙе күберәк күргәҙмә материалдар һәм слайдтар менән байытыу мөһим. Уҡыусыларҙың ижади һәләттәрен үҫтереүҙә Башҡортостан матурлығын тасуирлаған һүрәттәр, видеоматериалдар, слайдтар, күренекле шәхестәрҙең портреттарын, улар менән интервью өҙөктәрен ҡулланыу шарт. Шулай уҡ тыуған ил, хеҙмәт темаһына һ. б. ҡағылышлы мәҡәл-әйтемдәр менән бәйле төрлө күнегеүҙәр эшләргә була.

Бөгөн уҡытыусынан бик күп талап ителә: үҙ фәнеңде бик яҡшы белеү, балаларҙы яратыуҙан тыш, уларҙың фекерләү һәләтен үҫтереү, уҡыу-танып белеү эшмәкәрлеген ойоштороу, рухи һәм физик үҫешен тәьмин итеү. Ә бының өсөн мөғәллимдән үҙ шәхесенә тәнҡит күҙлегенән ҡарау, яңылыҡҡа омтолоу, заман һулышын тойоп, белемде өҙлөкһеҙ камиллаштырыу, уҡытыу-тәрбиә процесына ижади яҡын килеп эшләү һорала [4: 44].

Күреүебеҙсә, заманса инновацион технологиялар, компьютер технологияларын дәрес барышында ҡулланыу уҡыу сифатын арттыра, уҡыусыларҙың үҙ алдына эшләү һәләтен үҫтерә, үҙ-үҙенә ышаныс, башҡорт телен өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу уята. Әммә ләкин компьютер технологияларын сама менән ҡулланыуҙы күҙ уңында тоторға кәрәк. Уҡыусыларҙың йәш үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып, методик маҡсатҡа ярашлы (яңы теманы аңлатыу, нығытыу, йомғаҡлау, контроль эштәр эшләтеү, уҡыусының белемен тикшереү) уҡыусылар һәм компьютер һаны, компьютерҙа эшләгәндә гигиеник талаптарҙы иҫәптән сығарырға ярамай.

**Әҙәбиәт:**

1. Азнагулов Р.Г. Научные основы методики башкирского языка. Уфа: БГУ, 2004. С. 192–195.
2. Дәүләтшина М.С., Ғәбитова З.М. Башҡорт телен уҡытыу методикаһы. Өфө: Китап, 2011.
3. Концепция модернизации российского образования на 2010–2015 гг. М., 2010.
4. Концепция национального образования в Республике Башкортостан. Уфа, 2009.

© Ҡоҙашева С.Р., 2024

**УДК 373.24**

***Ҡолһарина Мәзүнә Гәрәй ҡыҙы,***
*тәрбиәсе, 75-се «Аҡбуҙат»*
*башҡорт балалар баҡсаһы, Өфө ҡ., БР*

## Педагогик табыш «Серле планшет»

Һәр кемдең үҙ юлы бар, ул уны һайлай һәм ғүмере буйы шул юл буйлап бара. Балалар йылмайыуы, ижады, идеялары, табыштары һәм асыштары – ул һүҙҙәр генә түгел, ә минең һәр көнөмдөң булмышы. Мин, заман талаптарына яраклашҡан тәрбиәсе булараҡ, балалар баҡсаһында кескәйҙәрҙең тормошон мауыҡтырғыс, күңелле һәм ғәҙәти булмаған итеп тыуҙырырға тырышам, сөнки һәр бала үҙенсә уникаль һәм ҡәҙерле!

Минеңсә, тәрбиәсенең маҡсаты – ҡыҙыҡлы, сағыу белем биреү мөхитен ойоштороу аша һәр кескәйҙең ижади күҙҙалау, эҙләнеү һәләтен, белем алыуға теләген үҫтереү өсөн шарттар булдырыу.

Бөгөнгө оҫталыҡ дәресендә мин һеҙҙең менән үҙемдең педагогик табышым **“Серле планшет”** менән уртаҡлашам.

Был планшет белем биреүҙең бөтә өлкәләрендә лә уңышлы ҡулланыуға мөмкинлек биргән инновацион технология, ә иң мөһиме, уйын аша белем биреү бурыстарын тормошҡа ашырырға була [1].

«Серле планшетты» эшләү өсөн беҙгә – ҡайсы, флис туҡымаһы, ҡатырға, ҡәләм, линейка, энә, еп, елем йә булмаһа скотч кәрәк буласаҡ.

1-се аҙым. Тәүҙә линейка ярҙамында үлсәп А4 форматындағы ҡатырға ҡағыҙын әҙерләйбеҙ.

2-се аҙым. Ике ҡат ҡатырғаны бер-береһенә йәбештерәбеҙ.

3-сө аҙым. Шул уҡ ҙурлыҡта флис туҡыманы ике яғын ҡушып тегеп сығабыҙ.

4-се аҙым. Ҡатырғаның тышынан флистан әҙер булған тоҡто кейҙерәбеҙ.

5-се аҙым. Ситенән тегеп ҡуябыҙ.

«Серле планшет» Федераль Дәүләт белем биреү стандарты һәм Федераль белем биреү программаһы талаптарына ярашлы итеп эшләнә. Уның өҫтөнлөклө яҡтары:

– мобиллек (горизонталь йәки вертикаль торошта, өҫтәлдә, балаҫта, саф һауала ҡулланырға мөмкин);

– хәүефһеҙлек (әҙерләгәндә хәүефһеҙ материалдар ҡулланылды);

– трансформация (йәш үҙенсәлектәренә, балаларҙың һаулыҡ мөмкинселектәренә ҡарап, йөкмәткеһен, ҡулланыу маҡсатын үҙгәртергә була. Һәм шулай уҡ үҙ аллы файҙаланыу мөмкинлеге бар).

Хәҙер педагогтар араһында әсбаптар, уйынсыҡтар һәм фетрҙан эшләнгән әйберҙәр ҙур популярлыҡ менән ҡулланыла. Ни өсөн мин был пособиены әҙерләү өсөн фетр һайланым? Пособиелар әҙерләүҙә фетр ҡулланыуҙың ыңғай яҡтары күп. Фетрҙың төҫтәре киң, үлсәмдәре төрлө, уңайлы, һәр магазинда һатыла, төрлө ҡалынлыҡта, уң һәм һул яғы юҡ, еңел беркетелә һәм йәбештерелә, шуға уны тегергә һәм бөгөргә кәрәкмәй, сөнки ситтәре ҡойолмай. Был материал йомшаҡ, йылы булыуы менән айырылып тора, балаларҙың ҡул моторикаһын үҫтерә. Әгәр һеҙ фетрҙы ҡулығыҙға алһағыҙ, уның ни тиклем йылы һәм уңайлы булыуын һиҙерһегеҙ.

Шулай уҡ ламинировать ителгән һүрәттәрҙе лә ҡулланам. Сағыу, матур, төҫлө һүрәттәр балаларҙың хәтерҙәрен, ҡул моторикаһын, аң-зиһенен, телмәрҙәрен үҫтереүгә булышлыҡ итә.

Планшетты мин шәхсән балалар менән һәм төркөм менән эшләгәндә лә ҡулланам.

Социаль-коммуникатив үҫеш өлкәһендә түбәндәге уйындарҙы ҡулланам. Балалар араһында дуҫтарса мөнәсәбәттәрҙе үҫтереү өсөн «Дуҫымдың портреты», «Кем ярҙамға килә?» уйындарын уйнарға мөмкин. Баланы шәхес итеп тәрбиәләүҙә һәм үҙ баһаһын күтәреүҙә «Минең буласаҡ һөнәрем», «Мин нимә тураһында хыялланам» уйындарын ҡулланам.

Танып белеү-тикшеренеү эшмәкәрлегендә планшет ярҙамында геометрик фигураларҙы, формаларҙы, фактураларҙы ҡулланып уйындар ойошторам, мәҫәлән В. Воскобовичтың «Танграм», «Колумбово яйцо», «Ҡыҙыҡлы таяҡтар» уйындары.

Экологик тәрбиә һәм тәбиғәттә хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен өйрәнеп балалар менән «Нимә мөмкин, ә нимә ярамай», «Бүлмә үҫемлектәре», «Баҡсала нимә үҫә?» уйындарын ойошторам. Юл һәм өй хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен өйрәнеү өсөн «Юл билдәләре», «Юл ҡағиҙәләре», «Светофор» уйындарын балалар бик яратып уйнай. Тәбиғәт донъяһы менән танышып, «Йыл миҙгелдәре», «Тәүлек өлөштәренең сәйәхәте», «Йыһан сәйәхәте», «Сәскәләр төҙөү» һәм башҡа уйындар уйнайбыҙ. Социаль донъя менән танышҡанда «Флагыңды йыйып әйт», «Рәсәй картаһында Башҡортостан» уйындары актуаль булып тора.

Телмәр үҫеше буйынса флис планшеты менән берләштерелгән мнемотаблицалар ҡулланам. Шулар ярҙамында мин киләһе һөҙөмтәләргә өлгәшә алам: балаларҙың тексты ҡабаттан һөйләргә, ҡыҙыҡлы ваҡиғалар уйлап табырға теләге тыуа, шиғырҙарҙы һәм әйтемдәрҙе ятлауға ҡыҙыҡһыныуы арта, һүҙлек запасы арта [2].

Художестволы-эстетик үҫеш буйынса планшетты аппликация дәрестәрендә ҡулланам. Уның ярҙамында предмет һәм сюжет композициялары төҙөйөм, биҙәктәр төшөргәндә уларҙы деталдәр менән тулыландырам һәм традицион булмаған техника ҡулланам.

«Серле планшет» ата-әсәйҙәр менән эш алып барған саҡта ла бик уңайлы ҡулланма булып тора. Ата-әсәйҙәр балалар менән өйҙә лә бик яратып ҡулланалар. Флис планшет ғаилә менән үҙ-ара килешеп яҡшы мөнәсәбәттә эш итергә мөмкинселек бирә.

Флис планшеты һәм белем биреү эшенең төп асылы шунда: уҡыу барышында балаларҙың предмет һәм тирә-яҡ донъяға, ябай математик күҙаллауҙарға ҡыҙыҡһыныуҙары артты. Эш тәжрибәһе шуны күрһәтә: планшетта ҡул аҫтындағы материалдар ярҙамында эшләү онотолмаҫлыҡ ыңғай хис-тойғолар уятырға мөмкинлек бирә. Төркөмдә ыңғай эмоциональ кәйеф булдыра.

**Әҙәбиәт**:


1. Абдуллина Г.Р., Зинуров Б.И. Охотничья лексика как компонент башкирских паремий // Мир науки, культуры, образования. 2023. № 6 (103). С. 490–492.
2. Талипова Т.Р., Абдуллина Г.Р. Способы перевода сравнений с башкирского языка на турецкий (на материале эпоса «Урал батыр») // Мир науки, культуры, образования. 2023. № 6 (103). С. 564–566.


© Ҡолһарина М.Г., 2024

**УДК 811.512.141**

***Ҡужина Регина Рәшит ҡыҙы,***
*магистрант, Өфө университеты,*
*Өфө к., БР*

**Башҡорт телендә аш-һыу лексикаһы**

Башҡорт тел ғилемендә лексик-семантик система булдырыу һәм уның ҡатламдарын тулыландырыу мәсьәләләре көнүҙәк булып тора, уларҙың күбеһе халыҡ тәжрибәһен, үткән быуаттарҙағы милләт тормошоноң үҙенсәлеген сағылдырған халыҡ мәҙәниәте ҡомартҡыһы булараҡ өйрәнелергә мөмкин. Был йәһәттән йәмғиәттең тарихын һәм социаль-иҡтисади үҫешен сағылдырған традицион аш-һыу атамаларын өйрәнеү ҙур роль уйнай. Тикшеренеүҙәргә килгәндә инде, башҡорт теленең һүҙлек составын төрлө аспекттарҙа тикшереү һуңғы йылдарҙа ярайһы уҡ уңыштарға өлгәшә. Башҡорт һүҙьяһалышы буйынса тикшеренеүҙәр (Т.М. Ғарипов, М.Х. Әхмәтов, К.Ғ. Ишбаев), һүҙҙәрҙең төҙөлөшө һәм этимологияһы буйынса эҙләнеүҙәр (Э.Ф. Ишбирҙин, Ш.В. Нафиков), этнографик һәм ономастик лексикаға арналған хеҙмәттәр (Ф.Ғ. Хисаметдинова, А.Ә. Камалов, Р.З. Шәкүров, Р.Н. Һаҙыева, Л.И. Хөсәйенова һ. б.) быға асыҡ миҫал булып тора.

Аш-һыу атамалары фәнни тикшеренеүҙәр өсөн ҡыҙыҡлы материал булып тора. Һәр халыҡтың милли ризығы этностың социаль һәм рухи тарихын, уның тарихи-мәҙәни бәйләнештәрен сағылдыра. Этногенетик һәм лингвистик тикшеренеүҙәр өсөн материал һәм милли аш-һыу мәҙәниәттең бер өлөшө булараҡ, халыҡтың үткән тормошон, тирә-яҡ мөхиткә, үҙенең милли йолаларына һәм аҙыҡ менән бәйле ышаныуҙарына мөнәсәбәтен тергеҙеү мөмкинлеген бирә.

Башҡорттарҙың милли аш-һыуҙары тураһында мәғлүмәттәрҙең төрлө-төрлө, ҡайһы берҙә хатта ҡапма-ҡаршылыҡлы булыуҙарының үҙ сәбәптәре бар. Был тема менән ғалимдар һәм сәйәхәтселәр махсус рәүештә шөғөлләнмәгән. Аш-һыуҙарға ҡағылышлы яҙмалар күҙәтеүҙәргә өҫтәлмә мәғлүмәт булараҡ ҡына теркәлгән. Сәйәхәтселәр үҙ күҙәтеүҙәрен башҡа тикшеренеүселәрҙең яҙмалары менән сағыштырмағандар. Үҙҙәренең төрлө ҡараштарын сағылдырыуына ҡарамаҫтан, башҡорттарҙың туҡланыу ризыҡтарының өс төргә бүленеүен асыҡлайҙар:

1) һөт аштары;
2) ит аштары;
3) үҫемлек аштары.

Бөгөн дә күп кенә тикшеренеүселәр үҙҙәренең хеҙмәттәрендә ошо дөрөҫ, әммә тар йүнәлештән сығып эш итә. Милли аш-һыу атамаларын теркәүсе С.И. Руденко бар башҡорттарға хас булған йолаларҙы, көнкүрешен һәм уның элементтарын, шул иҫәптән туҡланыу системаһын да, беренсе булып дөйөмләштереп тикшерә һәм монографик планда яҡтырта.

Ғилми эштәрҙә Ф.С. Әминева билдәләүенсә, башҡорт телендәге һөйләштәрҙә аш һүҙе полисемантик характерлы. «Башҡорт теленең диалектологик атласы өсөн материалдар йыйыу Программаһына» был һүҙҙең ете мәғәнәһе индерелгән. Урал аръяғы райондарында (Арғаяш, Ҡонашаҡ, Силәбе өлкәһенең Наҙы-Петровск районы, Ҡурған өлкәһе), Мейәс һәм Ҡыҙыл йылғалары бассейндарында аш һүҙе «иген» мәғәнәһендә ҡулланыла. Тамырҙағы иген дә, һуғылған иген дә шулай атала: аш сәсеү башланды, быйыл аш уңған, бөгөн иген уңышы яҡшы [7: 14].

«Аш» һүҙе бөтә һөйләштәрҙә лә төрлө һурпаларҙы аңлата (ит һурпаһы, һөт һурпаһы, ҡоро аш).

«Аш» һүҙе йыш ҡына мәжлес, һый «ҡунаҡтар менән төшкө аш йәки киске аш, һый» һүҙҙәре урынына метонимик күсереү нигеҙендә ҡулланыла: ашҡа барҙыҡ «ҡунаҡҡа йөрөнөк», «ашҡа саҡырҙылар» һ. б.

Өс төр милли аш-һыуҙы билдәләгәндә, беренсе төркөмдө ҡарап үтәйек:

Ит аҙыҡтары – башҡорт халҡының борондан килгән малсылыҡҡа бәйле аш-һыу төрҙәре.

Башҡорт халҡы йылҡы малын һәм ҡуй-һарыҡты үҙ иткән, һыйыр малын башлыса һөт алыр өсөн аҫраған. Кешенең байлығы ла тап ана шул йылҡы һәм ҡуй һанына ҡарап баһаланған. Төрлө яҙма сығанаҡтарҙан күренеүенсә, урта хәлле башҡорт 40-50 йылҡы, 100-200 һарыҡ тотҡан.

Башҡорттарҙа йылҡы итенән әҙерләнгән иң ҡәҙерле ризыҡ – бишбармаҡ. Ул шулай уҡ һарыҡ һәм һыйыр итенән дә бешерелә. Уны төрлө урында уны төрлөсә бешерәләр.

Ит ризыҡтары башҡорттарҙа икенсел эшкәртеүгә дусар ителә. Шуға күрә ит ризыҡтарының атамаларын өс төркөмгә бүлергә мөмкин:

1) яңы ит төрҙәренең атамалары;

2) һаҡлау өсөн әҙерләнгән итте аңлатҡан һүҙҙәр;

3) әҙер ит ризыҡтарының атамалары.

Бишбармаҡ халҡыбыҙҙың борондан килгән традицион милли ашы. Уның үҙенсәлекле бешерелеү ысулы бөгөнгө көнгә тиклем тотороҡло һаҡланған. Бишбармаҡ – ҡунаҡ ашы. Башҡорттаҙа иң ҡәҙерле кешеләргә әҙерләнә торған йәнә бер ашамлыҡ бар – ул ҡаҙы йәки ҡаҙылыҡ. Ул да бик борондан килгән ҡәҙерле һый-хөрмәт ризығы. Был ашамлыҡ тик йылҡы итенән һәм эс майынан әҙерләнә.

Шулай уҡ тултырма мал һуйған көндә әҙерләнә һәм һуғым ашының бер мөһим компоненты булып тора. Һуғым ашына килгән һәр кемгә унан өлөш бүленә.

Һуғым һуйғанда, йола буйынса, йәнә ҡурҙаҡ әҙерләнә. Исеменән күренеүенсә, «ҡурыу» йәки эс-майында ҡурылған эсәк-бауыр. Ҡурҙаҡ мал һуйылғас та, ит бешкәнсе, эсәк-ҡарын эшкәртеүселәргә, һуйыусыларға хөрмәт күрһәтеү йәһәтенән әҙерләнә. Өҫтәлгә эҫе килеш бирелә [6: 92].

Боламыҡ – элегерәк башҡорттарҙың иң популяр аҙыҡтарының береһе булған. Ул – ҡорот менән тәмләтелгән, он менән ҡуйыртылған итле һурпа.

Туҡмас – бөтә төбәктәрҙә лә киң таралған ашамлыҡ. Ул төрлөсә әҙерләнә, шулай ҙа һарыҡ итенә өҫтөнлөк бирелә. Ит киҫәктәре талғын утта бешеп сыҡҡас, йыйып алына һәм йылы урынға ҡуйыла. Бишбармаҡ һалмаһынан айырмалы рәүештә, туҡмас йоҡа таҫмалар рәүешендә киҫелә. Һалма һалыр алдынан һурпала бер аҙ кишер, картуф бешерелә. Һалма һалынғас, туралған һуған, тәмләткестәр өҫтәлә. Аш әҙер булғас, ит турала һәм табынға һалмаһы, һурпаһы, ите менән бергә бирелә.

Борон-борондан малсылыҡ менән кәсеп иткән башҡорт халҡы һыйыр малын башлыса һөт аҙыҡтары әҙерләү өсөн тотҡан. Һыйырҙы башҡорттар бик борон замандарҙа уҡ ҡулға эйәләштергән.

Ҡатыҡ – башҡорттарҙың һәр урында киң файҙаланылған һәм яратып ҡабул ителгән ризығы. Файҙалы һәм туҡлыҡлы, оҙаҡ һаҡлана торған был ризыҡ оҙайлы юлдарҙа һәм яуҙарҙа йөрөгән башҡорт халҡы өсөн, ҡаҡланған ит, ҡаҙы кеүек, мөһим ризыҡ булған.

Һөттән әҙерләнгән аҡ аҙыҡтарҙың береһе – һөҙмә. Ул һыуы һарҡытылған ҡуйы ҡатыҡ. Әсе ҡатыҡтан әсе һөҙмә, сөсө ҡатыҡтан сөсө һөҙмә килеп сыға.

Ойотҡанды тип яңы әҙер булған сөсө ҡатыҡты атайҙар. Яңы һауылған һөткә бер сынаяҡ самаһы ойотҡо, ҡаймаҡ һалып, өҫтө асыҡ килеш йылы урынға бер тәүлеккә ойоторға ҡуялар. Аҙаҡ уны шул килеш эсергә йәки еләк, бешкән ҡыҙыл сөгөлдөр өҫтәп, ҡаймаҡ туғып ашарға мөмкин.

Һөттән шулай уҡ ҡаймаҡ айыралар. Ҡаймаҡтан май бешкәндәр. Май алыу өсөн ҡаймаҡты бер нисә көн йыялар, ҡуйырып, әсей башлағансы тоталар. Унан махсус ағас

бешкәк менән бер талай өҙләкһеҙ бешәләр. Эстәре ауыртҡан, аш үтмәгән кешеләргә күбекмай әҙерләйҙәр. Уның өсөн махсус көбө (көбөсә) бар.

Боронғораҡ башҡорттарҙа иң таралған эсемлектәрҙең береһе айран булған. Әсе ҡатыҡты һалҡын һыу менән шыйыҡайтыуҙан барлыҡҡа килгән был эсемлек һыуһынды ла ҡандырған, витаминдарға ла бай, туҡлыҡлы ла булған. Әммә башҡорттарҙа бик боронғо замандарҙан килгән эсемлек ул – ҡымыҙ. Бейә һөтөнән әҙерләнгән был эсемлек тураһында тәүге мәғлүмәтте боронғо грек тарихсыһы Геродот (беҙҙең эраға тиклем 484-424 йылдарҙа йәшәгән) яҙмаларында осратырға мөмкин [3: 56].

Үҫемлек ризыҡтарына килгәндә, XIX–XX быуаттарҙа башҡорттарҙың туҡланыу рационында бөртөклө культуралар: бойҙай, арыш, борай, арпа, һоло, тары киң ҡулланыла башлай. Борсаҡ һәм ҡарабойҙай аштары ла көнкүрешкә инә. Шулай ҙа электән килгән традиция буйынса, көнсөлек халыҡта бойҙай, ә көньяҡ-көнсығыш башҡорттарҙа арпа һәм тары киңерәк файҙаланыла. Башҡорттарҙа бөртөклө ашлыҡтарҙы ҡулланыу, эшкәртеү, уларҙан төрлө аш-һыу әҙерләүҙең күп төрлө ысулдары бар.

Ҡамыр аштары төркөмөнә иң ныҡ таралған, киң ҡулланылған түбәндәге көндәлек һәм байрам ризыҡтарын, аш-һыуҙарын индерергә мөмкин: икмәк, бауырһаҡ, ҡоймаҡ, ҡатлама, сәксәк, сумса (сумбаса), шәнкә, ҡош теле, бәлеш, һалма, туҡмас, ыумас һ. б.

Икмәктең дә үҙ төрҙәре бар: сөсө икмәк, әсе икмәк, кәлсә, йәймә, табикмәк. Улар араһында иң боронғоларҙан кәлсә һанала. Боронғо башҡорттарҙа уны нисек бешереү тураһында П.С. Паллас яҙып ҡалдыра.

Икмәктең икенсе бер боронғо төрө – «йәймә». Уны башлыса Урал аръяғы башҡорттары бешергән. Йоҡа итеп йәйелгән сөсө ҡамырҙы эҫе ҡаҙандың эске яғына йәбештергәндәр. Әҙер булғас, улар ҡубып, ҡаҙан төбөнә төшә. Уларҙы алып, бер һауытҡа өйгәндәр һәм табынға һары май менән майлап биргәндәр.

Әҙерләнеше менән ҡабартмаға бауырһаҡ яҡын тора. Ул башлыса сөсө ҡамырҙан яһала. Бауырһаҡ – ҡунаҡ ризығы, уны бигерәк тә туй өсөн күпләп әҙерләйҙәр. Ул туйҙың йыуаса өлөшөндә таратыла. Шуға ла ҡайһы бер яҡтарҙа йыуаса исеме менән йөрөй.

Башҡорттарҙа борон-борондан көндәлектә лә киң ҡулланылған, байрам табынына ла йыш ҡуйылған ҡамыр ризығы – ҡоймаҡ. Ҡоймаҡтың да бер нисә төрө бар: әсе ҡоймаҡ, сөсө ҡоймаҡ, ыуыҙ ҡоймағы. Ыуыҙ ҡоймағын йола ризығы тип әйтергә мөмкин, сөнки уны һыйыр быҙаулағас та ыуыҙ һөтөнән әҙерләгәндәр һәм туған-тыумасаларҙы һыйлағандар.

Ҡамырҙан бешерелгән байрам аҙыҡтары ла байтаҡ: сәксәк, сумса, бәлеш, ҡош теле һ. б.

Итле ҙур бәлештән тыш күп төрлө ваҡ бәлештәр бешерелә. Улар төрлө урында төрлөсә атап йөрөтөлә: бөйөрөк, пирук, кәкере, бөккән, сумса, самбуса. Уларҙы сөсө ҡамырҙан да, әсе ҡамырҙан да әҙерләйҙәр.

Талҡан – күп төрки халыҡтарға хас боронғо ризыҡ. Шунан ҡала ҡыҙҙырылған бөтәү бойҙайҙы һәм арпаны шул килеш тә ашағандар. Ул ҡурмас тип атала.

Арпа, арыш, бойҙай ярмаһынан башҡорттар борондан буҙа исемле милли эсемлек яһаған. Онотолоп барған был эсемлек бөгөнгө көндә ҡайтанан тергеҙелә.

Ярма аштары төрлө йолаларҙа киң файҙаланылған. Бутҡаны бойҙай, арпа, тары, ҡарабойҙай, дөгө, һирәгерәк һоло ярмаһынан бешергәндәр. Бутҡа, ғәҙәттә, һөттә бешкән һәм табынға биргәндә һауыт уртаһына май һалып биргәндәр [5: 58].

Шулай итеп, аш-һыуҙарҙы өйрәнеү нигеҙендә һөт, ит һәм үҫемлек ризыҡтары өйрәнелде. Борон-борондан бөтә башҡорттарҙа ла киң таралған милли аштар күп төрлө булған. Хәҙерге көндә лә ризыҡтарҙың атамалары тергеҙелә һәм уларҙы өйрәнеү актуаллеген юғалтмай.

**Әҙәбиәт:**


1. Артемова О.Е. Теория и практика лингвокультурологического анализа: учебное пособие. Уфа: РИО БашГУ, 2006. 128 с.

2. Вежбицкая А. Понимание культур через посредство ключевых слов. М.: Язык славянской культуры, 2001. 56 с.

3. Ғәләүетдинов И.Ғ., Ишбирҙин Э.Ф. Башҡорт әҙәби теленең тарихы. Өфө: Китап, 1993. 285 б.

4. Зайнуллин М.В. Основные проблемы лингвокультурологии // Башкирское, тюркское и сопоставительное языкознание: избранные статьи. Уфа: АН РБ, Гилем, 2012. 315 с.

5. Ҡаһарманов Ғ.Ғ. Башҡорт теленең лексикаһы һәм терминологияһы. Стәрлетамаҡ: Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институты, 2002. 242 бит.

6. Сабирьянова С.Г. Наименования пищевых продуктов в башкирских говорах. Уфа: Китап, 2009. 112 с.

7. Әминева Ф.С. Башҡорт аш-һыуҙары лексикаһы: этнолингвистик тикшеренеү. Уфа: БИРО, 2003. 152 с.


© Ҡужина Р.Р., 2024

**УДК 373.24**

***Ҡәйепҡолова Зөлфиә Ғәлләм ҡыҙы,***
*уҡытыусы-дефектолог, Бала үҫтереү үҙәге –*
*«Баҙлауыҡ» балалар баҡсаһы, Сибай ҡ., БР*

## Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың танып белеү эшмәкәрлегендә ҡулланылған инновацион технологиялар

Белем биреүҙе үҙгәртеп ҡороу заманында иң төп маҡсаттарҙың береһе – белем биреү сифатын күтәреү һәм уны донъя стандарттарына ярашлы итеү.

Минеңсә, мәктәпкәсә йәштәге балаларға белем биреү статусын күтәреү педагогтарҙың профессиональ кимәлен үҫтереү менән тығыҙ бәйле. Сөнки дәүләт стандартына ярашлы балалар баҡсаһының белем биреү программаһын үҙләштереүсе һәр педагог балаларҙы төрлө яҡлап үҫтереүҙә компетентлы булырға тейеш. Ә инде педагогтың профессиональ оҫталығы балалар баҡсаһында методик эштең системалы булыуынан тора.

Инновациялы эшмәкәрлек белем биреү үҙәгенә педагогты һәм тәрбиәләнеүселәрҙе берләштерә, уларҙың ихтыяждарын һәм профессиональ ынтылыштарын күҙ уңында тота. Тимәк, профессиональ кимәле юғары булған, үҙ фекерен иркен рәүештә әйтә алған, актив педагогтар әҙерләү хәҙерге ваҡытта **актуаль проблемаларҙың** береһе.

Педагогтарҙың ижади эшмәкәрлеге, яңылыҡтарға ынтылышы интерактив эш формалары һәм алымдары ҡулланғанда ғына үҫешә тип уйлайым.

Беҙ белеүебеҙсә, Федераль дәүләт белем биреү стандарттарында балалар баҡсаһы программаһын үҙләштереүгә ҡарата маҡсатлы ориентирҙарҙың береһе – балаларҙың ҡыҙыҡһыныуы (любознательность).

Танып белеү эшмәкәрлегендә түбәндәге технологиялар ҡулланам:

1. Карта буйлап сәйәхәт.
2. «Системалы ау» төҙөү.
3. Морфологик таблицалар.
4. Фекерләү карталары.

**1. КАРТА БУЙЛАП СӘЙӘХӘТ тураһында ҡыҫҡаса.**

Карта буйлап сәйәхәт итеү технологияһы – мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың танып белеү активлығын үҫтереүсе технологияларҙың береһе. Методикаһы буйынса һәр сәйәхәттә лә карта, тәбиғәт ландшафтары, төрлө объекттар төшөрөлгән карточкалар йәки фотоиллюстрациялар, күргәҙмәлек һәм таратма материалдар, тылсымлы рюкзак, тикшеренеү өсөн
материалдар кәрәк.






**«КАРТА БУЙЛАП СӘЙӘХӘТ» итеү алгоритмы**

1. Барыу урынын билдәләү.
2. Картанан маршрут билдәләү.
3. Нимә һәм кем тап булыуы мөмкинлеген асыҡлау, юлға нимә кәрәклеге тураһында әңгәмәләшеү.
4. Сәйәхәт итеү. Эҙләнеү-тикшеренеү эшмәкәрлеге, тәжрибәләр үткәреү.
5. Йомғаҡ яһау.

Барыр урынды билдәләгәндә төп мотивация – кемгәлер ярҙам итеү. Ярҙам итер өсөн тәғәйен урынға нисек барырға икәнен карта аша билдәләү. Мәҫәлән, йылғаға нисек барырға? Картала тау, урман һәм һаҙлыҡ һүрәттәре күрһәтелә. Тәүҙәрәк кәрәкле урынға барып етер өсөн өс ҡаршылыҡтан артыҡ һайламаҫҡа кәрәк. Маршрут билдәләнгәс, һәр объект буйынса әңгәмә үткәрелә, улар тураһында белемдәр нығытыла (тау, урман, һаҙлыҡ). Һәр барыу урынында нимәләр беҙгә осрауы мөмкин, шул турала һөйләшеү ойошторола. Балаларға юлда кәрәкле әйберҙәр алырға тәкдим ителә. Һәр объект менән танышыу барышында ниндәй ҙә

булһа эшмәкәрлек ойоштorola. Мәҫәлән, «урманға» барғанда, ундағы үҫемлектәр, ағастар тураһында хикәйәләр төҙөү (мәҫ. мнемотаблица ярҙамында). Ә «һаҙлыҡҡа» барғанда, «Бата – батмай» эҙләнеү-тикшеренеү эше ойоштороға мөмкин. «Тауҙа» төрлө таштар үҙенсәлектәре тураһында математик эшмәкәрлек үткәрергә була. Ә инде йылғала балыҡтарға ярҙам итеү ойошторолһа, сәйәхәтте уңышлы тип һанарға ла була. Балыҡ төрҙәре нығытыла, туҡланыу сылбыры асыҡлана. Иң аҙаҡтан эшкә һығымта яһала.

**«Карта буйлап сәйәхәт» нимәһе менән балаларҙы ылыҡтыра?**

1. Балаларҙың тирә-йүн һәм унда булған объекттар тураһында белеме формалаша.
2. Баланың хәтере, фекерләү операциялары йылдам үҫешә.
3. Бәйләнешле телмәр үҫешә.
4. Төрлө эшмәкәрлектәр аша баланың танып белеү активлығы формалаша.
5. Ижади һәләттәр үҫешә, хеҙмәт күнекмәләре нығый һәм хәрәкәт активлығы арҡаһында һаулыҡ та нығый.

## 2. СИСТЕМАЛЫ АУ.

Ниндәй ҙә булһа проектты тормошҡа ашырыу **«системалы ау»** төҙөү формаһында булыуы мөмкин, йәғни проектты тормошҡа ашырыу планы. «Системалы ау» төҙөгәндә, эш йүнәлештәре генә түгел, ә өлкәләр интеграциялары ла бик асыҡ күрһәтелергә тейеш.

Системалы ау төҙөү – проект эшмәкәрлегенең бер төрө булараҡ билдәле. Системалы ауҙа проектты тормошҡа ашырыу буйынса балалар эшмәкәрлектәре билдәләнә. Теманы билдәләүсе һүрәттән төрлө нурҙар үткәрелә. Ә нурҙарҙа эш йөкмәткеһе, кәрәкле эш хәрәкәттәре, формалары яйлап тултырыла һәм бойомға ашырыла бара.

**«Ҡыш» темаһын йомғаҡлау буйынса системалы ау өлгөһө**





## 3. МОРФОЛОГИК ТАБЛИЦА (ТРИЗ технологияһына инә).

Морфологик таблица – морфологик анализдың бер төрө. ТРИЗ технологияһының бик һөҙөмтәле алымы. Морфологик анализ таблица формаһында бирелә. Таблица ике үҙәктән тороуы мөмкин. Вертикаль һәм горизонталь үҙәктәрҙә ниндәй ҙә булһа объекттың күрһәткестәре бирелә. Мәҫәлән, күп функциялы йыһаз төҙөү. Горизонталь һәм вертикаль

буйынса йорт йыһаздары һүрәттәре ҡуйыла. Ә инде уларҙың киҫелештәре килеп сыҡҡан күп функциялы йыһазды билдәләй.

Беҙҙең осраҡта өлкәндәр төркөмөндә таблица ярҙамында йыл миҙгелдәрен нығытыу эштәре алып барыла. Горизонталь буйлап: ҡыш, яҙ, йәй, көҙ, ә вертикаль буйлап – йәнле һәм йәнһеҙ тәбиғәт объекттары: кеше, айыу, ағас һ. б. Әлбиттә, йыл миҙгеленә ярашлы кешеләрҙең кейеме, ҡул менән эшләнгән предмет (сана, велосипед, шарф, быйма һ. б) һүрәттәрен ҡуйырға мөмкин. Балалар шулай итеп һәр миҙгел буйынса кешеләр, йәнлектәр, үҫемлектәр тормошо тураһында белемдәрен нығыта ала.







**4. ТОНИ БЬЮЗЕНДЫҢ ФЕКЕРЛӘҮ КАРТАЛАРЫ.**

Фекерләү картаһы – ул *проект планы.*

***Фекерләү карталары төҙөү тәртибе***

• А4 форматында ҡағыҙ алына. Ҡағыҙ битенең уртаһында төп идея, йәки проблеманы белдергән һүрәт ҡуйыла.

• Урталағы һүрәттән бер нисә нур формаһында һыҙыҡтар һыҙыла (һәр һыҙыҡтың үҙ төҫө булыуы мөмкин). Һәр нурҙа төп проблемаға бәйле бер һүҙ генә яҙыла (Был һүҙ баҫма хәрефтәр менән яҙылырға тейеш).

• Был нурҙар ҡалын һыҙылған булырға тейеш.

• Төп нурҙарҙан тағы ла нурҙар ебәрелә. Һүҙҙәр генә түгел, һүрәттәр булһа, бала өсөн аңлайышлы ла була. Һүрәттәр төҫлө булһа, бала өсөн ҡыҙыҡлы ла була.

•



Фекерләү карталары балаларға үҙҙәренең фекерҙәрен ҡағыҙҙа бирелгән схема ярҙамында асып бирергә ярҙам итә. Балалар үҙҙәре лә ниндәйҙә булһа темаға ярашлы фекерләү карталары төҙөй ала. Мәҫәлән, яҙ миҙгелен йомғаҡлау темаһына арналған

эшмәкәрлектә балалар тәрбиәсе менән берлектә фекерләү картаһы төҙөй. Уртала төп проблема билдәләнә – яҙ миҙгеле. Унан төрлө нурҙар ебәрелә, нурҙарға ҡоштар, хайуандар, кешеләр, тәбиғәт күренештәренә ҡағылышлы һүрәттәр ҡуйыла. Был төп нурҙарҙан тағы ла нурҙар ебәрелә. Унда инде һәр нурға ярашлы тағы ла һүрәттәр ҡуйыла. Бала шул нурҙар ярҙамында яҙ миҙгеленә ҡағылышлы белемдәрен нығыта. Шундай хикәйә килеп сығыуы мөмкин: «Яҙ етте. Яҙғыһын хайуандар томошонда үҙгәрештәр барлыҡҡа килә. Ҡуян тунын һороға алыштыра. Айыу өңөнән тороп сыға һ. б. Ә кешеләр йылы кеймедәрен еңелсә кеймгә алмаштыра. Йылы тун урынына еңел куртка кейеп йөрөйҙәр һ. б. Ҡояш нығыраҡ йылыта башлай. Күләүектәр барлыҡҡа килә. Ҡар ирей.....» Бала һәр нурға күрһәтеп, һүрәттәр ҡуйып үҙе һөйләй бара. Тимәк, фекерләү карталары балаларҙы үҙ фекерҙәрен схемалар аша әйтергә ярҙам итә. Баланың классификациялау, анализлау, дөйөмләштереү, сағыштырыу опреациялары йылдам үҫешә.

Шулай итеп, танып белеү эшмәкәрлегендә ҡулланылған технологиялар балаларҙың үҙҙәрен уратып алған донъя менән ҡыҙыҡһыныуҙарын арттыра, эҙләнеү-табыу буйынса фекерләү ҡеүәһен формалаштыра.

© Ҡәйепҡолова З.Ғ., 2024

**УДК 372.881.1**

***Латыпова Гульфия Габдельбариевна,***
*учитель башкирского языка и литературы,*
*ГБОУ РЦДО детей-инвалидов, г. Туймазы, РБ*

## Актуальные проблемы преподавания башкирского языка детям с ограниченными возможностями здоровья

В настоящее время проблемы обучения, а также воспитания и развития детей с ограниченными возможностями здоровья (далее – дети с ОВЗ) становятся все более актуальными и требуют разносторонних подходов к их решению.

Будучи национальным языком башкир и государственным языком Республики Башкортостан, башкирский язык и его преподавание занимает значимое место в системе обучения детей, в частности обучающихся с ОВЗ.

Обучающиеся, имеющие ограниченные возможности здоровья, довольно неоднородны, так как нарушения у них бывают разного характера: это и речевые нарушения, нарушения опорно-двигательного аппарата, зрительной, слуховой системы, а также выраженные расстройства эмоционально-волевой сферы и пр.

В связи с этим одной из ключевых проблем преподавания башкирского языка обучающимся с ОВЗ является индивидуализация процесса обучения. Педагог, работающий с данной категорией детей, должен учитывать как возрастные, так и индивидуальные особенности каждого обучающегося. Важной задачей в этом процессе является создание благоприятных педагогических условий, при которых детям будет комфортно и интересно изучать башкирский язык.

Для обучающихся с ОВЗ характерен низкий уровень мотивации к учебной деятельности. Основными причины такой мотивации являются:

1) знание не является личностно значимым;

2) невысокий уровень требований со стороны учителя;

3) учебные задания за пределами зоны ближайшего развития;

4) отсутствие разнообразных методов и средств преподавания языка [1: 70].

Процесс преподавания башкирского языка обучающимся с ОВЗ носит не только образовательный характер, но также направлен на воспитание личности, ориентированной на общечеловеческие и национальные ценности. Поэтому на занятиях важно использовать наглядный материал (иллюстрации, фото, видео). Обучающимся с ОВЗ необходимо рассказывать об истории родного края, о национальных героях. Целесообразно показывать видео-материалы, например, о Салават Юлаеве, курае, традициях башкирского народа и т. д.

С детьми начального школьного возраста в процессе преподавания башкирского языка необходимо применять разного рода творческие игры, а также игры с правилами. Например, в качестве творческой игры обучающимся с ОВЗ можно предложить озвучивать одного из героев башкирских народных сказок («Алп-батыр», «Сказка о курае», «Зиннят-агай», «Аминбек» и т. д.). В процессе таких игр обучающиеся будут заинтересованы в изучении новых слов на башкирском языке. В качестве дидактических игр, например, на занятиях педагог может использовать игры, где обучающимся необходимо дополнить словосочетание на башкирском языке. На уроках башкирского языка с детьми с ОВЗ игровые ситуации имеют особое значение, так как они более эффективно способствуют презентации нового языкового материала, закреплению пройденного лексического и грамматического материала. Различные творческие игры, а также игры с правилами выполняют и функцию организации и стимулирования речевой деятельности обучающихся с ОВЗ на башкирском языке. Игры развивают у детей мышление, речь и память [3: 104].

Весь материал, который используется на занятиях с обучающимся с ОВЗ, должен активно вовлекать таких детей в процесс познавательной деятельности. Это позволяет сделать исследовательские, частично-поисковые методы. Упражнения и задания должны быть доступны и интересны детям.

Одним из важных направлений образовательного-воспитательного процесса с обучающимися с ОВЗ является формирование у них разнообразных, устойчивых побудительных мотивов к изучению башкирского языка. Обучающиеся с ОВЗ должны быть удовлетворены результатами своей учебной деятельности, что возможно только при таких условиях, когда на занятиях у них будет сформировано положительное отношение. Поэтому учителям башкирского языка и литературы в процессе преподавания важно задействовать обучающихся с ОВЗ к активной деятельности. Например, целесообразным является использовать современные информационно-коммуникационные технологии. Так, при изучении башкирского алфавита произношение башкирских букв и примеры употребления можно объяснять обучающимся при помощи онлайн-платформ. Такие платформы целесообразно использовать практически при изучении каждой темы, так как

данный метод обучения является более результативным по сравнению с традиционными методами [2: 88].

Успешность преподавания башкирского языка обучающимся с ограниченными возможностями здоровья зависит от правильного взаимодействия детей и учителя. Педагогу в процессе занятий важно поддерживать интерес детей, поощрять их заслуги в процессе изучения башкирского языка и помогать при возникновении трудностей.

В заключение отметим, что преподавание башкирского языка детям с ограниченными возможностями здоровья будет эффективным лишь в том случае, если этот процесс будет интересным и многообразным, но при этом будет выстроена со стороны учителя четкая организация и планирование занятий.

**Литература:**

1. Водолагина О. Ю. Использование информационных компьютерных технологий в работе на уроках башк. языка с детьми с ограниченными возможностями здоровья. М.: Инфра, 2018. 154 с.

2. Мухтаров Т.Г. Методика преподавания башкирского языка в коррекционных образовательных учреждениях. М.: Просвещение, 2015. 101 с.

3. Шарапова Н.Н. Особенности преподавания башкирского языка и литературы учащимся с ОВЗ. Уфа: Избранные статьи, 2020. 219 с.

© Латыпова Г.Г., 2024

**УДК 372.881.1**

***Латыпова Динара Рәжәп ҡыҙы,***
*башланғыс кластар уҡытыусыһы,*
*Ф.Х. Мостафина исемендәге*
*20-се Өфө ҡала башҡорт гимназияһы,Өфө ҡ., БР*

## Башҡорт телен өйрәнеүҙе информацион-коммуникатив, һанлы технологиялар ҡулланып әүҙемләштереү

Ҡала шарттарында тәрбиәләнгән балаларға башҡорт телен өйрәтеүҙе информацион-коммуникатив, һанлы технологиялар ҡулланып әүҙемләштереүҙе маҡсатым итеп ҡуйҙым.

Маҡсатымдан сығып, түбәндәге бурыстарҙы билдәләнем:

– информацион-коммуникатив компетентлы шәхес формалаштырыуҙың теоретик нигеҙҙәрен өйрәнеү;

– башҡорт теле дәрестәренә ҡарата уҡыусыларҙа ыңғай мотивация булдырыу;

– предмет буйынса материалды яҡшы үҙләштереүҙе тәьмин иткән эффектив технологияларҙы һәм алымдарҙы педагогик практикала ҡулланыу;

– белем алыу процесында уҡыусыларҙың әүҙем эшмәкәрлеген тәьмин итеү;

– информацион-коммуникатив компетентлы шәхес формалаштырыу маҡсатында уҡыусының эшмәкәрлеген үҫтереүгә ҡоролған технологияларҙы өйрәнеү, практикала ҡулланыу;

– электрон ресурстарҙың йөкмәткеләрен билдәләү.

Башҡорт теле дәрестәренә ыңғай мотивация, уҡыу предметына ҡыҙыҡһыныу уятыу, белем алыу процесында уҡыусыларҙың эшмәкәрлеген әүҙемләштереү маҡсатында информацион-коммуникатив, һанлы технологиялар ҡулланыу бик актуаль.

«Бөгөн балаларға кисәге кеүек белем бирһәк, беҙ уларҙың иртәгәһе көнөн урлаясаҡбыҙ», – тигән Джон Дьюи. Федераль дәүләт белем стандарттарының төп маҡсаты – уҡытыу сифатын үҫтереү. Хәҙерге белем биреү заман талаптарына ярашлы булырға, ә XXI быуат уҡытыусыһы иң һуңғы мәғлүмәткә, инновацияларға эйә булырға тейеш.

Көндәр буйы төрлө гаджеттарҙы ҡулынан төшөрмәгән хәҙерге көн уҡыусыһы өсөн тик китап, дәфтәргә генә ҡоролған дәрестәр ялҡытҡыс. Ул китап уҡырға яратмай. Атай-әсәйҙең бала менән ултырырға ваҡыты юҡ, ул да телефонда. Дөйөм алғанда, бөтә тормош шул экран артында бара. Ошонан сығып, түбәндәге проблемалар килеп тыуа:

– уҡыусының телмәр компетентлығының һүлпән булыуы;

– ата-әсәләрҙең башҡорт теленә ҡарата битараф ҡалыуҙары;

– балаларыбыҙҙың үҙ телендә һөйләшмәүҙәре;

– ҡайһыларҙың үҙ телендә һөйләшә белеп тә, оялыуы;

– уҡыусыларҙың интернет киңлектәрендә аралашыуы үҙҙәре генә уйлап сығарған ҡыҫҡартылған һүҙҙәр (сленг) менән сикләнеүе;

– уҡыусыларҙың үҙ фекерҙәрен еткереү кимәле тик төртөп күрһәтеүгә, ым-ишараһына ҡайтып ҡалыуы.

Был проблемалар бөгөнгө уҡытыусы алдында, уҡыусыларҙы башҡорт телен өйрәнеүҙе ҡыҙыҡһындырыу өсөн, яңы информацион, һанлы технологиялар ҡулланып уҡытырға мәжбүр итә.

Ләкин нисек итеп төрлө яҡлап үҫешкән, телмәр компетентлылығы юғары булған, рухлы шәхес тәрбиәләргә һуң? Бына ошо проблема миңә, минең коллегаларыма төптән нығлы уйланырға этәргес бирҙе. Билдәле ғалимдарыбыҙҙың хеҙмәттәрен өйрәндем, интернет селтәренә байҡау яһаным, ИКТ өйрәнеү буйынса курстар үттем.

Билдәле педагог Л.Г. Занков: «Һәр яҡлы үҫешкә, рухи байлыҡҡа көсләп өлгәштереп булмай. Кеше үҙе ынтылырға тейеш», – ти. Әлбиттә, баланың тәбиғәттән бирелгән һәләтен күреү, асыу өсөн тейешле шарттар булдырыу, мауыҡтырыу мөһим. Балаларҙы компетентлы булырға өйрәтеү – уҡыу процесында төп бурыстарҙың береһе.

Методист ғалимдарҙың билдәләүенсә, Рәсәй территорияһындағы мәктәптәрҙә илленән ашыу уҡытыу технологиялары йәшәп килә. Был йәһәттән Д.Б. Эльконин, В.В. Давыдов, Л.В. Занков, һ. б. ғалимдарҙың, уҡытыусы-методистарҙың инновацион технологик системаларын күрһәтергә кәрәк.

Яңы ФДББС-ты талаптарында ла инновацион алымдар менән эҙләнеп белемеңә таянып өйрәнеүгә, белем алыуға өҫтөнлөк бирелә.

Башҡорт теле дәрестәрендә лә информацион технологияларҙы ҡулланыуҙың өҫтөнлөгө бәхәсһеҙ. Барынан да элек әлеге технология шәхескә йүнәлтелгән, нығлы һәм вариатив булыуы менән айырылып тора. Компьютер, күргәҙмәлелекте һәм контроллекте тәьмин итеп, күп мәғлүмәт биреп, уҡытыуҙың сифатын күтәрергә ярҙам итә. Дәрестәрҙә компьютер

ҡулланыуҙың юлдары һәм ысулдары күп төрлө: электрон презентациялар, электрон уҡыу әсбаптары, һүҙлектәр, мәғариф порталдары, электрон ҡушымталар, мобиль класс мөмкинселектәре.

Бөгөнгө портатив электрон сараларҙың техник мөмкинлектәре сикһеҙ, ә Android и IOS системаларына яраҡлаштырылған башҡорт телендә йәки башҡорт теленә ҡағылышлы мобиль ҡулланмаларҙың булыуы – шатлыҡлы күренеш. Смартфон, айфондарҙан айырылмай ғына телде өйрәнеү өсөн иң популяр һәм эффектлылары тип «IQБалаБаш», «Әлләсе», «Хәйләкәр төлкө», «Сәләм», «Башҡортса һүҙлек» ҡушымталарын атарға була. Был ҡушымталарҙы уҡыусы үҙенең смартфонына кусереп, уңайлы ваҡытта, уйын аша башҡорт телен өйрәнә ала. Шулай уҡ дәрестәрҙә лә иркен ҡулланып була.

Мәҫәлән, «IQБалаБаш» мобиль ҡушымтаһы аша уҡыусыларым тирә-яҡ мөхитте уйын формаһында өйрәнә. Ул сағыу һүрәттәр, анимациялар менән биҙәлгән һәм логиканы, хәтерҙе, фекерләү ҡеүәһен үҫтереүгә йүнәлтелгән уйынсыҡтар менән байытылған. Шулай уҡ унда һүҙҙәрҙең башҡортса дөрөҫ әйтелешен өйрәнеү мөмкинлеге бар. Балаларға «Һүрәттәрҙе йый», «Төҫтәр», «Парҙарын тап», «Йондоҙҙарҙы тоташтыр» уйындары бик оҡшай.

«Сәләм» мобиль ҡушымтаһы шулай уҡ Android һәм IOS операцион системалары өсөн эшләнгән. Ул дистанцион уҡытыуҙа алыштырғыһыҙ ярҙамсы. «Сәләм» мобиль ҡушымтаһын, теманың үҙенсәлегенә ҡарап, дәрестең төрлө этаптарында ҡулланырға мөмкин. «Интерактивный башкирский» порталын да бик уңышлы тип һанайым. Милли мәғариф буйынса ресурс үҙәге тарафынан эшләнелгән «Туған тел донъяһы» («Мир родного языка») белем биреү порталы ла практик яҡтан ҡулланырға уңайлы.

Дәрестәремде ҡыҙыҡлыраҡ ойоштороу, заман менән бергә атлау маҡсатынан сығып, ата-әсәләрҙең ярҙамы менән 2018 йылда килгән беренсе кластарым мобиль класс булараҡ асылды. Мобиль кластарҙы ойоштороу өсөн иң беренсе техник база кәрәк. «1 уҡыусы – 1 компьютер» моделе буйынса һәр уҡыусыға планшет, нетбук йәки компьютер һатып алынды. Улаҙың нетбуктары вай-фай аша интернет селтәренә тоташты. Махсус «Classroom management by prestigio» программаһы ярҙамында уҡытыусы компьютерына бәйләнә. Нетбуктар сейф-тележкала зарядка ала, һаҡлана.

«Classroom management by prestigio» программаһының мөмкинселектәре бик күп. Уҡытыусыға үҙенә кәрәкле тикшереү эштәрен төҙөп, тиҙ арала уҡыусының теманы үҙләштереү кимәлен асыҡларға ярҙам итә. Шулай уҡ төрлө күнекмәләр әҙерләп, бер төркөм уҡыусыларға йәки индивидуаль балаға ғына ебәреү мөмкинселеге бар. Берәй баланың компьютерҙағы эшен таҡтаға сығарып күрһәтеп, анализлап та була. Уҡыусы уҡытыусы ебәргән төрлө күнекмәләрҙе үҙенең нетбугында эшләп, уҡытыусыға ебәреү мөмкинселеге бар. Һәр бала төрлө мәғариф порталдарында ла уңышлы эшләй (ЯКласс, Учи.ру). Мобиль кластарҙың ыңғай яҡтары бик күп. Нимәлә уларҙың өҫтөнлөгө?

Уҡыусы өсөн:

– уҡыу процесына ҡыҙыҡһыныу уята;

– үҙ аллы белем табырға өйрәтә;

– коммуникатив компетентлылыҡтарын формалаштыра.

Уҡытыусы өсөн:

– уҡыу процесын ойоштороуҙы әүҙемләштерә;

– дәрестәрҙе полилингваль арауыҡта ойоштороуға мөмкинлек бирә;

– дәрестәрҙең алымдарын төрләләндерә;

– алдынғы ҡарашлы уҡыусылар тәрбиәләүҙә ярҙамлаша;

– уҡытыусының эшен еңелләштерә, ваҡытын экономиялай;

– ваҡыт экономиялана, аҡбур менән яҙыу эшен күпкә кәметә;

– уҡыусыларҙың өлгәше һәм уҡыу сифаты буйынса статистик мәғлүмәттәрҙе туплау мөмкинселеге лә бирә;

– объектив билдә ҡуйыла.

Ләкин эш барышында ҡыйынлыҡтар ҙа булды. Инженерҙар ярҙамы етмәне, локаль интернет селтәренең көслө булмауы, алған нетбуктарыбыҙҙың хәтер кимәле әҙ булыуы ауырлыҡтар тыуҙырҙы. Шуға ҡарамаҫтан, мобиль класс үҙ эшен әлеге көнгәсә уңышлы дауам итә.

Компьютерҙы дөрөҫ һәм урынлы файҙалана белергә кәрәк. Дәрес буйына компьютер ҡулланыу бик үк дөрөҫ булмай. Һәр нәмәне сама белеп, СанПин нормаларын да онотороға ярамай, сөнки компьютер артында оҙаҡ ултырыу уҡыусының һаулығына зыян килтереүе мөмкин.

1–2 кластарҙа – 10 минут

3–4 кластарҙа – 15 минут

Уҡыусыларымдың матур итеп башҡортса һөйләшеүе, төрлө кимәлдәге олимпиадаларҙа, дистанцион конкурстарҙа еңеүҙәр яулауы, матбуғат биттәрендә яҙмалары донъя күреүе ошо эшемдең һөҙөмтәһе булып тора. Уларҙың дистанцион уҡыуҙарға еңел өйрәнеүҙәре, кәрәкле уҡыу материалын, мөһим мәғлүмәтте үҙҙәре табып, эшләй белеүҙәре һөйөнөслө.

**Әҙәбиәт:**

1. Афанасьева О.В. Использование ИКТ в образовательном процессе. URL: www. pedsovet.org.

2. Горячев А.В. Информатика в играх и задачах. М.: «Баласс», «Экспресс», 1997.

3. Женина Л.В., Маткин А.А. История // Методические рекомендации по использованию информационно-коммуникационных технологий в цикле социально-экономических дисциплин в общеобразовательной школе / под ред. И.Г. Семакина. Пермь: Изд-во ПРИПИТ, 2004.

4. Информатизация общего начального образования: научно-методическое пособие / под ред. Д.Ш. Матроса. М.: Педагогическое общество России, 2004.

5. Ковалёва А.Г. Использование информационно-компьютерных технологий при обучении в начальной школе. 2006.

© Латыпова Д.Р., 2024

**УДК 811.512.141**

***Латыпова Рида Марс ҡыҙы,***
*филол. фәнд. канд., доцент,*
*Өфө университеты, Өфө ҡ., БР*

**Н. Ғәйетбаевтың «Төн» драмаһында ярҙамсы һүҙ төркөмдәренең ҡулланылышы**

Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре төрлө грамматик мөнәсәбәттәр урынлаштырыуға булышлыҡ итеп, һөйләм йәки һүҙбәйләнеш эсендәге һүҙҙәрҙе, ҡушма һөйләм составындағы ябай һөйләмдәрҙе бер-береһенә бәйләп киләләр.

Бәйләүестәр тип һөйләм эсендә үҙ аллы һүҙҙәр араһындағы синтаксик мөнәсәбәттәрҙе белдереүсе ярҙамлыҡ һүҙҙәргә әйтәләр. Бәйләүестәрҙең шундай төрҙәренә миҫалдар осратырға була:

Төп һәм эйәлек килеш менән идара итеүсе бәйләүестәр: *1. Һеҙ, әфәнде, нимә хаҡында? 2. Тик бының өсөн башҡорт балаларына белем бирергә кәрәк. 3. Ул минең төндәр буйы йоҡламай һорауымды ишеткән! 4. Ул заказ буйынса яҙа алмай. 5. Ниңә башҡалар кеүек бер урында эшләй алмайһың?* Төбәү килеш менән идара итеүсе һөйләмдәр: *1. Һин партияға ҡаршы һөйләнең! 2. Илебеҙҙе быуат башынан күрһәтә башланым, хәҙерге заманға тиклем күрһәтәсәкмен.* Сығанаҡ килеш менән идара итеүсе бәйләүестәр: *1. Унда уҡыуҙан башҡа медицина, дин дәрестәре буласаҡ. 2. Инде бит ҡасандан бирле аҡса алып ҡайтмайһың? 3. Төштән һуң Азаматтың уҡытыусыһы килде, мине әрләй.*

Мәғәнәләре буйынса бәйләүестәрҙең төрлө төрҙәре ҡулланылған. Ваҡыт бәйләүестәре: *1. Унда йәй буйы балалар менән барып ял итербеҙ. 2. Төштән һуң барһам… 3. Һин ун етенсе йылға тиклем халыҡ ауыр йәшәгән тип күрһәткәнһең. 4. Инде бит ҡасандан бирле аҡса алып ҡайтмайһың?* Маҡсат бәйләүестәре: *1. Нимә өсөн ҡан ҡойҙоҡ? 2. Аҡсам булһын өсөн, һеҙ туҡ, кейенгән булһын өсөн яҙасаҡмын! 3. Был шиғыр ҙа фәҡәт үҙем өсөн генә, күңелем өсөн генә.* Бергәлек бәйләүесе: *1. Шатлығым менән бүлешкем килә. 2. Унда йәй буйы балалар менән барып ял итербеҙ. 3. Мин һинең атайың менән әсәйеңде яҡшы белә инем.* Сәбәп бәйләүестәре: *1. Изге хәбәрең өсөн рәхмәт, шағир! 2. Ул бит үҙ атаһын! Бер тоҡ бойҙай өсөн! 3. Йәнәһе, беҙ Айбулат менән иген арҡаһында һуғышып киткәнбеҙ!* Оҡшатыу-сағыштырыу бәйләүестәре: *1. Ниңә башҡалар кеүек бер урында эшләй алмайһың? 2. Һин һәр совет гражданины кеүек була алмайһың. 3. Тимәк, алдашыуға ҡарағанда үлемде артыҡ күргәнһең.*

Теркәүестәр ябай һөйләмдәге тиң киҫәктәрҙең һәм ҡушма һөйләм эсендәге ябай һөйләмдәрҙең бер-береһенә бәйләнеүен тәьмин итәләр. «Төн» драмаһында улар ҙа байтаҡ осрай. Улар араһында теҙеүсе теркәүестәр ҙә, эйәртеүсе теркәүестәр ҙә бар. Теҙеүсе теркәүестәр араһында йыйыу һәм ҡаршы ҡуйыу теркәүестәре байтаҡ ҡулланылған. Йыйыу теркәүестәренең ҡулланылышына шундай миҫалдар килтерергә була: *1. Хәҙер һин иң кәрәкле нәмәләрҙе, балаларҙы алаһың да ауылға китәһең. 2. Дөрөҫ сәхнәләрҙе алып ташлайым да, улар һорағандарын яҙам. 3. Ул көндә ҡыҫҡа табан Һәҙиә апайҙарға бер дуҫтары килде һәм… ҡот осҡос хәбәр әйтеп китте… 4. Биш дәфтәр яҙылды, тағы күпме яҙырға кәрәк әле!*

9. *Матур һүҙҙәр һөйләйбеҙ. Шул ук ваҡытта ҡырабыҙ, үлтерәбеҙ.* Ҡаршы ҡуйыу теркәүестәре ҡулланылышына миҫалдар: *1. Ә мин ошоғаса бер ни белмәй инем. 2. Тыштан ғына матур һүҙҙәр һөйләйһегеҙ, ә эстән… 3. Тере ҡалдыра ала инем. Тик мин быны эшләмәнем. 4. Ләкин минең аҙаҡҡаса белгем килә. 5. Ашығырға кәрәк, югиһә мин өлгөрмәйем… 6. Белмәйем, әммә йөҙҙәре таныш.* Бүлеү теркәүестәре бик һирәк, юҡ кимәлендә: *Йә уларға нимә кәрәк, шуны яҙам, йә… улар мине юҡҡа сығара.*

Эйәртеүсе теркәүестәр араһында күбеһенсә шарт, сәбәп, һөҙөмтә теркәүестәре осрай: *1. Әгәр тере ҡалһа, Айбулаттың яҙмышы тағы ла аянысыраҡ булыр ине. 2. Мин үлмәнем, сөнки минең үлергә хаҡым юк! 3. Шуның өсөн ул намыҫының боғаҙына баҫырға ла риза…*

Йыш ҡына балалар тыуған яҡтары, уның йолалары һәм ғөрөф-ғәҙәттәре тураһында етерлек мәғлүмәт белмәй, шуға күрә балалар баҡсаһы белгестәре һәм тәрбиәселәре алдында бәләкәй Ватанға һаҡсыл һәм ихтирамлы мөнәсәбәт булдырыуға йүнәлтелгән мәғлүмәт биреү бурысы тора. Күп йыллыҡ практика күрһәтеүенсә, балалар менән системалы рәүештә

эшләгәндә уның телмәр кәмселектәрен төҙәтергә мөмкин. Шуға күрә телмәрҙе төҙәтеүҙә һөҙөмтәле алымдар һәм ысулдарҙы эҙләү үҙенең актуаллеген юғалтмаған. Беҙҙең балалар баҡсаһында үткәрелгән логопедик коррекция-үҫеш эшмәкәрлеге халыҡ педагогикаһын телмәр кәмселектәре булған балалар менән коррекция эшендә ҡулланғанда уның ҙур потенциалға эйә булыуы һәм ыңғай һөҙөмтәләргә килтереүе тураһында һығымта яһарға мөмкинлек бирә.

Бөгөнгө яңы шарттарҙа, федераль дөйөм белем биреү программаһы һәм талаптарына ярашлы балалар баҡсаһында этнопедагогика сараларын һәм ысулдарын үҙ эсенә алған заманса логопедик модель һәм технологияларҙы эҙләү һәм тормошҡа ашырыу талап ителә.

Уҡытыусы-логопедтың телмәр кәмселектәре булған балалар менән эшләүҙә этнопедагогиканың ҙур мөмкинселектәрен файҙаланыу буйынса эше төрлө саралар менән тормошҡа ашырыла. Был балаларҙың мәҡәлдәр, әйтемдәр, йомаҡтар, халыҡ әкиәттәре менән танышыуы, күптән онотолған һүҙҙәрҙе һәм һүҙбәйләнештәрҙе ҡулланыу, халыҡ сәнғәте әҫәрҙәрен тыңлауҙан тора. Халыҡ педагогикаһы ысулдары һәм саралары ҡулланылған логопедия дәрестәре башлыса уйын формаһында үткәрелә.

Халыҡ уйындары ябай һәм йөкмәткеһе буйынса асыҡ, халыҡтың көнкүрешен, мәҙәниәтен, хеҙмәт эшмәкәрлеген һәм тирә-яҡ тәбиғәтен сағылдырған һүҙҙәрҙең, һүҙбәйләнештәрҙең һәм һүҙ конструкцияларының формаһын һәм мәғәнәһен практик үҙләштереүгә ярҙам итә. Дөйөм алғанда, этнопедагогик материалға нигеҙләнгән логопедик эшмәкәрлектең йөкмәткеһе, ысулдары һәм алымдары, беҙҙең ҡарашҡа, бер нисә коррекция мәсьәләһен хәл итеүгә йүнәлтелгән. Был бурыстар өндәрҙе дөрөҫ әйтеү, телмәрҙе ишетеү һәм фонематик ҡабул итеү күнекмәләрен формалаштырыу, телмәрҙең грамматик һәм семантик компоненттарын үҫтереү, телмәрҙең сағыулығын үҫтереүҙе күҙаллай.

Логопедия практикаһында тыуған яҡ, тыуған ер тураһында материалдарҙы ҡулланыу төп материалдан айырылғыһыҙ өлөш булып тора, шуға күрә уҡытыусы-логопедтың коррекция эше планына «Тыуған илем», «Беҙҙең тыуған ер», «Уйынсыҡтар», «Ғаилә», «Йылмиҙгелдәре», «Транспорт», «Һөнәрҙәр» кеүек темалар индерелгән. Бындай темик темаларҙы өйрәнеү сиктәрендә балалар көнкүреш, йолалар, ғөрөф-ғәҙәттәр, социаль темалар, тыуған яҡтың мөхите менән таныша. Балалар баҡсаһындағы «Башҡорт тирмәһе» музейында ойошторолған телмәрҙе үҫтереү буйынса белем биреү телмәр кәмселектәре булған балаларға ыңғай йоғонто яһай. Унда балалар халыҡ ғөрөф-ғәҙәттәре, йолалары менән генә танышып ҡалмай, үҙҙәренең һүҙлектәрен байыта, хәрәкәтле, төрлө уйындар аша ижади фекерләү, күҙаллау мөмкинселектәре үҫешә.

Төрлө этнопедагогик элементтар менән тулыландырылған дидактик уйындар һәм методик ҡулланмалар уҡытыусы-логопед алдында ҡуйылған коррекцион һәм тәрбиәүи мәсьәләләрҙе хәл итеүгә булышлыҡ итә. Шиғыр уҡыу, хикәйә, әңгәмә балаларҙың аң даирәһен киңәйтеүгә, тыуған ер тарихын танып белеүгә ҡыҙыҡһыныуын үҫтереүгә булышлыҡ итә. Бынан тыш, балаларҙың телмәр әүҙемлеге арта, һүҙлектәре киңәйә һәм байый. Былар барыһы ла балаларҙа илһөйәрлек тойғоларын формалаштырырға ярҙам итә: тыуған иле өсөн ғорурлыҡ, тыуған яҡҡа һөйөү, йолаларҙы хөрмәт итеү.

**Әҙәбиәт:**

1. Башҡортостан – тыуған илем: мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн Башҡортостан Республикаһын өйрәнеү программаһы / Ф.Ғ. Аҙнабаева, Г.Ш. Әлбәкова, Ә.Р. Буранбаева, К.Ф. Мортаева. Өфө: Китап, 2017. 129 б.

2. Гасанова Л.Н, Гасанова Р.Х. Словесное творчество старших дошкольников на основе национальной культуры башкирского народа. Уфа: ИРО РБ, 2012.

3. Нафиҡова З.Ғ. Уйнай-уйнай үҫәбеҙ. Өфө: БМУИ, 2007.

© Моталова А.Р., 2024

**УДК 372.881.1**

***Муллаголова Айгүзәл Рөстәм ҡыҙы,***
*студент, Өфө университеты,*
***Абдуллина Гөлфирә Риф ҡыҙы,***
*филол. фәнд. д-ры, проф., Өфө ҡ., БР*

**Мәктәптә эпистоляр стилде уҡытыу методикаһы**

Стилистика – ул телмәр стилдәре һәм уларҙа тел сараларын ҡулланыу законлылыҡтары тураһындағы фән. Башҡорт теленең бүлектәрен өйрәнгәндә тел сараларының төрлө функциональ стилдәрҙә ҡулланылыуын тикшереү стилистиканың төп бурысы һәм маҡсаты булып тора. «Стилистика» бүлеген уҡытыу буйынса шундайыраҡ принциптарҙы айырырға була: грамматика менән стилистиканың органик бәйләнеше принцибы; аналитик һәм синтетик сараларҙың үҙ-ара бәйләнеше принцибы; һөйләмдәр, текстар араһындағы стилистик үҙенсәлектәрҙе асыҡлау принцибы (йәнле һөйләү, фәнни, рәсми, публицистик, художестволы, эпистоляр стилдәре).

Мәктәптәрҙә стилистика бүлеген өйрәнгәндә киләһе күнегеү төрҙәрен ҡулланырға була:

1. Аналитик күнегеүҙәр: тел сараларын (һүҙҙәр, һөйләмдәр, текстар) сағыштырыу, анализлау. Аналитик күнегеүҙәр уҡыусыларҙы конструктив, ижади эштәргә әҙерләй һәм тел сараларын телмәрҙә дөрөҫ ҡулланырға ориентир бирә (мәҫәлән: әҙер текстарҙың стилен билдәләү, тектсарға стилистик анализ).

2. Аналитик-синтетик күнегеүҙәр: артыҡ һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе, абзацтарҙы алып ташлау; тел сараларын синоним варианттары менән алмаштырыу, кәрәкле элементтарҙы өҫтәү.

3. Ижади күнегеүҙәр: фантазия һәм фекерләү һәләттәрен талап иткән яҙыу-һыҙыу эштәре.

Башҡа бүлектәр кеүек үк, стилистика уҡыу программаһында ҙур һәм әһәмиәтле урын биләй. Урта кластарҙа стилистиканы махсус төплө өйрәнеү мәсьәләһе IX класта ҡаралһа ла, уны өйрәнеүгә нигеҙ тап V–VIII кластарҙа һалына: текстарҙың теге йәки был стилгә ҡарауы, уларҙың ҡулланылыу үҙенсәлектәре һ. б.

В.Ш. Псәнчин һәм Ю.В. Псәнчин төҙөгән башҡорт телен уҡыу программаһында ла V класта телмәр культураһы тураһындағы базик төшөнсәләр, исем, ҡылым бүлектәре ҡарала,

VI класта үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙ төркөмдәренең телмәрҙә ҡулланылыуына, матур әҙәбиәт стиленә иғтибар бүленә. Теге йәки был текстың йәнле һөйләү һәм китап стиленә ҡарағанлығын билдәләү һәм стилдәрҙе үҙ-ара айыра белеү һәләтен үҫтереү VII класта ҡаралһа, VIII класс уҡыусылары күркәм әҙәбиәт, публицистик, рәсми эш ҡағыҙҙары, фәнни стилдәрҙе билдәләүсе грамматик сараларҙы өйрәнә. IX класта иһә, әйтеп киткәнебеҙсә, стилдәр тураһында дөйөм төшөнсә бирелә. Уҡыусылар матур әҙәбиәт стиле, йәнле һөйләү стиле, публицистик стиль, рәсми эш ҡағыҙҙары стиле, хаттар (эпистоляр) стиле менән нығҡлап таныша.

Шуларҙың араһында уҡыусыларҙа ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырғаны – эпистоляр стиль (хаттар стиле). Хаттар стилен өйрәнеү тураһында һүҙ алып барғанда шуны әйтергә кәрәк: тел дәрестәрендә иң мөһим бурыстарҙың береһе – уҡыусыларҙың телмәрен үҫтереү. Телмәр үҫтереү эше уҡыусыларҙы, кәрәкле тел сараларын ҡулланып, үҙ фекерҙәрен телдән һәм яҙма рәүештә белдереү оҫталығына өйрәтеү маҡсатында үткәрелә. Телмәрҙе үҫтереү ысулдарының береһе – башҡорт теле дәрестәрендә эпистоляр стиль өҫтөндә эш алып барыу.

Уҡыусыларҙы дәрес башында уҡ темаға алып инеү өсөн, мәҫәлән, ребус сисеүҙән башларға була. Был ребустан улар үтеләсәк теманы үҙҙәре килтереп сығарырға тейеш. Дәрестә ребустарҙы сисеү стандарт булмаған фекерләү һәләтен үҫтерә: һүрәт-шифрлауҙы төрлөсә интерпретацияларға була, ә тиҙлеккә ребустарҙы сисеү мауыҡтырғыс уйынға әйләнергә мөмкин, даими күнекмәләр зирәклекте, етеҙлекте һәм фекерләү тиҙлеген үҫтерә, һүҙлек запасын арттыра. Ребустан һуң дәрестең теоретик өлөшөнә күсергә лә мөмкин.

Эпистоляр стиль менән эш барышында дәрестең мөһим элементы булып беренсе сиратта һүҙлек эше тора. Башҡорт теле дәрестәрендә һүҙлек эше уҡыу процесының мөһим бер элементы булып тора, сөнки уҡыусыларҙың һүҙлек запасын үҫтереү – уларҙың башҡорт телен үҙләштереүендә мотлаҡ шарт. Иң тәүҙә эпистоляр стиль менән бәйле терминдарҙың килеп сығышын аңлатып китеү кәрәк. Бында «эпистола», «эпистоляр», шулай уҡ «адресат» һәм «адресант» һүҙҙәрен индерергә кәрәк. «Адресат» һәм «адресант» һүҙҙәренә айырыуса иғтибарҙы бүлергә кәрәктер, сөнки был паронимдар уҡыусыларҙа һәр ваҡыт ҙур ауырлыҡтар тыуҙыра. Һүҙҙәрҙең мәғәнәһен уҡыусылар үҙ аллы эҙләп, дәфтәрҙәренә яҙып алырға тейеш. Был осраҡта улар терминдарҙың мәғәнәһен, яҙылышын иҫтәрендә яҡшыраҡ ҡалдыра.

Артабан уҡыусыларға бындай характерҙағы эш тәҡдим итергә була: хат өлгөһө булған ниндәй ҙә булһа әҫәр исемен атарға. Уҡыусылар был әҫәрҙә ниндәй герой кемгә хат яҙғанын, ул хат нимә тураһында булғанын ҡыҫҡаса әйтеп бирергә тейеш. Мәҫәлән, М. Кәримдең «Өс таған» әҫәрендә Ғабдулланың дауахананан өйгә яҙған хаты. Был эш төрө дәрестең темаһына иғтибарҙы туплауға булышлыҡ итә, шулай уҡ уҡыусыларҙың әҙәби тәжрибәһен барлай.

Эпистоляр стилдең мөһим бер үҙенсәлеге – уның композицион яҡтан дөрөҫ яҙылышы. Уҡыусыларға хаттың дөрөҫ яҙылыу структураһын өйрәткәндә әҙер хат өлгөләрен күрһәтергә була. Шулай уҡ уларҙың иғтибарын адресант һәм адресаттың исемдәренең яҙылыу формаһына, уларҙы кәрәкле килештә яҙа белеүгә йүнәлтергә кәрәк. Хаттың өлөштәре барлығын да онотмау кәрәк: башланғыс, төп өлөш, тамамланыш. Уларҙың эсендә, һис

шикһеҙ, сәләмләү һәм аҙаҡтан хушлашыу һүҙҙәре килергә тейеш. Бында шундай күнегеү тәҡдим итергә була: структур яҡтан дөрөҫ яҙылмаған хатты уҡыусылар, хаталарын табып, дөрөҫ итеп яҙырға тейеш.

Уҡыусыларға рәсми һәм рәсми булмаған (шәхси) хаттарҙың айырмаһын күрһәтеп китеү шарт. Бында иғтибарҙы хаттың лексик үҙенсәлектәренә йүнәлтергә кәрәк. Мәғлүм булыуынса, рәсми хаттар күбеһенсә шаблон һүҙҙәр менән яҙыла, экспрессивлыҡ бөтөнләй юҡ, йә иһә ул сағыу күрһәтелмәй. Ә шәхси хаттарҙа иһә, киреһенсә, экспрессив һүҙҙәр сағыу ҡулланыла, ябай телмәр, жаргонизмдар бихисап, исемдәрҙе кесерәйтеү формалары күҙәтелә. Ошо лексик үҙенсәлектәрҙе иҫтә тотоп, уҡыусылар ике хат төрөн айырырға өйрәнергә тейеш. Быны өсөн текст өҫтөндә эш алып барыу мотлаҡ: ҡайһы хатта рәсми хат һыҙаттары бар, ә ҡайһынығында шәхси хат һыҙаттары. Һәм һәр хатта шул лексик үҙенсәлектәрҙе күрһәтеп китергә кәрәк буласаҡ.

Хаттарҙы анализлау аҙағында уның үҙенсәлектәре тураһында дөйөм һығымта яһарға кәрәк. Бындай хат стиле үҙенсәлектәрен ентекле тикшереү анализын IX класта үткәреү яҡшыраҡ. VII класта ҡыҫҡа анализға ғына (хаттың яҙылыу стуктураһына) туҡталып китергә мөмкин.

Дәрестә теманы яҡшыраҡ үҙләштереү өсөн хаттар стиле буйынса терәк таблицалар, схемалар ҡулланырға була. Таблица, мәҫәлән, үҙендә хаттарҙың төрҙәре, шул төрҙәрҙең йөкмәткеһе һәм унда ҡулланылған тел саралары тураһындағы мәғлүмәтте сағылдырырға тейеш. Таблица менән эш ике төрҙә бирелергә мөмөкин. Беренсеһендә уҡыусылар алдына теманы өйрәнгән ваҡытта әҙер таблица һалына. Улар тема менән берлектә таблицаны үҙ аллы үҙләштерә бара, аҙаҡ инде, шуға таянып, хаттар стиле тураһында ҡыҫҡаса һөйләп бирә. Икенсе вариатив эштә уҡыусыларға тулы булмаған таблица бирелә. Теманы үткәндән һуң улар шул таблицаны үҙ аллы дөрөҫ итеп тултырырға тейеш. Эшләп бөткәндән һуң уҡытыусы менән берлектә тикшереп сығырға кәрәк. Был таблица эшен уҡыусыларға өйгә эш итеп тә биреп ҡайтарырға була. Өйҙә улар дәрестә үткәндәрҙе, хаттар стиленә ҡағылышлы ҡағиҙәләрҙе теркәп, үҙҙәренә аңлайышлы, уңайлы формала таблица эшләп килтерә ала.

Таблица менән эш итеү өсөн шундай ҡыҙыҡлы эш бирергә була: уҡыусыларға әҙер, ләкин дөрөҫ яҙылмаған хат бирелә. Улар шул хатты эпистоляр стилгә ярашлы итеп, ҡағиҙәләргә тап килтереп төҙәтергә тейеш. Бынан тыш ошо типтағы икенсе төр эште лә бирергә була. Бында инде эпистоляр стиль канонына ярашлы итеп дөрөҫ яҙылған рәсми хат бирелә. Уҡыусылар был хатты шәхси хатҡа әйләндереп яҙырға тейеш. Йә иһә, киреһенсә, шәхси хатты рәсми хатҡа әйләндерергә. Бындай эш төрө уҡыусыларҙың ижади һәләттәрен үҫтерә, шулай уҡ эпистоляр стиль канондарын яҡшыраҡ үҙләштереүгә булышлыҡ итә.

Уҡыу-уҡытыу системаһында уҡыусыларҙың бер нисә телдә һөйләү, яҙыу, аралашыу, уйлау һәләтен үҫтереү һәр ваҡыт беренсе планда ҡарала. Бигерәк тә, башҡорт һәм урыҫ телдәрен сағыштырма планда ҡарап уҡытыу кәрәк. Стилистика өлкәһендә был планда эште тәржемә йүнәлешенә борорға мөмкин. Уҡыусыларға бындай характерҙағы эш тәҡдим итергә була: урыҫ әҙәбиәтендәге әҫәрҙәрҙән ниндәй ҙә булһа геройҙың хат өлгөһөн башҡорт теленә тәржемә итеү. Мәҫәлән, А.С. Пушкиндың әҫәренән Онегиндың Татьянаға яҙылған хаттары.

Башҡорт телен уҡытыу системаһында ғына түгел, ғөмүмән, уҡытыу процесында ижади эш методын ҡулланып уҡытыу мотлаҡ һанала. Бындай эш төрө, үҙ сиратында, балаларҙы ҡыҙыҡһындырып ҡына ҡалмай, шулай уҡ ижади яҡтан үҫтерә, байыта, уларҙа яңынан-яңы һәләттәр асырға ярҙам итә, уҡыусыларҙа предметҡа ҡарата икеләтә һөйөү уята. Күпселек осраҡта уҡытыусылар бындай ижади эш төрҙәрен өйгә эш итеп биреп ҡайтара. Был осраҡта уҡыусыларға өйгә эш итеп киләһе типтағы ижади эш тәҡдим итергә була: уҡыусыларға ниндәй ҙә булһа әҫәр геройы булып хат яҙырға ҡушыла. Хаттың эстәлеге һайлап алынған әҫәрҙең йөкмәткеһенә, сюжетына тулыһынса тап килергә тейеш. Мәҫәлән, З. Биишеваның «Дуҫ булайыҡ» әҫәренән Юлдаш булып хат яҙырға. Миҫал өсөн Юлдаштың каникул мәлендә ауылда өләсәйҙәрендә ҡунаҡта ятҡан эпизодты алырға була (әҫәрҙән уҡыусы үҙенең күңеленә ятҡан эпизодты һайлай ала). Уҡыусы Юлдаш исеменән ҡалалағы ата-әсәһеннә хат яҙа. Бында инде фантазияға бирелергә була: уҡыусы ул Юлдаштың хатын нисек күҙ алдына килтерә, герой ниндәй хәлдәр тураһында һөйләйәсәк, ауылда нимәләр эшләгән, уны нимәләр борсой һ. б.

Башҡорт телен уҡытыу системаһында ғына түгел, ғөмүмән, уҡытыу процесында ижади эш методын ҡулланып уҡытыу мотлаҡ һанала. Бындай эш төрө, үҙ сиратында, балаларҙы ҡыҙыҡһындырып ҡына ҡалмай, шулай уҡ ижади яҡтан үҫтерә, байыта, уларҙа яңынан-яңы һәләттәр асырға ярҙам итә, уҡыусыларҙа предметҡа ҡарата икеләтә һөйөү уята. Ижади эш төрҙәренән мәҡәләлә туғаныңа хат йә көндәлек яҙыу, йә иһә ниндәйҙер әҫәр геройына хат яҙыу, ребус сисеү, хат өлгөләре булған әҫәрҙәрҙе атау кеүегерәк күнегеүҙәр ҡаралды.

Шулай итеп, хаттар стиле стилистика өлкәһендә айырылғыһыҙ бер урын алып тора. Был стилде башҡорт теле дәрестәрендә өйрәнеү өсөн ҡыҙыҡлы һәм файҙалы күнегеүҙәр, хат өлгөләре, көндәлектәр бихисап. Бары тик креативлыҡ һәм ижади ҡараш кәрәк.

**Әҙәбиәт**


1. Башҡорт теле: дәреслек. Өфө: СП БДПУ. 2000. 186–189 б-р.
2. Башҡорт теле: уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 9-сы класы өсөн уҡыу ҡулланмаһы. Тулыландырылған 7-се баҫма / В.Ш. Псәнчин, Ю.В. Псәнчин, А.И. Игелекова, Ф.Ю. Үтәбаева. Өфө: Китап, 2017. 216 б.
3. Даян Ҡ., Харис Ә. Стилистика. Өфө: Башгосиздат, 1941. 74 б.


© Муллағолова А.Р., Абдуллина Г.Р., 2024

**УДК 372.881.1**

***Ногоманова Гөлсиә Мәүлеткол ҡыҙы,***
*уҡытыусы-логопед, Баланы үҫтереү үҙәге –*
*«Айыуҡай» балалар баҡсаһы, Баймаҡ к., БР*

**Телмәр үҫтереүҙә бармаҡ уйындарының әһәмиәте**

Заманса балалар баҡсаһының белем биреү процесында, йәш быуынды тәрбиәләүҙә халыҡтың ауыҙ-тел ижады үрнәктәренә нигеҙләнгән бармаҡ уйындары йыш ҡулланыла. Донъяның төрлө халыҡтарында балаларҙы тәрбиәләү практикаһында бармаҡ уйындары осрай, улар күңелле шиғри формалар менән оҙатылып килә. Мәктәпкәсә белем биреү учреждениеларында педагогтар үҙ эшенә төрлө халыҡтарҙың бармаҡ күнегеүҙәрен индерә, улар балалар үҫешенә ҙур йоғонто яһай.

Бармаҡ уйындары ҙур тәрбиәүи потенциалға эйә, ул иҫ киткес универсаль, дидактик һәм үҫеш материалы булып тора. Билдәле педагог В.А. Сухомлинскийҙың: «Баланың аҡылы уның бармаҡ осонда урынлашҡан» тигән һүҙҙәре бар. Элекке осорҙа уҡ «ҡул – ул бөтә инструменттарҙың ҡоралы», тип иҫәпләгәндәр, тип яҙа Аристотель. Атап әйткәндә, Е.Ф. Черенкова билдәләүенсә, бармаҡ менән уйнау баланың мейеһен үҫтерә, телмәр үҫешен, ижади һәләттәрҙе, фантазияны стимуллаштыра.

Е.Ф. Черенкова был мәсьәләнең тарихын өйрәнеп, донъяның төрлө халыҡтарында бармаҡ уйындары күптән таралған булыуын асыҡлай. Ҡытайҙа таш һәм металл шарҙар менән күнегеүҙәр таралған. Улар менән даими шөғөлләнеү хәтерҙе, йөрәк-ҡан тамырҙарын һәм аш һеңдереү системаларының эшмәкәрлеген яҡшырта, эмоциональ көсөргәнешлекте бөтөрә, хәрәкәттәрҙе координациялауҙы, ҡулдарҙың көсөн һәм оҫталығын үҫтерә, йәшәү тонусын һаҡлай. Ә Японияла грек сәтләүеге менән ҡул һәм бармаҡ өсөн күнегеүҙәр киң ҡулланыла.

Бөйөк рус ғалимы И.П. Павлов был мәсьәләгә ҙур асыҡлыҡ индергән. Ул тактиль тойғоларға ҙур әһәмиәт бирә, сөнки улар телмәр үҙәгенә, уның хәрәкәт итеү өлөшөнә һәм уның барлыҡҡа килеүенә булышлыҡ итеүсе өҫтәмә энергияға инә. Аҡыл ҡатламы камилыраҡ булған һайын, телмәр ҙә, тимәк, фекерләү ҙә камилыраҡ була.

Ҡул һәм телмәр функцияһы параллель рәүештә үҫешә. Әлбиттә, был эш балалар менән эшләгәндә лә ҡулланылырға тейеш. Ваҡ моториканың үҫеш кимәле һәм ҡул хәрәкәтен координациялау – интеллектуаль үҫеш күрһәткестәренең береһе.

Ғәҙәттә, ваҡ моторикаһы юғары кимәлдә булған бала логик фекер йөрөтә белә, уның иғтибары һәм хәтере, бәйләнешле телмәре ярайһы уҡ яҡшы үҫешкән була.

Бармаҡ уйындары бармаҡ пластикаһына ыңғай йоғонто яһай, ҡулдар тыңлаусан, хәрәкәтсән булып китә, был балаға һүрәт төшөрөүҙә кәрәкле ваҡ хәрәкәттәрҙе, яҙыу-һыҙыу эштәрен башҡарырға ярҙам итә. Бармаҡ уйындары телмәр үҫешенә генә йоғонто яһап ҡалмай, баланың иғтибарын йәлеп итә, кәйефен көйләй, тынысландыра.

Балалар фольклоры бик яҡшы телмәр материалы булып тора, уны ойошторолған белем биреү эшмәкәрлегендә лә, балалар һәм тәрбиәселәрҙең берлектәге эшмәкәрлегендә лә, шулай уҡ режим мәлдәрендә лә ҡулланырға мөмкин.

Бармаҡ хәрәкәттәренең телмәр менән тығыҙ бәйле булыуы тураһында күптән билдәле. Кешеләр быны элекке ваҡыттан уҡ аңлаған. Бәләкәй, әле һөйләшмәгән балалар менән уйнағанда, йыр һүҙҙәрен, уйындарҙы баланың бармаҡ хәрәкәттәре менән оҙата килгәндәр. «Бутыр-бутыр бутҡа бешә», «Сәпәкәй-сәпәкәй» һәм башҡа билдәле уйындар элек-электән барлыҡҡа килгән. Мәҫәлән:

Һәр бармаҡты бөгөп,
Баш бармаҡ бау ишә,
Имән бармаҡ имән киҫә,
Урта бармаҡ утын яра,
Атһыҙ бармаҡ ат ҡыуа,
Сәтәкәй бармаҡ сәй эсә.
***
Ҡарға килгән – ҡаҙан аҫҡан,
Сыпсыҡ килгән – бәрәңге әрсегән,
Торна килгән – ҡамыр баҫҡан.
Боғор-боғор аш бешкән.
Сыйырсыҡ килгән – аш бушатҡан,
Төйлөгән килгән – бүлгән,
Быға (баш бармаҡҡа) биргән,
Быға (имән бармаҡҡа) биргән,
Быға (урта бармаҡҡа) биргән,
Быға (атһыҙ бармаҡҡа) биргән,
Ә быға (сәтәкәй бармаҡҡа) бирмәй ҡалдырған.
Кетер, кетер, кетер,
Ҡаҙан төбөн кимер...
***
Бер тинек – бөрмәк,
Ике тинек – икмәк,
Өс тинек – өсмәк,
Дүрт тинек – дүртмәк,
Биш тинек – бишмәк,
Алты тинек – алмаҡ,
Ете тинек – етмәк,
Һигеҙ тинек – һигеҙмәк,
Туғыҙ тинек – туғыҙмаҡ,
Ун тинек – уймаҡ.

Ул уймаҡты ҡаҙға бирҙем. Ҡаҙ миңә йомортҡа бирҙе. Ул йомортҡаны утҡа һалдым. Ул шатыр-шотор яна ҡалды. Үҙем киттем Әтнәгә. Ҡаҡтым-һуҡтым, биш бармағым йәнселде. Кете-кете-кете...

Балаларҙың фольклор әҫәрҙәре менән танышыуы уларҙың телмәрен үҫтереүгә, һүҙлек запасын тулыландырыуға һәм байытыуға булышлыҡ итә, тойғоларын байыта, тирә-яҡ донъяға һәм үҙенә ҡарата мөнәсәбәтен формалаштыра, ыңғай эмоциялар менән тултыра, һәм шулай итеп мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың һәр яҡлап үҫешендә баһалап бөткөһөҙ роль уйнай.

Бөгөн белгестәр иҫке уйындарҙы тергеҙә, яңыларын уйлап таба. Нәшриәтселәр бармаҡ менән уйнау өсөн күп кенә әсбаптар баҫтыра. Популяр, махсус йә фәнни журналдарҙа уларҙың файҙаһы тураһында һөйләүсе мәҡәләләр йышыраҡ донъя күрә.

Бармаҡ уйындарын көн һайын ҡабатлап торғанда ғына яҡшы һөҙөмтә бирә. Мәктәпкәсә йәштәге баланың ҡулдары хәрәкәтсән һәм һығылмалыраҡ була. Был киләсәктә яҙыу күнекмәләрен уңышлы үҙләштереүгә, бөтә психик процестарҙы, шул иҫәптән иғтибарҙы һәм коммуникатив һәләттәрҙе үҫтереүгә булышлыҡ итә.

Әминә Раҡаеваның «Бармаҡ уйындары» тип аталған китабында ла балаларҙың бармаҡ хәрәкәтен үҫтереү өсөн уйындар бирелә. Тәҡдим ителгән уйындар баланың бармаҡ мускулдарын нығытыуға, иғтибарын, хәтерен, фекерләү ҡеүәһен үҫтереүгә булышлыҡ итеү менән бер рәттән телмәр үҫешенә лә йоғонто яһай. Тәрбиәүи белем биреү процесында беҙҙең балалар баҡсаһында был уйындар әүҙем ҡулланыла.

Һуңғы ваҡытта бармаҡ уйындарының популярлығы һиҙелерлек артты. Логопед булараҡ эшемдә бармаҡ уйындарын көн дә ҡулланырға тура килә. Балалар бармаҡ гимнастикаһын һәм хәрәкәтле телмәрҙе мауығып башҡара. Был күнегеүҙәр хәтерҙе үҫтерергә ярҙам итә, бала шиғырҙарҙы яҡшыраҡ хәтерләй, сөнки телмәрҙән тыш, ҡул моторикаһы, күреү хәтере лә әүҙемләшә.

Баланы ҡыҙыҡһындырыу һәм уға яңы мәғлүмәтте үҙләштереүгә ярҙам итеү өсөн, уҡыуҙы уйынға әйләндерергә кәрәк. Ябай хәрәкәттәр һәм шиғри оҙатыу менән башҡарылған бармаҡ гимнастикаһы балаларға ныҡ оҡшай. Бармаҡ уйындарын балалар менән эшләгәндә ҡулланып, уларҙың балаларға айырыуса оҡшауын күреп, үҙемдең эш тәжрибәмдә бер-нисә бармаҡ уйыны уйлап сығарырға булдым.

Бармаҡ менән уйнауҙың түбәндәге төрҙәре бар:

– предметтар менән бармаҡ уйындары;
– шиғри оҙатыу менән әүҙем бармаҡ уйындары;
– манипуляция бармаҡ уйындары;
– әкиәттәр нигеҙендә бармаҡ уйындары;
– үҙ-үҙенә массаж элементтары меән бармаҡ уйындары.

Предметтар ярҙамында шиғри оҙатыу менән төҙөлгән бармаҡ уйындарымдан бер нисә миҫал:

**«Ҡамыр баҫабыҙ»** *(бармаҡтар өсөн ҡоро бассейн)*

*Ситтәре бик бейек булмаған иркен һауытҡа борсаҡ һалып, камыр баҫҡан кеүек итеп ҡул менән хәрәкәт яһап һамаҡлайбыҙ*:

Беҙ ҡамыр баҫабыҙ,
Беҙ ҡамыр баҫабыҙ.

Бер нисә ҡат баҫһаҡ та,

Һаман төйөр табабыҙ.

**«Саңғы»** *(пластмасс шешә ҡапҡастар менән күнегеү)*

*Пластик шешәнең ҡапҡасын өҫ яғы менән әйләндереп өҫтәлгә һалабыҙ. Был – «саңғы». Һуҡ һәм урта бармаҡтар менән аяҡ кеүек итеп ҡапҡастарға баҫабыҙ, саңғыла хәрәкәт иткән кеүек һәр ижектең баҫымы һайын аҙым яһайбыҙ. Ике ҡулдың бармаҡтары менән бер юлы хәрәкәт итеп эшләргә лә мөмкин.*

Бер, ике, бер, ике,

Беҙ саңғыла барабыҙ,

Саф һауала уйнайбыҙ,

Тауҙан аҫҡа шыуабыҙ.

**«Шаян бесәй»** *(кер ҡыҫтырғысы менән күнегеү)*

*Кер ҡыҫтырғысы (тикшереп ҡарағыҙ, артыҡ ҡаты ҡыҫтырмағаны булһын) менән сиратлап һәр бармаҡты ҡыҫтырып барабыҙ (һуҡ бармаҡтан сәтәкәйгә табан һәм кире сәтәкәй бармаҡтан һуҡ бармаҡҡа ҡарай) һәм шиғыр юлдарын һамаҡлайбыҙ:*

Бик ныҡ тешләй шаян бесәй,

Бесәй әле бик кескәй.

Бармағымды сысҡан, ти,

Хәҙер уны тотам, ти.

**«Ҡәләм»** *(алты ҡырлы ҡәләм менән күнегеү)*

*Алты ҡырлы ҡәләмде бер уҫка һалабыҙ, икенсе усыбыҙ менән уны ҡаплайбыҙ, бармаҡ осонан алып уҫка тиклем һәм киреһенсә тәгәрәтәбеҙ. Башта яйыраҡ, аҙаҡ тиҙерәк эшләйбеҙ. Шиғыр юлын һамаҡларға онотмайбыҙ.*

Бар матур бер ҡәләмем,

Усымда мин йөрөтәм.

Матур яҙыу өлгөһөнә

Ҡулымды мин өйрәтәм.

**«Золушка»** *(ҡыҙҙар өсөн борсаҡ һәм фасоль (ҡара бойҙа һәм дөгө) менән күнегеү)*

*Ҙурыраҡ һауытҡа борсаҡ менән фасолды бутап һалығыҙ. Ҡыҙығыҙға бер аҙ «Золушка» булып уйнап алырға, борсаҡты бер һауытҡа, фасолде икенсеһенә айырып һалырға тәҡдим итегеҙ.*

Ярҙамсы булып үҫәм,

Өсәйемә булышам,

Борсаҡ менән фасолде

Айырып алып бөтәм.

**«Фиксики»** *(малайҙар өсөн болт һәм гайка менән күнегеү)*

*Улығыҙға кем уҙарҙан ярышырға, болт менән гайкаларҙы ҙур һәм бәләкәйгә айырып һалырға тәҡдим итегеҙ.*

Атай әйтә – ярышайыҡ,

Болт-гайканы айырайыҡ,

Кем беренсе тамамлай,

Шул йәнһүрәтте һайлай.

Шулай итеп, халыҡ ауыҙ-тел өлгөләренә, күренекле педагогтарҙың, аҡыл эйәләренең, философтарҙың тәжрибәһенә таянып, мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың төрлө һәләттәрен үҫтереү өсөн бармаҡ уйындары, күнекмәләре ҙур потенциалға эйә тигән һығымта яһарға мөмкин. Былдай уйындар күп осраҡта матди сығымдар талап итмәй, уларҙы төрлө урында һәм теләгән ваҡытта уйнарға мөмкин.

**Әҙәбиәт:**


1. Башҡортостан – тыуған илем: мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн Башҡортостан Республикаһын өйрәнеү программаһы / Ф.Ғ. Аҙнабаева, Г.Ш. Әлбәкова, Ә.Р. Буранбаева, К.Ф. Мортаева. Өфө: Китап, 2017. 129 б.

2. Ғәләүетдинова И.Ғ. Балалар фольклоры: бала саҡ – уйнап-көлөп үҫер саҡ. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1994. 160 б.

3. Раҡаева Ә. С. Бармаҡ уйындары. Өфө: Китап, 1998. 44 б.

4. http://doshkolnik.ru/razvitie-rechi/12021.html.

5. https://pefti-zhemchuzhinka.educrimea.ru/articles/post/1387528.

6. https://skandakova-ds152kar.educhel.ru/articles/post/1040776.


© Ноғоманова Г.М., 2024

**УДК 81-2**

***Нурыева Огулсапар Атаевна***

*ведущий научный сотрудник, ИЯЛНР им. Махтумкули*

*АН Туркменистана, г. Ашхабад, Туркменистан*

## Лексические единицы, встречающиеся в дестане Нурмухаммеда Андалиба «Лейли и Меджнун» и пересечение их в диалектах туркменского языка

Дестаны являются ценными письменными источниками в изучении туркменского языка и литературы. Они выступают и как бесценный материал при исследовании пути развития истории туркменского языка. В авторских и анонимных дестанах сконцентрированы устаревшие лексические единицы, сохранившиеся до наших дней со времен средневековья. Они испокон веков находятся в языковом обороте. В ходе исследования нами замечено, что лексические единицы дестанов перекрещиваются с лексическими единицами диалектов туркменского языка. В этом можно убедиться при анализе языка дестана «Лейли и Меджнун» поэта средневековья Нурмухаммеда Андалиба (XVIII в.). В этом дестане встречается слово *kent ‘город, село, крепость’*. Например:

Bilmezlikden aldym rakyp pendini, // Weýran etdim ýaryň abat kendini ‘В неведении принял наставление врага, // Разрушил крепкий город любимой’[4: 87].

Слово kent в языке классической литературы обозначает село, город. Слово kent фигурирует и в диалектах туркменского языка и имеет значение ‘оазис, долина, село’. Например:

Ma:llaram şu vaxd-a çölde, güýzrä:k *kent(*e) i:ndi:ris-dä ‘Скот сейчас на пастбище, осенью погоним в *село’* [2: 110].

Лексическая единица *kent* персидского происхождения. Об этом говорится, что «...в узбекском языке согдийское по происхождению нарицательное название для населенных пунктов *kent* уже почти вышло из употребления, но относительно хорошо сохранилось в составе топонимов... » и отмечается, что все термины, обозначающие город и деревню, заимствованные. Слово *kent* отождествляется со словом *ýurt* ‘селение, село, деревня, аул’ [1: 438, 440]. *Kent* – название населенного пункта, где жили огузы.

Слово *kent*, хотя не употребимо в современном туркменском языке, оно присуще поэтическому языку. А также лексическую единицу *kent* можно встретить как наименование современного объекта. Например, фешенебельный отель «Огузкент», как название населенного пункта, где живут огузы.

Слово *kişi* на протяжении исторического периода претерпело лингвистические преобразования. Например, в языке дестана «Лейли и Меджнун»:

Müjgänleri jandan öter gözlese, Tapmas *kişi* istäp any yzlasa ‘При взгляде ресницы пройдут сквозь душу, // Не найдет того, кого ищет’ [4: 10]. Слово *kişi* встречается в языке классической литературы в смысле ‘человек, кто-то’. Например:

Hiç *kişi* men dek seniň yşkyňda haýran bolmasyn ‘Пусть *никто* не удивляется, как я, на пути любви к тебе’ [7: 85].

Употребление слова *kişi* в смысле ‘человек, кто-то’ сохранилось и в современном туркменском языке [10: 385]. Но функционирование слова *kişi* в значении ‘женщина’ встречается только в диалектах туркменского языка. Например: O(l) ğeýeten kişi biʒiň *kişi* ‘Та идущая *женщина* – моя *женщина* (жена)’ [2: 113].

Отсюда можно сделать вывод, что в ходе исторического развития языка слово *kişi* функционировало в языке в значении ‘женщина, человек’ и такое употребление сохранилось в диалектах туркменского языка. А в настоящее время в современном туркменском языке слово *kişi* имеет значение ‘человек, кто-то’.

В языке дестана встречается арабо-персидский элемент *zynha:r* ‘осторожно, опасливо, осмотрительно’. Например: *Zynha:r*, bu salamymny ol ýarymga tiz ýetgir ‘Осторожно, быстрее передай мой привет моей возлюбленной’[4: 51].

Слово *zynha:r* широко распространено в языке классической литературы. Например:

Hasyl olmaz nesneýe pikrile *zynha:r* isteme ‘Без какой-либо разумности не будет осмотрительности’[7: 193].

Слово *zynha:r,* во-первых, обозначает ‘*осторожность, осмотрительность, осведомленность*, во-вторых, *защищенность, оборонительность’*, в-третьих, имеет значение ‘*невредимость’* [5: 149].

В вышеприведенном примере слово *zynha:r* имеет смысл ’беречься, остерегаться’.

В современном туркменском языке слово *zynha:r* не употребляется. Если в историческом периоде развития тюркских языков, в том числе и в туркменском, слово *zynha:r* активно употреблялось, то на современном этапе оно вышло из обихода, но сохранилось в диалектах в виде лексической единицы в составе глагола *zynha:rlamak,* которая имеет значение «строго велеть». Например:

Ağalar(y)na *zinha:rla:p* kuýuğa tüşti ‘Строго наказав старщим братьям, спустился в колодец’ [2: 91].

В языке дестана «Лейли и Меджнун» встречается слово *lahza.* К примеру,

Leýli zowkun artdyr maňa! // Her *lahza,* her dem, her saba ‘Лейли, прибавь страсть ко мне! // С каждым *мигом,* с каждым дыханием, каждое раннее утро’ [4: 36].

Лексическая единица *lahza* имеет значение *одна минута, немного времени, одно дыхание, один миг* [5: 194].

В языке дестана слово *lahza* имеет значение ‘немного времени’. В современном туркменском языке эта лексическая единица не употребляется, а лишь встречается в языке классической литературы. Например:

Eýlesem her *lahza* ýüz müň zowk-u hal ‘Если бы каждый *миг* проявлял бы сто тысяч желаний’ [3: 40].

Gamyňda bolmadym bir *lahza* azat ‘В беспокойстве о тебе ни *минуты* не был свободным’ [7: 191].

В диалектах туркменского языка оно имеет значение ‘немного ’. Например: Bir *laxca* oýnap duruňуз ‘*Немного* поиграйте’ [2: 121].

В языке исследуюмого дестана употребляется слово *paý* ‘нога’.

Hyýaly zülpi Leýli birle aklym *paýy*-best eýläp ‘С призрачным локоном Лейли разум мой связан’ [4: 57].

В данном примере слово *paý* употребляется в сочетании *paýy*-best, имеющее значение ’привязываться, связываться’.

В современном туркменском языке вместо слова *paý* фигурирует лексическая единица *aýak* ‘нога’. В связи с историческим развитием лексики языка слово *paý* перестало функционировать, а вместо него стала активной лексическая единица *aýak.* Активность слова *paý* проявляется в диалектной лексике. В диалектной лексике туркменского языка встречается такое понятие, как *paýapyl,* вобравшее в себя элемент *paý.* Слово *paýapyl* означает балку для опоры юрты, чтобы она не рухнула во время ветра. Например: Ýel turdy gar(a) öýö *paýapyl* li:rediler ‘Начался ветер, к юрте подпёрли балку’ [2: 144]. В диалектах туркменского языка слово *paýapyl* имеет еще значение моста. Элемент *paý* встречается также в составе слов *paýpişek* ‘костыль’, *paýpyk* ‘валенки’.

В языке анализируемого дестана имеет место слово *çoh* ‘много’. Например:

Salam eý, ýer götermez *çoh* günähi ‘Эй, привет, земля не будет держать *много* грехов’ [4: 90].

Лексическая единица *çoh* активна в языке классической литературы. Например:

Gel, eý dilber, meni gör kim, nije *çoh* ýanaram sensiz ‘Эй, любимая, посмотри как *долго*

буду я гореть (в огне любви) без тебя’[7: 129].

Рассматриваемое слово в современном туркменском языке не функционирует. Оно употребимо в других тюркских языках (например в азербайжданском, турецком) в значении ‘много’. В диалектах туркменского языка это слово функционирует в смысле ’много, раньше’. Например: Maniý *çoh* ça:ý nasarim ýoxde. Biз çoxdan bir ýerdä ‘Я *много* чаю не хочу. Мы изначально в одном и том же месте’ [2: 199].

Если в прошлом слово *çoh* употреблялось в литературном языке, то на современном этапе развития языка оно сохранилось в лексическом составе диалектов. Это дает возможность прийти к выводу, что диалекты, являясь неотъемлемой частью нашего языка, богаты языковыми средствами. В них хорошо сохранились устаревшие лексические единицы. Слово *çoh* на современном этапе функционирует в высоком стиле. Например: *Çoh* garaşdyň, aç gözüňni, Ajap eýýam gelendir ‘*Много* ждал (ты), открой глаза, пришла прекрасная пора’[9: 67].

Слово *leb* ‘губа’ употребляется в лексике дестана «Лейли и Меджнун». В высокочастотности употребления этого слова в прошлых веках можно убедиться, рассматривая язык других письменных памятников. Например: Sözlese şekeri akar, // *Leblerinden* şipa bilen ‘Если молвит, сладость с исцеленьем потечет с ее *губ*’ [4: 9].

Teşne *leb* olma Nowaýy... ‘Навои, не будь жаждущим *губ...* ’ [8: 5].

Eý şeker *leb*, ýary-şirin, ruzgärim, merheba! ‘Эй, сладостные *губы*, сладостна возлюбленная, година, добро пожаловать!’ [7: 88].

Слово *leb*, являясь заимствованной лексической единицей, не употребимо в современном туркменском языке. Оно встречается в диалектах туркменского языка в значении *губа* и в смысле *берег, побережье; обочина*. Например:

Derýa:(ny)ň bäri *levinde* ağaç ýaman köpti ‘На этом *берегу* реки было очень много деревьев’ [2: 121].

Значение *берег, побережье; обочина* слова *leb* на современном этапе вошло в состав топонимического наименования. Например, топоним *Lebap* (наименование одного из велаятов (области) Туркмении) состоит из частей *leb* ‘*берег, побережье*’ и *ab* ‘вода’. Дословно: *побережье воды*.

В языке дестана «Лейли и Меджнун» можно встретить слово *çarh* ‘колесо’. Например:

*Çarhy*-pelek myradyňy bermedi ‘*Колесо фортуны* не дало достигнуть цели’ [4: 26].

В языке классической литературы частотность употребления слова *çarh* высока. Например:

*Çarhy*-pelek duzak gurmuş ýolunda ‘*Колесо фортуны* строит западню на пути’ [6: 451].

*Çarh* haçan çar paralandy, men, aňa *çarh* olmadym ‘Когда *колесо* разлетелось на четыре части, я не стал ему *колесом*’[7: 188].

В приведенных примерах слово *çarh* употребляется в смысле *‘судьба, случай, предназначение’*. В языке классической литуратуры лексическая единица *çarh* функционирует в значениях *‘колесо, вращение; небо, судьба, мир’*. В говоре ставропольских туркмен значение слова *çarh* расширилось. В данном говоре это слово помимо значений

*‘колесо, вращение; небо, судьба, мир’*, употребляется в смысле *‘тело’*. Например: *Çarhym* a:gyrdy ‘*Тело* разболелось’[2: 195].

В современном туркменском языке сохранилось значение *‘колесо, вращение’* слова *çarh.* Во-первых, это слово имеет значение *‘вращающееся колесо’*, во-вторых, *‘прядильный станок’*, в-третьих, *‘колесо, вращающееся вокруг своей оси’*, в-четвертых, *‘станок, с вращающим колесом для заточки ножа, топора’* [10: 740].

Слово *çarh* имеет место и в устойчивых сочетаниях. Например, фразеологизм *çarh urmak ‘быстро вращаться вокруг себя’*. Переносное значение: *‘метаться туда-сюда’*. Также в современном туркменском языке слово *çarh* употребляется в переносном значении, обозначая *‘судьбу, предначертание, рок’*.

В исследуемом нами языке дестана встречается слово *aş* ‘еда’. Например:

*Aş*-nan bilen işi bolmady ‘(Он) не интересовался едой’ [4:17]. Лексическая единица *aş* в языке дестана обозначает *‘пищу, обед’*. В современном туркменском языке это слово употребляется в значении *‘пища’* и в значении *‘лапши’*, готовившейся из теста вручную путем нарезания тонких полосок. Помимо этого в диалектах туркменского языка лексическая единица *aş* обозначает *‘плов’*. Например:

Desla:p ço:rwa berip, osom *aş* bera: sak-da boljakmyşdyk ‘Будет правильно, если сперва дадим суп, а затем *плов*’ [2: 28].

Слово *aş* как *еда* употребляется в языке классической литуратуры. Например: Gelen *aş* diýp gelmez, turşutmagyl ýüz ‘Не делай кислое выражение лица, пришедший не пришел за *едой*’ [6: 485].

Içerem gam metbuhundan (aşhana, aşpezhana) dürli-dürli *aşlar* ‘Выпью на поварне печали разную еду’ [7: 38].

В языке дестана Андалиба «Лейли и Меджнун» наличествуют лексические единицы, характерные языку классической литературы. И поныне, что очень отрадно отметить, эти лексические единицы употребляются в диалектах туркменского языка. Этот факт свидетельствует о том, что туркменский язык прошел определенный исторический путь развития, и язык дестанов, диалектов является богатым источником для изучения его истории, так как они пронесли через столетия до наших дней ценные языковые единицы, одни из которых вышли из повседневного обихода, другие продолжают активно употребляться в языке на современном этапе.

**Литература:**

1. Сравнительно-историческая грамматика тюркских языков. Пратюркский язык-основа. Картина мира пратюркского этноса по данным языка. М.: Наука, 2006. 908 с.

2. Arazkulyýew S., Atanyýazow S., Berdiýew R., Saparowa G**.** Türkmen diliniň gysgaça dialektologik sözlügi. Aşgabat: Ylym 1977. 216 s.

3. Baýram han**.** Türkmen diwany. Aşgabat: Ylym. 2000. 64 s.

4. Dessanlar. Aşgabat: Magaryf, 1982. 248 s.

5. Meredow A., Ahally S. Türkmen klassyky edebiýatynyň sözlügi. Aşgabat: Türkmenistan,

1988. 512 s.

6. Magtymguly. Saýlanan goşgular. Aşgabat: Türkmenistan, 1976. 512 s.

7. Nesimi. Şygyrlar. Aşgabat: Türkmenistan, 1972. 288 s.

8. Nowaýy. Saýlanan eserler. Aşgabat: Magaryf, 1948. 201 s.

9. Şagulyýewa G. Ak gülleriň–ak ýolum. Saýlanan eserler. Aşgabat:Türkmen döwlet neşirýat gullugy, 2010. 280 s.

10. Türkmen diliniň sözlügi. Aşgabat: Türkmenistan SSR Ylymlar akademiýasynyň neşirýaty, 1962. 866 s.

© Нурыева О.А., 2024

**УДК 37.035.6**

***Рәхмәтуллина Вәлимә Вәкил ҡыҙы,***
*тәрбиәсе, МАББУ Баланы үҫтереү үҙәге –*
*«Айыуҡай» балалар баҡсаһы, Баймаҡ к., БР.*

**Балаларҙы шәхес булараҡ үҫтереүҙә әкиәттәрҙең роле**

Тәрбиәле, мәҙәниәтле, ижади ҡарашлы бала – өмөтлө киләсәк ул. Шуның өсөн дә балалар баҡсаһында юғары әхлаҡлы, һәләтле шәхес тәрбиәләү мөҡәддәс бурыс һынала.

Бөгөнгө көндә баланың һәләтен күреү һәм үҫтереү, әүҙемлеген арттырыу, берҙәмлек тойғоһо тәрбиәләү өсөн ниндәй мөмкинлектәрҙе файҙаныларға кәрәк? Ғөмүмән, мәктәпкәсә белем биреү баҡсаларында ижади шәхестәрҙе нисек үҫтерергә?

Баланы шәхес булараҡ үҫтереүҙә халыҡ аҡылына һәм тәжрибәһенә таяныу мөһим. Сөнки һәр кеше үҙ халҡының рухи байлығына эйә булғанда, тәрбиәле, әҙәпле, мәҙәниәтле була ала. Шуға күрә, үҙ эш тәжрибәмдә халҡыбыҙҙың тормош фәлсәфәһе сағылған әкиәттәр аша һәр балала айырым шәхесте күрә һәм үҫтерә белергә, туған телгә һөйөү-хөрмәт хисе тәрбиәләргә ынтылам.

Әкиәттәр – башҡорт халҡының милли үҙаңын күрһәтеүсе рухи ҡомартҡы. Ысынлап та, әкиәт, халыҡ ижадының бер төрө булараҡ, матурлыҡ донъяһына саҡыра, геройҙар яҙмышын өйрәнеү аша балаларҙы аҡты ҡаранан, яҡшылыҡты яуызлыҡтан айырырға өйрәтә, балаларҙың рухи үҫешенә дөрөҫ йүнәлеш бирә.

Әкиәттәр өйрәнгәндә түбәндәге эш төрҙөрен алыу отошло.

**Һорау-яуап.** Әкиәт йөкмәткеһе менән танышҡас, йәнле аралашыу өсөн шарттар тыуҙырыу: был өҙөктә һүҙ кемдәр тураһында бара? Был ваҡиға ҡайҙа булған? Һиңә теге йәки был герой оҡшаймы? Был алым баланың фекерләүен, коммуникатив мөмкинлектәрен асырға ярҙам итә.

**Ижади эш.** Әкиәт йөкмәткеһе буйынса темаға ярашлы ижади эштәр тәкдим итергә була: һүрәт төшөрөү, пластилиндан әүәләү. Был эштәр баланың ижади һәләттәрен камиллаштырыуға килтерә.

**Ролләп уйнау.** Был алым ҡатмарлы ла, мауыҡтырғыс та. Баланы һөйләргә өйрәткәндә тейешле интонация, дөрөҫ пауза яһарға өйрәтеү бик мөһим. Тасуири һөйләргә өйрәтеү

маҡсатында тел шымартыу, ирендәргә гимнастика, тын алыу күнегеүҙәрен үткәреү отошло. Ролләп уйнау алымын ҡулланғанда баланың тойғоһо, фекере, аңы активлаша.

**Әкиәтте сәхнәләштереү**. Сәхнәлә уйнау, хәл-ваҡиғаны, сюжетты театрлаштырыу аша балаларҙың үҙ-ара аралашыуын һәм бер-береһенә йоғонто яһауын тәьмин итергә мөмкин. Шулай уҡ был алым тәрбиәүи һәм үҫтереүсе бурыстарҙы күҙ уңында тота. Әкиәттәрҙе сәхнәләштереүҙә ҡатнашҡан балалар кешеләр араһында үҙен матур, дөрөҫ тоторға, оялсанлыҡты еңергә, баҙап ҡалмаҫҡа, публика алдында сығыш яһарға өйрәнә.

**Әкиәттәге өҙөктәрҙе һөйләтеү.** Был алым баланың хәтерен нығыта, һүҙлек байлығын арттыра, һөйләү һәм аралашыу телмәрен үҫтерә.

Ғөмүмән алғанда, әкиәттәрҙең роле баһалап бөткөһөҙ. Әкиәттәр өлгөһөндә тәрбиәләү баланың һәр яҡлап үҫеше өсөн киң мөмкинлектәр булдыра. Ижади атмосфера тыуҙырыуға булышлыҡ итә. Әкиәттәр рухи ҡиммәттәребеҙҙе һаҡларға ярҙам итә, бала күңеленә изгелек орлоҡтары сәсә, киләсәк тормошҡа дөрөҫ ынтылыш бирә. Күреүебеҙсә, әкиәттәр нигеҙендә шәхес тәрбиәләүҙең ныҡлы нигеҙҙәре бар.

Ата-әсәләрҙе белем-тәрбиә биреү эшенә йәлеп итеү – мәктәпкәсә белем биреү ойошмаһының төп бурыстарының береһе булып тороуын да күҙ уңында тотоу мөһим. Баймаҡ ҡалаһының «Айыукай» балалар баҡсаһында ата-әсәләр менән тығыҙ бәйләнеш булдырылған. Балаларҙың ата-әсәләре беҙҙең менән бер тулҡында тибрәлә. Был дөйөм эшебеҙ – балаларҙың белем-тәрбиәһе өсөн мөһим икәнен яҡшы аңлайҙар, шуға ла һәр башланғыстарыбыҙҙы күтәреп сығырға әҙер торалар. Ата-әсәләр менән «Ҡыҙыҡлы әкиәттәр», «Бала тәрбиәләүҙә әкиәттәрҙең роле» тигән темаларға һөйләшеүҙәр уҙҙы. Әсәйҙәр өҫтәл, бармаҡ театры өсөн ҡурсаҡтар тегеүҙә ярҙам иттеләр, атайҙар декорация эшләнеләр. Шулай уҡ ата-әсәләр балалар менән бергә «Өләсәйем һандығы», «Әкиәтле һандыҡ» конкурстарында әүҙем ҡатнашалар, еңеүҙәр яулайҙар.

Йомғаҡлап әйткәндә, балаларҙың хәтере, күңеле – һутлы тупраҡ ул! Ата-әсәләр менән алға уртаҡ маҡсаттар ҡуйып, ижади йүнәлештә эшләгәндә тағы ла юғарыраҡ һөҙөмтәләргә ирешергә һәм илһөйәр, телһөйәр быуын тәрбиәләргә мөмкин.

**Әҙәбиәт**:


1. Галин С. Башҡорт фольклоры. Пермь, 1998.
2. Башҡорт халыҡ ижады. Том 1 / төҙ. Ә. Харисов. Өфө, 1954.
3. Башҡорт балалар баҡсалары өсөн комплекслы уҡытыу-тәрбиә программаһы.
4. Галин С. Тел асҡысы халыҡта. Өфө: Китап, 1999.


© Рәхмәтуллина В.В., 2024

**УДК 37.035.6**

***Рәхмәтуллина Ынйы Сәлимйән ҡыҙы,***
*тәрбиәсе, Бала үҫтереү үҙәге –*
*«Айыуҡай» балалар баҡсаһы,Баймаҡ к., БР*

**Фольклор өлгөһө булараҡ бишек йыры аша балаларҙа башҡорт теленә һөйөү тәрбиәләү**

Халҡыбыҙҙа бишек йырҙары борон-борондан барлыҡҡа килеүе барыбыҙға ла билдәле. Иң боронғо фольклор жанрҙарының береһе ул бишек йырҙары. Традицион халыҡ мәҙәниәтендә бишек йыры магия һаҡ функцияһын үтәүе мөмкин. Барлыҡ халыҡтарҙа ла бишек йыры инструменттар талап итмәй, уны башҡарыу өсөн тауыш ҡына етә. Борон-борондан баланы сәңгелдәккә һалып бәүетеү – тылсымлы сара, төрлө ышаныуҙарға бәйле йола булған. Йыр-моңға, һүҙгә, тел байлығына әүәҫ ҡатын-ҡыҙҙар сабыйҙарын бәпләп йоҡлатҡанда уйлап сығарған, сабыйына һөйөү менән тулы шиғри, моңло юлдарҙы әйләнә-тирәләгеләр, йорттағы башҡа заттар отоп алып, улар халыҡ араһында ла таралып китер булған, быуындан-быуынға күсеп, беҙҙең көндәргә лә килеп еткән.

Әле һөйләшә лә белмәгән бала йырҙы тыңлай-тыңлай иҙерәп йоҡлап та китә. Йырҙың йөкмәткеһе башлыса ҡатын-ҡыҙҙың күңел торошон, рухи донъяһын сағылдырып, күбеһенсә теләктәрҙән тора.

Әлли-бәлли итәр ул,
Йоҡлап ҡына китәр ул,
Тиҙҙән үҫеп етер ул,
Уҡып белем алыр ул.
Йәки:
Тиҙҙән үҫеп етер ул,
Армияға китер ул.

Өләсәй тәрбиәһендә үҫкән балалар әсәйҙәренең эштә, ниндәйҙер мәшәҡәттә булыуҙарын ишетә, кескәй генә булыуҙарына ҡарамаҫтан, аңдарына һеңдереп, белеп үҫә улар.

Әлли-бәлли бәпкәһе,
Ҡайҙа киткән әсәһе,
Ҡайынлыҡҡа еләккә,
Бәпесенә бүләккә.

Бишек йырҙары эш-мәшәҡәт, йорт-ҡура тирәһенә лә бәйле хәлдәрҙе тасуирлаған:

Аллаһыу-аллаһыу,
Кәзәләрен тауға ҡыу,
Тауҙан ҡайтһа, һыуға ҡыу,
Һыуҙан ҡайтһа, һуй ҙа ҡуй-й-и-и.

Кешеләр, кешене серле дошманлыҡ көсө уратып алған, тип ышанған, һәм әгәр бала төшөндә ниндәйҙер насар, ҡурҡыныс нәмәне күрһә, был инде ҡабатланмаҫ, тип уйлаған.

Ҡайһы бер халыҡтарҙа, шул иҫәптән башҡорттарҙа, ла бишек йырҙары баланы боҙомдарҙан һаҡлай тип иҫәпләнгән. Һуңғараҡ бишек йырҙары тылсымлы элементтарын юғалта, киләсәккә изге теләктәр мәғәнәһенә эйә була.

Әсәй-өләсәйҙәр бишек йырҙары аша әҙәп-әхлаҡ, яҡшылыҡ һәм яуызлыҡ, ихласлыҡ, изгелек, ярҙамсыллыҡ төшөнсәләре тураһында тәүге мәғлүмәттәрҙе бирә. Шуныһы иғтибарға лайыҡ, был йырҙарҙа һис кенә лә вәғәз уҡыу, нотоҡ һөйләү юҡ. Йырҙар бәпесте яратыу, һөйөү һүҙҙәре менән тулы, бының менән бәпескә, бәпестең үҙенә, ата-әсәһенә, туған-тумасаға, күрше-күләнгә, донъяға ҡарата һөйөү, ихтирам тойғолары тәрбиәләнә, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе белеп үҫеүгә лә булышлыҡ итә. Шуның менән бергә, әлбиттә, туған телгә ҡарата ла һөйөү тәрбиәләй.

Бишек йырҙары ир балаға, ҡыҙ балаға айырым йөкмәткеле. Йырҙар, билдәле булыуынса, ике төрҙән тора, халыҡ йырҙары һәм әҙәби бишек йырҙары. Халыҡ бишек йырҙары тыуған яҡ моңдарын, милли моңдо, телде аңлауға, белеүгә, ауыҙ-тел ижадының күркәмлеген тойоуға ҡоролған. Автор йырҙары бер ни тиклем ҡатмарлыраҡ, көй ритмдары ла башҡаса:

*Минең йондоҙом*

Зәңгәр күктә йондоҙҙар күп,
Ҡайһы(һы)н һайларға икән?
Минең дә йондоҙом барҙыр,
Тик ул ҡайҙарҙа икән?
Юлдары йыраҡ булһа ла
Һағынып ҡайта йондоҙон.
Зөһрә йондоҙға тиңләнем
Алһыу йөҙлө Ер ҡыҙын.
Алһыу йөҙлө, зифа буйлы,
Төн сере күҙҙәрендә
Аҡҡоштар булып йөҙәһең
Хыялым күлдәрендә... (Илшат Хәлилов һүҙҙәре һәм көйө).

*Сәңгелдәк йыры*

Йом күҙеңде, матурҡайым,
Бәү-бәү итеп йоҡлатайым,
Ҡояш та бит күҙен йомдо,
Офоҡтарға китеп сумды.
Йоҡла, балам, йоҡла, балам,
Мин яныңда һинең һаман.
Әлли-бәлли, бәлли, бәү-бәү,
Әлли-бәлли, бәлли, бәү-бәү.
Үтеп китте тағы бер көн,
Килде инде ҡараңғы төн,
Йоҡлай кеше, йоҡлай ҡоштар,

Өйҙәрҙә лә һүнгән уттар.
Һин дә йоҡла, бәхет гөлөм,
Матур-матур төштәр күреп.
Әлли-бәлли, бәлли, бәү-бәү,
Әлли-бәлли, бәлли, бәү-бәү.
Тыпыр-тыпыр аяҡтарың,
Ҡулдарың һәм бармаҡтарың,
Бөтәһе лә тынып ҡалған,
Көн буйына арып талған.
Ял итһендәр күҙҙәрең дә,
Йоҡо ҡунған үҙҙәренә.
Әлли-бәлли, бәлли, бәү-бәү,
Әлли-бәлли, бәлли, бәү-бәү.
Бәхетле бул, балаҡайым,
Тәүфиҡлы бул, балаҡайым.
Теләктәрем ҡабул булһын,
Күңелеңдә ҡалыр булһын.
Таңдарың гел балҡып атһын,
Йәшәүеңдән яҡты ҡалһын.
Әлли-бәлли, бәлли, бәү-бәү,
Әлли-бәлли, бәлли, бәү-бәү (Гөлфиә Юнысова һүҙҙәре, Роза Сәхәүетдинова көйө)

Бишек йырҙары аша бала моңдо, шиғри матурлыҡты таный, тәрбиәле, тыныс холоҡло булып үҫә. Бишек йырҙары баланың сабый ваҡыттан уҡ телде өйрәнеү, белеү, һаҡлау өсөн иң кәрәкле, иң ҡулай сара. Тик хәҙерге заманда йәш әсәләр, атайҙар, сабыйҙарына бишек йырын көйләп ултырыуҙы кәрәк тип тапмайҙар. Улар халҡыбыҙҙың ауыҙ-тел ижадының был төрөнөң һәр яҡлап та ни тиклем ҙур файҙаға эйә булыуын аңлап еткермәйҙер. «Йәншишмә» гәзите, «Шоңҡар» журналы, «Юлдаш» радиоһы, телевидение был юҫыҡта әүҙем эшләй, бишек йырҙары менән туранан-тура бәйле төрлө матур саралар, конкурстар үткәрә. Беҙҙең балалар баҡсаһы ла шул сараларҙа ҡатнашып тора. Балаларыбыҙҙы бишек йырҙары менән бәпләп үҫтерәйек. Балалар баҡсаһында, ҡурсаҡтар менән бәпес йоҡлатыу кеүек файҙалы дәрестәр үткәреүҙе планға күпләп индерергә мөмкин. Шул рәүешле фольклор өлгөһө булараҡ бишек йырҙарыбыҙ аша балаларҙа башҡорт теленә – туған телебеҙгә ҡарата һөйөү тәрбиәләй алырбыҙ, тип ышанам.

© Рәхмәтуллина Ы.С., 2024

**УДК 373**

***Сагдиева Рамиля Камиловна,***
*доцент, КФУ, г. Казань, РТ*

## Особенности заданий в новых учебниках по родному (татарскому) языку

В последние годы произошли изменения в программе по предмету «Родной (татарский) язык». Новый учебник «Родной (татарский) язык» каждого класса состоит из четырех разделов, который имеет свою тему: «Я», «Мир вокруг меня», «Моя Родина», «Мир татарского народа». Каждая тема начинается со шмуца, который раскрывает содержание этой темы, и она рассчитана на одну учебную четверть. Как и в других учебниках, имеются условные знаки, обозначающие письменную, речевую или проектную деятельность, словарную и парную работу, интересные факты и задания повышенной сложности.

Тема «Я» каждого класса ориентирована на следующие подтемы: школьная пора, ученическая деятельность, уважение к учителю, любовь к родителям, помощь пожилым людям, качества человечности, дружбы, терпения, роль книг в жизни человека и т.д.

Вторая тема – «Мир вокруг меня». Внимание акцентируется на следующих подтемах: бережное отношение к природе, мир животных и птиц, роль деревьев и цветов в жизни людей, водоемы, небесные явления, природные богатства и т.д. Материал ориентирован на знакомство с внешним миром, расширение кругозора обучающегося.

Под темой «Моя Родина» подразумеваются воспитание патриотизма, толерантности, ознакомление с привлекательными местами России, сельским туризмом, городской и сельской жизнью, национальными праздниками и т.д.

В теме «Мир татарского народа» речь идет о традициях татарского народа, описываются быт и культура, народные промыслы, рассказывается об известных творческих личностях и т.д.

Татар телендә исә, ***карт*** компонентлы сүзләр диалект лексикасы буларак таралыш алган. Әмма алар нигездә саф кушма сүз буларак формалашалар. Мәсәлән: ***ҡартанай*** – тара, тевриз сөйләшләрендә әнинең әнисе; ***картата*** – тубыл-иртыш сөйләшендә бабасының яки әбисенең атасы; ***ҡартатай*** – пермь, тубыл-ирыш, әстерхан, богарыслан сөйләшләрендә бабай, дәү әти, әтисенең яки әнисенең әтисе; ***ҡартәби*** – казан арты-керәшен сөйләшләрендә әбинең әнисе. Шулай ук нагайбәк керәшеннәре сөйләшендә ыруда яки авылда иң олы карчык, аңа эндәшү сүзе; ***ҡартинәй*** – минзәлә, бөре, пермь себер, тепекәй сөйләшләрендә әби, әтинең яки әнинең әнисе; ***ҡартолата*** – бабасының яки әбисенең әтисе [7: 393–394].

Р.Әхмәтьянов *карт* сүзенең деривацион потенциалын югары бәяли, шушы компонент белән килгән туганлык терминнары яңа туганлык атамасы ясау очракларына тукталып, мондый искәрмә-аңлатма бирә: «Төрле сөйләшләрдә (Кавказдан алып Себергә кадәр) *карт* тамырыннан ясалган исәпсез күп сүзләр очрый (к. ЗДС: 393–395, анда барысы да түгел), ҡарта “дәвәтисенең исеме кушылган бала”, шуңа ук эндәшү сүзе; ***ҡартатай, ҡар тә тәй, ҡартәти; ҡартбабай*** (әтисенең әтисенең әтисе һ. б.), ***ҡартанай, ҡартәнәй, ҡартәни, ҡар ти нәй, ҡартнә, ҡартнәй; ҡарткай, ҡартыкый; ҡарт нәнәй*** һәм ***ҡартөннә*** (әтисенең әнисенең әнисе һ.б.). Кайбер очракларда *ҡарт*- нигезендә а > ә пәйда була (к. ЗДС: 405): ***ҡәртәни, ҡәртинә, ҡәртнә*** һ. б.» [1: 374]. Саф кушма сүз буларак татар диалект лексикасына караган *ата* компонентлы сүзләрнең дә ясалышы, семантикасы кызыклы:

***Атабаш*** – хвалын, чистай, минзәлә сөйләшләрендә эти кеше, йортта хуҗа кеше буларак аңлана. Тау ягы сөйләшендә *ата* хайван дигәнне белдерә, бигрәк тә кош-кортка карата әйтелә [7: 60].

Аңлашылганча, биредә беренче компонент туганлык атамасы булып килә, икенче компонент шул кешенең йорттагы дәрәҗәсен күрсәтә (биредә баш сүзе соматизм буларак түгел, ә нәкъ менә башлык булуына ишарә итә дип уйларга кирәк, дигән фикердә торабыз).

Икенче очракны карыйк:

***Атайбикә*** – әстерхан сөйләшендә әтисенең апасы буларак аңлашыла [7: 60].

Шулай итеп, туганлык атамаларыннан ясалган исемнәр башка сүз төркемнәренә караганда ешлык, төрлелек белән аерылып тора. Татар һәм башкорт телләрендә саф кушма исемнәр шактый актив, әмма нигездә диалект лексикасы яки хәзерге көндә кулланылмый торган искергән лексика булып тора (*абызинәй*). Каен- компоненты белән ясалган саф кушма исемнәр бүген дә актив (каенана).

Нәтиҗә ясап, шуны әйтергә кирәк: туганлык атамалары – чикле лексика, аларның деривацион потенциалы да шактый кызыклы. Бер яктан, бу потенциал да чиккә ия. Ясалган сүзләр шул туганлык атамасына мөнәсәбәтле булу, әлеге мөнәсәбәтләргә керү, шул мөнәсәбәттәгечә үзеңне тоту, аталган туганлык атамаларына караган затларың булуын белдерә. Икенче яктан, алар диалект лексикасы хисабына да байыйлар. Алай гына да түгел, туганлык мөнәсәбәтләренең, әдәби тел белән чагыштырганда, бу яктан аеруча бай булуы ачыкланды.

**Әдәбият**

1. Әхмәтьянов Р.К. Татар теленең этимологик сүзлеге: Ике томда. I том (А–Л). Казан: Мәгариф.Вакыт, 2015. 543 б.

2. Башҡорт теленең академик һүҙлеге / ред. Ф.Х. Хисаметдинова. Ун томда. 1 нче т.: А. – Уфа: Китап, 2011. 432 б.

3. Башҡорт теленең академик һүҙлеге / ред. Ф.Х. Хисаметдинова. Ун томда. 4 нче т.: Й–К. – Өфө: Китап, 2012. 944 б.

4. Денмухаметова Э.Н., Юсупова А.Ш. Термины родства в двуязычных словарях татарского языка // Филологические науки. Вопросы теории и практики. 2012. № 5(16). С. 62–65.

5. Татар теленең аңлатмалы сүзлеге: I том: А–В. Казан: ТӘһСИ, 2015. 712 б.

6. Татар теленең аңлатмалы сүзлеге: IV том: С–Т. Казан: ТӘһСИ, 2019. 908 б.

7. Татар теленең зур диалектологик сүзлеге / төз. Ф.С. Баязитова, Д.Б. Рамазанова, З.Р. Садыйкова, Т.Х. Хәйретдинова. Казан: Татар. кит. нәшр., 2009. 839 б.

© Сaләхова Р.Р., Гыйләҗетдинова Г.Х., 2024

**УДК 37.035.6**

***Сәйетҡолова Лилиә Рәйес ҡыҙы,***
*студент, БФШһЖ,*
***Әлимбаева Гөлшаян Ғәбсәләм ҡыҙы,***
*филол. фәнд. канд., өлкән укытыусы,*
*Өфө университеты, Өфө ҡ., БР*

## Телмәр үҫтереүҙә халыҡ ижады өлгөләре

Уйындар – телмәр үҫтереүҙең башланғыс этабындағы иң мөһим компоненттарҙың береһе. Һәм шулай уҡ монолог, диалог кеүек формаларҙың бәйләнеше төп урын алып тора. Диалогҡа өйрәтеү ике мәсьәләне сисә:

• ишеткәнде кире ҡабатлап әйттереү;

• диалогтағы бер репликаны мәғәнәле итеп үстерә белергә өйрәтеү, микромонолог төҙөү. Телмәр үҫтереүҙә сюжетлы уйындар ҡулланып эшләү уңышлы һөҙөмтәләр бирә:

• баланың һүҙлек запасын ҡулланып, телде аңлауы;

• уңайһыҙланмайынса бер-береһе менән аралашыуы;

• уйлау ҡеүәһен үҫтереү;

• көтөлмәгәндә килеп тыуған телмәр ситуацияларынан еңел сыға белеү;

• телгә ҡыҙыҡһыныуы, өйрәнеү теләктәре уяна;

• балаларҙың ижади һәләттәре арта.

Балалар өсөн халыҡ ижады үрнәктәре – ауыҙ-тел сәнғәтенең ҙур бер өлөшө. Халыҡ ижады әҫәрҙәренең тәрбиәүи әһәмиәте айырыуса ҙур.

Әсә телендә тәрбиәләнгән бала ғына, үҙ халҡының әхлаҡ ҡанундарын ҡабул итеп, милләтенә, уның теленә һәм ғөрөф-ғәҙәттәренә ысын мәғәнәһендә ихтирамлы була ала.

Ғаиләлә, балалар баҡсаһында баланың бармаҡтарының хәрәкәтсәнлеген үҫтереүгә айырыуса иғтибар итергә кәрәк, бармаҡтарҙы аҡыллы эшкә йүнәлтеү беҙҙән тора. Был бармаҡ уйынын дөрөҫ тын алыу һәм сығарыу өсөн эшләтеү отошло.

Уйындарҙы башлар алдынан балаға уйындың ҡағиҙәһен төшөндөрөү мотлаҡ. Ошондай бармаҡ уйындарын ҡулланабыҙ:

1. Баш бармаҡ башҡа сыҡҡан,
Имән бармаҡ ир булған,
Сығанаҡ бармаҡ сығып ҡасҡан,
Һуҡ бармаҡ өҙә һуҡҡан,
Сәтәкәй бармаҡ сәпәкәй иткән.

2. Бутыр-бутыр бутҡа бешкән,
Эсенә ҡалаҡ төшкән.
Ҡалаҡты алайым тигәнсе
Биш бармағы бешкән [5: 46].

(*Бармаҡтар бешмәһен өсөн, һәр бармаҡҡа өрөп сығабыҙ*).

Һәр эшмәкәрлектә бармаҡ уйындарын уйнатыу баланың тел үҫешенә ыңғай тәҫьир итә. Өндәрҙе дөрөҫ ишетеүгә һәм айырыуға төрлө күнекмәләр, тиҙәйткестәр һәм тел төҙәткестәр, йомаҡтар, мәҡәлдәр бирелә.

Халыҡ ижады әҫәрҙәренән балаларға иң яҡыны һәм яратҡаны – экиәттәр. Халыҡ экиәттәре – һөйләү телен үҫтереүҙә бай материал булып иҫәпләнә. Хәрәкәттәрҙең, герой һүҙҙәренең билдәле бер тәртиптә ҡабатланып килеүе балаларҙы әҫәрҙәр менән танышыу процесын йәнле һәм ҡыҙыҡлы итеп алып барырға ярҙам итә. Мәҫәлән, «Тарталар, тарталар, тартып сығара алмайҙар», «Баралар, баралар, ниһәйәт, барып етәләр» һәм башҡа ҡабатлауҙар балаларҙың телен шымарта, экиәттең өҙөктәрен һөйләргә теләге уята.

Шулай уҡ телмәр үҫтереүҙә тел төҙәткестәр, тиҙәйткестәр ятлауҙың роле ҙур.

Ҫа – ҫа – ҫа – ҡайһылай матур баҫа,
Са – са – са – тыпырлап күңел аса,
Са – са – са – дәртләндерәм: «их, ас – са!»

Са – са – са – бейей шулай башҡортса.

Өндәрҙе дөрөҫ әйтеү, автоматлаштырыуҙа балаларға шиғыр ятлатыу эше айырым урын алып тора.

Хәрәкәт менән шиғыр ятлағанда бала арымай, һаулығы өсөн дә әһәмиәтле, ул бөтөн кәүҙәһе менән хәрәкәтләнә. Баланың ваҡ һәм дөйөм моторикаһы үҫә. Шиғри ритм менән эшләү балаға шиғырҙы иҫтә тиҙ ҡалдырырға булышлыҡ итә.

Мин килдем, килдем, килдем,

Һәм ҡыҙыл еләк таптым,

Их, тәмле еләк тиеп

Ауыҙға алып ҡаптым.

Балаларҙа күрмә-образлы хәтер күберәк урын алып тора. Әгәр ҙә шиғырҙы һүрәтһеҙ шул көйө ятлаһаң, балалар ул шиғырҙы тиҙ арала онота. Ә балаларҙың хәтерендә иҫ киткес бер үҙенсәлек бар – улар күҙ менән күреп һүрәтте бик тиҙ арала «фотоға» төшөрөп ала. Ятлаған шиғырҙы иң тәүҙә һүрәткә ҡарап бер нисә тапҡыр һөйләйһең, шунан һуң балалар үҙҙәре ҡабатлай. Һүрәткә ҡарап, балалар бик тиҙ һөйләргә өйрәнә. Мәҫәлән: «Мышы», «Туп» шиғырҙары:

**Мышы**.

Ҡарағыҙ: мышы килгән,

Бесән ваҡытын белгән.

Ә башына берәү түгел,

Ике тырмаһын элгән.

**Туп**.

Ғәтиә илай ҡысҡырып,

Тубы төшкән йылғаға,

«Ҡуйсы, Ғәтиә илама,

Туп батмай ул йылғала».

Иртәгәһенә бала шиғырҙы онотһа, һүрәтте күрһәтеү менән ул уны иҫенә төшөрөп, бик тиҙ генә һөйләп бирәсәк. Был ысул хәтере, телмәре үҫешмәгән балалар өсөн дә бик үҙенсәлекле, ыңғай ысул булып тора.

Шулай уҡ, тел төҙәткестәр, шиғырҙар ятлағанда, бәләкәй хикәйәләр төҙөгәндә мнемотаблицалар (мнемосхемалар) ҡулланыла. Бындай таблицалар хәтерҙә ҡалдырыуҙы еңеләйтә [2: 24].

**Әҙәбиәт исемлеге:**

1. Абуталипова Р.Ә. Мәктәптә башҡорт телен һәм әҙәбиәтен уҡытыу методикаһы. Стәрлетамаҡ, 2003.

2. Аҙнағолов Р.Ғ. 5–9-сы кластарҙа башҡорт телен уҡытыу методикаһы. Өфө, 1996.

3. Аҙнағолов Р.Ғ. Башҡорт теленән ҡағиҙәләр йыйылмаһы. Өфө, 2000.

4. Аслаев Т.Х. Уйнат, уйлат баланы. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте. 1973. 134 б.

5. Аслаев Т.Х., Исламғолова Ы.Ә. Уйнат, уйлат баланы. Өфө, 1987.

6. Ғәләүәтдинов И.Ғ. Башҡорт халыҡ балалар уйындары. Беренсе китап. Өфө: Китап. 2002.

7. Дәүләтшина М.С. Башҡорт телен уҡытыу методикаһы. Өфө: Китап. 2009. 126 б.

8. Иҫәнғолова Ә.Ф. Ял минуттары өсөн күнегеүҙәр. Өфө: Эшлекле династия, 2008. 27 б.

9. Толомбаев Х.А. Бүләк дәреслегенә методик ҡулланма. Өфө: Китап, 1997.

10. Толомбаев Х.А. Тылсымлы бүләк. Өфө: Китап, 1995.

© Сәйетҡолова Л.Р., Әлимбаева Г.Ғ., 2024

**УДК 821.512.141**

***Таһирова Рузалина Нуритдин ҡыҙы,***
*ассистент, Өфө университеты, Өфө ҡ., БР*

## Ринат Камалдың «Ҡасыу» повесында бөгөнгө көн проблемаларының сағылышы

Тоталитар йәмғиәт шарттарында дөйөмләштерелгән фекерҙән тайпылыусы кешеләрҙе диссидент тип атағандар. Ундайҙар күберәк сәйәсәт, әҙәбиәт, сәнғәт әлкәһендә осраған. Сәйәси ҡоролош, йәшәү йә ижад итеү өсөн шарттар менән ризаһыҙлыҡ – диссидентлыҡҡа илтеүсе төп сәбәптәр. Артабан билдәле: эҙәрләнеүгә дусар ителеү, төрлө яһалма кәртәләр арҡаһында түҙеп торғоһоҙ хәлгә еткерелеү. Бынан һуң икенсе төрлө фекерләүсе йә үҙенә-үҙе ҡул һала, йә сит илдә һыйыныу урыны эҙләргә мәжбүр була. Бик һирәктәргә генә тәтей һуңғы мөмкинселек.

Рәссам Рәфҡәт Йыһангиров – Ринат Камалдың «Ҡасыу» повесындағы үҙәк образ. Ул башын ижадҡа һалған. Кешеләрҙе таң ҡалдырырлыҡ, донъяларҙа оло танылыу яуларлыҡ картиналар яҙыу – уның маҡсаты. Ижадҡа башкөллө сумыуының сәбәбе лә бар. Йөҙөм исемле һылыу Рәфҡәттең мөхәббәтенән баш тарта. Донъяның бар ҡото хәҙер яңы тыуасаҡ картиналарҙа ғына...

Майпәреүәз исемле икенсе ҡыҙҙың мөхәббәтен рәссам хәҙер үҙе ҡабул итмәй. Әгәр ҙә мәсьәлә уңай хәл ителһә, ваҡиғалар бөтөнләй икенсе йүнәлеш алыр ине лә бит (әммә был осраҡта әҫәр әҫәр булмаҫ ине).

Ринат Камал Рәфҡәтте диссидентлыҡҡа этәреүгә сәбәп булырҙай ошондай күренештәрҙе билдәләй: ысын ижади эш өсөн шарттар юҡ, аҡсаға мохтажлыҡ, хөкүмәттең сәнғәткә битарафлығы, училищела бергә эшләгән коллегаларының көнсөллөгө, символдар стилендәге картиналарҙы халыҡтың аңламауы... «Хөкүмәт өсөн завод, фабрика бар, колхоз, совхоз бар, уның өсөн күргәҙмә лә, сюрреализм да, реализм да, хатта мәҙәниәт тигәненең үҙе лә юҡ, буғай», – тип ҡуя әҫәр геройы. Ул күңеленән үҙ-үҙе (игеҙәге) менән бәхәсләшә. Күңелендә ике тойғо көрәшә: береһе сит илгә китеүҙе яҡлаһа, икенсеһе (игеҙәге) «сит ил һине көтәме?» тип шикләнә. Ниһайәт, тәүге тойғо еңә... Хәҙер килеп автор Рәфҡәтте ғәйепләй башлаған кеүек. Ғәйепләүҙе повестағы икенсе бер образ – Дейник «әйтә»: «Улар (йәһүдтәр) донъяға һибелгән, тыуған ерҙәренең ҡайҙа икәнен дә аңғарырлыҡ түгел,

ә башҡорттар?.. Башҡорт – Урал балаһы, ул еренә сат йәбешеп ята, ер-һыу уның өсөн бөтәһе лә...». Дейник Рәфҡәтте сит илгә китеүҙән баш тартырға өгөтләй: «Ағасты ят тупраҡҡа күсереп ултыртһаң, ҡороп та ҡуя...».

Эйе, «Сит илдә солтан булғансы, үҙ илеңдә олтан бул...». Артабанғы ваҡиғалар үҫешенән күренеүенсә, Рәфҡәткә солтанлыҡ тәтемәй. Бәлки, үҙ илендә солтан уҡ булмаһа ла, олтан да булып йөрөмәҫ ине ул. Һәр хәлдә алда ни булырын беребеҙ ҙә күҙ алдына баҫтыра алырлыҡ әүлиә түгелбеҙ.

Рәфҡәттең Франция менән бәйле тормошо (ғүмеренең икенсе осоро) тағы ла нескәрәк лиризм менән яҙылған. Бигерәк тә төш эпизоды хәтерҙә ҡалырлыҡ. Өнөңдә нимә уйлаһаң, төшөңә шул керә, тигәндәй, Рәфҡәттең тыуған ерен һағыныуы хаҡындағы әрнеүле уйҙарынан шул аңлашыла: сит илдә ҡуш ҡуллап көтөп тормайҙар икән дә!

Ринат Камал бында ла үҙе өсөн ғәҙәти хат алымына, өндәш һөйләмдәргә мөрәжәғәт итә һәм дөрөҫ тә эшләй: повесть шул арҡала, артыҡ һүрәтләүҙәрҙән азат булып, ыҡсым форма ала. Яҙыусының оҫталығы шунда: роман күләмендәге материал кескәй повесть ҡалыбына һыя. Ә йөкмәтке ҡайһылай ҡоласлы!

Һүҙ башында, һәр кемдең диссидентлыҡҡа үҙ ҡарашы бар, тигәйнем. Ысынлап та, берәүҙәр, имеш, сит илгә китеп ҡотолмаһалар, уларҙы ниндәй яҙмыш көтөр ине, тип хафаланып хәбәр һалғанда, яҙыусы бөтөнләй икенсе фекерҙә. Повестағы икенсе бер персонаж Рудольф Нуриев репликаларынан аңлатып бирә алмаҫлыҡ күңел төшөнкөлөгө, ҡот осҡос трагизм һулышы бөр көлә: «Беҙ – француз да, башҡорт та түгел, ә ике арала ҡалған имгәктәр... Беҙҙе Францияла – француз тип, Башҡортостанда башҡорт тип ҡабул итмәйҙәр», «Илем дә, телем дә юҡ, эйе, милләтем дә... Илем дә, милләтем дә сәхнә булды, тик бөгөн янымда туғандарым юҡ, тәҙрә аша тыуған ҡырҙарымды, Өфөм, Аҡ Иҙелде күрмәйем...». Ниндәй аянысла, ғазапланыулы уйҙар! Ринат Камалдың кешенең хис-тойғоларын оҫта һүрәтләү маһирлығының ярылып ятҡан кәүҙәләнеше был!

Повестың атамаһы ла серле һәм ҡыҙыҡһындырыусан. «Кемдән йә иһә нимәнән ҡасыу?» – тигән һорау тыуа. Әҫәрҙең есеменә хас исем ҡушыу ҙә үҙе бер оҫталыҡ бит әле (юғиһә, журнал вариантында бер атама булып, китап итеп баҫылғанда икенсе исем алған әҫәрҙәр ҙә осрай. Һәр хәлдә Ринат Камал исемде берәгәйле ҡуша). Повесть атамаһына ҙур мәғәнә һалынған. Бер яҡтан, рәссамдың картинаһы шулай исемләнгән, икенсе яҡтан, сит илдән һыйыныу урыны һорау, өсөнсөнән, социалистик реализмдан бүтән ижад алымына мөрәжәғәт итеү. Ә бына автор үҙе шундай аңлатма бирә: «Ҡа-сыу... Был тормоштан, кешеләрҙән ҡасыу... Кешенең был донъянан, күнегелгәндән, ҡәҙимгелектән биҙеүе...» Әммә, ҡасыуҙары (үҙ-үҙеңдән ҡасып та булмай) еңелме? Күпме ыҙа, фажиғәләр һағалай был юлда! Бәлки, ҡасыу дөрөҫ тә түгелдер, кәрәк тә түгелдер? Үҙгәртеү, яңыртыу, камиллашыр өсөн бүтән саралар юҡмы? Был һорауға яуап – һәр кешенең үҙендә. Һәр кем был донъяны үҙенсә биҙәй, үҙенсә ҡора, ҡаршылыҡтарҙы ла үҙенсә еңә. Тик япа-яңғыҙ тотош йәмғиәт фекеренә ҡаршы барыуы еңел түгел: елгә ҡаршы борсаҡ һибеү менән бәрәбәр.

Үкенескә ҡаршы, был күренеш беҙҙең көндәргә лә хас. Сәйәсәт, сәнғәт, фән, спорт өлкәһенән күп кенә талантларыбыҙҙы юғалтабыҙ. Әммә бөгөнгө көн әһелдәрен сит илдә

икенсе нәмә ҡыҙыҡһындыра. Ул да булһа аҡса. Ләкин шуны онотторға ярамай: үҙ-үҙеңдән ҡасып ҡотолоп булмай. Тыуған тел, ил, ер һағындыра, үҙенә тарта.

© Таһирова Р.Н., 2024

**УДК 37.035.6**

***Тулыбаева Гөлшат Зиннур ҡыҙы,***
*балалар баҡсаһы мөдире, Бала үҫтереү үҙәге –*
*«Сулпылар» балалар баҡсаһы МАМББУ,*
*Иҫке Сибай ауылы, Баймаҡ районы, БР*

**Балалар баҡсаһында милли мәҙәниәт, халыҡ аҡылы нигеҙендә рухлы балалар тәрбиәләү**

Башҡорт халҡының милләт булараҡ һаҡланыуы, уның мәҙәниәтен үҫтереү, үткәне тураһында үҫеп килгән быуынға тапшырыу – беҙҙең, тәрбиәселәрҙең һәм ата-әсәләрҙең, төп бурысыбыҙ. Үҙенең телен, мәҙәниәтен юғалтҡан халыҡтың киләсәге юҡ, ә беҙҙең киләсәгебеҙ ул – беҙҙең балаларыбыҙ. Тәрбиә һәр халыҡта уның туған теле менән бергә барлыҡҡа килгән. Йәш быуын өлкәндәр менән аралашып, тормошта кәрәкле күнекмәләргә, йәмғиәттә үҙ-үҙен тоторға, аралашырға өйрәнгән, халыҡтың ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын ололар ярҙамында үҙләштергән. Һәр бала үҙен шәхес итеп тойһон өсөн, балала милли ғорурлыҡ, туған телгә мөхәббәт хисе тәрбиәләргә кәрәк.

Федераль дәүләт белем биреү стандарттары уҡытыу-тәрбиә эшен ойошторғанда балаларҙың этномәҙәни үҫешенә ҙур иғтибар бирә. Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы балалар баҡсаһында үҙ халҡының, шул уҡ ваҡытта Рәсәй халыҡтарының тарихы, мәҙәниәте, көнкүреше менән таныштырыу күҙаллана.

Балаларҙа милли мәҙәниәт тураһындаербөтөн күҙаллау булдырыу – туған телендә белеү, шул телдә аралашыу, халыҡ ауыҙ-тел ижадын белеү, туған телдә әкиәттәр уҡыу, халҡыбыҙҙың символикаһы менән таныштырыу, үҙ халҡына хас әҙәп ҡағиҙәләрен, тыуған яҡ тәбиғәтен белеү…

Балаларға этномәҙәни тәрбиә биргән тәрбиәсе тыуған яғының тәбиғәтенең үҙенсәлектәрен, халҡының ғөрөф-ғәҙәттәрен, мәҙәниәтен, телен үҙе яҡшы белергә, ысын күңелдән яратырға тейеш. Үҙенең күңел тойғоларын, белемен балаларға тулыһынса еткерә белеү мөһим. Был эштә тәрбиәсегә лә, ата-әсәләргә лә ярҙамға башҡорт халҡының матур милли йолалары, халыҡ байрамдары, тарихы, йыр-моңо, ауыҙ-тел ижады килә. Һәр милләттең үҙенә генә хас байрамдары бар. Улар халыҡтың милли ғорурлығы, этномәҙәниәт хистәрен тәрбиәләргә, формалаштырырға ярҙам итә. Байрамдар халыҡ тормошоноң, мәҙәниәтенең айырылғыһыҙ бер өлөшө лә булып тора. Халыҡ байрамдары һәр кешенең йөрәк түрендә һаҡлана, сөнки йыр, бейеү, яңы көйҙәр башҡарыу, осрашыу-танышыуҙар ошо көндәрҙә була. Балалар был байрамдарға әҙерләнгәндә халыҡ ауыҙ-тел гәүһәрҙәре менән файҙалана, халыҡ уйындарын өйрәнә, милли кейемдәр менән таныша. Бындай байрамдар ата-бабаларыбыҙҙың йолаларын балаларыбыҙға еткереү маҡсатынан

ойошторола. Шул байрамдар аша бөгөнгө заман балаһында милли традицияларға мөхәббәт тәрбиәләнә.

Балаларға этномәҙәни тәрбиә биреүгә ата-әсәләрҙе йәлеп итеү ыңғай һөҙөмтәләр бирәсәк. Ата-әсәләр тәрбиәсенең ярҙамсыһы ғына түгел, улар баланы тәрбиәләүҙә тигеҙ хоҡуҡлы ҡатнашыусылар. Балалар өсөн байрамдарҙа, сараларҙа бар ғаиләһе менән бергә ҡатнашыу бик мөһим урын алып тора.

Беҙ башҡорттар күпселек тәшкил иткән Урал аръяғы райондарының береһе булған Баймаҡ районы балалар баҡсаһы булараҡ, бөрйән ырыуы башҡорттарыбыҙ. Һәр бала бәләкәйҙән үҙ ырыуын, ғөрөф-ғәҙәтен, йолаларын ныҡлы өйрәнгән төбәк. Беҙҙең ауылыбыҙҙа төрлө милләт халыҡтары йәшәй һәм баҡсабыҙҙа – башҡорт, урыҫ, татар, сыуаш, мордва балалары тәрбиәләнә. Күбеһе башҡорт милләтле балалар булғанлыҡтан этномәҙәни уҡытыу-тәрбиә эше шул йүнәлештә алып барыла. Баҡсабыҙҙа төрлө байрамдар үткәреү матур йолаға әүерелде. Сараларҙа балалар менән бер рәттән ололар ҙа теләп ҡатнаша. Халыҡ байрамдарына килгәндә баҡсабыҙҙа беҙ башҡорт халҡының миҙгел байрамдары: «Һабантуй», «Ҡарға бутҡаһы», яңы йыл кисәләре, «Ҡышты оҙатыу» байрамдарын балалар менән генә түгел, ата-әсәләр менән берлектә үткәрәбеҙ. «Ҡышты оҙатыу- Нәүрүҙ» байрамы йыл һайын март айында уҙғарыла. Төрлө уйын- көлкө, йыр- бейеү менән аралашып барған был байрам халҡыбыҙҙың рухи мәҙәниәтен пропагандалауҙа мөһим урын алып тора. Күңелле йырҙар йырлайҙар, шиғырҙар һөйләйҙәр, матур итеп әкиәттәр сәхнәләштерәләр, төрлө милли уйындарҙа теләп ҡатнашалар, әйтергә кәрәк, балалар милли уйындарҙы байрам сараларында ғына түгел, ә көн дә бик теләп уйнайҙар. «Буяу һатыу», «Аҡ тирәк, күк тирәк», «Бесәй-сысҡан», «Тирмәкәй», «Энә-еп, төйөн», «Тирмә», – был һәм башҡа уйындар аша балалар халҡыбыҙ мәҙәниәтенә ылыға. Сағыу милли кейемдәр кейеп халыҡ бейеүҙәрен башҡаралар. Республикабыҙҙың тыуған көнөн данлап, көҙҙөң матур сағында «Башҡортостан – тыуған илем» байрамы, «Көҙгө йәрминкә» үткәрәбеҙ. Был байрамда тыуған еребеҙҙең тәбиғәтен, халыҡтар дуҫлығын данлайбыҙ.

Беҙҙең тәрбиәләнеүселәребеҙ республика күләмендәге төрлө конкурстарҙа әүҙем ҡатнаша, призлы урындар яулай. Бындай саралар баланың күңелен күтерә, һәләтен асырға ярҙам итә. Ауылыбыҙ ағинәйҙәре, өләсәйҙәр баҡсабыҙҙың көтөп алған ҡунаҡтары. «Әкиәтле һандыҡ» район бәйгеһендә өләсәйҙәр ҙә ейән-ейәнсәрҙәре менән теләп ҡатнашты, район кимәленә лә сыҡтылар. 1-се урынды – Иҙрисова Йәнгүзәл (етәкс. Аҫылғужина Г.Ф.) һәм 3-сө урынды Зәйнуллина Йәсминә (етәкс. Батталова А.Р.) яуланы. Баҡсабыҙ тәрбиәселәре, хаҡлы ялда булыуға ҡарамаҫтан, һәр саҡ беҙҙең менән булған Ибраһимова Ә.Г менән Моратова Р.Л. айырыуса рәхмәтлебеҙ. Улар «Өләсәйҙәр мәктәбе» ойоштороп ебәрҙе. Төрлө биҙәнеү әйберҙәре, аш-һыуыбыҙға, милли кейемдәргә иғтибар арттырыуға булышлыҡ итәләр. Йәш быуын өлкәндәр менән аралашып, кешеләр араһында үҙ-үҙен тоторға, кәрәкле күнекмәләргә өйрәнеп, халыҡтарҙың йолаларын өлкән быуын ярҙамы менән туған тел аша өлгәшәбеҙ.

Йыл әйләнәһенә баҡсабыҙҙа башҡа төрлө саралар ҙа үткәрәбеҙ. «Шәжәрә» байрамында һәр ғаилә үҙенең ырыу ағасын төрлө ысулдар менән эшләп, уны яҡлап сығыш әҙерләнеләр, үҙ-ара һәр төркөмдә, дөйөм балалар баҡсаһында, район-ара конкурстарҙа ата-әсәләр әүҙем

ҡатнашалар. «Атай, әсәй һәм мин – татыу ғаилә», «Беҙ бәхетле ғаилә булғанда» тигән ғаилә байрамдарын үткәреп торабыҙ. Рәсәй Федерацияһында быйылғы йыл Ғаилә йылы тип иғлан ителеүенә айырыуса шатбыҙ, киләсәктә тағыла нығыраҡ йәш ғаиләләргә, рухлы балалар тәрбиәләү өлгөләренә иғтибарҙы арттырырбыҙ тип уйлайбыҙ. Баҡсабыҙҙа шулай уҡ йыл һайын Ололар көнөнә өләсәйҙәрҙе ҡунаҡҡа саҡырабыҙ. Ошондай осрашыуҙар быуындар бәйләнешен нығыта, ололарға иғтибарҙы, ихтирамды арттыра. Башҡа байрамдарҙа ла башҡорт телендә шиғырҙар, йырҙар яңғырай, бейеүҙәре ҡуйыла. Беҙҙең коллективта 17 педагог иҫәпләнә, шуларҙың 10-һы юғары категорияға эйә. 2020 йылда Мәғариф һәм фән министрлығы ойошторған «Милли кейем – минең халҡымдың ҡомартҡыһы» флешмобында ҡатнашып, «Милли стилдәге мәктәп формаһы» номинацияһында еңеүсе булып диплом менән бүләкләндек.

Бөгөн башҡорт милләтенән булыуың менән ғорурланыу, уны һаҡлау, уны ҡурсалау менән бер рәттән телде һаҡлап ҡалыу мөһим. Тел һаҡланһа, милләт тә һаҡланасаҡ, тел юғалһа, милләт тә юғала. Телгә һөйөү иң беренсе ғаиләнән башлана, ата-әсәләр менән был турала һәр саҡ әңгәмә ҡорабыҙ, өйҙә башҡортса аралашыу, үҙ телеңдә йәнһүрәттәр ҡарау, әкиәттәр һөйләү мөһимлеген еткерәбеҙ. Сөнки бала балалар баҡсаһынан сыҡҡас, урыҫ класына барған осраҡта ла, өйҙә үҙ телендә аралашһа, ул бала әсә телен онотмаясаҡ. Шул уҡ ваҡытта башҡа милләт вәкилдәренә ихтирам тәрбиләү бөгөнгө балалар баҡсаларының төп бурысылыр тип иҫәпләйем.

Ауылыбыҙ Иҫке Сибай Урал аръяғы ауылдары араһында иң эре ауылдар иҫәбенә инә. Ауылыбыҙҙа 3477 кеше йәшәй. Ошонда тыуып, башҡорттар араһында үҫкән төрлө милләт вәкилдәре үҙ телдәре менән бер рәттән башҡортса ла матур һөйләшә. Улар Сопожниковтар, Дюдяевтар, Грошевтар, Деулиндар, Кабаковтар, Фроловтар. Ҡатнаш ғаиләләрҙе әйтеп тораһы ла юҡ. Төрлө милләт булһаҡ та, дуҫ йәшәйбеҙ. Халыҡ беҙҙә эшһөйәр, тырыш, ике йыл рәттән «Айыҡ ауыл» республика сараһында ҡатнаштыҡ.

Баҡсабыҙҙа үҙ эшен яҡшы белгән, тәжрибәле, рухлы педагогтар эшләй. Улар төрлө кимәлдәге бәйгеләрҙә һәр саҡ теләп ҡатнаша. Балаларҙы әҙерләй. Һуңғы йылдарҙа ҡатнашҡан бер нисә мәҙәниәткә ҡағылышлы бәйгеләргә тукталып киткем килә. Бөтөн Донъя кимәлендәге "Евразия илдәренең төрки халыҡтары уйындары" бәйгеһендә педагогтарыбыҙ Бикҡолова Р.О., Хөсәйенова Ф.В., Аҫылғужина Г.Ф., Һиҙиәтова Р.В. призлы урындар яуланы. М. Кәримдең 100 йыллығына үткәрелгән «Мостай уҡыуҙары» төбәк-ара фәнни-практик конференцияла Бикҡолов Шамил (етәксеһе Бикҡолова Р.О.) сығыш яһап мәғариф һәм фән Министрлығының Дипломы менән бүләкләнде. Республика кимәлендә яҡшы һөҙөмтә күрһәткән, «Урал батыр» эпосын яттан һөйләүселәр бәйгеһендә 1-се урын яулаусы Мөхәмәтшин Ибраһим (етәксеһе Хөсәйенова Р.Г.), Халыҡ- ара туған тел көнөнә арналған «Халҡым теле – хаҡлыҡ теле» Бөтә Рәсәй онлайн шиғыр ятлау конкурсында «Иң бәләкәй ҡатнашыусы» номинацияһында Мөхәмәтшина Мәҙинә (етәксеһе Аҫылғужина Г.Ф.), башҡорт теле көнөнә арналған Республика кимәлендәге онлайн шиғыр һөйләүселәр бәйгеһендә «Атам теле! Әсәм теле! Минең телем!» номинацияһында Аҫылгужин Инсаф (етәксеһе Аҫылғужина Г.Ф.), ә «Башҡорт телендә һөйләшәм»

номинацияһында Иҙрисова Йәнгүзәл (етәксеһе Ерьесова Н.Б.) еңеүсе тип табылды. Ноябрь айында «Йәшлек» гәзите «Иң яҡшы башҡорт балалар баҡсаһы” тауыш йыйыу бәйгеһе ойошторҙо. Беҙҙең баҡсабыҙ ошо саранан да ситтә ҡалманы һәм республика буйынса лайыҡлы 3-сө урынға сыҡтыҡ. Ошо арала «Йәшлек»тәр беҙҙең турала мәҡәлә баҫтырасаҡ.

Балалар менән уҡытыу-тәрбиә эше алып барылғанда көн тәртибе барышында башҡа милләттәр мәҙәниәтенә иғтибар итәбеҙ, халыҡ уйындары уйнайбыҙ, Рәсәй халыҡтарының әкиәттәрен уҡыйбыҙ, ауылыбыҙ, республикабыҙ, тыуған яҡтың тәбиғәте менән таныштырыуҙы дауам итәбеҙ. Был сараларҙы үткәреү ваҡытында балаларға тыуған халҡына, бергә йәшәгән башҡа халыҡтарға, уларҙың милли мәҙәниәтенә ҡыҙыҡһыныу, мөхәббәт тәрбиәләнә.

Үткәндәребеҙгә күҙ һалһаҡ, башҡорт халҡы элек-электән эшсән, әҙәпле, ҡунаҡсыл, асыҡ йөҙлө, миһырбанлы булған. Матур ғөрөф-ғәҙәттәр, милли байрамдар, күп төрлө йолалар хеҙмәт кешеһенә дәрт өҫтәгән. Беҙ үҙебеҙҙең балаларҙы милли рухта тәрбиәләп, үҙебеҙҙең бәхетле киләсәгебеҙҙе әҙерләйбеҙ, сөнки милли рухта аҡыл һәм гүзәллек, зауыҡ һәм әхләҡ, хеҙмәт һәм физик тәрбиә урын алған.

© Тулыбаева Г.З., 202

**УДК 81-2**

***Тухтамишева Рузана Рамеловна,***
*аспирант, УУНиТ, г. Уфа, РБ*

## Неологизмы как средство обновляющейся картины мира в русском и узбекском языках

Создание Всемирной сети и блогерских пространств привело к появлению новых слов – чаще англицизмов. Как нам кажется, связано это прежде всего с тем, что Интернет стал детищем американских разработчиков, поэтому английский язык стал универсальным языком общения в интернете. По мере распространения Сети стали изменяться не только языки общения, но и стили. Некоторые ученые стали наблюдать видоизменения стилистического характера. Так, вместо обычных разговорных слов в процессе интернет-коммуникации уже используются слова межстилевые, или образующие абсолютно новый стиль общения. М. Кронгауз назвал такой стиль и вид общения «разговорным интернетом» [3]. Т.Ю. Виноградова говорит о появлении новой формы языкового взаимодействия – письменной разговорной речи. «Русский язык существует в Интернете в основном в письменном варианте, но в условиях интерактивной сетевой коммуникации темп речи приближен к устной ее разновидности» [1]. Таким образом, мы можем говорить о появлении нового стиля языка. И.Ж.Степанова и М.В.Бохиева говорят об особой функциональной разновидности языка, которая «отличается от живой разговорной речи тем, что 1) общение в интернете опосредовано, так как осуществляется через технические средства связи – ПК, ноутбук, смартфон, айфон и под.; 2) общение в сети имеет разную степень интерактивности, т. е. разную скорость реакции собеседника; 3) в отдельных сферах

виртуального общения, где степень интерактивности высокая – там письменно фиксируется спонтанная, неподготовленная разговорная речь» [5].

Для подтверждения этой гипотезы Л.Ю. Иванов выделяет некоторые причины, вследствие которых язык интернет-коммуникации можно выделить в отдельную структуру: во-первых, этот язык функционирует отдельно от других стилистических разновидностей, сохраняясь в отдельных случаях (что не касается общения на форумах и блогах); во-вторых, целеполагание данной разновидности речи – «общение ради общения»; в-третьих, появлению такого языка способствует появление все новых и новых форумов и других площадок для общения; в-четвертых, языковые средства этой разговорной группы могут образовывать новый пласт лексических и грамматических категорий, которые впоследствии образуют прагматический комплекс [2: 791–792].

Как показывает теория, в разные периоды, в кругу определенных лиц, в определенной профессиональной среде человек использует определенный набор языковых средств, которые мы привычно выделяем в отдельные группы – жаргоны. Можно ли назвать язык интернет-коммуникации разновидностью современного жаргона? Скорее всего, да, ведь общение происходит на уровне разговора (в письменной форме), когда человек может свободно использовать разнообразные описательные средства, мемы, смайлы. В совокупности данный набор «языковых единиц» противоречит нормам литературного языка, но продолжает оставаться в рамках разговорного, варьируясь в жанровых характеристиках.

Так, мы можем говорить о том, что в современном интернет-пространстве есть место не только разговорному, но и всем остальным стилям современного литературного языка. Например, в работе Л.Ю. Иванова находим точку зрения, согласно которой в интернет-пространстве выделяются три группы стилевых разновидностей текстов всех форматов: 1) все книжные функциональные стили литературного языка (сюда входят научные публикации, художественные и публицистические тексты, официально-деловые документы – как правило, все они остаются без изменений); 2) жанры онлайн средств массовой информации (как правило, это онлайн-радио, онлайн-газеты, онлайн-тв и пр.); 3) собственно интернетные жанры (такие, что появились в результате распространения, видоизменения виртуального пространства) [2: 792].

Как же возникают новые языковые единицы в интернет-пространстве? Известно, что неологизмы проникают в язык-реципиент несколькими способами: 1) при появлении нового понятия или реалии, которые требуют номинации; 2) при необходимости номинации явлений, которые не имели названия ввиду некоторых внелингвистических факторов; 3) при появлении «удобного» слова, которое к тому же является усеченным вариантом большого понятия; 4) при номинации одного из нескольких значений или его оттенков; 5) при появлении так называемой моды на отдельные слова-словечки [4].

Традиционное деление неологических единиц на лексические и семантические благодаря виртуальной коммуникации можно расширить окказиональным пластом

неологизмов (в литературном нормированном языке такие единицы крайне редки ввиду их «нечитабельности» и нечастотности).

Неологизмы – это новообразованные или переосмысленные слова или выражения, которые вносят изменения или обновления в язык. Они отражают новые концепции, технологии, социальные или культурные явления, которые возникают в нашей постоянно меняющейся современности. Использование неологизмов позволяет нам выразить новые идеи и развивающуюся картину мира, а также вносить вклад в эволюцию языка.

Язык является способом выражения нашего мышления и восприятия окружающего мира. Когда возникают образы и идеи, с которыми мы не может полностью сопоставиться, нам нужны новые слова для их описания. Неологизмы помогают нам обновить нашу картину мира, вводя новые термины, которые отражают те аспекты реальности, которые ранее остались безымянными или недостаточно понятыми.

Значительное число неологизмов появляется в результате научных и технологических прорывов. Технологии, такие как компьютеры, интернет или искусственный интеллект, создают новые концепции, которые требуют новых терминов для их объяснения и понимания. Например, слова «цифровой след» или «виртуальная реальность» не существовали раньше, но появились в результате новых технологических достижений.

Кроме того, неологизмы отражают социальные и культурные изменения. Социальные движения, новые взгляды и представления о гендерной идентичности, равенстве и разнообразии, создают новые термины для их описания. Кроме того, культурные явления, такие как музыка, мода или искусство, привносят своеобразные неологизмы, чтобы отразить новые тенденции и стили.

Использование неологизмов имеет несколько характерных особенностей. Во-первых, они помогают нам точнее выразить наши мысли и идеи, заполняя пробелы в нашем лексиконе. Новые слова и выражения делают нашу речь более точной и понятной.

Во-вторых, неологизмы способствуют актуализации языка и его адаптации к современным условиям и потребностям. Язык – это живой организм, который должен развиваться и изменяться вместе со своими пользователями. Неологизмы отражают новые представления и мировоззрение, помогая нам находить языковые средства для их выражения.

В-третьих, неологизмы могут стимулировать творческое мышление. Использование новых слов и концепций позволяет нам продолжать искать и экспериментировать с языком, что может способствовать развитию наших интеллектуальных способностей.

Таким образом, неологизмы играют важную роль в обновлении картины мира. Они позволяют нам описывать и понимать новые идеи и явления, которые возникают в современном мире. Неологизмы дополняют и расширяют нашу лексику, делая нашу речь более точной и адаптированной к современным условиям. Кроме того, они способствуют развитию творческого мышления и актуализации языка. Все эти факторы делают неологизмы ценным инструментом для формирования обновляющейся картины мира.

Отметим, что неологизации подвергается не конкретный язык, но и каждый из них. Напомним, что современное информационное пространство, включая интернет, является мощной средой для развития и распространения новых слов и выражений, включая неологизмы. В узбекском языке также можно отметить появление и использование новых терминов и выражений, которые отражают современные тенденции и явления.

Теория появления неологизмов может быть связана с несколькими факторами. Первым из них является необходимость выражения новых идей, концепций и технологий, которые появились в результате научного и технологического прогресса. Например, с развитием смартфонов появились такие слова, как «мобайл», «интернет» и «вибер».

Второй фактор связан с влиянием других языков и культур, особенно английского языка. Многие современные технологии и социальные явления были разработаны и впервые использованы в англоязычных странах, и поэтому их названия и выражения могут быть заимствованы из английского языка. Например, слова «айпад» и «твиттер» теперь используются и в узбекском языке.

Третий фактор – это социальные, политические и экономические изменения в обществе, которые зачастую требуют новых терминов для их описания. Например, слово «стартап» стало очень популярным в узбекском языке в последние годы, так как молодые предприниматели активно развивают свои бизнес-проекты.

Неологизмы в узбекском языке в интернет-пространстве могут иметь разные формы и функции, включая создание новых слов, переосмысление существующих терминов и использование заимствованных иностранных слов, что сближает их с русским языком и делает возможным сопоставительное изучение неолексем в этих языках.

Неологизмы отражают быстрый темп развития современных технологий, изменения в обществе и новые потребности и желания людей. Таким образом, неологизмы в узбекском языке в интернет-пространстве являются результатом взаимодействия различных факторов и отражают современные социокультурные и информационные тенденции.

**Литература**:


1. Виноградова Т.Ю. Специфика общения в Интернете. Русская и сопоставительная филология: Лингвокультурологический аспект. Казань, 2004. URL: http://www.philology.ru/linguistics1/vinogradova_t-04.htm.

2. Иванов Л.Ю. Язык в электронных средствах коммуникации // Культура русской речи. М., 2003. С .791–792.

3. Кронгауз М.А. FAQ: Язык в интернете. Шесть фактов о трансформациях, произошедших с языком под влиянием новых средств коммуникаций. URL: https://postnauka.ru/faq/25925.

4. Рахманова Л.И., Суздальцева В.Н. Современный русский язык. Лексика. фразеология. Морфология. М., 1997. 480 с.

5. Степанова И.Ж., Бохиева М.В. Семантические неологизмы языка в Интернете // Мир науки, культуры, образования. 2018. № 2 (69).


© Тухтамишева Р.Р., 2024

**УДК 811.512.141**

***Усманова Миңһылыу Ғөбәйт ҡыҙы,***
*БР Хөкүмәте ҡарамағындағы Терминология*
*хеҙмәтенең етәксеһе, Өфө ҡ., БР*

# Тел ғилеме алдында хәл итә торған мәсьәләләрҙең береһе – телдә сифат ҡылымды дөрөҫ биреү. Хәҙерге заман сифат ҡылым: яңы ҡараш

**Телдең хәл-торошо**

Башҡорт теленең грамматикаһында халыҡ теленең үҙенсәлеген биреп еткермәгән урындар, телгә көсләп индергән формаларҙың (*ялғауҙарҙың*) булыуы һәм уларҙың һаман хәл ителмәгәне, был етешһеҙлектәрҙең ҡайһы береһе тәүге дәүерҙән үк килеүе, беренсе хеҙмәттәрҙә, дәреслектәрҙә үк урын алыуы тураһында ғалимдар Н.К. Дмитриев, Н.Х.Ишбулатов, Әкрәм Бейеш һ. б. күрһәткән [4: 157, 205; 7: 110; 16: 90].

Башҡорт теле һәм уның диалекттары буйынса булған бар фәнни хеҙмәттәрҙе, шулай уҡ мәҡәлә, дәреслектәр һ. б. ентекләп тикшереп сығыу грамматикала халыҡ теленең дөрөҫ бирелеп бөтмәгән урындарының әле һаман булғанын күрһәтте. Шуларҙың береһе – *сифат ҡылымды дөрөҫ биреү мәсьәләһе.* Һүҙебеҙ *хәҙерге заман сифат ҡылым* тураһында булыр.

**Хәҙерге заман сифат ҡылым грамматикала**

Грамматикала хәҙерге заман сифат ҡылымдың ике формаһы булыуы (*ябай, ҡушма*), **ябай форманың -ыусы** ялғауы менән яһалыуы әйтелә. Миҫалдар: уҡыт**ыусы,** яҙ**ыусы** [17: 102], йөр**өүсе**, уҡыуҙан ҡайт**ыусы** балалар, дәрес әҙерлә**үсе** бала; уҡы**усы** балалар ҡайттылар, көлтә ташы**усы** егеттәр ашарға туҡтанылар; кил**еүсе** иптәш, эшкә тотон**оусы** егеттәр [10: 147], эшлә**үсе**, яҙ**ыусы**, бел**еүсе**, ос**оусы**, йөҙ**өүсе;** юҡлыҡта: яҙ**ма**усы, һөйлә**мә**үсе. [15: 218–219], кил**еүсе** (кеше), ҡайт**ыусы** (кеше), ярҙам ит**еүсе** [8: 125]; онот**оусы**, һөйлә**үсе**, йөҙ**өүсе**, эс**еүсе**, һөйрәл**еүсе**, көт**өүсе**, бейе**үсе**, һайра**усы** ҡоштар, ғазаплан**ыусы** кеше, саңғы шыу**ыусы** малай, ҡайғырт**ыусы** әсә, юлдан яҙҙыр**ыусы** кеше, тура юлға йүнәлт**еүсе** иптәш, орлоҡ ағыула**усы** машина [5: 205], ҡара**усы**, кил**еүсе**, ос**оусы**, көл**өүсе** [6: 390], бар**ыусы**, йый**ыусы**, көт**өүсе**, ҡой**оусы** [2: 67]. Күренекле ғалим В.Ш. Псәнчин менән профессор Ю.В. Псәнчин хәҙерге заман сифат ҡылымдың бер юлын – **-ыусы** аффиксы менән яһалғанын күрһәтә: йыу**ыусы**, йыйыштыр**ыусы**, уҡы**усы**, эшлә**үсе**, ярҙамлаш**ыусы**, ярҙам ит**еүсе** [11: 157]; эшлә**үсе** [12: 121].

Ғалимдарҙың ҡайһы бере юҡлыҡ формаһын күрһәтә: бар**ма**усы, кил**мә**үсе [10: 124], яҙ**ма**усы, һөйлә**мә**үсе [15: 219], ал**ма**усы, кил**мә**үсе, ярҙам ит**мә**үсе [9: 233], ярат**ма**усы, бар**ма**усы [2: 67], эшлә**мәүсе** [12: 121].

**Ҡушма формаһы -а** ялғаулы ҡылым аҙағынан **торған** ярҙамлыҡ ҡылымы ҡуйып яһала:

Игенде үҙе йөр**өй торған** комбайн менән урып йыйҙылар [10: 148]; яҙ**а** тор**ған** ҡағыҙ, кил**ә** тор**ған** кеше [15: 219],

тиҙ бөт**ә** тор**ған** (ауырыу), шәл бәйл**әй** тор**ған** (энә). [8: 125; 9: 236], ҡалаға бар**а торған** машина, ҡалаға **барыусы** машина; почта йөрөт**ә торған** кеше, почта **йөрөтөүсе** кеше, аш һоҫ**а торған** ҡашыҡ, ләкин аш **һоҫоусы** ҡашыҡ түгел [8: 24],

беҙҙең еңеүҙе белдер**ә** тор**ған** факт, әйткәнде бел**ә** **торған** кеше [5: 199–204],

ила**й** тор**ған** ҡурсаҡ, бар**а** тор**ған** урын [6: 388–392];

ултыр**а** тор**ған** урын [2: 72],

эшлә**й** **торған** ҡорал [12: 121].

Ғалим Ҡ.З. Әхмәров ҡушма форманың хәл ҡылым аффикстары **-а, -п** һәм **-ған** аффиксын алған ярҙамсы ҡылымдар (тор**ған**, ят**ҡан**) менән яһалыуын күрһәтә: эшлә**й** **торған**, бар**а** **ятҡан** [1: 785].

**Юҡлыҡ формаһы**: ал**ма**й торған, йөрө**мә**й тор**ған** [9: 111]; кеше йәшә**мә**й тор**ған** утрау [5: 199–204];

Ғалимдар биргән ҡағиҙә һәм уны нығытҡан миҫалдарҙы ҡарап сыҡҡас, күҙ алдына шундай картина баҫа:

1) ғалимдарҙың күбеһе **-ыусы** ялғауы менән яһалған ябай ҡылымдарҙан һуң улар асыҡлаған исемде бирмәгән (эшләүсе, онотоусы, йөҙөүсе, эсеүсе, һөйрәлеүсе һ. б.), ә ҡушма юл менән яһалғандары артынан яҙғандар (шәл **бәйләй торған** <u>энә</u>) һ. б.;

2) ҡайһы бер ғалимдар теория өлөшөндә **-ма** ялғауы менән юҡлыҡ яһалыуын күрһәткән (ал**ма**усы, кил**мә**үсе), ә икенселәре бөтөнләй яҙмаған.

Һорау тыуа: Ғалимдар ни өсөн шулай эшләне икән? Быны нисек аңларға?

Яуап ябай: әгәр ҙә миҫалға биргән ҡылымдар артынан исемде яҙһалар, ҡағиҙә күҙ алдында юҡҡа сығар ине, сөнки уны уҡыған кеше алдына бик ныҡ боҙолған башҡорт теле килеп баҫа. Шуға ла ғалимдар исемдәрҙе яҙмауҙы хуп күргәндер. Миҫал өсөн сифат ҡылым артынан исем ҡуйып ҡарайыҡ:

**онотоусы** уҡыусы, **эсеүсе** ир, **һөйләмәүсе** бала, **килмәүсе** ҡунаҡ, **йөҙөүсе** малай, **йөрөүсе** кеше, **белеүсе** студент, **килеүсе** ҡунаҡ, **көлөүсе** ҡыҙ.

Күреүегеҙсә, ҡолаҡҡа ятмаған, башҡорт ғүмерҙә лә һөйләмәгән, ишетмәгән һүҙбәйләнештәр килеп сыҡты. Бер ҙә көлкө килмәй. Илағы килә.

Ә бит мәктәп башҡорт балаһын ошолай уҡытыуҙы әле лә дауам итә – 100 йылға яҡын!

Ҡайһы бер ғалимдарыбыҙ сифат ҡылымды тулы биргән тигәйнек: **һайраусы** ҡоштар, **ғазапланыусы** кеше, саңғы **шыуыусы** малай, улы хаҡында **ҡайғыртыусы** әсә, юлдан **яҙҙырыусы** кеше, тура юлға **йүнәлтеүсе** иптәш, профессия **һайлаусы** йәштәр, иген **сәсеүсе** кеше; беҙгә **киләсәк** ҡунаҡ, Өфөгә **йөрөйәсәк** поезд һ. б. [5: 151–152]; **килеүсе** (кеше), **уҡыусы** (бала), **ҡайтыусы** (кеше) [8: 125].

**-ыусы ялғауының телгә килеп инеүе**

Башҡорт тел ғилемендә *хәҙерге заман сифат ҡылымдың* телдә бирелеүенә икенсе ҡараштә торғандар ҙа бар. Улар – күренекле ғалим Н.К. Дмитриев менән Ә.Ғ. Бейешев.

Әкрәм Бейеш **-ыусы** ялғауы тураһында түбәндәгеләрҙе әйтә: башҡорт телселәре башта **-ыусы** ялғауын *хәҙерге заман сифат ҡылым* формаһына һанамаған. Шуға күрә Ә. Мансур норматив мәктәп дәреслеге итеп эшләгән «Грамматика» китабының 1933 йылғы 1-се баҫмаһында хәҙерге заман сифат ҡылым формаһын күрһәтмәй, сифат ҡылымдың ике заман формаһы булыуын ғына әйтә: үткән заманда **-ған**, киләсәк заманда **-саҡ** ялғауҙары. Ләкин Ә. Мансур, күрәһең, урыҫ телендә хәҙерге заман сифат ҡылымының айырым формаһы

булғас, башҡорт телендә лә булырға тейеш тигән уйға килеп, 1934 йылғы 2-се баҫмаһына, хәҙерге заман сифат ҡылым формаһы **-ыусы** тип өҫтәмә индерә. Шул замандан алып башҡорт теленең грамматикаһы буйынса кем генә яҙмаһын, **-ған** ялғауын үткән заман сифат ҡылым формаһы, **-ыусы** ялғауын хәҙерге заман сифат ҡылым формаһы тип яҙа башлай [16: 77]. Ҡыҙғаныс, был хәл әле лә үҙгәрешһеҙ ҡала килә. (М.У.).

**Хәҙерге заман сифат ҡылым халыҡ телендә**

Ул ике юл менән бирелә: ябай һәм ҡушма**.**

**Ябай формаһы**

а) **-ған** ялғауы. Ул тамыр (нигеҙ) ҡылымға ҡушыла.

**өйләнмәгән** егет – ул егет һаман өйләнмәй йөрөй;

**белгән** һорау – был һорауҙы мин беләм.

Хатаһы **булған** һөйләм. – һөйләмдә хата бар.

Һинең әллә ҡайҙа урыҫ араһында **йөрөгән** энеңә алма кеүек ҡыҙымды бирәһем юҡ! (Ж. Кейекбаев);

б) **-р** ялғауы менән:

Алабута, имән әкәләһе илә ҡатышҡан ондан икмәк бешергән инек, һис **ашар** хәл юҡ. (М.Ғафури).

**Ашар** хәл юҡ = ашап булмай (*хәҙерге заман*).

Сағыштырығыҙ:

| Хәҙерге заман хәбәр ҡылым | Хәҙерге заман сифат ҡылым |
|---|---|
| 1. Әсәйем ауылда **йәшәй** | Ауылда йәш**әгән** әсәйемде ҡотлайым (йәшә**үсе** булмай) |
| 2. Һине көн дә уйла**йым** | Һине уйлама**ған** көнөм юҡ (уйлама**усы** булмай) |
| 3. Алма бешм**әгән** | Бешм**әгән** алманы ашағым килмәй (алма әле бешм**әгән**, ҡаты; бешм**әүсе** түгел) |
| 4. Беҙгә ҡаршы бер машина кил**ә** | Улым, ҡаршы кил**гән** машинаны туктат әле (кил**еүсе** булмай) |
| 5. Яңы йыл етеп килә | **Етеп килгән // Яҡынлашып килгән** Яңы йыл менән ҡотлайым! (*Етеп килеүсе* тип халыҡ әйтмәй) |
| 6. Хәҙер кеше эсм**әй** | Хәҙер **эскән** кеше юҡ (эс**мә**үсе түгел) |

Бирелгән һөйләмдәргә анализ яһайыҡ:

тәүге ике һөйләмдә ***-ган*** аффиксы өс заманды ла белдерә (*үткән, хәҙерге* һәм *киләсәк замандарҙы:* әсәйем *үткән* йылдарҙа ла шул ауылда ***йәшәне***, *әле* лә шунда ***йәшәй***, *киләсәктә* лә ауылдан китергә уйы юҡ);

3-сө һөйләмдә сифат ҡылым *үткән-хәҙерге заманды* белдерә (бөгөнгә тиклем *алма бешмәгән* булған, әле лә *бешмәгән*);

һуңғы өс һөйләмдә ***-ган*** ялғауы *хәҙерге заманды* белдерә.

Тағы ла миҫалдар: *Алда **барған** һыбайлы туҡтарға әмер бирҙе...* (Р. Өмөтбаев); *Конкурсҡа барырға **әҙерләнеп йөрөгән** балаларҙы студияға саҡырҙыҡ* (Тел., 15.12.16).

*Колхоздың баш бухгалтеры булып* ***эшләгән*** *ике туған еҙнәмде ялланы был эшкә* (Ә. Абушахманов);

**Ҡушма формаһы:**

а) сифат ҡылым **-а, -п** ялғаулы хәл ҡылым артынан **-ған** ялғаулы ҡылым килеү менән: *ашҡа* ***һала торған*** *һуған, ауылға тура* ***барып булған*** *юл; Бикбулат* ***атлап барған*** *еренән шып туктаны* (С. Агиш); *Сәхнәлә* ***йырлап торған*** *егет минең ейәнем Ильяс; Йыл да* ***үткәрелеп килгән*** *байрамға саҡыра* (Реклама. 26.08.18. Радио «Юлдаш»); ***Йоҡлап ятҡан*** *баланы ҡапыл уятмағыҙ;*

б) **-р** ялғауы менән, ул **-п** ялғауы булған ҡылым артынан килгән **-а**(-ә, й) ялғаулы ярҙамсы ҡылымға ҡушыла: *Башлаған эшен* ***ташлап китәр*** *әҙәм түгел ул;*

в) **-рға** ялғаулы ҡылым менән **-ған** ялғаулы сифат ҡылымдан тора: *Армияға* ***китергә йөрөгән*** *егет кемегеҙ була?*

**Юҡлыҡ формаһы -ма/-мә** ялғауы менән күрһәтелә: *Ҡунағын ярат**ма**ған хужа бесәйен туҡмар* (мәҡәл).

**Ҡайһылай була: Йәшәүсеме? Әллә йәшәгәнме?**

*Хәҙерге заман сифат ҡылым* күп кеше өсөн ауыр тема булып тойола, сөнки әле уны телдә ике төрлө биреү бар:

1) **-ыусы** ялғауы менән: *Ауылда* ***йәшәүсе*** *әсәйемде ҡотлайым;*

2) **-ған** ялғауы менән: *Ауылда* ***йәшәгән*** *әсәйемде ҡотлайым.*

Ҡайһыһы дөрөҫ? Һорауға яуап эҙләйек.

Күптән аңланым: кешегә ошолай дөрөҫ, ә тегеләй дөрөҫ түгел тип кенә әйтеү аҙ. Ул кешенең ныҡынған фекерен үҙгәртә алмай: артабан да ул үҙенсә яҙа, һөйләй... Ә ике төрлө яҙыу – телде боҙоу дауам итә тигән һүҙ.

Шулай итеп, *хәҙерге заман сифат ҡылымды* биреүҙә ике төрлө ҡараш йәшәй.

| | |
|---|---|
| **Беренсе ҡараш** | **-ыусы** – хәҙерге заман сифат ҡылым ялғауы |

| | |
|---|---|
| **Икенсе ҡараш** | **-ыу+ сы** = исем яһаған ялғау |
| | **-ған** – хәҙерге заман сифат ҡылым ялғауы |

Тимәк,

Берәүҙәр әйтә: «**-ыусы** ялғауы менән *хәҙерге заман сифат ҡылым* яһала»;

икенселәр әйтә: «Юҡ! **-ыу** ялғаулы исем ҡылымға **-сы** ялғауын ҡушҡандан исем, ә *хәҙерге заман сифат ҡылым* **-ған** ялғауы менән яһала».

Ошо ике ҡарашты *өс ысул* менән тикшереп ҡарайыҡ.

**Беренсе ысул. 1-се ҡараш**:

**-ыусы** – хәҙерге заман сифат ҡылым ялғауы. Миҫалдар килтерәбеҙ. Уларҙы дәреслектәрҙән алдыҡ (төп нөсхә): ***һайраусы*** *коштар,* ***ғазапланыусы*** *кеше, саңғы* ***шыуыусы*** *малай, улы хаҡында* ***ҡайғыртыусы*** *әсә, юлдан* ***яҙҙырыусы*** *кеше, тура юлға* ***йүнәлтеүсе*** *иптәш, профессия* ***һайлаусы*** *йәштәр, иген* ***сәсеүсе*** *кеше,* ***онотоусы*** *укыусы,* ***ҡайнаусы*** *тормош,* ***һөйләмәүсе*** *бала,* ***килмәүсе*** *ҡунаҡ,* ***йөҙөүсе*** *малай,* ***йөрөүсе*** *кеше,* ***ҡайтыусы*** *кеше,* ***килеүсе*** *ҡунаҡ,* ***көлөүсе*** *ҡыҙ* һ. б. [5: 151–152; 8: 125 һ. б.].

Күреүегеҙсә, башҡорт теле күҙ алдына бик матур сүрәттә килеп баҫманы. Башҡорт улай һөйләмәй. Тимәк, -**ыусы** ялғауы сифат ҡылымды дөрөҫ бирмәй булып сыға.

**1-се ысул: 2-се ҡараш**:

Исемгә, -**ыу** ялғаулы исем ҡылымға исем яһай торған -**сы** ялғауын ҡушыуҙан исем яһала:

Сағыштырығыҙ:

баҡса, балыҡ (исем) + -сы = баҡсасы, балыҡсы.

барыу, һатыу (процесс исеме) + -сы = барыусы, һатыусы.

«Ғәмәлдә үҙенә башҡа форма булып йөрөгән бер бөтөн -**ыусы** ялғауы башҡорт телендә юҡ, башҡорт телендә -**сы** ялғауы бар, – ти Әкрәм Бейеш. – Ул ялғау төрлө исемдән кешенең һөнәрен, шөғөлөн күрһәтә торған исем яһай: **эшсе, ялсы, балтасы, ҡурайсы, игенсе, алдаҡсы, енәйәтсе** һ. б.

Башҡа исемгә ҡушылған кеүек, -**сы** ялғауы исем ҡылымға ла ҡушыла һәм шулай уҡ кешенең һөнәрен, шөғөлөн билдәләй торған исем яһай: **уҡытыусы, тегеүсе, бейеүсе** һ. б. Ошоноң һымаҡ, ныҡлап исем төркөмөнә күскән һүҙҙәрҙән тыш, -**сы** ялғауы ярҙамында исем ҡылымдан ҡайһы берҙә һүҙ ыңғайында ғына әйтеп китә торған ваҡытлы исемдәр ҙә яһала. Мәҫәлән, Йәтим ҡыҙ артынан **йөрөүсе** булманы. (А., 96, 1, 11)» [16: 77].

Ысынлап та, бындай исемдәр телдә күп осрай:

Был юлы мине **күреүсе**, **туктатыусы** булманы – ҡарт швейцар лифт янында ойоп ултыра ине. (И.А);

Күптән киттек ауылдан. Унда хәҙер беҙҙе **белеүсе** лә юҡтыр.

Бындай һөйләмдәрҙе икенсе төрлө -**ған** ялғаулы сифат ҡылым итеп биреп була: **күргән, туктатҡан** кеше, **белгән** кеше.

**Икенсе ысул**

Был юлы исем ҡылымдан -**сы** ялғауы менән яһалған өс һүҙҙең (мәҫәлән, алып барыу+**сы**, оҙатыу+**сы,** йәшәү+**се**) *сифат ҡылыммы,* әллә *исемме* икәнен асыҡлап ҡарайбыҙ. Бының өсөн ике һүҙ төркөмө буйынса (ҡылым, исем) уларҙың *юҡлыҡ формаһын* яһарға кәрәк:

**Беренсе ҡарашты тикшерәбеҙ**.

**1-се ҡараш** буйынса алып барыу**сы**, оҙатыу**сы,** йәшәү**се** – хәҙерге заман сифат ҡылым.

ҡылымдың юҡлыҡ формаһы -**ма/-мә** ялғауы менән яһала

алып бар+**ма**+у**сы** уҡыусы,

оҙат+**ма**+у**сы** ағай.

йәшә+**мә**+ү**се** әсәй

Башҡорт ғүмерҙә лә улай һөйләмәй. Тимәк, улар *сифат ҡылым* түгел.

**Икенсе ҡарашты тикшерәбеҙ**.

2-се ҡараш буйынса алып барыу**сы**, оҙатыу**сы,** йәшәү**се** – исем.

исемдең юҡлығы **юҡ**, **-һыҙ** киҫәксәһе менән бирелә:

алып барыу**сы юҡ**, алып барыусы**һыҙ**;

оҙатыусы **юҡ**, оҙатыусы**һыҙ**.

йәшәүсе **юҡ**, йәшәүсе**һеҙ**. Башҡорт ошолай һөйләй. Тимәк, был һүҙҙәр исем.

Әлеге тикшереп ҡарау **алып барыусы, оҙатыусы, йәшәүсе** һүҙҙәренең исем икәнен асыҡ күрһәтте.

**Өсөнсө ысул**

Ә халыҡ – башҡорт ҡайһылай һөйләй һуң?

Сағыштырығыҙ:

Халыҡта ҡан хәтере (ген, нәҫел, тоҡом) көслө. Ул, ата-баба теленә быуаттар буйына тоғро ҡалып, үҙенсә яҙған, һөйләгән. Әле лә шулай. Бер нисә миҫал:

Унын күҙҙәре үлән төбөндәге үҙенең бәләкәс кенә өҥөнән имгәкләп **сығып килгән** ҡуңыҙға тукталды. (М.К.);

Тауыш күтәреп, **яҡынлашҡан** халыҡҡа һыр бирмәҫкә тырышып, бай яһалма асыулы тауыш менән ҡысҡырҙы. (Я.Х.);

Үҙенде **ҡыҙыҡһындырған** нәмә тураһында һораш. (2 кл. дәреслек);

Нурлы йөҙөнән йылмайыу **китмәгән**, күпкә йәш **күренгән** был инәйҙе күргәс, беренсе уйым «Күҙ теймәһен!» булды. (Б., 24.04.18.);

Тағы ла шул: Һәр кем йыл башынан уҡ «**Етеп килгән** // **Етеп килә ятҡан** // **Яҡынлашып килгән** Яңы йыл менән ҡотлайым!» – тип, *хәҙерге заман сифат ҡылымды* дөрөҫ әйтеп ҡотлап, Яңы йылға матур уй-ниәттәр менән аяҡ баҫа.

| Халыҡ -ған менән һөйләй | Дәреслек -ыусы менән ҡуша |
|---|---|
| Түбәндә ашҡаҙан ауыртканда ашарға **ярамаған** ризыҡ исемлеге бирелә | Түбәндә ашҡаҙан ауыртканда ашарға **ярамаусы** ризыҡ исемлеге бирелә |
| Сәхнәлә **йырлап торған** егет – минең ейәнем | Сәхнәлә **йырлап тороусы** егет минең ейәнем |
| Минең кәләш мин **яраткан** ашты – билмәнде йыш бешерергә тырыша | Минең кәләш мин **яратыусы** ашты – билмәнде йыш бешерергә тырыша |
| Баймаҡта **торған** туғандарға китеп барабыҙ | Баймаҡта **тороусы** туғандарға китеп барабыҙ |

Хәҙер ошо һөйләмдәрҙе *хәҙерге заманға* һалайыҡ:

| Хәҙерге заман хәбәр ҡылым | Хәҙерге заман сифат ҡылым |
|---|---|
| Түбәндә бирелгән исемлектәге ризыҡтарҙы ашҡаҙан ауыртканда ашарға **ярамай** | Түбәндә ашҡаҙан ауыртканда ашарға **ярамаған** ризыҡ исемлеге бирелә |

| | |
|---|---|
| Сәхнәлә ейәнем **йырлап тора** | Сәхнәлә **йырлап торған** егет минең ейәнем |
| Мин билмән **яратам,** кәләшем уны йыш бешерергә тырыша | Минең кәләш мин **яратҡан** ашты – билмәнде йыш бешерергә тырыша |
| Баймаҡта туғандар **тора, шунда** китеп барабыҙ | Баймаҡта **торған** туғандарға китеп барабыҙ |

Шулай итеп, башҡорт телендә *хәҙерге заман хәбәр ҡылым* **-а** ялғауы менән, ә *хәҙерге заман сифат ҡылым* **-ған** ялғауы менән бирелә.

**-ыусы ялғаулы һүҙҙең** (*исемдең*) **исем алдынан килеүе**

**Һорау** тыуа: **-ыусы** ялғауы булған һүҙ (*исем*) исем алдынан килә аламы? Килһә, ҡайһы ваҡытта?

**Яуап**: Башҡорт телендә **-ыусы** ялғауы булған исемдәрҙән һуң кешенең шөғөлөн, һөнәрен күрһәткән *исемдәр* (*һатыусы, бейеүсе, ҡуйыусы* һ. б.);

*антропонимдарҙың* (*кеше исеме, фамилияһы*) килеүе бар: **яҙыусы** Р. Ғарипов, **ҡуйыусы** К. Исламов**, укытыусы** Ғ. Кәримов.

Был һүҙбәйләнештәрҙә *яҙыусы, ҡуйыусы, укытыусы* һүҙҙәре **исем** (*сифат ҡылым түгел*!), ә һөйләмдә улар **өҫтәлмәлек** булып тора. Мәҫәлән:

**Комбайнсы** Вәзих Хәкимов, **мал ҡараусы** Арслан Шәйехов, **көтөүсе** Майшәриф Шәйхуллиндар кеүек бик күптәрҙең хеҙмәте баһалап бөткөһөҙ. (Ә.Б).

**Хата өҫтөндә эш**

**-ған** ялғауын тик үткән заман ялғауы тип кенә һанау, халыҡ теленә ҡолаҡ һалмай, ғалимдарҙың әйткәнен алмай **-ыусы** ялғауын *хәҙерге заман сифат ҡылым* күрһәткесе тип ҡарау башҡорт телен күрәләтә боҙоуға тура юл асҡан. Миҫалдар:

| **Төп нөсхә** | **Төҙәтелгәне** |
|---|---|
| Бер аҙ оялып **караусы** ҙур һоро күҙҙәр, күҙҙәргә йәм **биреүсе**, уларҙы тағы ла **матурлаусы**, бына- бына осорға әҙер **тороусы** нәҙек ҡыйғас ҡаштар,.... (И.А.) | ... **ҡараған** ҙур һоро күҙҙәр,<br>... йәм **биргән,**<br>... тағы ла **матурлаған**,<br>осорға әҙер **торған...** ҡаштар,.... |
| ... үҙебеҙҙә етештерелгән ризыҡтар менән **сауҙа итеүсе** магазиндар әллә ҡасан ук асылырға тейеш ине (А., 2017, 4, 11) | ... **сауҙа иткән** магазиндар... |
| Матурлыҡты шашып **яратыусы** Әхмүш Ямаев шул уҡ <u>ярһыулыҡ</u> менән дан **да һөйөүсе** бер кеше ине (Б.Б.) | шашып **яратҡан** Әхмүш шул уҡ **ярһыу** менән дан **һөйгән дә** бер кеше ине.<br>Бында *ярһыу* һүҙенә **-лыҡ** ялғауын өҫтәү артыҡ, сөнки *ярһыу* һүҙе үҙе исем ҡылым (ҡылымдың исеме) |

| | |
|---|---|
| Улар был тупраҡты балсыҡ сүлмәккә **һаласаҡтар** ҙа, бер ҡасан да **һарғаймаусы**, **япраҡ ҡоймаусы** гөл **ултыртасаҡтар.** (И.А.) | ... тупраҡты... **һалырҙар** ҙа, бер ҡасан да **һарғаймаған**, **япраҡ ҡоймаған** гөл **ултыртырҙар** |
| Әйҙәгеҙ, беҙ ҙә Өфө урамдары буйлап **барыусы** Юлдашҡа эйәрәйек. (БУ., 2011) | ...беҙ ҙә Өфө урамдары буйлап **барған** Юлдашҡа эйәрәйек |
| Улар йорттарындағы ике ҡат араһында **йөрөүсе** лифттары менән бер-береһе алдында маҡтаныша. (А., 2017, 11, 60) | ... ике ҡат араһында **йөрөгән** лифттары... |
| ... ағас ботағына, сигнал ҡыңғырауы хеҙмәтен **үтәүсе** алюмин тәрилкә эленгәйне. (Ә.Б) | ... сигнал ҡыңғырауы хеҙмәтен **үтәгән** алюмин тәрилкә эленгәйне |
| ... проблеманы **барлыҡҡа килтереүсе** сәбәптәр. (БУ., 2018, 1, 5) | проблеманы **барлыҡҡа килтергән** сәбәптәр |
| Уның әҙәби мираҫы **үҫеп килеүсе** быуынды тәрбиәләй,... (БҠ., 2020, 9) | ... **үҫеп килгән** быуынды тәрбиәләй |
| Аръяҡ менән **тоташтырыусы** ағас күперҙе бына-бына ағыҙып китергә итә. (А.Б.) | Аръяҡ менән **тоташтырған** ағас күперҙе бына-бына ағыҙып китергә итә |
| Ысынлап та, иҫ китмәле хәл: уҡ һымаҡ **ялт итеп кенә ҡалыусы** йәшендең көсө лә 50 миллион вольттан артыҡ. (Ә.Б.) | Ысынлап та, иҫ китмәле хәл: уҡ һымаҡ **ялт итеп кенә ҡалған** йәшендең көсө лә 50 миллион вольттан артыҡ |
| Милли үҙаң иһә милләтте **билдәләүсе** мөһим сифаттарҙың береһе; Тел бынан тыш тотош халыҡтың рухи донъяһын, мәҙәниәтен **сағылдырыусы**, быуындан-быуынға **тапшырылыусы** берҙән-бер ҡабатланмаҫ ҡорал; Әзербайджанда ошо журналды **нәшер** **итеүсе** бер дуҫым әсенеп … әйткәйне. [З.У.] | Милли үҙаң иһә милләтте **билдәләгән** мөһим сифаттарҙың береһе; Тел... тотош халыҡтың рухи донъяһын,... **сағылдырған**, быуындан-быуынға **тапшырылған** берҙән-бер ҡабатланмаҫ ҡорал; Әзербайджанда ошо журналды **нәшер иткән** бер дуҫым әсенеп … әйткәйне |

Ни ғәләмәттер, хәл-ваҡиға үткән заманда, хатта бик боронғо осорҙа булһа ла, уйламай-нитмәй, **-ыусы** ялғауын сәпәп ҡуйыу бар (*быны башҡаса әйтеп булмай):*

| | |
|---|---|
| Әҙәмдең һәм унан һуң **хакимлыҡ итеүсе** Шамғундың (1118–1135) эске сәйәсәте халыҡта ризаһыҙлыҡ тыуҙыра (А., 2016) | ... унан һуң **хакимлыҡ иткән** Шамғундың (1118–1135)... ризаһыҙлыҡ тыуҙыра |
| Урта быуаттарҙа **йәшәүсе** урта Волга буйы, Урал һәм көнбайыш ханлыҡтары (А., 2016) | Урта быуаттарҙа **йәшәгән...** ханлыҡтары |
| Эйе, **ләкин ул** – бер шәжәрә яҙмышы аша халыҡ яҙмышын **һүрәтләүсе** әҫәр (БУ., | ... халыҡ яҙмышын **һүрәтләгән** әҫәр |

| | |
|---|---|
| 2011) | |
| Батырша – башҡорт ихтилалын **ойоштороусы** шәхес. (Ғ.Х.) | Батырша – башҡорт ихтилалын **ойошторған** шәхес |
| Миңлеғәле Шайморатов 1924 йылдан башлап Мәскәүҙә... Кремлде **һаҡлаусы** кавалерия полкының командиры була. (2-се кл.,49-сы б.) | ... Кремлде **һаҡлаған** кавалерия полкының командиры була |
| Йырҙар яҙып **йөрөүсе** композитор Рәүеф Мортазин да уның сәйен, балын тәмләп ҡарағайны.... (Ә.Б.) | Йырҙар яҙып **йөрөгән** композитор... балын тәмләп ҡарағайны.... |

Шулай ҙа күңелдә һорау тыуып ҡуя: халыҡ телен һәйбәт белгән яҙыусылар (К. Мәргән, З. Биишева, Д. Бүләков һәм башҡа бик күптәр) **-ыусы** ялғауы менән үҙҙәре яҙҙымы икән? Әллә... ярҙам иткәндәрме. Миҫалдар:

Уның эргәһендә кейәү **оҙатып килеүсе** Тамъян егеттәре һәм икенсе яҡлап хужалар, ҡыҙҙың ағалары, энеләре, яҡындары теҙелгән. (Кирәй Мәргән);

Йыш-йыш тын алған егет **йүгереп килеп инеүсе** Филзә менән бәрелеште. *(*Динис Бүләков*).* Дөрөҫө – **оҙатып килгән**, **йүгереп килеп ингән**.

Шулай итеп, башҡорт телендә хәҙерге заман сифат ҡылымдың ябай формаһы **-ған, -р** ялғауы менән, ҡушма формаһы **-а, -п, -рға** ялғаулы ҡылым һәм **-ған** ялғаулы ярҙамсы ҡылым менән яһал

**Әҙәбиәт**:


1. Ахмеров К.З. Краткий очерк грамматики башкирского языка / Башкирско-русский словарь. М.: Государственное изд-во иностр. и нац. словарей, 1958. С. 743–802.

2. Байсурина-Бердигулова Р.И. Причастия в современном башкирском языке: монография. Уфа: РИЦ БашГУ, 2007.

3. Дмитриев Н.К. Грамматика башкирского языка. Л., 1948; Уфа, 2007.

4. Дмитриев Н.К. Башҡорт теленең грамматикаһы. Л., 1950; Өфө: БДУ, 2008.

5. Зәйнуллин М.В. Ҡылым // Башҡорт теле грамматикаһы. Морфология. II том. Өфө: Китап, 2018. 66–227 б-р.

6. Ишбаев К.Ғ. Орфоэпия. Ҡылым // Башҡорт теле. Юғары укыу йорттарының филология факультеты студенттары өсөн дәреслек. Өфө: Китап, 2012. 137–141; 353–396 б-р.

7. Ишбулатов Н.Х. Хәҙерге башҡорт теле. (Әҙәби телдең нормалар системаһы). Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1972.

8. Кейекбаев Ж.Ғ. Хәҙерге башҡорт теле. Өфө, 1966;

9. Кейекбаев Ж.Ғ., Ғәлләмов А.А., Фәритов Х.С., Аҙнабаев Ә.М., Сәйетбатталов Ғ.Ғ. Башҡорт теле: педагогия училищелары өсөн дәреслек. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1983.

10. Мансуров Ә. Башҡорт теле грамматикаһы. I киҫәк. Фонетика һәм морфология. Ете йыллыҡ һәм урта мәктәптең V–VI кластары өсөн дәреслек. Өфө: Башгосиздат, 1953.

11. Псәнчин В.Ш., Псәнчин Ю.В. Башҡорт теле. 10–11-се кластар өсөн уҡыу ҡулланмаһы. Өфө: Китап, 2018.

12. Солтанбаева Х.В., Толомбаев Х.А., Балапанова Л.С. Башҡорт теле. Дөйөм белем биреү учреждениеларының 6-сы класы өсөн дәреслек. Өфө: Китап, 2012.

13. Усманова М.Ғ., Абдуллина Ф.Ф. Башҡорт теле. Теория. Өфө: Китап, 2020.

14. Усманова М.Ғ. Телебеҙҙе кем боҙа? Үҙебеҙ! // «Башҡортостан» гәзите. 21.02.12; 16.03.12; 27.04.12; 25.05.12; 25.08.12; 14.09.12; 30.11.12; 21.02.13; 29.03.13; 3.05.13; 12.06.13; 23.08.13; Башҡорт грамматикаһы һәм халыҡ теле // «Ватандаш» журналы, № 8-12 2019; № 1-2, 2020; Причастие настоящего времени и способы его выражения в башкирском языке: новый взгляд на проблему // журнал Российская тюркология, 2018. № 1-2 (18–19). С.67-83; Причастие прошедшего времени и способы его выражения в башкирском языке: новый взгляд на проблему // журнал «Российская тюркология». М.: «Институт языкознания», «Российский комитет тюркологов», 2019. С. 125–138.

15. Фәритов Х.С., Ғүмәров Ғ. Башҡорт теленең грамматикаһы. Фонетика һәм морфология: педучилищелар өсөн дәреслек. Өфө: Башгосиздат, 1949.

16. Әкрәм Бейеш. Тел хикмәттәре. Өфө: Китап, 1999.

17. Әхмәр Ҡ. Башҡорт теле: педучилищелар өсөн дәреслек; педагогик курстар һәм уҡытыусылар өсөн пособие. Өфө: Башгосиздат. Дәреслектәр һәм педагогик әҙәбиәт секторы, 1941

© Усманова М.Ғ., 2024

**УДК 37.035.6**

***Усманова Сәлимә Рафиҡ ҡыҙы,***
*музыка белгесе, Баланы үҫтереү үҙәге –*
*«Айыуҡай» балалар баҡсаһы, Баймаҡ ҡ., БР*

## Туған телгә һөйөү тәрбиәләүҙә ғаиләнең роле

«Телде тере тел һаҡлаһа,
Һүҙҙе сабый ҡабатлаһа,
Бәләнән тел ҡотолор.
Телдән төшкән тел юҡ булыр,
Телдәге тел ныҡ булыр».
*Р. Бикбаев*

Иң ҙурҙарҙан һаналған Ethnologue телдәр каталогы мәғлүмәттәренә ярашлы, 2022 йылда донъяла барлығы 142 тел ғаиләһенә ҡараған 5500 тел булған. Тик шуныһы: ЮНЕСКО-ның «Бөтөү хәүефе янаған донъя телдәре атласы»на ярашлы, хәҙерге осорҙа тик Европала ғына 50-гә яҡын тел ошо исемлеккә индерелгән, ә барса донъя кимәлендә 400-ҙән ашыу халыҡ теле юҡҡа сығып барыусы тел статусына дусар булған. Теге йәки был телдең

яҙмышын билдәләр өсөн белгестәр ышаныслы тип иҫәпләгән бер күрһәткес бар: әгәр ҙә балаларҙың 70 проценттан аҙырағы ғына туған телен өйрәнә икән, ошо халыҡ теле хәүефле зонала булып сыға. Ҡыҙғанысҡа күрә, һуңғы осорҙа беҙҙең башҡорт теле лә, беҙ быны һис теләмәһәк тә, ошо зоналағы телмәр исемлегенә индерелде [2, № 48, 2023]. Был хәлдең һәм туған телебеҙҙең яҙмышы сәбәптәре асыҡлана, туған телде өйрәнеү һәм һаҡлау юлдары, ысулдары тәҡдим ителә, төрлө проекттар эшләнелә, программалар баҫтырыла, гранттар булдырыла. Ләкин һөҙөмтәләр әллә ни маҡтанырлыҡ түгел. Был мәсьәләлә мәктәп, балалар баҡсаһы-ғаиләне, ә ғаилә мәктәп һәм балалар баҡсаһын ғәйепләргә күнеккәнбеҙ. Ошо көрсөктән сығыу юлдары тураһында бергәләшеп уйларға ваҡыт. Ата-әсәләре, туғандары менән туған телендә аралашҡан баланың тәне һәм йәне гармониялы рәүештә үҫешә, йәғни уның шәхесенең биологик һәм рухи-психологик бөтөнлөгө еңелерәк формалаша. Туған телдә иркен аралашҡан һәм яҙған баланың ижади һәләттәре лә тиҙерәк асыла, тип иҫәпләй психологтар.

Һәр ҙур эш бәләкәй эштәрҙән, бәләкәй аҙымдарҙан башлана. «Ояһында ни күрә, осҡанында шул булыр» тиелә халыҡ мәҡәлендә. Балаға тәрбиә нигеҙе, шул иҫәптән туған телдә аралашыу ҙа ғаиләлә һалына. Ғаилә тәрбиәһендә ниндәй ысулдар ҡулланырға була. Баланы тәрбиәләйем тиһәң, иң әүәл үҙеңде тәрбиәлә, тиҙәр. Гаджеттарҙа сәғәттәр буйы ултырыусы, бала ултыра башлағас та ҡулына телефон тоттороп ултыртыуҙы хуп күргән ата-әсәләр күбәйҙе. Ваҡыт юҡлыҡҡа һылтанып, күптәребеҙ бала менән аралашыуҙы онотоп барабыҙ. Беренсенән, ата-әсә үҙе туған телдә матур итеп аралашырға тейеш. Туған телде танытып өйрәтеүҙе ябай ғына күренештәрҙән башларға ла була. Мәҫәлән, бишек йырҙарын йырлап йоҡлатыу. Әсәй башҡарған ошо ябай йыр оло әһәмиәткә эйә, моң аша рух формалаша. Артабан телмәрҙәге яғымлы һүҙҙәрҙе әйтеү: «Хәйерле иртә», «Һаумыһығыҙ», «Зинһар өсөн», «Ашығыҙ тәмле булһын», «Уңышлы көн теләйем», «Сәләмәт бул» һ. б. Был һүҙҙәр көн дауамында әйтелгән һүҙбәйләнештәр булһа, бала хәтерендә мәңге ҡаласаҡ. Шулай уҡ туғанлыҡ терминдарын үҙ телеңдә өйрәтеү мөһим. Беҙҙең телебеҙ туғанлыҡ терминдарына бик бай. «Атайым», «әсәйем», «ағайым», «апайым» тип һөйләшеү, туғандар араһындағы мөнәсәбәттәрҙе тағы ла нығытыр ине. Был йәһәттән балалар баҡсаһында, мәктәптәрҙә «Минең шәжәрәм», «Тамырыңды беләһеңме» бәйгеләре, «Беҙҙең дуҫ ғаилә», «Мин һәм минең ғаиләм» исемле видеороликтар бәйгеһе, «Туғандарым менән көслөмөн», «Татыу ғаилә – ил күрке» исемле ғаилә байрамы үткәрергә була.

Икенсенән, ғаиләлә милли аш-һыуҙарҙы әҙерләүҙе традицияға индерергә кәрәк. Юғиһә сит ил аҙыҡтары көндән-көн балаларҙың яратып ашаған ризығына әйләнде. Мәҫәлән, ял көнөндә ошо ризыҡты балалар менән бергә әҙерләп, өйрәнеп, бергәләшеп ошо ризыҡҡа бәйле шиғыр, йомаҡ өйрәнеп тә ҡуйһаҡ, хәтерҙә лә яҡшы һаҡланасаҡ. Каникулда өләсәйҙәр ҙә был эштә ярҙамлаша ала. Ғаиләләр өсөн «Беҙҙең яратҡан милли ризыҡ», «Өләсәйемдән өйрәнәм», «Тәмлекәс» бәйгеләре үткәрергә мөмкин. Был бәйгеләрҙә төп талап – баланы һөйләргә һәм аш-һыуҙы перезентацияларға өйрәтеү.

Өсөнсөнән, ғаилә менән мотлаҡ үҙ телеңдәге балалар баҫмаһына яҙылып, кистәрен бергәләшеп уҡыу, фекер алышыу, баҫмалағы шиғыр, әкиәттәрҙе ятлатыу ҙа үҙ һөҙөмтәһен

күрһәтер ине. Йомаҡтар ҡойошоп, мәҡәл-әйтемдәр әйтешеүгә лә күп ваҡыт кәрәкмәй. Балалар баҡсаһында, мәктәптәрҙә лә «Ғаилә менән милли баҫмаға», «Беҙҙең ғаиләнең ятаҡан баҫмаһы», «Башҡортса уҡыйбыҙ», «Шәмбе кис» тигән милли баҫмалар менән ҡыҙыҡһындырыуға арналған акцияларҙы йышыраҡ ойоштороу кәрәк.

Дүртенсенән, ғаилә менән айына бер тапҡыр булһа ла үҙ телеңдәге концерттарға, спектаклдәргә, киноларға йөрөүҙе тәҡдим итер инем. Сөнки сәнғәт әҫәрҙәре аша халҡыбыҙҙың йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен, телебеҙҙең һүҙ байлығын өйрәнәһең, рухыңды нығытаһың. Милли моң, милли көйҙәр, йырҙар, бейеүҙәр менән балаларҙы бәләкәй саҡтан таныштырыу хәтерҙә лә яҡшы һаҡланасаҡ. Түңәрәктәрҙе һайлағанда ла ошо үҙенсәлектәрҙе иҫәпкә алыр кәрәк. Бергәләшеп ултырып, балалар өсөн эшләнгән «Тамыр», «Иләү», «Сәңгелдәк», «Сулпылар» тапшырыуҙарын, йәнһүрәттәр ҡарарға тырышығыҙ. Шулай уҡ ғаилә менән музейҙарға, күргәҙмәләргә йөрөтөүҙе традицияға индерер кәрәк. Һабантуйҙарға, йыйындарға барғанда халҡыбыҙҙың бай күргәҙмәһе, йолалары менән танышырға була. Яңы һүҙҙәр, яңы терминдар менән нәҡ ошо музей, күргәҙмәләрҙә предметтар аша таныштыраһың. Был эштә олатай-өләсәйҙәр ярҙам итһә, яҡшы булыр. Каникул мәлдәрендә ауылда йәшәгән олатай-өләсәйҙәр, туғандарҙа үҙ туған телеңдә аралашып, йолалар, ғөрөф-ғәҙәттәр менән таныштырырға була.

Әлбиттә, ғаилә менән бик күп эштәр эшләргә, ысулдар ҡулланырға була. Ваҡыт юҡ тип әйтеүсе ата-әсәләргә әйтер һүҙем – нисек тә булһа балаларға бәләкәй саҡтарында ваҡыт табырға, бүлергә, үҙ туған телендә тәрбиәләргә тырышыуҙың һөҙөмтәһе мотлаҡ буласаҡ. Туған телде өйрәтеү, һаҡлау һәр ғаиләнең төп бурысы булһын ине.

Туған тел – сабыйҙың зиһен-аҡылы, шәхес үҫеше өсөн үҙе бер асҡыс. Бала саҡтан уҡ үҫеш алған туған тел системаһы артабан икенсе, өсөнсө телдәрҙе үҙләштерә алыуҙы еңеләйтә. Ата-әсәләре, яҡын туғандары, иптәштәре һәм башҡа кешеләр менән туған телендә аралашҡан баланың тәне һәм йәне гармониялы рәүештә үҫешә, йәғни уның шәхесенең биологик һәм рухи-психологик бөтөнлөгө еңелерәк формалаша [2]. Һәр бала туған телле булып үҫһен ине! Бөйөк шағирыбыҙ Рәми Ғариповтың «Туған тел» шиғырына тоғро ҡалайыҡ:

Халҡым теле – миңә хаҡлыҡ теле,
Унан башҡа минең илем юҡ.
Илен һөймәҫ кенә телен һөймәҫ,
Иле юҡтың ғына теле юҡ!

© Усманова С.Р., 2024

**УДК 372.882**

***Фамутдинова Тансылу Сагитовна,***
*учитель башкирского языка,*
*МАОУ «Гимназия № 1», г. Стерлитамак, РБ*

**Работа с текстом как способ формирования читательской грамотности**

«Люди перестают мыслить, когда перестают читать.»
*Д. Дидро*

Цель любой деятельности – не только добиться успешного освоения учебной дисциплины, но и помочь обучающимся выбрать свою будущую стезю, развить личностные качества ребенка, а главное в будущем занять достойное место в жизни.

Функциональная грамотность – это способность человека вступать в отношения с внешней средой и максимально быстро адаптироваться и функционировать в ней. Базовый навык функциональной грамотности – читательская грамотность, под которой понимается способность человека понимать и использовать письменные тексты, размышлять о них и заниматься чтением для того, чтобы достигать своих целей, расширять свои знания и возможности, участвовать в социальной жизни.

Одним из основных направлений в развитии читательской грамотности является работа с текстом, которая позволяет развивать речевое внимание к языковой стороне текста. На основе систематической работы с текстом, разнообразных приемов и ресурсов у детей формируется положительное отношение к чтению, умению читать осознанно и развивается познавательная активность.

Для развития читательских действий, таких как преобразование и интерпретация информации, используются приемы технологии развития критического мышления.

Соотносить факты с общей идеей текста, устанавливать простые связи, не показанные в тексте, возможно при использовании приема «Инсерт» – чтение текста с маркировкой. Данный вид учебного действия требует от учащихся усиления мыслительной деятельности, т. к. необходимо анализировать прочитанную информацию.

«V» – уже знал,

«+» – новое для меня,

«–» – думал иначе,

«?» – не понял, есть вопрос.

«Инсерт» эффективен при знакомстве с текстами различных стилей.

«Бортовой журнал» – блокнот, тетрадь для ведения записей. В «бортовой журнал» делаются выписки из прочитанных текстов для дальнейшего их использования в написании сочинений или создания сообщений. В журнал записываются мораль из басен, фразеологизмы, высказывания писателей и поэтов.

В своей работе охотно используем интерактивные задания, направленные на работу с информацией, для индивидуальной работы на платформе Яндекс.Учебник.

Умение преобразовать информацию требует от учащихся активной мыслительной деятельности После чтения и понимания прочитанного этап преобразования информации позволяет развивать творческую деятельность учащихся.

Задания для преобразования информации:

– придумай другую концовку к произведению;

– добавь одного героя и объясни его необходимость, чем он может помочь главному герою;

– сохраняя главных героев, придумай новый сюжет, что могло случиться иначе;

– дай совет или задай вопрос главному герою произведения;

– пересказ от имени одного из героев рассказа;

Таким образом, смысловое чтение и работа с текстом – это основа функциональной грамотности. Использование педагогических технологий и большого разнообразия цифровых образовательных ресурсов позволяет использовать чтение как средство решения необходимых задач.

На современном этапе умение работать с информацией, критически оценивать ее является одним из условий развития успешной социализации.

**Литература**:

1. Формирование функциональной грамотности – одна из основных задач ФГОС. Центр оценки качества образования Института стратегии развития образования РАО [Электронный ресурс] URL: http://www.iro.yar.ru/fileadmin/iro/2019/2019-11-05_Kuznecova.pdf.

2. Заир-Бек С.И., Муштавинская И.В. Развитие критического мышления на уроке. М.: Просвещение, 2019. 223 с.

© Фамутдинова Т.С., 2024

**УДК 811.512.141**

***Хажиәхмәтов Динислам Илшат улы,***
*1-се курс магистранты,*
***Солтанбаева Хәҙисә Вәли ҡыҙы,***
*филол. фәнд. д-ры, проф.,*
*Өфө университеты, Өфө ҡ., БР*

**Башҡорт прозаһында хәрби лексиканың сағылышы**
**(һуғыш ҡоралдары һәм уларҙың төрҙәренең атамалары миҫалында)**

Хәрби өлкә – иң боронғо өлкәләрҙең береһе. Уның үҫеше менән бергә хәрби эште һүрәтләгән әҙәбиәт тә барлыҡҡа килә. Хәҙерге көндә башҡорт теле хәрби лексикаһын үҙләштерелгән һүҙҙәр ҡатламы менән бер рәттән күп һанлы төп башҡорт һүҙҙәре тәшкил итә. Тел һәм объектив хәрби ысынбарлыҡ, сығанаҡтар, халыҡ ижады, архив материалдары, шағир һәм прозаиктар ижады үҙенсәлектәренән сығып, беҙ хәрби лексиканың классификацияһын бирҙек һәм был мәҡәләлә уларҙың прозала сағылышын ошо йүнәлештә тикшерҙек.

1. Һуғыш ҡоралдарының һәм уларҙың төрҙәренең атамалары.

– ҡорал атамалары: *Ҡара яу булып ерҙе ябып килгән Ағайгилде һыбайлылары* ***ҡылыстарын*** *ҡояшта ялтыратып,* ***һөңгөләрен*** *сусайтып саф-саф булып теҙелгән дошман алғасҡыһына бер ук атымы ҡалғас, туҡтап ҡалды. Үс алыу комары менән нәфрәте күкрәгенә һыймаған Аҡһаҡ Килембәт, аҫтындағы аҡбуҙ атын уйнатып, саф алдына атылып сыҡты. Ул ҡулындағы* ***һөңгөһөн*** *болғай-болғай, яраланған йыртҡыс тауышы менән аждырҙы* (Мәүлит Ямалетдин «Ҡуласа»).

– ут асыу ҡоралдары: *Бер нисә саҡрымға йәйелгән кәмәләр һәм караптар каруанынан туҡтауһыҙ* ***мылтыҡ*** *йәҙрәләре яуҙы, арттараҡ килгән һалдарҙан туптар үлем сәсте* (Мәүлит Ямалетдин «Ҡуласа»).

Мылтыҡ термины тикшерелгән лексик-семантик төркөмдөң ут асыу ҡоралдарының атамаларын тәшкил иткән төркөмсәгә ҡарай. Был ҡорал батша әрмеһенә хас.

*Ә, дөрөҫөрәге, Әсә-Венгрия аяғы осонда* ***автомат*** *аҫып, байраҡ тотоп торған совет һалдаты кеүек тойҙо* (И. Абдуллин «Тол ҡатындар иламай»).

– һуғыу ҡоралдары атамалары: *Тынысланa төшкән Йортбағыш ук-һаҙағын ҡалъянына кире тыҡты, шулай ҙа абай булыу ниәтенән билендәге бойҙаһын һәрмәп,* ***суҡмарының*** *бөлдөргөһөн ҡапшап, атын өйәңке яғына ыңғайлатты* (Мәүлит Ямалетдин «Ҡуласа»).

– снаряд атамалары: *Иртәнсәк, Оло Иҙел өҫтөн ҡаплаған шыйыҡ томан күтәрелеп тә өлгөрмәҫтән, көнбайыштағы текә ярҙа урынлашҡан тиҫтәләгән* ***туптар*** *гөрһөлдәне* (Мәүлит Ямалетдин «Ҡуласа»).

***Пулялар*** *баш осонан выжлап үтеп торалар. Ҡапыл ут асылды. Өҙлөкһөҙ пулеметтар эшләй башланылар.* ***Пулялар****, көслө ямғырҙар кеүек, баш осонан ағыла башланылар. Улар* ***еңел снарядтар*** *менән бергә оҙатылдылар. Беҙ тағы ла һыулы канауҙарға һуҙылып яттыҡ. Баш осонда* ***шрапнелдәр*** *ярылалар* (Д. Юлтый «Ҡан»).

Был өҙөктә автор яу яланындағы ҡаты бәрелеште һүрәтләй. Күпселек осраҡта рус теленән йәки рус теле аша башҡа телдәрҙән үҙләштерелгән снаряд атамаларын ҡуллана: *пуля, снаряд, шрапнель.*

2. Ҡоралдарҙы йөрөтөү һәм һаҡлау йыһаздарының атамалары. *Шуға ярашлы, Иван батша Оло Иҙелгә ҡойған Зөйә йылғаһының тамағында ҡәлғә төҙөргә бойорҙо. Ул Ҡазан ханлығы сигендә урыҫ ғәскәрҙәрен даими тотоу һәм уларҙы* ***һуғыш кәрәк-яраҡтары*** *менән өҙлөкһөҙ тәьмин итеү үҙәге итеп уйланылғайны* (Мәүлит Ямалетдин «Ҡуласа»).

3. Хәрби кейемдәрҙең атамалары.

– ҡулдар менән йөрөтөлгән һаҡлаусы ҡорал. Бында тик бер генә лексема ҡулланыла – *ҡалҡан* «щит». Башҡа төрки телдәрендә лә шул ғына лексема ҡулланыла. Шуға күрә, беҙҙеңсә, ҡулдарҙа йөрөтөлгән һаҡлаусы ҡорал булып тик ҡалҡан ғына хеҙмәт иткән тип һанарға мөмкин. Төркмән телендә – *галка*, төрөк телендә *kalkan* тип атала.

*– Ух, өтөп алып бара! – тине Йортбағыш,* ***ҡалҡаны*** *менән елдән ышыҡланып. – Оло һыу эргәһе булғанға шулай микән?* (Мәүлит Ямалетдин «Ҡуласа»).

– башты һаҡлаусы хәрби кейемдәрҙең атамалары: *турка/төркәй* – «стальной головной убор, стальной шлем, надеваемый на войне», каска, шлем.

– *турка/төркәй* – «стальной головной убор, каска, шлем.

4. Яҡлау төҙөлмәләренең атамалары.

– ерҙә ҡаҙылған һаҡлаусы төҙөлмәләр: ***Окоп*** *эргәһендә бомбалар ярылалар. Ваҡыт-ваҡыт пулеметтар ҙа тақылдап ала. Беҙҙең окоп тапҡырынан немецтарҙың ауыр снарядтары геүләп, артҡа, беҙ килгән якҡа осалар. Беҙҙең яткан килгән снарядтар ҙа немец окобына табан уҙып ярыла* (Д. Юлтый «Ҡан»). ***Блиндаждың*** *эсе һыу* (Д. Юлтый «Ҡан»).

5. Хәрби ҡушылмаларҙың атамалары.

– яугирҙарҙың һаны буйынса атамалар: *Мин* ***дивизияның*** *штабының околодогына киттем* (Д. Юлтый «Ҡан»).

Бында автор ғәскәрҙең һаны буйынса бүленгән ҙур ғәскәр ҡушылмаһын күрһәтә. *Дивизия* термины – үҙләштерелгән һүҙ.

*Мин ҡайтып,* ***рота*** *бойороғо буйынса үткәрелеү менән иртәгәһенә мине штабҡа саҡырттылар* (Д. Юлтый «Ҡан»).

– хәрби төркөмдәрҙең функцияларын билдәләгән атамалар:

***Карательный отрядтарҙың*** *ил ҡыҙырып йөрөүҙәре, ниндәй-ниндәй ауылдарҙың яндырылыуы хаҡында иҫкә алдылар* (Ғ. Ибраһимов «Кинйә»).

6. Яугирҙарҙың, һуғышсыларҙың атамалары.

*Штаб начальнигы Кулик, был* ***һалдат*** *ҡайтып тағы кәмит күрһәтһә, инде майор Захаркинға,* ***дивизия командиры урынбаҫарына*** *шелтә сәпәйем, тип вәғәҙә бирҙе* (Ғ. Байрамов «Мин – һалдат»).

Был миҫалда автор башҡорт хәрбиҙәрен һүрәтләй һәм төп башҡорт һүҙен ҡуллана – *яугир*.

7. Ғәскәр башлыҡтарын белдергән атамалар.

*Тәфтиләү түрә,* ***сотский*** *Надир Үрәзмәт бар, ти.* ***Галауный йортауай*** *Ҡыҙрас та шунда, имеш...* (Ғ. Ибраһимов «Кинйә»).

Ғ. Ибраһимов ғәскәр башлыҡтарының исемдәрен һүрәтләй. Был йөҙ отрядының башлығы – *сотский.*

*Шунан һуң* ***генерал*** *беҙҙе стройға ҡуйҙырып һөйләй башланы: – Данлы рус ғәскәре һәр көн ҙур еңеүҙәр менән алға бара* (Д. Юлтый «Ҡан»).

*Урта белемле* ***сержанттарҙы*** *хәрби училищеға уҡырға оҙаттылар. Ә инде айҙан беҙҙең петлицаларыбыҙҙа кескәй генә кубиктар хасил булды –* ***лейтенанттар*** (И. Абдуллин «Тол ҡатындар иламай»).

8. «Батыр» төшөнсәһе менән һүҙҙәр.

– ҡорал тота алған еткән ирҙе белдергән һүҙҙәр:

*Балаларын: «Йөрәгегеҙ нисек ҡуша, шулай эшләгеҙ», – тип тәрбиәләгән Байсура* ***батырҙың*** *ғәҙәтендә төбәшеү юк ине, шуға күрә барыһын да һиҙгән ата* (М. Ямалетдин «Ҡуласа»). Бында автор персонаждың баһадир, көслө ир-егет, ысын яугир булыуын әйтергә теләй.

9. Һуғыш барған урынды белдергән һүҙҙәр.

***Һуйыш-ҡырылыштың*** *шундай яман төҫ алып,* ***ҡан ҡойоштоң*** *ҙурға киткәнен үҙ күҙҙәре менән күреп торған ҡарт Ҡотло атаның тәндәре ҡалтыранды, йөрәге сәнсеп-сәнсеп алды* (Ғ. Ибраһимов «Кинйә»). Был миҫалда автор яуҙы һуйыш-ҡырылыш, ҡан ҡойош синонимдары ярҙамында сағылдырып, уҡыусыға уның тәьҫир көсөн арттыра.

10. Хәрби командалар.

Йәштәр үргә менә башлағайны, Зөфәр башын һелкеп: «***Аҫҡа!***» – тип ***команда*** бирҙе. (И. Абдуллин «Тол ҡатындар иламай»). Был миҫалда автор әмерҙе тура формала ла «*аҫҡа*», ситләтелгән формала ла күрһәтә «*команда*».

11. «*Дошман*» төшөнсәһен белдергән һүҙҙәр.

*Ниндәйҙер бер ауыл ҙурайып, уның тирә-яғында көтөүлек, сабынлыҡ тарайыуы, ихтилалдар осоронда* ***ҡараттарҙың*** *боласылар төйәген яндырыуы, кемдәрҙеңдер башҡаларҙан айырылып, үҙ аллы йәшәргә ынтылыуы һ. б.* (М. Ямалетдин «Ҡуласа»).

12. Һуғыштағы айырым бер эпизодтарҙың атамалары.

*Шунан файҙаланып, бер йоҙроҡҡа уҡмаштыҡ та, ҡалҡыулыҡ өҫтөндә яу барышын күҙәтеп торған Барак ханға ташландыҡ* (М. Ямалетдин «Ҡуласа»).

***Яу яланын*** *ташлап ҡасҡан дошман ғәскәре менән уның артынан баҫтырған Олуғ Мөхәммәт яугирҙәренең ат тояҡтарынан күтәрелгән туҙандан эңер һымаҡ ҡара томан, ҡара саң* (М. Ямалетдин «Ҡуласа»).

Был миҫалда автор *яу* һүҙен *һуғыш* мәғәнәһендә ҡуллана. Яу килеү менән һуғыш килә тип аңлатырға теләй уҡыусыға. Был *яу* һүҙе мәғәнәһе киңәйеүе хаҡында һөйләй.

13. Әсирҙәр йәки яулап алынған әйберҙәрҙең атамалары.

*Ноғайҙар миңе ырыуын Дим буйҙарынан ҡыҫырыҡлап сығарған һуңғы ҡанлы бәрелештә Наурҙа бей Килембәттәргә* ***әсиргә*** *эләкте* (М. Ямалетдин «Ҡуласа»).

14. «*Мәрәй*» белдергән һүҙҙәр.

*Иң мөһиме, улар биргән баһа сәйәси* ***мәрәй*** *йыйыуға иҫәпләнгән ойоштороу буйынса түгел, ә күңел ҡушыуы буйынса ине* (М. Ямалетдин «Ҡуласа»).

15. Хәрби символдарҙы аңлатҡан атамалар.

*Йоҡларға ятҡан һалдаттарҙы уятып, аяҡҡа баҫтырыр өсөн* ***барабансы дөңгөр ҡаҡты****. Ни бары бер-ике тапҡыр ғына һуҙып* ***һорнай уйнаны*** (Ғ. Ибраһимов «Кинйә»).

Был миҫалдағы терминдар хәрби терминдарҙың әйтеп үтелгән лексик-семантик төркөмөнөң өсөнсө микротөркөмөнә ҡарай. Яу яланында сигналдар тауыш ярҙамында ғына түгел, ә махсус музыкаль инструмент менән дә бирелә. Был осраҡта автор дөңгөр һәм һорнай терминдарын ҡуллана.

Шулай итеп, мәсьәлә башҡорт прозаһында хәрби лексиканың ҡулланылыш үҙенсәлектәрен тикшереүгә йүнәлтелде. Беҙҙең тарафтан һуғыш темаһына арналған әҫәрҙәрҙең лексик үҙенсәлектәре анализланды. Улар араһында башҡорт ихтилалдарын тасуирлаған Ғ. Ибраһимовтың «Кинйә» романы, Д. Юлтыйҙың беренсе донъя һуғышы темаһына арналған «Ҡан» романы, М. Ямалетдиндың «Ҡуласа» тарихи романы, И. Абдуллиндың Бөйөк Ватан һуғышы тураһында яҙылған «Тол ҡатындар иламай» әҫәрҙәре бар..

Әҫәрҙәрҙә төрлө тарихи осорҙар һүрәтләнеүе арҡаһында хәрби лексиканың ҡатламдары ла айырыла. «Кинйә» һәм «Ҡуласа» романдарында күпселек осраҡта иҫке төрки һәм башҡорт теленә хас булған ҡорал атамалары һ. б. ҡулланылһа, «Ҡан» һәм «Тол ҡатындар иламай» романдарында хәҙерге заманға ярашлы яңы ҡорал, хәрби чин атамалары ҡулланыла. Күпселек осраҡта был терминдар рус теленән йәки рус теле аша үҙләштерелгән һүҙҙәр булып тора.**Әҙәбиәт**:

1. Абдуллин И. Әҫәрҙәр. Ике томда. 1-се том. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте. 1986. 648 б.

2. Ибраһимов Ғ. Кинйә: роман. Беренсе китап. Тапалған йәйләү. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1970. 560 бит.

3. Юлтый Д. Ҡан: роман. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1970. 380 б.

4. Ямалетдин М. Ҡуласа: тарихи роман, эссе. Өфө: Китап, 2007. 384 б.

© Хажиәхмәтов Д.И., Солтанбаева Х.В., 2024

**УДК 316.7**

***Хаирнасов Амир Ирекович,***
*студент, ФБФВиЖ, УУНиТ,*
***Бахтиярова Альфира Нурисламовна,***
*канд. филол. наук, доцент, УУНиТ, г. Уфа, РБ*

## Информационная война: история и современность

Информационная война – это конфликт, в котором стороны используют информационные технологии и средства массовой информации для достижения своих целей и манипуляции общественным мнением. Она включает в себя распространение пропаганды, создание фейковых новостей и дезинформации, а также работу разведывательных служб для сбора информации о противнике и использования ее в информационных операциях. Информационная война может играть значительную роль в конфликтах, так как она позволяет воздействовать на настроения и мнения людей, создавать образы врага или союзника и дезориентировать противника.

Так, во время Второй мировой войны информационная война имела огромное значение для всех противоборствующих стран. Обе стороны конфликта использовали различные методы для распространения пропаганды и манипуляции общественным мнением.

Нацистская Германия активно использовала радиовещание и печатные СМИ для распространения своей идеологии и пропаганды. Они создали мощную пропагандистскую машину, которая влияла на мнение населения и создавала образ врага. Тогда была даже создана специальная должность Министра пропаганды, которую занял Йозеф Геббельс, который в последствии получил неофициальный титул «отец пропаганды».

В свою очередь, союзники также активно использовали информационные методы для борьбы с нацистской пропагандой. Они создали радиостанции, такие как «Голос Америки» и «Би-би-си», которые транслировали антинацистскую пропаганду и информацию о военных успехах союзников.

Советский Союз не отставал от своих соперников и конкурентов. Во время Великой Отечественной Войны в списке главных врагов Адольфа Гитлера на первом месте стоял человек, за голову которого фюрер назначил награду в 250 000 рехйсмарок. И это был не Иосиф Сталин или Георгий Жуков и не другие герои того времени, на этом месте был диктор Юрий Левитан. Так как голос Левитана имел не меньшую цену, чем целая дивизия, Советское правительство понимало, что угроза серьезная. К Юрию была приставлена охрана и диверсанты не смогли добраться до диктора. Почти все победы и события, в которых советская армия принимала непосредственное участие, освещались всему советскому народу благодаря голосу Юрия Левитана. Каждый раз, когда Левитан начинал свое вещание, это придавало всему населению надежду на положительный исход окончания войны.

Также во время войны широко применялись фейковые новости и дезинформация. Обе стороны создавали ложные сообщения и распространяли их для дезориентации противника и создания паники среди населения. Важной частью информационной войны во время Второй мировой войны была работа разведывательных служб. Они собирали информацию о противнике и использовали ее для создания пропагандистических материалов и манипуляции общественным мнением. Можно вспомнить, как до начала полномасштабного наступления нацистской Германии на Советский Союз, поступали множество различных сообщений от советских разведчиков, которые служили в Германии. Эти секретные сообщения могли быть как настоящими, так и фейковыми, чтобы увидеть реакцию своего противника.

Таким образом, информационная война во время Второй мировой войны была широко распространена и играла важную роль в борьбе за победу. Обе стороны использовали различные методы для достижения своих целей и воздействия на общественное мнение.

Примеры использования методов информационной войны включают:

1. Распространение пропаганды. Стороны конфликта могут использовать средства массовой информации, социальные сети и другие каналы для распространения идеологической или политической пропаганды. Например, во время Второй мировой войны американская пропаганда использовалась для усиления поддержки войны и приверженности победе союзников. Используя широкий спектр СМИ, пропагандисты разжигали ненависть к врагу и поддержку американских союзников, призывали активизировать общественные усилия по производству военной продукции и созданию садов победы, убеждали людей экономить часть своих материалов, чтобы больше этих материалов могло быть использовано для военных нужд, также продавали военные облигации. Патриотизм стал центральной темой рекламы на протяжении всей войны, поскольку были развернуты крупномасштабные кампании по продаже военных облигаций, повышению эффективности работы заводов, уменьшению количества отвратительных слухов и поддержанию морального духа гражданского населения. Война укрепила роль рекламной индустрии в американском обществе, сняв прежнюю критику. Лидеров держав «Оси» изображали в виде карикатур, чтобы они казались глупыми. По итогам Второй мировой войны США, которая вступили

в нее лишь в конце 1941 г., выпустила пропагандистские плакаты больше, чем любая другая страна.

2. Создание фейковых новостей и дезинформации. Стороны конфликта могут создавать и распространять ложную информацию или фейковые новости, чтобы воздействовать на общественное мнение и манипулировать событиями.

3. Работа разведывательных служб. Разведывательные службы могут использовать информационные технологии для сбора информации о противнике и использования ее в информационных операциях. Например, разведывательные службы могут осуществить кибершпионаж, взламывать компьютерные системы и сети для получения секретной информации. Так, можно вспомнить инцидент с Эдвардом Сноуденом, американским спецагентом, техническим специалистом, бывшим сотрудником ЦРУ и Агентства национальной безопасности США. В июне 2013 г. Сноуден передал в популярные зарубежные газеты информацию о слежке американских спецслужб за информационными коммуникациями между гражданами многих государств по всему миру. Было разглашено огромное количество секретных файлов кибербезопасности США и документов, которые использовались армией, флотом и авиацией для достижения поставленных целей в специальных военных операциях.

4. Манипуляция общественным мнением. Стороны конфликта могут использовать информационные технологии и средства массовой информации для манипуляции общественным мнением. Например, они могут создавать и распространять фейковые аккаунты в социальных сетях, чтобы создавать иллюзию широкой поддержки или противодействия определенной идеологии или политическому движению.

Все эти методы информационной войны направлены на достижение целей сторонами конфликта путем воздействия на общественное мнение и создания определенного образа событий и противника.

История информационной войны насчитывает долгое время и включает различные эпохи и конфликты. В основном хронология информационных войн подразумевает следующие этапы истории:

1. Вторая мировая война. Как страны «Оси», так и союзники использовали все перечисленные методы ведения информационной войны на тот момент времени. Нацистская Германия использовала пропаганду и информационные операции для мобилизации населения и создания образа «внешнего врага». Они использовали средства массовой информации, радио и кино для распространения своей идеологии и контроля над общественным мнением.

2. Холодная война. США и СССР активно применяли информационные методы во время холодной войны. Обе стороны использовали все возможные средства пропаганды, чтобы достичь своих поставленных идеологических целей. Например, США создали радиостанцию «Голос Америки» для распространения своей идеологии за пределами своей страны.

3. Конфликт в Ираке. Во время второй войны в Ираке США использовали информационные операции для контроля над общественным мнением и создания определенного

образа событий, который они хотели. Они использовали средства массовой информации, включая телевидение и интернет, для распространения своей идеологии и представления войны в определенном нужном им свете.

4. Кибервойна. С развитием информационных технологий возникла новая форма информационной войны – кибервойна. Примером может послужить современный конфликт между Россией и Украиной, где обе стороны использовали кибератаки и кибершпионаж для достижения своих поставленных целей.

Это лишь несколько примеров исторических событий, связанных с информационной войной. Таким образом, важно отметить, что информационная война постоянно развивается и адаптируется к новым технологиям и методам.

**Литература:**


1. Аскерова Л.Ф. Информационная война как вид манипуляции // Гуманитарные научные исследования. 2017. № 6 (70). С. 14.
2. Ахмадиев Р.Б., Тыщук Н.В. Информационная война как средство выражения политических интересов // Филологический аспект. 2017. № 7 (27). С. 15–20.
3. Боровая Е.О. Информационная война как угроза национальной безопасности // Политика, экономика и инновации. 2017. № 2 (12). С. 5.
4. Воротникова А.М., Никитин Г.М. Информационная война против России // Современные тенденции в науке: сборник статей Международной научно-практической конференции. 2017. С. 137–139.
5. Голодов А.Г. О методах ведения информационной войны в массовой прессе // Иностранные языки в высшей школе. 2019. № 2. С. 67–76.
6. Иванова В.В. Третья мировая – информационная война // Символ науки. 2017. Т. 3. № 4. С. 186–189.
7. Карпинская А.А. «Информационные войны» в современном мире: к постановке проблемы // Современные научные исследования и разработки. 2017. № 2 (10). С. 308–309.


© Хаирнасов А.И., Бахтиярова А.Н., 2024

**УДК 373.24**

***Хөснөтдинова Зөлфиә Рәфҡәт ҡыҙы,***
*тәрбиәсе, Ҡотан ауылы башланғыс мәктәп-балалар баҡсаһы, Бөрйән районы, БР*

## Балалар баҡсаһында кескәйҙәрҙең ваҡ моторикаһын үҫтереү

Ваҡ моторика (мелкая моторика) – ҡулдар ярҙамында теүәл һәм тигеҙ хәрәкәттәр үтәү һәләте. Был процеста нервы системаһы һәм күреү хәтере ҡатнаша. Бында нервы, мускул һәм һөйәк системалары ҡатнаша. Ҡул суҡтары һәм бармаҡтары моторикаһында йыш ҡына етеҙлек мөһим роль уйнай. Ваҡ моторика өлкәһе төрлө хәрәкәттәрҙе үҙ эсенә ала: ябай ҡул хәрәкәттәренән алып (уйынсыҡты тотоу) иң ҡатмарлыларына тиклем (әйтәйек, яҙыу һәм һүрәт төшөрөү). Ул нервы системаһы, күреү һәләте, хәтерләү, иғтибарлыҡ менән ныҡлы бәйләнгән. Ваҡ моториканың үҫеше телмәр үҫешенә лә йоғонто яһай. Быны бик ябай итеп

аңлаталар: баш мейеһендә тел һәм моторика үҙәктәре бер-береһенә яҡын урынлашҡан. Телмәрҙән тыш, ул баланың етеҙлегенә, яҙыуына, логик фекерләүенә лә йоғонто яһай. Шуға ла ваҡ моториканың үҫешенә ҡарап, баланың мәктәпкә әҙерлеген белеп була.

Баланың ҡулдарының ваҡ моторикаһын үҫтереү өсөн бик күп күнекмәләр һәм уйындар бар. Уларҙы шундай төркөмдәргә бүләләр: бармаҡтар менән уйындар, ваҡ әйберҙәр менән уйындар, әүәләү һәм һүрәт төшөрөү, бармаҡтарға массаж эшләү.



Балаға ике йәш тулыу менән уны пластилин менән таныштырырға кәрәк. Был йәштә пластилинды ашарға ярамағанлығын сабый яҡшы аңлай. Тәүге мәлдә өлкәндәрҙән, әлбиттә, иғтибарлы булыу талап ителә. Иң тәүҙә үҙегеҙ был әйбер ярҙамында ниҙәр әүәләргә мөмкин икәнен эшләп күрһәтегеҙ. Пластилиндан һындар әүәләү кескәйҙәрҙең түбәндәге һәләттәрен үҫтерә.

Ижад һәм күҙ алдына килтереү һәләте.

Бала пластилин менән ныҡлап танышҡас, бергәләп төрлө һын яһағыҙ. Был ваҡытта сабыйҙың фантазияһы һәм ижади фекерләүе эшкә егелә. Төҫтәрҙе өйрәнеүгә лә яҡшы. Бынан тыш, әүәләү процесында аҡыл ҡеүәһенә бәйле ус һәм бармаҡтағы төрлө нөктәләргә массаж яһала. Тимәк, аҡыл, шулай уҡ телмәр үҫешенә нигеҙ һалына.

Күҙ һәм ҡул теүәллеге.

Пластилин әүәләү күҙ менән ҡул бәйләнешен нығыта. Баланың хәрәкәттәр теүәллеге менән күреү хәтере ни тиклем иртәрәк үҫешһә, шул тиклем яҡшыраҡ. Ҡыҫҡаһы, улығыҙ йәки ҡыҙығыҙ тиҙ реакциялы, етеҙ ҡуллы булһын тиһәгеҙ, магазинға ашығығыҙ. Бәләкәс менән сәғәттәр буйы шөғөлләнергә тимәгән, көнөнә 15-20 минут ваҡыт етә.

Тынысландырыу тәьҫире.

Пластилин менән шөғөлләнеү ашыҡҡанды яратмай. Был мәл нервы системаһын тынысландыра.

Гиперактив баланы даими рәүештә пластилин әүәләргә ылыҡтырыу ыңғай һөҙөмтә бирәсәк. Ул сабыр, нығыш булырға һәм башлаған эшен аҙағына еткерергә өйрәнә.

Социалләшеү.

Әүәләү баланың кеше араһында үҙ-үҙен тотошона ла оло йоғонто яһай. Тирә-яҡ мөхиттән күсереп, үҙ аллы һындар, персонаждар яһай торғас, ул өлкәндәргә, тиңдәштәренә, тәбиғәткә, хайуандарға ҡарата түҙемлерәк булырға, кешеләр менән танышырға, әүҙем аралашырға өйрәнә. Ҡатмарлы холоҡло балалар өсөн был шөғөл айырыуса файҙалы.

Ҡыҙыҡлы шөғөл.

Бала 4-5 йәшкә еткәс, йәнһүрәт геройҙарын яһарға тәкдим итегеҙ. Хатта ул үҙ йәнһүрәтен дә төшөрә ала. Быны өсөн ни бары телефон камераһы етә. Һындарҙан төрлө хәрәкәттәр яһап, һәр береһен фотоға төшөрөүе һәм махсус программа ярҙамында уларҙан видео монтажлауы һис тә ауыр түгел. Тауыш йәки көй яҙҙырып, уны тағы ла йәнлерәк итергә мөмкин.

Өй шарттарында пластилин яһау.

Бөгөн балалар өсөн пластилиндың ниндәйе генә юҡ! Хатта ҡараңғыла яна торғаны һәм һыуҙа йөҙгәне лә осрай. Кескәйҙәр өсөн балауыҙҙан яһалғаны яйлы буласаҡ. Ул тиҙ йомшара һәм экологик яҡтан да зыяны юҡ.

Өй шарттарында әҙерләү өсөн кәстрүлгә бер стакан аш тоҙона ярты стакан он һәм бер стакан һыу ҡойоп, талғын утта ҡайнатырға кәрәк. Ҡайнатма һығылмалыға әйләнгәс, бер аҙ һыуытырға. Артабан он өҫтәп, ҡаты итеп ҡамыр баҫырға.

Беҙҙең балалар баҡсаһында балалар бик һәләтле, төрлө ҡул эштәре менән шөғөлләнергә яраталар. Уларҙы күпселек ҡағыҙҙан һәм пластилиндан эшләйбеҙ.

Яңыраҡ эшләгән иң сағыу ҡул эше тураһында һөйләп китмәксебеҙ: пластилин, төҫлө ҡағыҙ һәм картондан диңгеҙҙә йөҙгән медузаларҙы һынландырыу.

Иң тәүҙә балалар ҡара, күк йәки зәңгәр төҫлө картондан фон һайланылар. Артабан сағыу ҡыҙыл һары төҫтәрҙән медузаларҙың зонтик һымаҡ формаһын ҡырҡып картондың өҫкө өлөшөнә 3-шәр итеп теҙеп йәбештерҙеләр.

Бына балалар пластилиндарҙы ҡулдарына алды. Улар тәүҙә ҙур булмаған пластилинды яҡшы итеп йомшартты, шунан ваҡ ҡына йомро шарҙар эшләп «зонтик» аҫтына йәбештереп, шуны бармаҡтары менән ныҡ итеп баҫып аҫҡа һылап тартып төшөрә биреп, медузаларҙың һәрмәүестәрен (шупальца) һынландырып та ҡуйҙылар.

Пластилин менән булышырға бик ярата балалар. Пластилин менән эшләгәндә бик мөһим тәртипте лә беләләр: теге йәки был деталде эшләгәндә – пластилинды йомшартып алғас уҡ, деталде шунда уҡ эшләргә кәрәк. Алдан әҙерләп һалып ҡуйһаң – пластилин тиҙ ҡата һәм матур килеп сыҡмай.

Йәһәт кенә медузаларҙың күҙҙәрен, хатта ирендәрен дә шулай уҡ пластилиндан эшләнеләр.



Диңгеҙ ылымыҡһыҙ булмай бит инде! Йәшел төҫлө пластилиндан ылымыҡтар эшләү башланды. Ҙур булмаған пластилинды ҡулда йомшартып – иң тәүҙә йомро шар, артабан шул

шарҙы бау һымаҡ итеп әүәләнеләр. Фондың иң аҫҡы өлөшөнә буй итеп һалғас, картонды әйләндереп ебәрҙеләр. Үҙегеҙ аңлайһығыҙҙыр ни өсөн. Сөнки ылымыҡтарҙы өҫкә ҡарата һүрәтләргә кәрәк. Был эш һәрмәүестәрҙе эшләгән һымаҡ башҡарылды.

Медузалар тураһында ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр ҙә белделәр балалар был көндө. Уларҙың ҡайһы берҙәрен һеҙгә лә еткерәйек әле. Медузалар – иң боронғо тереклектәрҙең береһе, улар хатта динозаврҙарҙан да алда барлыҡҡа килгән. Уларҙың 9 мең төрө бар тип иҫәпләнә. Ағыулы һәм бөтөнләй хәүефһеҙҙәре лә була. Медузалар 95% шыйыҡсанан тора. Төрлө ҙурлыҡта булалар.

Эш тамамланды, балаларҙың күҙҙәре шатлыҡтан янып тора, ауыҙҙары йырыҡ. Ҡайһы берҙәре ҡасан өлгөргән тиһең, медузаһына күҙлек тә кейҙереп ҡуйған.

Күреүебеҙсә, медузалар ҡатнаш техника менән башҡарылды: төҫлө ҡағыҙ һәм пластилин. Беҙ был эштә күберәген пластилин менән күнекмәләрҙе (оҫталыҡтарын) нығытыуҙы маҡсат итеп алабыҙ. Интернеттағы төрлө мәҡәләләр менән танышҡанда пластилиндан әүәләү яп-ябай шөғөл кеүек, ә бәләкәстәр өсөн файҙаһы ғәйәт ҙур икән, тигән фекергә килдек, сөнки пластилин техник йәһәттән генә түгел, баланың психологик хәл-торошон да төрлө яҡлап үҫтерә.

Шулай итеп, ваҡ моторика баланың телмәре һәм фекерләүе үҫеше менән туранан-тура бәйле. Шуға күрә бармаҡтар менән уйындар, ваҡ әйберҙәр менән уйындар, һүрәт төшөрөү, бармаҡтарға массаж эшләү, шулай уҡ пластилиндан һындар эшләү балаларҙың мейеһен үҫтереү өсөн кәрәк.

**Әҙәбиәт:**

1. Халус И. Волшебный пластилин. Развиваем мелкую моторику. М.: Махаон, 2012. 91 с.

2. Ахмадуллин Ш.Т. Развиваем мозг ребенка. Пластилин (3–9 лет). М.: Издательский Дом «Нева», 2020. 176 с.

3. Ахмадуллин Ш.Т. Нейролепка. Развиваем мозг через пластилин. Многоразовые карточки-тренажеры. М.: «Капитал», 2021.

Электрон ресурстар:

1. Игры и упражнения на развитие мелкой моторики рук. URL: http://www.baby2000.ru/um/motorika.html.

2. Развитие мелкой моторики. URL: http://www.rakushka66.ru-/index.php?option=com_content&view=article&id=130&Itemid=132.

3. Развитие мелкой моторики у детей. URL: http://proigrushku.ru/razvitie-melkoj-motoriki-u-detej.

4. Развитие моторики у детей. URL: http://adalin.mospsy.ru/l_01_11.shtml.

© Хөснөтдинова З.Р., 2024

**УДК 811.512.141**

***Хөснөтдинова Рәмилә Янсаф ҡыҙы,***
*доцент, Өфө фән һәм технологиялар*
*университеты, Өфө ҡ., БР*

**Риторик һорау һөйләмдәрҙең эске телмәрҙәге роле**
**(Зәйнәб Биишеваның «Яҡтыға» трилогияһы миҫалында)**

Һорау һөйләмдәр башҡа төр һөйләмдәрҙән үҙенең анығ һорау интонацияһы булыуы менән айырылып тора. Һорау интонацияһы йыш ҡына һорау һөйләмдең берҙән-бер билдәһе була. Һорау дөйөм һәм конкрет формала булырға мөмкин. Дөйөм һорау һөйләмдәрҙә берәй эш-хәл, ваҡиға, әйбер хаҡында ни ҙә булһа белеү, уларҙың булыу-булмауын асыҡлау маҡсаты ҡуйыла. Һөйләүсе һорау һөйләмдәр ярҙамында теге йәки был мәсьәләне асыҡларға, берәй төшөнсәне аңларға теләген белдерә.

Хәл-ваҡиғаның ҡасан, ҡайҙа, нисек, ни рәүешле, кем тарафынан башҡарылыуын һ. б. асыҡларға теләгәндә конкрет һорау һөйләмдәр барлыҡҡа килә. – Ниңә тип ни, күпмегә хәтле былай һыҙланып йөрөмәксе булаһың? – тине Сыуаҡай әбей, ҡаты итеп («Кәмһетелгәндәр»). – Ҡыҙҙарым, – тине ул, тауышын көскә сығарып. – Ҡыҙыҡайҙарым, һеҙ ҡайҙа?.. («Кәмһетелгәндәр»). – Һиңә берәй изге йән осраманымы? – тип ныҡышҡан, ти, әбей («Кәмһетелгәндәр»). – Ә балалар? – тине Байгилде ағай, аптыранып. – Балаларымды ҡайҙа ҡуям?! («Кәмһетелгәндәр»).

Һорау һөйләмдәрҙә һорауҙы белдергән махсус грамматик саралар ҙа бар. Мәҫәлән, бындай һөйләмдәрҙә һорау киҫәксәләре ҡулланыла: Бабай, атыңды туғарайыҡмы? («Кәмһетелгәндәр»). Сәғүрә еңгә уның яғына көскә башын бороп: – Ҡыҙыҡайым, бәпесем, ауырып киттеңме әллә? – тип һораны («Кәмһетелгәндәр»). – Килдегеҙме, ҡыҙҙарым? – тине Шәһит бабай («Кәмһетелгәндәр»).

Хәл-ваҡиғаның ҡасан, ҡайҙа, нисек, ни рәүешле, кем ҡатнашлығында башҡарылыуын һ. б. асыҡларға теләгәндә һорау алмаштары бик актив ҡулланыла. Мәҫәлән: – Ниңә оло кешене үсекләйһең? – тип шыбырланы Сәғүрә еңгә. – Үсегеп килмәй ҡуйһа, мине кем ҡарар? («Кәмһетелгәндәр»). Ҡайҙа ҡабаланаһың? («Емеш»). Ниңә алып сыҡманың? («Оло Эйек буйында»). «Эй-й, Байрас, ниңә һин бында, Ырымбурға, килмәнең икән?» («Емеш»). – Тик ҡасан ғына үҫеп, ҡул араһына инер һуң ул?! («Кәмһетелгәндәр»).

Һорау һөйләмдәр төп һорау һәм риторик һорау һөйләмдәргә бүленә. Төп һорау һөйләмдәргә үрҙәге миҫалдарҙы килтерергә мөмкин.

Риторик һорау һөйләмдәр хәҙерге башҡорт телендә семантик йәһәттән бик күп төрлө.

Риторик һорау һөйләмдәр әҙәби әҫәрҙәрҙә, шул иҫәптән «Яҡтыға» трилогияһында йыш осрай. Бындай һөйләмдәр мәғәнә яғынан хәбәр һөйләмдәргә лә яҡын була: Ҡарасы, ҡайһы арала был болот ҡалҡып сыҡҡан? («Кәмһетелгәндәр»). Эй әҙәм аҡтығы, ҡулынан килмәгәс, исмаһам, тик кенә торһа ни була икән? Үҙ һүҙеңдән үҙең баш тартыу кешелекме ни?! («Емеш»). Тик Сыуаҡай әбей генә, ҡаты шомланып: – Китсе, кит! Дүрт йәшлек бала белә торған эшме ни инде был?! Һай, ахыр заман балаһы... – тип һөйләнде («Кәмһетелгәндәр»).

Байгилде ағай башҡа ваҡыт булһа: – Сыуаҡай еңгә, бәй-бәй, һиңә ни булды? Һин дә аллаға үпкәле һүҙҙәр әйтә башланың түгелме һуң? – тип мәрәкәләмәй ҡалмаҫ ине, әлбиттә («Кәмһетелгәндәр»).

Художестволы әҫәрҙәрҙә персонаждарҙың эске телмәре күп осраҡта риторик һорау һөйләмдәр менән бирелә [3]. Риторик һорау һөйләмдәр хис-тойғоло була, тексты йөкмәткеһенә экспрессивлыҡ, эмоционаллек өҫтәй. Йәнле телмәрҙән айырмалы рәүештә, монологик типтағы әҫәрҙәрҙә һорау һөйләмдәр өҫтәмә функция ҡабул итә, сөнки уларҙа һорау һәм һөҙөмтә, раҫлау һәм кире ҡағыу, аптырау һәм һоҡланыу һ. б. мәғәнәләр бергә килә.

Миҫалдар: Ниндәй яҙмыш көтә уларҙы киләсәктә?.. Нимәләр күрергә, ниҙәр кисерергә тура киләсәк?.. Улар әле был хаҡта уйлай белмәйҙәр («Кәмһетелгәндәр»).

«Нисек өйгә ҡайтырға хәҙер?! Ни тип яуап бирергә?! Исмаһам, атайым да өйҙә юҡ бит әле... Ағайым да...... Йә, ярар, ни булһа булыр, ҡайтайым, тип уйланы ахыр Емеш. Өшөп-туңып үлергәме ни былай?..» («Кәмһетелгәндәр»).

«Йә, бынауындай сүмәлә төҫлө өҫ-башым менән ни тип кешегә килеп индем икән? Тиҙерәк, йәһәтерәк сығып китергә кәрәк бынан!..» – тип, кәмһенеп уйланды ул (Емеш) («Оло Эйек буйында»).

Емешкә тағы ла күңелһеҙерәк, моңһоуыраҡ булып китте. «Нимә эшләргә? Ҡалайтып көн үткәрергә?! Тукта, бынауы тирәк башына менеп тирә-яҡты ҡарайым, исмаһам... Ҡыҙҙар тауы күренмәҫме икән?..» («Оло Эйек буйында»).

Был әҫәрҙә риторик һорау һөйләмдәр күп осраҡта эске монолог рәүешендә ҡулланылған. Ул эске телмәрҙең иң ҡатмарлы формаһы булып һанала. Мәҫәлән: ...Ҡайҙа барырбыҙ? Нисек урынлашырбыҙ?.. Айһылыу ауырлыҡҡа сыҙармы? Нисек әйтһәң дә, берәүҙәрҙең берҙән-бер иркә ҡыҙы бит...» Иштуғандың күҙ алдында ваҡыт-ваҡыт Емеш менән Йәнеш тә килеп баҫҡыланы. «Инде улар ни эшләрҙәр?.. Атайым да өйҙә юҡ бит, исмаһам. Ә мин уларҙы үгәй ҡулына ташлап ҡастым... Их, оятһыҙ... Йә, ағай кеше шулай буламы инде? Атайымдың күҙенә мин нисек күренермен?..» Был уйҙарға әлеге-баяғы ат урлау мәсьәләһе лә килеп ҡушылып киткеләне. «Ауылда беҙҙе хәҙер ат ҡарағы тип йөрөтәләр инде... Их, үҙ атым булһа, был эште эшләр инемме ни мин?..... Ҡайҙа ҡуйырға, нимә эшләтергә был аттарҙы? Әллә һатып ебәрергәме?.. («Кәмһетелгәндәр»).

Зәйнәб Биишеваның «Яҡтыға» трилогияһында риторик һорау һөйләмдәрҙе ҡулланыу персонаждарҙың, нигеҙҙә төп героиня Емештең эске донъяһын асыуҙа ҙур роль уйнай. Уның ҡапма-ҡаршылыҡлы ҡылыҡтарына һәм ҡарарҙарына бөтә әҫәр буйы эске телмәр ҡушылып килә, һәм был уҡыусыға Емештең конкрет ваҡиғала ниндәй эмоциональ торошта икәнен күрһәтергә ярҙам итә:

«Өйрәк бәпкәләренең суҡыштары ниңә былай йәмһеҙ, тупаҫ икән? Үҙҙәре, етмәһә, шундай ҡомһоҙҙар. Туйыуҙы ла белмәйҙәр. Ни һалһаң, шуны һоғаланып сәйнәмәй йотоп бөтөрәләр... Тауыҡ себештәре тәүҙә бик матур булалар. Суҡыштары беҙ кеүек, күҙҙәре елбәҙәк кеүек кенә була. Кәүҙәләре уларҙың һары күбәләккә, тәпәйҙәре ҡыҙыл сәскәгә оҡшай. Ә аҙаҡтан, үҫә-үҫә йәп-йәмһеҙ тауыҡҡа әйләнәләр. Йә, ниңә үҫәләр икән инде? Шул матур ғына көйө ҡалһаларсы инде... Бөтә нәмә лә шулай тыуа, үҫә, үләме икән ни?..

Хатта бынауы ағастар ҙа... Ниңә былай? Ни өсөн? Уны үҙгәртмәй, иң матур бер сағында ғына туктатып булмаймы икән ни? Мин дә шулай үҫермен, ҡартайырмын... унан үлерменме икән? Уй, ниндәй ҡурҡыныс!.. Былай булғансы, тыумаған ғына булһамсы мин!..» Емеш ошондай аңлайышһыҙ, ҡатмарлы уйҙарҙан арына алмай ултырғанда, бер ҡаҙ бәпкәһе уның эргәһенә килде («Кәмһетелгәндәр»).

Был форма ярҙамында Емеш үҙенең уйлау процесының төп һөҙөмтәләрен туплай, шуның өсөн уларға теүәллек, тамамланғанлыҡ һәм өҙләкһеҙлек хас. Эске монолог героиняның үҙ-үҙен тынысландырыуы, йыуатыуы, үҙенең ҡылыҡтарына баһа биреү сараһы булып та хеҙмәт итә. Мәҫәлән: Етмәһә бая Байрас биргән кескәй ҡағыҙ киҫәге лә уның йөрәген үтә йыш, ярһыу тибергә мәжбүр итә ине. Усын көйҙөрөп, йөрәген яндырып, йөҙөнә эҫе нур бөркөп тора һымаҡ, һәм ул үҙенең нисек әле был ҡағыҙҙы киреләнмәй, икеләнмәй генә түгел, ә ниндәйҙер бөткөһөҙ кинәнес, ҡыуаныс менән алыуына һис тә төшөнә алмай ыҙаланды. «Нисек былай булды һуң? Ниңә Емеш уны алды? Ниңә ташламаны? Ниңә ниндәйҙер сиктән тыш яҡын, ҡөҙрәтле нәмә һымаҡ күреп ҡәҙерләп юбкаһындағы кескәй генә кеҫәгә йәшереп ҡуйҙы? Бер саҡ Моратшаның уҡ менән атып биргән хатын ул шунда уҡ йыртҡылап ырғытҡайны лабаһа? Ниңә Байрастың хатын ташларға уның көсө етмәй? Улай ғына ла түгел, ниңә кескәй генә ҡағыҙ киҫәге уның йөрәгендә тау хәтле тулҡын тыуҙыра?» («Емеш»).

Риторик һорау һөйләмдәр иһә төп һорау һөйләмдәрҙән айырылып тора, сөнки улар тыңлаусынан яуап талап итмәй һәм был осраҡта тыңлаусының булыуы ла шарт түгел. Миҫалдар: Бына бит, әҙәмгә күпме кәрәк? Бүтән һүҙ тиген, ә? Ниңә ағайым яратмай икән уларҙы?.. Айһылыу еңгәне күрәләтә ата-әсәһенән шулай бөтөнләй айырыу яраймы икән ни? («Емеш»). Үҙе әленән-әле көрһөнөп: – Эй-й, тулғаҡ аҙабын да, әсәлек ләззәтен дә татымаған кеше балаларҙы йәлләй белерме лә, ҡарай белерме? Булмаҫ, йүне булмаҫ, – тип һөйләнде («Кәмһетелгәндәр»).

Емештең эске монологтарында ла беҙ уның икенсе кешеләрҙең әйтелгән һүҙҙәренә һәм эшләгән ҡылыҡтарына яуап түгел, ә уның реакцияһын ғына күрәбеҙ.

– Бәй, мин һине сиған ҡыҙылыр тип торһам... – тине ағай, ҡашын яҙмай ғына. Бүтән һүҙ өҫтәмәне, һаман шул ҡараңғы сырай менән бал һатыуында булды. Емеш эстән генә йылмайып ҡуйҙы. «Моғайын, был ағайҙың балға асыуы киләлер. Ҡумыҡҡан йүкә балы тәпәндән сыҡмай ыҙалай ҙабаһа! Шул юҡ нәмә менән һатыу итеп тороуына йәне көйәлер уның. Ысынлап та, шундай олпат, етди кешенең эшеме ни инде был?! Кем белә, бәлки, Емеш шикелле үк уның да был баҙар тигән нәмәне йәне һөймәйҙер?..» («Емеш»).

Ахыр, мейес артынараҡ инеп ултырған ерҙән кемдер күтәрелеп баҫты:

– Бер һүҙ әйтәйем әле. «Аһа, Бибеш апайым даһа?! – тип тамам аптырап китте Емеш. Нимә һөйләмәксе икән? Әле ағайым ҡасан ғына, Бибеш ширҡәткә инергә теше-тырнағы менән ҡаршы тора, бер нәмәгә ҡатнашмай, бер ергә йөрөмәй, тип яҙғайны. Әле инде ниндәйҙер һүҙ әйтмәксе. Баҙыян еңгәмдән өлгө ала, күрәһең» («Емеш»).

Шулай уҡ Емештең монологтары аша беҙ уның күңел торошо тураһында ла мәғлүмәт алабыҙ. Ул ҡайһы ваҡыт шат, ҡайһы ваҡыт ҡайғылы, бошонҡо һәм дә аптыраған хәлдә сағылдырыла:

«Көрән бейәнең атлауы ырамлы, тигән була ағайым, – тип инде бошоноп уйланды Емеш. – Ҡайҙан ырамлы булһын? Бер аяғын алға баҫһа, икенсеһен артҡа баҫа һымаҡ. Эй-й, был икһеҙ-сикһеҙ ялан яҡтарын беҙ нисек уҙып бөтөрбөҙ ҙә, ҡасан барып етербеҙ?» («Кәмһетелгәндәр»).

«Ниңә Иштуған ағайым бер һүҙ ҙә әйтмәй икән, исмаһам? Айһылыуҙы мин яратам бит уны! – тиһә лә ҡуйһа ни була икән?.. Айһылыу апай ҙа өндәшмәй. Бына Таһир менән Зөһрә бит улай булмаған... Аҡтыҡ һулыштарына тиклем тартышҡандар. Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу ҙа шулай... Әллә әкиәттә, китапта ғына кеше ҡыйыу буламы икән?» – тип өҙгөләнеп, бөтә йөрәктән көйөнөп уйланды Емеш («Кәмһетелгәндәр»).

Әҫәрҙәге эске телмәр Емештең серҙәренең сиселеше кеүек ҡабул ителә. Уҡыусылар Емештең хис-тойғоларын асыҡтан-асыҡ уҡый, ә был инде авторҙың әйтергә теләгән ниәттәрен яҡшыраҡ аңларға ярҙам итә.

Эске телмәрҙе кешенең туҡтауһыҙ үҙ-үҙе менән аралашыу процесы тиергә мөмкин, йәғни ул кешенең аңындағы төрлө позицияларҙың үҙ-ара диалогҡа инеүе. Төҙөлөшө яғынан монолог эсендәге һөйләмдәргә ҡыҫҡалыҡ, һүҙҙәрҙең ҡабатланыуы хас. Һөйләм киҫәктәренең күбеһе төшөп ҡалырға мөмкин, әммә әйтелергә теләгән уйҙы еңел генә аңлап була. Үҙ-үҙең менән диалог асыҡ яуап талап итмәгәнлектән, эске телмәрҙә риторик һорау һөйләмдәр йыш осрай.

Эске монологтарҙа ҡулланылған риторик һорау һөйләмдәр әҫәрҙәрҙең психологизмын көсәйтә, ваҡиғалар менән хис-тойғолар араһындағы бәйләнеште тәрәнәйтеп күрһәтә һәм персонаждарҙың ауыр характерын асҡанда төп роль уйнай.

**Әҙәбиәт:**

1. Мостафина И.А. Башҡорт телендә һөйләмдең функциональ-коммуникатив типтары // Актуальные проблемы современной филологии, востоковедения и журналистики: материалы Всероссийской (с международным участием) научно-практической конференции студентов, магистрантов, аспирантов и молодых ученых. Уфа, 2021. С. 297–301.

2. Рамазанова С. Структурно-семантические особенности вопросительных предложений (на примере трилогии З.Биишевой «К свету») // Теоретические и практические проблемы развития современной гуманитарной науки: материалы IV Международной научно-практической конференции студентов, магистрантов, аспирантов и молодых ученых, отв. Ред. Ф.Г. Фаткуллина. 2018. С. 325–328.

3. Сулейманова З.Ф. Эске телмәрҙең структур-семантик үҙенсәлектәре // Филологическая наука: история, современность, перспективы: материалы Международной научно-практической конференции, посвященной 80-летию со дня рождения известного башкирского языковеда Карима Гайсеевича Ишбаева. Уфа, 2017. С. 184–186.

4. Хөснөтдинова Р.Я. Профессор Ғ.Ғ. Сәйетбатталовтың хеҙмәттәрендә һөйләмдең функциональ (коммуникатив) типтарының өйрәнелеше // Башҡорт теле күп мәҙәниәтле

арауыҡта: материалы Международной научно-практической конференции, посвященной 90-летию со дня рождения известных башкирских ученых – члена-корреспондента Академии наук Республики Башкортостан, профессора Гали Галиевича Саитбатталова, заслуженного деятеля науки Республики Башкортостан, профессора Нагима Хажгалиевича Ишбулатова, отв. ред. Г.Р. Абдуллина, 2018. С. 323–330.

5. Әхтәмова Р. Риторик һорау һөйләмдәрҙең структур-семантик үҙенсәлектәре // Вопросы тюркологии и востоковедения в полиэтническом пространстве: сборник материалов III Международной научно-практической конференции студентов ссузов, вузов, магистрантов, аспирантов и молодых ученых. Уфа, 2022. С. 197–200.

6. Әхтәмова Р. Башҡорт теле дәрестәрендә һөйләмдең функциональ-коммуникатив төрҙәрен өйрәнеү // Актуальные проблемы современной филологии, востоковедения и журналистики: материалы Международной научно-практической конференции студентов, магистрантов, аспирантов и молодых ученых. Уфа, 2023. С. 250–251.

**Нәфис әҙәбиәт**:

Биишева З. Оло Эйек буйында: роман. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1990. 288 бит.

Биишева З. Кәмһетелгәндәр: роман. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1990. 432 бит.

Биишева З. Емеш: роман. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1990. 496 бит.

© Хөснөтдинова Р.Я., 2024

**УДК 373.24**

***Хөсәйенова Фәниә Вилүр ҡыҙы***
*өлкән тәрбиәсе, Бала үҫтереү үҙәге –*
*«Сулпылар» балалар баҡсаһы МАМББУ,*
*Иҫке Сибай ауылы, Баймаҡ районы, БР*

## Балалар баҡсаһында ата-әсәләр менән берлектә бәйләнеш булдырыу ысулдары

Барлыҡ ижтимағи процестар, заманы бер-бер артлы үҙгәреп торған донъяла үҫеп килеүсе йәш быуынды илебеҙҙең лайыҡлы кешеләре итеп тәрбиәләүҙә балалар баҡсаһы ойошмаһының роле бик ҙур. Шуның менән бергә беҙ яҡшы тәрбиәнең нигеҙе ғаиләнән башланыуын, ата-әсәләрҙең төп тәрбиәсе булыуын иҫтә тотоп эш итергә тейешбеҙ.

Тәрбиәнең төп асылы – балалар баксаһы менән ғаиләнең берҙәмлегендә. Педагогтар һәр бер ата-әсәнең һөнәрен, холҡон, ғаиләләге ролен, мөнәсәбәтен ныҡлап өйрәнергә, уларҙың психологик-педагогик культураһын үҫтереү өҫтөндә эшләргә тейеш. Сөнки беҙ балалар баҡсаһында ғаилә эсендә биреп еткерелмәгән әхлаҡи-тәрбиә сифаттар менән байытырға, әҙәпле, тәртипле кеше тәрбиәләү өҫтөндә эшләргә тейешбеҙ. Тик хезмәттәшлек итеп, ярҙамлашып эшләгәндә, балаға берҙәм талаптар ҡуйылғанда ғына ыңғай һөҙөмтәләргә ирешергә була.

«Сулпылар» балалар баҡсаһы коллективы тәрбиәләнеүселәре ғаиләләре менән хеҙмәттәшлек юлын табыуҙа төрлө формаларҙы ла ҡуллана.

Тәрбиәүи потенциалды ике яҡлап асыҡлау маҡсатында социаль-педагогик диагностика, әңгәмә, анкетирование ҡулланабыҙ; тәрбиәләнеүсенең ғаиләһенә йөрөйбөҙ; балалар баҡсаһында асыҡ ишектәр көнө үткәрәбеҙ; төрлө йөкмәткеле осрашыу, йыйылыштар үткәреп бала тәрбиәләүҙең ҡыйынлыҡтары һәм уңыштары менән таныштырып торабыҙ.

Балалар баҡсаһы өсөн илдәге билдәле ваҡиғаларға арналған балалар байрамдары традицияға ингән. Балалар тәрбиәләүселәр һәм тәрбиәләнеүселәр өсөн актуаль форма баҡсаһында – ғаилә байрамдары. Бындай мөһим көн булып әсәләр, атайҙар, Яңы йыл, Еңеү, Халыҡ-ара ғаилә, Бөтә Рәсәй ғаилә, мөхәббәт һәм тоғролоҡ көндәрен бергә үткәрәбеҙ. Башҡорт халҡының милли йолалары тураһында, рухи донъяларын байытып, дуҫ-татыулыҡ үҫтереүгә, физик сәләмәтлекте нығытыуға йүнәлтелгән милли уйындарҙы уйнап күтәренке кәйеф менән ихлас ҡатнашалар.

Илде һаҡлаусылар, Еңеү көндәренә арналған иртәлектәргә тыуған ил һаҡсылары – армия сафтарында хеҙмәт итеп ҡайтҡан ағайҙарҙы, атайҙарҙы, ҡартатайҙарҙы саҡырабыҙ, улар менән малайҙар ҡатнашлығында етеҙлектә, ҡыйыулыҡта бәйгеләр ойошторабыҙ. Ата-әсәләргә балаларҙа илһөйәрлек, батырлыҡ тәрбиәләүсе әҫәрҙәр, китаптар тураһында тәкдимдәр бирәбеҙ, балалар менән «Ҡыйыуҙар һәм тапҡырҙар», «Беҙ – буласаҡ Олимпия чемпиондары» исемле спорт бәйгеләрен үткәреп, балаларҙа спортҡа һөйөү, ҡыйыулыҡ, берҙәмлек һәм етеҙлек сифаттарын үҫтерәбеҙ, ә ғаиләләрҙе сәләмәт тормош рәүешенә ылыҡтырабыҙ. Был саралар аша киләсәк быуындың һау-сәләмәт булып үҫеүенә булышлыҡ итәбеҙ.

Йәш быуынды дөрөҫ тәрбиәләү өсөн ата-бабаларыбыҙҙың алтын аҡылына, тормош тәжрибәһенә таянып эш итергә кәрәклеген аңлап, балаларҙы ауыҙ-тел ижады, тарих, телебеҙ менән таныштырып, мәҙәни яҡтан байытып, ысын шәхес үҫтереүгә булышлыҡ итәбеҙ. Һәм ошоларҙы һыҙыҡ өҫтөнә алып, ата-әсәләр, өләсәй-ҡартатайҙары менән берлектә халыҡ педагогикаһына таянып эш алып барабыҙ.

Халҡыбыҙҙың рухи һәм матди ҡиммәттәрен кескәйҙәр күңеленә һеңдереп үҫтереүгә ҙур ярҙам күрһәтеп Баймаҡ районының мәғариф бүлеге оло иғтибар бүлә һәм ошоға ярашлы төрлө саралар үткәрергә булышлыҡ итә. Кескәйҙәр төркөмө араһында үткәрелгән «Әкиәтле һандыҡ» әкиәт бәйгеһенә ата-әсәләр, өләсәйҙәребеҙ кескәйҙәр менән ихлас күңелдән ҡушылдылар. Уларҙың әкиәт һөйләү оҫталыҡтарына, һүҙ маһирлығына хайран булдыҡ.

Яҡшы һәм иманлы бала тәрбиәләү өсөн беҙ балаға ҡарата иғтибарлы, ихтирамлы булырға тейешбеҙ. Ауылыбыҙ мәсетендә дини осрашыуҙар ойошторолоп тора, беҙ дини ғаиләләр менән фәһемле йыйылыш уҙғарҙыҡ. Иманлы дини ғаиләләр менән эшләйбеҙ, уларға ихтирам менән ҡарайбыҙ.

Күптән түгел, өлкәндәр төркөмөндә кескәйҙәрҙең өләсәйҙәрен саҡырып, рухи яҡтан белем кимәлдәрен арттырыу маҡсатында күңелгә үтеп инерлек матур осрашыу ойошторолдо. Башҡорт телебеҙ мәңге йәшәһен өсөн, туған телебеҙҙе, йолаларыбыҙҙы, башҡорт милли кейемдәребеҙҙе өйрәнәйек, ҡәҙерләйек, һаҡлайыҡ тигән маҡсат менән үтте был осрашыу.

Улар балаларға башҡорттарҙың көнкүреше, башҡорт милли кейеме, үҙенсәлектәре тураһында һөйләне.

Тәрбиә – бик ҡатмарлы, күп көс талап иткән ауыр хеҙмәт. Үрҙә әйтелгәндәрҙе иҫәпкә алып, тәрбиәсе – тәрбиәләнеүсе – ата-әсә сылбырын берләштереп, өҙмәй, йомоҡ сылбырға әйләндереп, киләсәктең алмашсыларын тәрбиәләйбеҙ. Ололарҙы ихтирам итеү, ғаиләлә атай абруйын күтәреү, ата-әсә фатихаһын алыу, уларҙы рәнйетмәү милләтебеҙҙең алтын мираҫы булған әҙәп-әхлаҡ төшөнсәләрен юғалтмай, баланың күңеле бөтөн булып бар яҡтан камил, һау-сәләмәт булып үҫтереү беҙҙең уртаҡ маҡсат булып тора.

© Хөсәйенова Ф.В., 2024

**УДК 81-2**

***Хуболов Сахадин Магаметович,***
*канд. филол. наук, доцент,*
***Ахматова Мариям Ахматовна,***
*д-р филол. наук, проф., Кабардино-Балкарский государственный университет им. Х.М. Бербекова, г. Нальчик, Кабардино-Балкарская республика, РФ*

## Фразеологизмы в поэзии Азамата Суюнчева

Поэтический текст традиционно привлекает большое внимание литературоведов, чего не скажешь относительно языковедов. Между тем поэзия имеет большое значение для современных междисциплинарных исследований, в которых актуализируются проблемы, связанные с такими концептами, как «глаз» [4; 8], «вода» [2], «число» [1], «время» [5]. Этот жанр литературы дает добротный материал также для выявления и описания различных характеристик поэтического синтаксиса в плане специфики репрезентации адресованной речи [3], фразеологизированных и иных конструкций [7; 9]. Все это релевантно и для творчества известного карачаево-балкарского поэта Азамата Суюнчева. Исходя из вышеизложенного, в данной статье нами предпринимается попытка рассмотреть функционально-семантические особенности фразеологических единиц, которые употребительны в ранней поэзии рассматриваемого автора. Для анализа привлекается фактический материал из его сборника произведений «Къобанны мынчакълары» («Бусины Кубани»), вышедшего в 1959 г. в Черкесске [6].

Фразеологические единицы (ФЕ) являются ценнейшей составляющей любой национальной культуры. В них отразился богатый народный опыт, неповторимость обычаев, образа жизни, условий быта каждого социума. Поэты, писатели обращаются к богатству устойчивых оборотов языка как к неисчерпаемому источнику речевой экспрессии. Введение в текст фразеологизмов обусловлено стремлением автора усилить экспрессивную окраску речи. Истинным ценителем образного языка предстает Азамат Суюнчев, в пользу чего свидетельствует малая толика фактологического материала, извлеченного из его раннего сборника. Устойчивые обороты, используемые автором, характеризуются не только

значительным функционально-грамматическим разнообразием, но и весьма широким спектром значений. Ими репрезентируются такие универсальные категории, как состояние, отношение, мышление, оценка, восприятие и др., что будет продемонстрировано ниже.

1. ФЕ со значением психофизического состояния:

***Кёлюм алай кёлтюрюлдю**, учундум.*
*Разылыгъым тенгиз болуб, чайкъалыб:*
*«Ма мен къарачайлыма!» – деб, къычырдым;*
***Кёкге джетеди боюм**,*
*Хазнадан толуд къойнум,*
*Дангыл тюзле да сыртым, –*
*Ма буд мени сыфатым.*

2. ФЕ со значением физического состояния:

*Ёлюм къагъыт окъуйд тёре,*
*Дертден ичи къара кюйюб,*
***Эс ташламай** туруб ёре,*
*Гокга хансны тутдунг кюлюб.*

3. ФЕ, выражающие общее состояние:

*Сёз бергенбиз планны*
*Толтурургъа эки къат,*
*Учундурад санланы*
*Эришмеклик – **къуш къанат**;*
*Ана тилим –*
*Тийген кюнюм.*
*Сени бла айтсам*
***Уллуд кёлюм**.*

4. ФЕ, выражающие каузированное состояние:

*Джаш **джюрегим***
***Тебиб урад,***
*Кёрмегенем*
*Быллай сурат.*
***Тебиб урад,***
*Кёрмегенем*
*Быллай сурат.*

5. ФЕ, выражающие состояние окружающей среды:

*Эртденнгиде кюнден тийген таякъла,*
*Къар таулагъа **алтын бояу салалла**.*

*Сау Союздан сеннге келген къонакъла*
*Курортунгда джашлыкъ, саулукъ табалла;*
*... Афинлени тубан басды,*
*Парнас тау да* ***чарс болду****.*
*Мурдар къол муну алды.*
*Никос дуньядан тас болду.*

6. ФЕ, выражающие уважительное отношение:
*Кенг джуртумда хар кюн сайын хорламла,*
*Мен аланы* ***сыйлы кёрюб*** *къарайма.*
*Билдирирге кёлюмдеги къуанчны,*
*Джаш джюрекден быллай джырла джырлайма;*
***Джаным-тиним****,*
*Ана тилим,*
*Сенден алдым*
*Окъуу-билим.*

7. ФЕ, выражающие почтительное отношение:
*Къан бла кирген джан бла чыгъад,*
*Алай теренди сюймеклик.*
*Сени болсун толусу бла*
***Къолумдан келген*** *игилик.*

8. ФЕ, выражающие чувственное отношение:
*Сени кёргенли,*
*Бирге тебсегенли,*
*Биз урчукъ кибик айланыб,*
*Кюнюм батады, Тангым атады,*
***Джюрегим сеннге байланыб****.*

9. ФЕ, выражающие положительное отношение:
*Сеийрд: бу къысха кёпюрню*
*Бир джаны шош, бири – боран;*
***Кёзюм къыймайд*** *кетерге*
*Муну къоюб былайдан.*

10. ФЕ, выражающие черту характера:
а) мужественность –
*Къарачайны* ***къаблан кёллю*** *уланы, -*
*Миннген атынг окъла ётмез къадамад.*

*Уруб ётдюнг Днепр, Дунай сууланы,*
*Узакъ джерге элтди узун къазауат;*
б) решительность –
*Ата джуртха фашист аякъ басханын*
***Кёлтюрмеди сени ёхдем джюрегинг.***
*Джурт сакъларгъа сюеме деб айтханынг,*
*Къабыл болду кесинг джазгъан тилегинг;*
в) ответственность –
*Къолумда къурч чёгючюм,*
*Салтам, хотам, кюрегим,*
*Кюнлюк мардам толмаса,*
***Тынчлыкъ табмайд джюрегим.***

11. ФЕ, выражающие цель:
***Къабыл болду** кесинг джазгъан тилегинг.*
*Акъ кюмюшге къарасаут салгъанча,*
*Таб джарашыб тау кийиминг юсюнгде,*
*Джигитлени, тулпарланы ичинде*
*Сен атландынг тору атны белинде;*
*Бу кенг тюзню келиб кёрдю таулу къыз:*
*«Къоймам, – деди, – муну зыраф, хайырсыз».*
*Быллай джерни хорларгъа деб, **къаст этди**.*
*Чыгъананы ол сюрдюрюб тас этди.*

12. ФЕ со значением оценки:
*Таулу къызны эки къолу – **сары алтын**,*
*Толтургъанды кёлюндеги муратын.*
*Газетлеге саладыла суратын,*
*Энди къырал биледи аны атын.*
*Ана тилге, орус тилге юретдинг,*
*Гитче джолдан уллу джолгъа тюзетдинг,*
*Сен кючюнгю аямайын кюрешдинг,*
*Кёб билимли, **татлы тилли** усдазым.*

13. ФЕ с квантитативным значением:
*Сюеме мен*
***Башдан-аякъ**,*
*Айтсанг нарт сёз,*
*Таурух, джомакъ.*

14. ФЕ со значением мышления:

*Ала кёзлеринг,*
*Ашхы сёзлеринг*
*Мени* ***эсими бёлдюле;***

*Билим алдым*
*Эм* ***эс джыйдым.***
*Аны кибик,*
*Къатды саным.*

15. ФЕ со значением зрительного восприятия:

*Тансыкъ болуб кёбден бери*
*Бир да чыдаб тёзалмай,*
*Шахарыма мен келеме,*
*Кенгден къараб,* ***кёз алмай;***
*Мен* ***кёзюмю алалмайма***
*Кёпюрню тюбю суратдан:*
*Кюмюш токъмакълача чартлайла*
*Суу тамчыла узакъдан.*

Как показывает рассмотренный выше фактологический материал, фразеологические обороты, употребляемые А. Суюнчевым, характеризуются значительным семантическим разнообразием. В количественном отношении превалируют единицы с семами состояния и отношения с их различными подтипами. По соотносительности с той или иной частью речи они представлены двух- и трехкомпонентными глагольными, адвербиальными, адъективными и субстантивными оборотами, обладающими значительным функциональным потенциалом, которые выступают в качестве репрезентантов как главных, так и второстепенных членов предложения.

**Литература**:

1. Ахматова М.А. Символика числа в карачаево-балкарском эпическом дискурсе // Вестник Челябинского государственного университета. 2012. № 20 (274). С. 23–26.

2. Ахматова М.А. Концептосфера гидролексемы «суу» в карачаево-балкарском нартском эпосе // Филологические науки. Вопросы теории и практики. 2016. № 11-1 (65). С. 78–81.

3. Кетенчиев М.Б. Проблемы вокативных конструкций в карачаево-балкарском языке // Актуальные вопросы карачаево-балкарской филологии. Сборник статей к 70-летию Ж.М. Гузеева. Нальчик: Издательский отдел Кабардино-Балкарского института гуманитарных исследований, 2010. С. 69–74.

4. Кетенчиев М.Б., Акамов А.Т. Концепт «кёз/гёз» («глаз») в карачаево-балкарской и кумыкской национальных картинах мира // Электронный журнал «Кавказология». 2021. № 1. С. 158–170.

5. Кетенчиев М.Б., Додуева А.Т., Ахматова М.А. Полиаспектный анализ названий дней недели в карачаево-балкарском языке // Балтийский гуманитарный журнал. 2019. Т. 8. № 2 (27). С. 248–251.

6. Сюйюнчланы А. Къобанны мынчакълары. Черкесск: Къарачай-Черкес китаб издательство, 1959. 48 б.

7. Улаков М.З., Хуболов С.М. Адвербиальные фразеологизмы как репрезентаторы различных типов конкретизаторов в карачаево-балкарском языке // Вестник Северо-Осетинского государственного университета имени К. Л. Хетагурова. 2014. № 2. С. 213–216.

8. Хуболов С.М. Структура и семантика предложений с предикатами, выраженными фразеологическими единицами с соматизмом кёз (глаз) в карачаево-балкарском языке // Известия Кабардино-Балкарского государственного университета. 2015. Т. 5. № 4. С. 58–61.

9. Хуболов С.М. Структурно-семантические особенности трехместных фразеологизированных предложений в карачаево-балкарском языке // Современные проблемы науки и образования. 2015. № 2-3. С. 64.

© Хуболов С.М., Ахматова М.А., 2024

**УДК 372.881.1**

***Хәкимова Гөлдәр Арыҫланғәли ҡыҙы,***
*башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы,*
*Учалы ауылы башҡорт гимназияһы, Учалы районы, БР*

**Мәктәптәрҙә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыуҙың сифатын күтәреү юлдары**

Бөгөнгө тәрбиә эшендә, башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрен уҡытыуҙың сифатын күтәреүҙә ҡалыплашҡан алымдар һәм ҡағиҙәләр ҙур һөҙөмтә бирмәй. Баланы шәхес булараҡ үҫтереүҙә халыҡ аҡылына һәм тәжрибәһенә таянылған, тормош һабаҡтарына нигеҙләнгән кластан тыш саралар мөһим роль уйнай. Замана уҡытыусыһы төплө белем биреүҙән тыш, халҡыбыҙҙың боронғо ғөрөф-ғәҙәттәрен тергеҙеү, быуаттары дауамында тупланған рухи, матди байлығыбыҙҙы бөгөнгө көнгә яраҡлаштырырға бурыслы. Дәрестә генә телде өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу уятыуға ирешеп булмай. Уҡыу барышында бала үҙен эшмәкәр, эҙләнеүсе, тикшеренеүсе, әүҙем ҡатнашыусы, үҙ аллы фекер йөрөтөүсе итеп тойорға тейеш. Уның һәләтен күреү һәм үҫтереү, әүҙемлеген арттырыу, берҙәмлек тойғоһы тәрбиәләү өсөн бөтә мөмкинлектәрҙе файҙаланырға кәрәк.

Мин үҙ тәрбиә эшемдә Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың ошо һүҙҙәрен төп девиз итеп ҡулланам: «Кеше үҙ халҡының үткәненә, хәҙергеһенә һәм киләсәгенә баш эйергә тейеш. Үткән һәм киләсәк – кешелектең ике ҡанаты ул».

Ә халыҡтың белеме, үҙ халҡының үткәне һәм хәҙергеһе менән ҡыҙыҡһынған, уның традицияларын ихтирам иткән шәхес тәрбиәләүҙә төрлө ижади конкурс, фестиваль, ярыштарҙың роле баһалап бөткөһөҙ. «Башҡортостан ынйылары», ”Урал батыр” эпосын башҡарыусы йәш сәсәндәр» бәйгеһе, «Һаумы, һаумы, Әкиәт!» конкурстары, «Ҡыңғырауҙар сыңы» театраль-фестивалдәре, «З. Биишева уҡыуҙары», «М. Ғафури уҡыуҙары», «Кейебаев

уҡыуҙары» кеүек конкурстар, төбәк-ара, федераль кимәлдәге, Аҡмулла олимпиадалары, республика кимәлендәге фәнни-тикшеренеү эштәре буйынса проект эштәрендә әүҙем ҡатнашыу – уҡыусыларымдың башҡорт теле дәрестәренә булған ҡарашын ҡырҡа үҙгәртте. Телде өйрәнеүгә ниндәйҙер яңы ынтылыш тыуҙы, төрлө ярыштарҙа ҡатнашырға теләүселәр араһында башҡа милләт балалары ла барлыҡҡа килде. Әлбиттә, тәү сиратта, балаларға командаға дан яулау өсөн көрәш, алыҫ юлға сәйәхәттәр һәм мажаралар оҡшай. Ә бындай юл йөрөүҙәр ысын мәғәнәһендә тормош һабаҡтары бирә: уҡыусы ғәҙәти булмаған хәл-ваҡиғаларҙа һынала, белемдәре тулыланып, яңы сифаттары асыла, ул бүтәндәрҙе күҙәтергә һәм, иң мөһиме, үҙен тәрбиәләргә өйрәнә. Бындай саралар ойоштороу өсөн уҡытыусынан көслө эшмәкәрлек, ваҡыт, һөнәргә бирелгәнлек талап ителә.

Уҡыусының ижади һәләтен үҫтереү, күңел донъяһын тейешле йүнәлештә тәрбиәләү өсөн уҡытыусы үҙе лә һәр яҡлап ҡыҙыҡһыныусан, яңылыҡтар менән хәбәрҙәр булырға тейеш. Шул уҡ ваҡытта ниндәйҙер кимәлдә алдан күҙаллау, талантлы баланы асыҡлап, уның күңелдә ижади осҡон ҡабыҙыу һәләте булыуы ла мөһим. Филология фәндәре докторы, ӨФҺТУ профессоры Ғ.С. Ҡунафин әйтеүенсә, «Тел һәм әҙәбиәт уҡытыусыһы балаларҙа дөрөҫ һәм айыҡ ҡараш, ижади һәләт, матурлыҡ тойғоһо тәрбиәләргә тейешле философ та, тарихсы ла, этнограф та, әҙәбиәтсе лә, фольклорсы ла, музыкант та, хореограф та, артист та, оратор ҙа булырға тейеш. Филология уҡытыусыһы – халыҡ аңының, теленең, халыҡ хәтеренең һаҡсыһы».

Уҡыусыларҙа ижади һәләтте үҫтереүҙе, тыуған телдең, уның мәғәнә биҙәктәренә төшөндөрөү серҙәрен, башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрен уҡытыуҙың сифатын күтәреүҙе кластан тыш ойошторолған эштәр ярҙамында башҡарҙым. Баштараҡ был эш конкурстарға, олимпиадаларға уҡыусылар әҙерләү, дәрестәрҙә, кластан тыш ойошторолған сараларға уларҙы күберәк йәлеп итеү кеүек эштәрҙән башланһа, һуңғы йылдарҙа был эш йүнәлешемдең айырым үҙенсәлектәре, айырым методтары барлыҡҡа килде.

Минең эшемдә, уҡыусыларҙың ижади һәләтен үҫтереүҙә һәм башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрен уҡытыуҙың сифатын күтәреүҙә ҙур роль уйнаған түңәрәктәр: «Мөғжизәләр» әҙәби ижад түңәрәге, драма түңәрәге, фольклор түңәрәге, олимпиадаларға әҙерләнеү, ғилми-тикшеренеү эштәре.

Бигерәк тә башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрен уҡытыуҙың сифатын күтәреүҙә, уны өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыуҙа мәктәптәрҙә ойошторолған драма түңәрәктәренең роле ҙур. Драма түңәрәктәрендә балалар күңелендә әҙәбиәткә, сәнғәткә һөйөү тәрбиәләнә, уларҙың ижади һәләттәрен үҫтерергә мөмкинлектәр асыла.

Беҙ уҡыусылар менән бик күп әкиәт сәхнәләштерҙек, дәрестәрҙә Әкиәт иленә сәйәхәт иттек, төрлө образдарға кереп уҡыйбыҙ. Бәләкәй ҡарһүҙҙәрҙән тыш, «Кәзә менән Һарыҡ», «Ҡамыр батыр», «Урал батыр», «Кем көслө?» «Хеҙмәтйән менән Бапаҡ», «Ҡурай», «Тауыҡ, Ҡор, Сысҡан», «Йылан менән Балыҡ», «Ике күрше» кеүек халыҡ әкиәттәрен, А. Йәғәфәрованың, М. Кәримдең, С. Суринаның, С. Әлибайҙың, И. Йомағоловтың, М. Ғафуриҙең, Ф. Туғыҙбаеваның, З. Биишеваның әҫәрҙәрен, «Иҙел», «Урал батыр», «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпостарын дә мауыҡтырғыс, мажаралы итеп тамашасыларға

күрһәттек. Балалар сәхнәгә бар күңеле менән тартыла. Ролдәрҙе илһамланып ысын артистар һымаҡ башҡаралар, әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен дә иҫтә ҡалдыралар, шулай уҡ матур итеп башҡортса һөйләшергә лә өйрәнәләр.

Беҙҙең Учалы ауылы башҡорт гимназияһында әкиәттәрҙе, яҙыусыларҙың төрлө әҫәрҙәрен сәхнәләштерергә яратҡан йәш артистарҙың бөтәһе лә «Бөҙрәкәй» балалар театрында ролдәрҙе башҡарыу оҫталыҡтарын камиллаштыра. Был ижади ойошма 1996 йылдан башлап эшләп килә. 2007 йылда «Өлгөлө балалар театры» исемен яҡлай. Унда утыҙҙан ашыу бала шөғөлләнә. Улар өс төркөмгә бүленә: кескәйҙәр, уртансылар, өлкәндәр. Кескәйҙәр төркөмө алмаш әҙерләү, үҙеңде сәхнәлә һынап ҡарау маҡсаты менән ойошторола.

Театр эшмәкәрлеге сығыш яһау ғына түгел, танып белеү, тәрбиәүи һәм үҫтереүсе бурыстарҙы ла тормошҡа ашырырға тейеш. Шуға ла эшемдең төп маҡсаты булып йәш быуындың буш ваҡытын файҙалы үткәреү, уларҙың ижади һәләттәрен, хис-тойғоларын үҫтереү, тормошта үҙ юлыңды табырға, тәрбиәле булырға, туған телдә матур итеп һөйләй белергә өйрәтеү тора.

Беҙ башҡорт теле һәм әҙәбиәт дәрестәрендә, мәктәптә, клуб сәхнәһендә, балалар баҡсаларында, төрлө ауылдарҙа сығыш яһайбыҙ. Район һәм республика буйынса үткәрелгән төрлө конкурстарҙан да ситтә ҡалмаҫҡа тырышабыҙ, актив ҡатнашабыҙ һәм ҙур еңеүҙәргә өлгәшәбеҙ.

Бына ошо 36 йыл башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы һәм өлгөлө «Бөҙрәкәй» театрының етәксеһе булып эшләү дәүерендә әкиәттәр дәресемдең йәме, тәме булып тора. Сөнки улар балаларҙа халыҡ ижадын, яҙыусыларҙың әҫәрҙәрен уҡыуға, өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Шулай уҡ уларҙа сәхнәләштергән әҫәрҙәр аша күреү, ишетеү, хәтер, күҙәтеүсәнлек, зирәклек, фантазия, образлы фекерләүҙе үҫтерергә тырышам, оялыу һәм тартыныуҙы бөтөрөргә, иптәштәре менән килешеп эшләргә, үҙ-ара яҡшы мөнәсәбәттә булырға өйрәтәм.

Һәр әҫәрҙе сәхнәләштереп, уйнаған ваҡытта балаларҙа изгелек, ҡыйыулыҡ, эшсәнлек, әҙәплелек, түҙемлек, йомартлыҡ кеүек ыңғай сифаттарҙы тәрбиәләүҙе, ә көнсөллөк, ялҡаулыҡ, ҡурҡаҡлыҡ, алдашыу, хәйләкәрлек, кешене мыҫҡыллау кеүек кире сифаттарҙан арыныуҙы маҡсат итеп ҡуям.

Әҫәрҙәрҙе сәхнәләштергәндә иң мөһиме яҡшылыҡ менән яуызлыҡ араһындағы айырманы күрәләр, сағыштыралар. Ә был рухи-әхлаҡи тәрбиәнең төп йүнәлештәренең береһе булып иҫәпләнә.

Беҙҙең сығыштарҙы тамашасылар түҙемһеҙлек менән көтөп ала, балаларҙың да оҫталыҡтары артҡандан-арта бара. Нисек кенә булмаһын, йәш быуын ауыҙ-тел ижадын, халҡыбыҙ мираҫын, мәҙәниәтебеҙҙе, телебеҙҙе белеп, иманлы, әхлаҡлы, тәрбиәле булып үҫергә тейеш.

Драма нигеҙендә лә әҙәбиәт дәрестәрендә ҡулланылған алымдар ята: хор менән уҡыу, ролдәргә бүлеп уҡыу, теге йәки был өҙөктө яттан һөйләтеү, драма әҫәрҙәрен дәрестәрҙә өйрәнеү һәм башҡалар. Йәғни ошо түңәрәктә үтелгән материал дәрестә баланың белемен

тағы ла нығыраҡ байыта, уны өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләй, уның ижади һәләтен үҫтерә.

Дәрестәремдә йыш ҡына «театр–дәрестәр» үткәрәм. Дәрескә әҙерләнгәндә уҡыусылар афиша, программа, әҫәрҙең яҙылыу тарихы, сәхнәләштереү, кәрәк урында компьютер, видеоролик ҡулланыу кеүек эштәрҙе үҙҙәре башҡара. Күңел ятҡан, көсөнән килгән эште һайлап алғас, уҡыусы тырышып әҙерләнә, ижади эш уны ҡанатландыра, бер-беренә кәңәш бирәләр, төҙәтәләр, ярҙам итәләр, ғөмүмән, күмәк эштең һөҙөмтәһе арта. Декорацияларҙы ла компьютер аша эшләйбеҙ. Былдай эш ҡуйылған әҫәрҙе тағы ла ҡыҙығыраҡ һәм мауыҡтырғыс итә. Компьютер аша эшләнгән күренештәр тамашасыларға бик оҡшай. Йылмайып ҡояш килеп сығыуы, һауала болоттар йөҙөүе, шыбырлап ямғыр яуа башлауы мөғжизәле бер донъяға әйләнә. Сығыш яһаған артистар ҙа, тамашасылар ҙа үҙҙәрен Әкиәт илендә тип хис итәләр.

Шулай уҡ дәрестәремдә, кластан тыш сараларҙа «ролләп уйнау» алымын йыш ҡулланам. Был алым беренсе сиратта уҡыусыларҙы дөрөҫ һөйләргә өйрәтеүҙе маҡсат итеп ҡуя. «Мин – президент», «Министр кабинетында», «Табипҡа күренеү» кеүек эшлекле уйындар ойоштором.

Кәңәш итеп шуны әйтер инем: балалар менән күберәк сәхнә күренештәре күрһәтергә, уларға тормошта дөрөҫ юл һайлауҙы маҡсат итеп ҡуйырға, уҡыусыларҙы бөтә эшкә илһам менән тотонорға өйрәтергә, халҡына, әҙәбиәтенә, тарихына, теленә, мәҙәниәтенә һөйөү тәрбиәләүҙе күҙ уңында тоторға кәрәк. Шул ваҡытта инде дәрестәрҙе уҡытыуҙың сифаты ла күтәрелер, башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрен өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныуҙары ла артыр.

Драма түңәрәге уҡыусыларҙа бер нисә төр сәнғәт нигеҙҙәренә башланғыс һала һәм уларҙы беректерә. Шул яғы менән ул башҡаларға ҡарағанда ҡатмарлыраҡ та, үҙенсәлерәк тә. Әммә маҡсаты бер: йәш кешенең ижади һәләтен үҫтереү, уның рухи донъяһын киңәйтеү, һөҙөмтәлелекте юғары бейеклектәргә күтәреү. Мәктәпте тамамлағас, ҡайһы бер уҡыусыларҙың шөғөлө буласаҡ һөнәргә әүерелергә мөмкин. Ә «Бөҙрәкәй» театры артистары араһында шундай уҡыусылар бар ҙа инде.

Театрҙа шөғөлләнгән уҡыусылар, беренсенән, башҡорт әҙәбиәте дәрестәрендә әҙәби текст менән оҫта, ентекле эш итергә өйрәнә, һәр образдың эске донъяһына инә, икенсенән, үҙҙәре ижад иткән образды сәхнәлә күрһәтергә күнегә, актерлыҡ алымдарын үҙләштерә. Йәш артистар эш һөҙөмтәләренең генә түгел, ә үҙҙәренең дә тамашасыларға күренеп тороуын белә. Был байтаҡ көсөргәнеш талап итә, балаларҙы тәртип һәм яуаплылыҡҡа өйрәтә, тел дәрестәрен өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра.

© Хәкимова Г.А., 2024

**УДК 372.881.1**

***Шәғәлина Әлфиә Илгиз ҡыҙы,***
*уҡытыусы, Ә.Ғ. Хөснөтдинов исемендәге*
*Учалы ауылы дөйөм белем биреү мәктәбе, Учалы районы, БР*

**Театр түңәрәге эшмәкәрлегендә интерактив эш алымдары аша уҡыусыларҙың телмәрен үҫтереү**

Нимә ул театр? Театр – ул кешелектең рухи ҡиммәттәрен берләштереүсе, ысынбарлыҡҡа ижади ҡараш, рухи яҡтан тәрбиәләүсе көслө ҡорал [2: 5].

2023/2024 уҡыу йылында белем биреүсе ойошмаларҙа дәүләт тарафынан мәктәп театрҙарын тергеҙеүгә иғтибар артты. Мәктәп театрҙары федераль реестрҙа теркәлеп, сертификаттар алды. 2023 йылдың 1 сентябренән Учалы районының Әхнәф Хөснөтдинов исемендәге Учалы ауылы мәктәбендә лә «Тамсылар» театр түңәрәге үҙ эшен башланы. Театр программаһының төп маҡсаты – һәр яҡлап үҫешкән, ижади ҡарашлы, рухлы шәхес тәрбиәләү. Ошо маҡсатҡа ирешеү өсөн бурыстар билдәләнде:

- театр эшмәкәрлеге аша уҡыусыларҙың телмәрен, ижади активлығын үҫтереү өсөн шарттар булдырыу; башҡорт театры сәнғәте тарихы, театр терминдары, театр профессиялары менән таныштырыу;
- уҡыусыларҙың театр менән ҡыҙыҡһыныуын арттырыу, фантазияһын байытыу, сығыш яһау оҫталығын үҫтереү;
- профессия һайлауға йүнәлеш биреү, туған телгә һөйөү, патриотик рух, үҙ-үҙеңде камиллаштырыуға ынтылыш, яуаплылыҡ, активлыҡ тәрбиәләү.

Дөйөм белем биреүсе мәктәптәрҙә туған телдә эш алып барыусы театр түңәрәктәре – театр сәнғәтен бала күңеленә яҡынайтыусы ла, милли тойғо тәрбиәләүсе лә урын ул. Был түңәрәктә уҡыусылар башҡорт театры тарихы, театрҙа хеҙмәт итеүсе һөнәр кешеләре, күренекле актерҙар ижады менән таныша, сәхнә серҙәренә төшөнә, тамашасы алдында үҙен дөрөҫ тоторға өйрәнә. Мәктәп театры балаларҙы әхлаҡи, эстетик һәм патриотик яҡтан тәрбиәләй. Ғөмүмән, театр эшмәкәрлеге белем-тәрбиә биреүҙәге күп мәсьәләне ыңғай хәл итеүҙә ярҙам итә.

Иң тәү сиратта был түңәрәккә йөрөгән балала үҙ-үҙенә ышаныс арта. Ул төрлө ваҡиғала ла юғалып ҡалмай, көтөлмәгән хәлдән ыңғай сыға аласаҡ. Театр түңәрәге балаларҙа яуаплылыҡ тойғоһо ла тәрбиәләй, шулай уҡ уҡыусыға үҙен актер, сценарий яҙыусы, режиссер, декоратор, костюмер, тауыш операторы булараҡ һынап ҡарарға мөмкинлек бирә.

Театр түңәрәгенең уҡыусыларҙың телмәрен үҫтереүҙә роле айырыуса ҙур. Өндәр, һүҙҙәр, образдар ярҙамында тирә-йүнде танып-белеү активлаша. Образ өҫтөндә эшләү барышы балаға фекерләргә, уйланырға, анализларға, һығымта яһарға булышлыҡ итә, уның һүҙ байлығы арта, телмәр өндәрен дөрөҫ әйтергә, логик паузаларҙы, интонацияны дөрөҫ ҡуйырға өйрәнә, диалог телмәре камиллаша. Төрлө артикуляция, орфоэпик һәм дөрөҫ тын

алыу күнегеүҙәрен даими башҡарыу, дикция өҫтөндә эш сәхнә телмәрен үҫтереүгә булышлыҡ итә.

Театр түңәрәктәрендәге эшмәкәрлектә интерактив белем биреү алымдары киң ҡулланыла. Бындай алымдар ҡулланғанда педагог ойоштороусы ролен башҡара, уҡыусылар менән хеҙмәттәшлек итеүгә баҫым яһала. Интерактив алымдар уҡыусыларҙа түңәрәк эшмәкәрлеге менән ҡыҙыҡһыныуын арттырыуға булышлыҡ итә. Тренингтар, эшлекле, ролле уйын, теге йәки был сценарийҙы өйрәнгәндә һәм спектаклдәрҙең видеояҙмаларын ҡарағандан һуң уҙғарылған дискуссиялар, төркөмдәрҙә һәм парлы эшләү, әңгәмә, ижади биремдәр театр түңәрәге эшмәкәрлеген байыта. Эшлекле һәм йылы мөхит булғанда уҡыусылар белемдәрҙе еңелерәк үҙләштерә. Интерактив эш алымдары ошо мөхитте булдырырға ярҙам итә. Түбәндә һеҙҙең иғтибарға интерактив алымдар ҡулланған түңәрәк эшмәкәрлеге өлгөһөн тәҡдим итәбеҙ.

Тема: «*Айыу образын сағылдырыу»*

Маҡсат: уҡыусыларҙың ижади һәләтен үҫтерергә, таҙа телмәр булдырырға, дикция, дөрөҫ интонация ҡуйырға өйрәнеү өсөн шарттар булдырыу.

Бурыстар:

– белем биреүсе: театр сәнғәте буйынса алған белемдәрҙе иҫкә төшөрөү, ҡунаҡсыллыҡ буйынса белемде киңәйтеү;
– үҫтереүсе: уҡыусыларҙың күҙ алдына килтереү һәм импровизациялау, коллективта эшләй белеү һәләтен, актерлыҡ оҫталығын, телмәрен үҫтереү;
– тәрбиә биреүсе: үҙ-ара дуҫтарса мөнәсәбәт, бер-береңә ҡарата хөрмәт тәрбиәләү.

Барышы:

1. Мотивация булдырыу:

– ҡәҙерле уҡыусылар! Бөгөн беҙҙең театрға ҡунаҡ килгән. Кемде беҙ ҡунаҡ тип әйтәбеҙ? Ҡунаҡҡа йөрөргә яратаһығыҙмы? Ҡунаҡ менән бәйле ниндәй мәҡәлдәр беләбеҙ? (Ҡунаҡ ашы – ҡара ҡаршы. Ҡунаҡ булһаң, тыйнаҡ бул.);
– беҙ ҡунаҡтарҙы нисек ҡаршылайбыҙ? Ниндәй һүҙҙәр менән ҡаршы алабыҙ? (ҡәҙерле ҡунаҡтар, рәхим итегеҙ, түрҙән уҙығыҙ);
– әйҙәгеҙ, был һөйләмде төрлөсә әйтеп ҡарайыҡ (ҡыуанып, асыуланып, ҡурҡып, илап);
– ҡунаҡты нисек ҡаршылаһаҡ яҡшы була? (Асыҡ йөҙ менән, йылмайып.) Хәҙер матур итеп йылмайып, яҡты йөҙ менән ҡунаҡты ҡаршы алайыҡ. Кем икән ул беҙҙең ҡунаҡ? Бының өсөн йомаҡты сисергә кәрәк.

Йәйен урманда батша, ҡышын ҡарҙан да аҫта. (айыу)

2. Белемдәрҙе актуалләштереү:

– таҡтала айыу һүрәтен күрһәтәбеҙ. Айыу ниндәй? (яуаптар);
– был айыу – ябай түгел, әкиәт иленән килгән. Ниндәй әкиәттән килде икән? Айыу нимә менән һыйланырға ярата? (бал менән);
– ҡунаҡҡа барғанда беҙ хужаларға нимә алып барабыҙ? (күстәнәс);

– айыу ҙа беҙгә «күстәнәсе» менән килгән. Ул алып килгән кәрәҙ-карточкаларҙа һорауҙар яҙылған.

«Нимә ул театр?»

«Башҡортостанда ниндәй театрҙар бар?»

«Театрҙа ниндәй һөнәр кешеләре эшләй?»

«Актер ниндәй булырға тейеш?»

«Башҡорт театр сәнғәтендәге билдәле актерҙарҙы һанағыҙ.»

3. Практик өлөш. Тренинг.

* дөрөҫ һулыш алыу күнегеүҙәре;

* тиҙәйткесте яй темпта, шәп итеп, шыбырлап, ҡысҡырып, тауышһыҙ ғына әйтеү:

«Сейәлек соҡорон сыҡҡан саҡта сей сейәне сәйнәй-сәйнәй сикәләрем сатнаны»;

* ижади бирем: маска кейеп айыу образын күрһәтеү

(айыу өңөндә ҡаты йоҡлай, айыу бал ашай, айыу шатлана, асыулы айыу)

* әңгәмәләшеү: «Айыу образы ниндәй әкиәттәрҙә осрай?»

(«Айыу һәм бал ҡорттары», «Айыу менән төлкө», «Айыу менән бабай» һ. б.).

– Ҡайһы әкиәтте уҡығанығыҙ бар?

– Был әкиәттәрҙең ҡайһыһын хәҙер уҡыр инегеҙ?

* һайлап алынған текст менән танышыу;

* йөкмәтке буйынса дискуссия;

* төркөмдәргә бүленеп ролле уҡыу (интонацияны дөрөҫ ҡуйыуға иғтибар).

4. Сәхнәләштереү.

5. Рефлексия. Эмоциональ торошто билдәләү.

– Бөгөнгө эшмәкәрлектә ниндәй тойғолар кисерҙегеҙ?

– Һеҙҙең алда 1-ҙән 10-ға тиклем һандар яҙылған түңәрәктәр ята. Ошо түңәрәктәр ярҙамында бөгөнгө осрашыуға ниндәй баһа ҡуйыр инегеҙ?

Ғөмүмән, театр түңәрәгендә интерактив алымдар ҡулланыу эшмәкәрлекте байыта, һөҙөмтәле итә. Уҡыусыларҙың һәләттәрен асып, уларҙы үҫтереүгә булышлыҡ итеүҙә мәктәп театрының роле баһалап бөткөһөҙ ҙур. Заманыбыҙ өсөн мөһим тәрбиәүи мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә, уҡыусыларҙың телмәрен үҫтереүҙә, байытыуҙа, уларҙы әхлаҡи яҡтан тәрбиәләүҙә театрҙар мәктәптең юлдашы булыр, яңы таланттар асыр, уҡыусыларға юл күрһәтеүсе яҡты йондоҙ булыр тигән ышаныста ҡалабыҙ.

**Әҙәбиәт**:

1. В помощь начинающему руководителю школьного театра, педагогу дополнительного образования по театральной деятельности в образовательной организации: методические рекомендации. М., 2022. 26 с.

2. Магия театра: методическое пособие. М., 2022. 43 с.

© Шәғәлина Ә.И., 2024

**УДК 811.512.141**

***Шәрәфетдинова Гүзәл Айбулат ҡыҙы,***
*IV курс студенты,*
***Солтанбаева Хәҙисә Вәли ҡыҙы,***
*филол. фәндәре д-ры, проф.,*
*Өфө университеты, Өфө ҡ., БР*

**Тел ғилемендә туғанлыҡ терминдары мәсьәләләре**

Хәҙерге башҡорт телендә һәм уның диалекттарында ҡулланылған туғанлыҡ терминдары дөйөм төрки теле нигеҙендә барлыҡҡа килгән. Әммә был күренеш һәр ваҡытта ла күҙәтелмәй. Мәҫәлән, төрки телдәр төркөмөндә ир туғандар яғынан өлкән ҡан-ҡәрҙәш кешене теге йәки был телдәрҙә, төрлө фонетик варианттарҙа аба, баба, бабай, ата, атай тип йөрөтәләр. Был атамалар, төрлө эквивалент фонетик үҙенсәлектәргә эйә булып, төрлө телдәрҙә төрлөсә яңғырарға ла мөмкин. Шуны ла әйтеп үтергә кәрәк: аба, аппа, абба төркмән теле диалектарында һәм төрөк телдәрендә атай мәғәнәһен бирергә лә, шул уҡ ваҡытта олатай, йә ҡарт олатай (олатайҙың атаһы) мәғәнәһен дә аңлатырға мөмкин. Абый атамаһы менән башҡорт һәм татар телдәрендә өлкән ағайҙы, йә бабай/апаны атайҙар. Апа һүҙенең фонетик варианттары төрки телдәрҙә әсәй, апай, инәй, өлкән ағайҙың ҡыҙын аңлатырға ла мөмкин. Шулай башҡа ҡайһы бер туғанлыҡ терминдарының да бер-береһенә тап килмәүе, бер-береһенән айырылыуы күҙәтергә була. Был күренеште шуның менән аңлатырға була: бәлки, был һүҙҙәр элек бүтән ҡан-ҡәрҙәш атамаларын аңлатҡандыр. Ошоларҙан сығып, ҡайһы бер шарттарҙа, туғанлыҡ терминдары этимологияһын билдәләгәндә, был терминдың бары төп, йышыраҡ таралған варианты менән сикләнергә булалыр.

Мәҫәлән, «ата» һүҙе башҡорт теленең ҡайһы бер диалект һәм һөйләштәрендә атай, атый, әтей, әти, әткәй һәм башҡа төрлө формаларҙа ҡулланылырға мөмкин. Ҡарағалпаҡ, ҡырғыҙ, ҡараим телдәрендә ата ҡарт кешене йә ата-бабаларҙы аңлатһа, төрөкмән телендә олатай мәғәнәһен бирә. *Шулай уҡ ҡаҙаҡ телендә ата – олатай, әммә аталау һүҙе менән атайҙы, ата-ана һүҙе менән атай-әсәйҙе аңлатыуҙарын алһаҡ, был һүҙ менән, ғөмүмән, ир туғандар яғынан оло кешене билдәләүҙе күрәбеҙ.*

Башҡорт телендә бабай һүҙе оло кешене, ҡартты аңлатһа, был һүҙҙең көнсығыш диалектының ҡайһы бер һөйләштәрендә, мәҫәлән арғаяш, миәс һөйләштәрендә, һәм көньяҡ диалектында (урта һөйләш) быуай, бауый, бауай варианттары осрай. Диалекттарҙа иһә был һүҙ атай йә әсәйҙән оло туғанды, олатайҙы, ҡарт олатайҙы, ҡайныны аңлатырға мөмкин. Шулай уҡ олатай һүҙенең башҡорт теленең төрлө һөйләштәрендә ҡартатай, ҡартай, ҡарттай, ҙур атай, ҡарт ата, ҡартәй, дуратай, дөрәтәй, дурбабай, ҙурәтәй, зурәтәй, ҡәртәтей варианттары ла осрай. Бабҡай, жаҡын төньяҡ-көнсығыш һөйләшендә атай яғынан олатайҙы аңлата, ә бабыҡай, жыраҡ, бабҡай әсәй яғынан олатайҙы аңлата. Татарҙарҙа бабай шулай уҡ олатай, оло кешене аңлата. Бабай һүҙе күп төрки телдәрҙә, мәҫәлән төркмән, әзербайджан, төрөк, гагауз һәм ҡырым татарҙары телендә, беҙҙәге атай туғанлыҡ терминына тура килә.

Шулай итеп, оло туғандарҙы аңлатҡан туғанлыҡ терминдарының семантик йөкмәткеһе айырым телдәрҙә һәм диалекттарҙа тура килмәҫкә мөмкин тип әйтә алабыҙ. Бер үк термин төрлө мәғәнәлә ҡулланылып килгән осраҡтар бар. Бер телдә йыш ҡулланылған ҡайһы бер терминдар бүтән бер телдәрҙә сикләнгән ҡулланылышта килергә лә мөмкин.

Мәҫәлән, башҡорт телендәге ағай һүҙе татар телендә – абый; башҡорт телендәге олатай татар телендә – бабай. Аға һүҙ формаһын ҡырғыҙ, ҡарағалпаҡ, татар, ҡараим, ҡаҙаҡ телдәрендә ағай кешегә һәм өлкән ир кешегә ихтирам күрһәткәндә әйтәләр.

Бынан тыш, был һүҙҙең ҡайһы бер төрки телдәрҙә акка, ака, акы, әкә тигән варианттары бар һәм улар атай, йә оло ир туған, йә олатай мәғәнәһендә ҡулланыла. Башҡорт телендә аҡый, ағый, ағай тигән варианттар осрай.

Бәләкәй ир туғанды (ҡусты) аңлатыр өсөн башҡорт телендә түбәндәге туғанлыҡ терминдары бар: ҡусты, төньяҡ-көнсығыш һөйләшендә – апай, ҡыҙыл һөйләшендә – эне, энекәй, энекәш, туҡ-соран һөйләшендә – энес, һаҡмар һөйләшендә – мырҙа, мыртый.

Өләсәй һүҙенең дә башҡорт телендә төрлө варианттары бар: өләсәй, ҡартәсәй, ҡарсәй, ҡәрсәй, ҡартнәнәй, ҡартнәй, ҡәртнәй, ҙурәсәй, нәнәй, зәзәй, әбә, әзәй, дуринәй, дурнәй, дуринәкәй, зуринәй, зурнәй, зурәһкәй, инәкәй, йыраҡай, йырағәбей, ҡәртсәй, дүрәңкәй, дәүәней, дәүинәй, дәүәсәй һәм башҡалар. Шул уҡ ваҡытта ҡайһы бер диалекттарҙа әсәйҙең әсәһен билдәләү өсөн бер һүҙ ҡулланылһа, атайҙың әсәһен башҡа төрлө термин менән атау күренештәре осрай. Мәҫәлән, һаҡмар һөйләшендә өләсәй – әсәйҙең әсәһе, ҡартәсәй – атайҙың әсәһе. Бөрйән ырыуы башҡорттары атайҙың әсәһен дә, әсәйҙең әсәһен дә өләсәй тип йөрөтә. Нәнәй һүҙе «няня» рус һүҙенән килеп сыҡҡан булырға тейеш. Ҡалған терминдар иһә «әсәй» һүҙенән барлыҡҡа килгән. Өләсәй – «оло» һәм «әсәй» һүҙҙәренең ҡушылмаһы булһа, ҡартәсәй – «ҡарт» һәм «әсәй» һүҙҙәренән. Диалекттарҙа шулай уҡ өләпсә, ҡартәпсә тигән һүҙҙәр ҙә осрай. Ҡартҡартинәй, ҡартҡартәтәй төнъяҡ-көнсығыш һөйләшендә рус телендәге «прабабушка», «прадед» мәғәнәләрен бирә.

Әсәй һүҙен белдереү өсөн дә башҡорт телендә байтаҡ терминдар ҡулланыла: инәй, әней, әни, әнкәй, инәкәй, әпсә, әнәй, иней. Шулай уҡ инәй һүҙе ҡайһы бер һөйләштәрҙә оло ҡатын кешегә хөрмәт менән өндәшкәндә ҡулланыла. Әсәй терминының тамырҙары ачы, ача, әчә боронғо төрки теле һүҙҙәренә барып тоташырға тейеш. Боронғо төрки телендә был һүҙҙәр әсәй, өләсәй, апай, өлкән ҡатын-ҡыҙ туған мәғәнәләрен бирә.

Әммә әгәр ҙә ҡайһы бер башҡорт һөйләштәрендә, мәҫәлән ҡыҙыл һәм һаҡмар һөйләштәрендә һаҡланып ҡалған әпсәй боронғо һүҙ формаһын ҡараһаҡ, әсәй һүҙе әпсәй иҫке формаһынан барлыҡҡа килгән тип фекер йөрөтөргә була. Был осраҡта әбей һүҙенә тура килер әбзәй формаһын да ҡарап китергә була. Сағыштыру өсөн: татар телендә абый – өлкән ағай, абзый – оло ир кешегә хөрмәт менән өндәшеү.

Абзый һүҙе башҡорт һөйләштәрендә лә осрай. Төньяҡ-көнсығыш һөйләштәрендә, абҙый, абҙыҡай һүҙҙәре ҡулланыла. Шулай уҡ бында абҙәтәй, абзәтәй, абзәтей терминдары осрай һәм улар атайҙың йә әсәйҙең оло ағаһын һәм оло ир кешегә хөрмәт менән өндәшкәндә ҡулланыла. Шулай уҡ түбәндәге туғанлыҡ терминдарын да айырып әйтеп китергә була: абҙәбей, абызәбей, абызәбекәй – оло ағайҙың ҡатыны йә әсәйҙең инәһе. Абзәңкәй, абҙәңкәй –

ата-әсәйҙән олораҡ ҡатынға хөрмәт менән өндәшеү. Абжы, абжый терминдары ла иғтибарҙы йәлеп итә, улар оло ағай, бабай/апа терминын аңлата һәм з~ҙ~ж өндәренең сиратлашыуы ярҙамында барлыҡҡа килә.

Башҡорт телендәге апай туғанлыҡ термины төнъяҡ һөйләштәрендә бәләкәй туғанды аңлатһа, апа – оло ир кешене атау өсөн ҡулланыла. Был һүҙҙең этимологияһын аба һүҙенә алып килеп тоташтырырға булалыр. Аба термины күп төрки телдәрҙә ир туғандар яғынан оло туғандарҙы әйтеү өсөн ҡулланыла. Төнъяҡ-көнсығыш диалектында ағәбей, ағабей һүҙҙәре ҡулланыла һәм улар инәй, атайҙың йә әсәйҙең апайын, атайҙың йә әсәйҙең ағаларының ҡатындарына ҡарата ҡулланыла. Беҙҙеңсә, туғанлыҡ терминдарының семантик мәғәнәләре үҙгәреүе, ҡайһы бер телдәрҙә уларҙың бер-береһенә тап килмәүе ырыу-ара мөнәсәбәттәргә алмашҡа башҡа төр ҡан-ҡәрҙәш мөнәсәбәттәре килеү менән аңлатылалыр тип уйлайбыҙ.

Апай туғанлыҡ термины төнъяҡ-көнсығыш һөйләштәрендә ағапа, абыстай, тутай, тутаҡай, түтәй, түткәй һүҙҙәре менән бирелһә, ҡыҙыл һәм урта һөйләшендә апый һүҙе менән атала.

Бәләкәй ир туғанды атар өсөн башҡорт телендә түбәндәге туғанлыҡ терминдары ҡулланыла: эне, ҡусты, мырҙа, мыртый һәм башҡалар. Ә бәләкәй ҡыҙ туған өсөн түбәндәге терминдар бар: һеңле, ҡарындаш, ҡәрендәш, һылыуым, һеңде, һенде, һеңлекәш, һеңдекәш, һеңне һәм башҡалар. Дөйөм төрки ини һүҙе ин- ҡылымынан барлыҡҡа килә, был һүҙ бала табыу мәғәнәһен бирә. Шулай уҡ һеңле һүҙен аңлатҡан башҡорт телендәге ҡарындаш, ҡаҙаҡ телендәге ҡарындас терминдары ҡарын һүҙенән барлыҡҡа килгән. Ҡәрҙәш – татар телендә кәрдәш. – даш, -дәш, -ҙаш, -ҙәш, -таш, -тәш суффикстары, ғөмүмән, ниндәйҙер билдәләр буйынса ойошҡан кешеләр берләшмәһен аңлата. Мәҫәлән, юлдаш, серҙәш һәм башҡалар.

Ҡыҙ баланы, ир баланы, тормош иптәшен атау өсөн башҡорт телендә дөйөм төрки терминдары ҡулланыла: ҡыҙым; улым; тормош иптәше өсөн – ир, бай, бабай арғаяш һәм һаҡмар һөйләштәрендә, абышҡа – урта һөйләштә; ҡатын-ҡыҙ тормош иптәше булараҡ – әбей һәм башҡалар.

Башҡорт телендә кейәү һәм киленде, уларҙың туғандарын билдәләү өсөн дә төрлө терминдар ҡулланыла. Уларҙың күбеһе төрки сығышлы.

Ҡоҙа термины – тормош иптәшенең атаһы һәм туғаны, ҡоҙағый, ҡоҙағай (урта һөйләштә) – тормош иптәшенең әсәһе һәм тормош иптәшенең туғанының ҡатыны, ҡоҙаса – тормош иптәшенең апайы һәм һеңлеһе. Был терминдар монгол теленән куда һүҙен үҙләштереү юлы менән барлыҡҡа килгән булырға тейеш. Дәүкоҙа һүҙе менән оло ҡоҙаны атар булғандар.

Бейем, бианай, биана, бей ана туғанлыҡ терминдары ирҙең әсәһен атағанда ҡулланылһа, биата, бей ата – ирҙең атаһы, бей ағай, биағай – ирҙең бер туғаны. Улар бәк дөйөм төрки һүҙенән барлыҡҡа килгән. Бей – хужа булһа, бикәм – ирҙән оло ҡатын-ҡыҙ туғаны, бикәс – ирҙән кесе ҡатын-ҡыҙ туғаны. Бикә иһә ҡатын-ҡыҙ тигәнде аңлата.

Ирҙең әсәһен атау өсөн ҡайна, ҡәйнәней, ҡәйнәм, ҡайнана, ҡайнанаҡ туғанлыҡ терминдары ҡулланыла.

Икенсе бер төркөм терминдар: ҡайнаға, ҡайныға – ирҙең йә ҡатындың өлкән ир бер туғаны; ҡайынбикә, ҡаймикә, ҡайниғәч, ҡайнығач, ҡайынгәч, ҡайнтута, ҡәймбикә, ҡәмбикә, ҡәймикә, ҡәйнегәс, ҡәйнигәс, ҡәйнәгәз – ҡатындың өлкән ҡатын-ҡыҙ бер туғаны, ҡайынйеҙнә, ҡәйеһнә, ғәйенйеҙнә – ирҙең оло туғанының ире, ирҙең ата-әсәһенән бәләкәй булған туғанының ире, ҡайным – ирҙең йә ҡатындың атаһы йә олатаһы, ҡарт ҡайным – ирҙең йә ҡатындың олатаһы, ҡайыната – ирҙең атаһы, ҡайынана – ирҙең әсәһе – был терминдарҙың барыһының да нигеҙендә ҡайын һүҙе ята һәм ул дөйөм төрки ҡат һүҙенә барып тоташа.

Ҡатындың бәләкәй ир туғанын билдәләү өсөн арғаяш һөйләшендә ҡәйнеш, ҡәйенне, ҡәйне, миәс һөйләшендә балдыҙ, балдуҙ, балтыҙ, төнъяҡ-көнсығыш һөйләшендә ирбалдыҙ, ҡайныш, ҡайнеш, ҡайниш, ҡайнаҡач терминдары ҡулланыла. Ирҙең бәләкәй ҡыҙ туғанын билдәләү өсөн ҡыҙҙар (төнъяҡ-көнсығыш һөйләшендә), ҡатындың бәләкәй ҡыҙ туғаны өсөн балдыз, балтыҙ, балтыз һүҙҙәре ҡулланыла.

Башҡорт телендә этимологик аңлатыуҙы талап итеүсе бер нисә үҙенсәлекле термин бар. Ейән термины – балаңдың балаһы, диалекттарҙа – ҡатын-ҡыҙ туғаныңдың, ҡыҙыңдың йә алыҫ туғандарыңдың балалары. Был һүҙ боронғо төркиләге йэг һүҙенән килеп сыҡҡан булырға тейеш (миҫал өсөн: боронғо төрки йэгән – рус телендәге «племянник» һүҙенә тура килә). Шулай уҡ «племянник» һүҙе өсөн бианул, оноҡ, онуҡ терминдары ҡулланыла.

Бүлә термины – балаңдың балаһының балаһы («правнук»), бүләсәр – «правнучка». Был һүҙҙәрҙең тамырында бүл ҡылымы ята тип алырға була. Ошо уҡ һүҙ «племянник» рус һүҙенә лә тура килергә мөмкин ҡай саҡта. Был һүҙ шулай уҡ дөйөм төрки һүҙе – бала һүҙенән килеп сыҡҡан тип тә ҡарарға була.

Бер туған ағай-ҡустыларҙың ҡатындары бер-береһенә – туҡ-соран һөйләшендә апҫындаш, килендәш, апһындаш.

Башҡорттарҙа бер-береһенә исем менән өндәшеү ҡабул ителмәгән була. Башта был күренеш башҡорттарҙың ышаныуҙарына ярашлы рәүештә башҡарыла. Әгәр кешегә исем менән өндәшһәң, уны көсһөҙ яһайһың тип ышанған башҡорттар. Тап шуға ла кеше исемдәре туғанлыҡ терминдары менән алыштырыла. Һуңғараҡ инде йәмғиәттә ҡабул ителгән әҙәп ҡанундары исем менән өндәшергә юл ҡуймай.

Башҡорт ете быуынын яттан белергә тейеш була. Былар: атай, әсәй, ҡартатай, ҡартәсәй һәм башҡалар. Башҡорттарҙа ҡабул ителгән бер туған, ике туған, өс туған, дүрт туған, биш туған, алты туған, ете ят терминдары ла ошо хаҡта һөйләй. Бындай күренештәр йыш ҡына шәжәрәлә осрай.

Башҡорт телендәге туғанлыҡ терминдарының бай булыуы телдең байлығын күрһәтә. Һәр ырыуҙың, ҡәбиләнең, хатта ғаиләнең үҙ терминдары булған. Төрлөлөк тап ошонан килә лә инде. Туғанлыҡ терминдарын бүлгәндә йәшкә һәм енескә ҡарап бүлеү төп билдә булып тора.

Шулай уҡ, әгәр башҡорт телендәге туғанлыҡ терминдарының күп төрлөлөгөн тикшергәндә, күп вариантлылыҡтың йыш ҡына сингармонизм закондарына ярашлы барлыҡҡа килгәнен күрәбеҙ. Мәҫәлән, ир туғандарҙы билдәләгән терминдар артҡы рәт

һуҙынҡылар ярҙамында барлыҡҡа килһә (ҡайны, ҡайнаға), ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарата ҡулланылған туғанлыҡ терминдары алғы рәт һуҙынҡылары ярҙамында яһалған (ҡәйнә).

Бөгөнгө көндә туғанлыҡ терминдары башҡорт телендә яңыра, байый бара. Мәҫәлән, ейән һәм ейәнсәрҙе билдәләү өсөн оноҡас, оноҡса һүҙен дә ҡулланалар. Шулай уҡ туғанлыҡ терминдары алдынан эпитеттар ҡуйыу ҙа осрай: сибәр апа, оло аға, оло инәй, кесе инәй һәмбашҡалар.

**Әҙәбиәт**:

1. Ишбирҙин Э.Ф. Башҡорт әҙәби теленең тарихы. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1993. 320 б.

2. Раемгужина З.М. Языковая картина мира в башкирской фразеологии. Уфа, 2000. 96 с.

3. Сәмситова Л.Х. Башҡорт тел картинаһында мәҙәниәт концепттары. Өфө, 2010. 164 б.

© Шәрәфетдинова Г.А., Солтанбаева Х.В., 2024

**УДК 372.881.1**

***Әлбәкова Гөлсөм Шаһыбал ҡыҙы,***
*өлкән тәрбиәсе, «Айыуҡай» балалар баҡсаһы,*
*Баймаҡ ҡ., БР*

## Телмәр ижадын үҫтереү буйынса балалар менән эш алымдары

Һуңғы йылдарҙа көнүҙәк мәсьәлә булып телебеҙҙең һайығайыуы, тел байлығының кәмеүе, йәғни телебеҙҙең көнкүреш телмәре кимәлендә генә ҡалыуы һиҫкәндерә, уйға һала. Бөгөнгө көндә кескәй баланың ғына түгел, уның тәрбиәсеһенең дә теле наҡыҫланыуы, халҡыбыҙҙың ауыҙ-тел ижады өлгөләренең онотола барыуы көнүҙәк проблема булып тора.

Рәсәй Федерацияһының Мәғариф һәм фән министрлығының 17.10.2013 йылғы 1155-се ҡарары менән раҫланған Федераль дәүләт белем биреү стандарттарына ярашлы төҙөлгән «Башҡортостан – тыуған илем» парциаль программаһының телмәр үҫтереү өлөшөндә нәфис әҙәбиәт һәм ауыҙ-тел жанрҙары менән таныштырыу, тыуған тел байлығына иғтибар итеү маҡсат итеп алынған.

**Маҡсаты**: педагогик тәжрибә менән уртаҡлашыу һәм профессиональ компетентлыҡты, педагогтарҙың балалар телмәрен үҫтереү буйынса оҫталығын күтәреү өсөн мәғлүмәти киңлек булдырыу.

**Бурыстар**:

– заманса талаптар нигеҙендә телмәрҙе һәм телмәр аралашыуын үҫтереү буйынса педагогтарҙың компетентлыҡ кимәлен күтәреү;

– балаларҙың телмәрен үҫтереү өсөн мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһында шарттар булдырыу буйынса педагогтарҙың тәжрибәһен киңәйтеү;

– балаларҙың телмәр үҫешенең комплекслы бурыстарын тормошҡа ашырыу өсөн педагогтарҙы педагогик процесты проектлау һәм моделләштереү технологияларын үҙләштереү буйынса фекерләү һәм практик эшмәкәрлеккә дәртләндереү.

Ауыҙ-тел ижады әҫәрҙәре халыҡ тормошона, тәбиғәт күренештәренә, үҫемлектәргә, хайуандарға, ҡоштарға һәм бөжәктәргә бәйле өндәшмәктәрҙе, әйтенмәктәрҙе,

оҡшатҡыстарҙы, телмәрҙе камиллаштырыуға ҡоролған тел төҙәткестәрҙе, үсекләшеүҙәрҙе, ҡара-ҡаршы әйтешмәктәрҙе, көйһөҙ-моңһоҙ рифмалы теҙмә юлдарҙан торған таҡмазаларҙы, әкиәттәрҙе, көләмәстәрҙе, йырҙарҙы, таҡмаҡтарҙы үҙ эсенә ала.

Хәҙер ошоларҙың онотола барған өлгөләрен ҡарап китәйек.

**Арбауҙар, имләүҙәр:**

Әпсен-төпсөн,
Бүрәнә ҡыçһын,
Ҡаны сыҡһын,
Нығыраҡ ауыртһын,
Тфү-тфү-тфү!

**Әйтемһәктәр:**

Һаҡ-һаҡ, ҡолағым,
Яр башынан ҡоланым
Ике сәғәт иланым.

**Теләктәр:**

1. Ҡояш апай, сыҡ, сыҡ,
Һыуыҡ ағай кит, кит.
2. Ямғыр, яу, яу, яу,
Иген үçһен тау-тау.

**Үсекләшеүҙәр:**

1. Юлай, Юлай,
Юрған аçтында тулай.
2. Мырҙабай, Мырҙабай,
Аҡсаһы юҡ, буйға бай.

Гаджеттарҙы оçта ҡулланған заман балаһының һәләтен кәрәкле йүнәлешкә еберәү өсөн сторителлинг алымы, Пропп карталары, фекерләү карталары, дидактик синквейн, фонетик ритмика, логоритмика, каталог алымы, йомаҡтар, метафоралар төҙөү, мәғлүмәти-коммуникатив технологиялар ҡулланыу зарур.

Мәçәлән: сторителлинг алымы.

«Стори» – тарих төҙөү. Был алым менән әкиәт, хикәйә генә түгел, таҡмаза ла ижад итергә була.

Таҡмаза:

Һуяр инем өйрәк,
Ҡунаҡтарым күберәк.
Һуяр инем ҡаҙ,
Ҡунаҡтарым аҙ.
Һуяр инем күркә,
Ҡунаҡтарым өркә.
Бешерер инем өйрә,
Ул эсегеҙ ней күрә?

Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың телмәрен үҫтереүҙә, һүҙлек запасын байытыуҙа, һүҙбәйләнештәр төҙөүҙә, фекерләү ҡеүәһен, логик фекерләүен үҫтереүҙә әкиәттәр ярҙамға килә.

Хәҙерге ваҡытта кескәйҙәрҙе эпос, легенда, әкиәттәр менән таныштырыу, халыҡ ижадына ҡыҙыҡһыныу уятыу өсөн заман талаптарына тап килгән технологиялар бик күп. Шундай технологияларҙың береһе булып әкиәт терапияһы тора.

Әкиәт терапияһын ҡулланыу балаларҙың телмәрен үҫтереүҙә бик ҙур һөҙөмтәләр бирә. Балалар бер-береһен тыңларға, эҙмә-эҙлекле итеп тасуирлап һөйләргә өйрәнә, башҡорт өндәрен дөрөҫ әйтергә һәм телмәрҙе нығытырға өлгәшә. Башта балалар йүнәлешле һорауҙар, төрлө схемалар ярҙамында әкиәт ижад итһә, аҙаҡ улар күп осраҡта бер ниндәй ярҙамһыҙ бәләкәй әҫәр ижад итә ала.

Әкиәт терапияһы ысулдарына әкиәт һөйләү, ҡурсаҡтар эшләү, әкиәттәр төҙөү, әкиәт ҡуйыу, әкиәт һүрәтләү һ. б. инә. Имидж-терапия ысулын тәрәнерәк ҡарап үтәйек.

Балаларға, үҙҙәрен төрлө геройҙар менән тиңләү хас. Бының өсөн төркөмдә төрлө костюмдар һәм аксессуарҙарҙың булыуы мөһим, сөнки әкиәт образында бала батша ҡыҙы йәиһә сихырсыға әүерелә.

Имидж-терапия ҡулланыу баланың үҙ-үҙен баһалауын арттыра, борсолоу кимәлен кәметә. Балалар үҙҙәрен төрлө әкиәт, йәнһүрәт, хикәйә геройҙары менән тиңләштерә.

Шулай итеп, кешенең шәхес үҙенсәлектәре, мотивтары, эмоциональ тороштары, ҡиммәттәре асыҡлана. Образда ул бер яҡтан, күңел төшөнкөлөгөнә бирелгән эмоцияларҙы һәм теләктәрҙе уйнай ала, икенсе яҡтан үҙенә кәрәкле тәртип моделдәрен күсәйтә ала.

Шулай итеп, замана тәрбиәсеһе халҡыбыҙҙың быуаттар дауамында тупланған рухи, матди байлығыбыҙ булған ауыҙ-тел ижады аша яңы технологиялар ҡулланып, телмәр ижадын үҫтереүгә бурыслы.

**Әҙәбиәт**:

1. Башҡортостан – тыуған илем: мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн Башҡортостан Республикаһын өйрәнеү программаһы / Ф.Ғ. Аҙнабаева, Г.Ш. Әлбәкова, Ә.Р. Буранбаева, К.Ф. Мортаева. Өфө: Китап, 2017. 129 б.

2. Ғәләүетдинов И.Ғ. Балалар фольклоры. Өфө: Китап, 1996.

3. Сөләймәнов Р.С. Халыҡ ижады ынйылары. Өфө: Китап, 1995.

4. Башҡорт халыҡ ижады. Өфө: Китап, 2007.

© Әлбәкова Г.Ш.

**УДК 37.035.6**

***Әсәҙуллина Гөлфирә Ҡотлоғужа ҡыҙы,***
*физик культура инструкторы, Баланы үҫтереү үҙәге –*
*«Айыуҡай» балалар баҡсаһы МАМББУ, Баймаҡ к., БР*

**Башҡорт халыҡ уйындарын физик культура дәрестәрендә ҡулланыу**

Башҡорт халыҡ уйындары – ул физик әүҙемлек һәм күңел асыу ысулы ғына түгел, ә халыҡтың тарихы һәм мәҙәниәте менән танышыу мөмкинлеге лә. Был уйындар тәрән символик мәғәнәгә эйә һәм йыш ҡына боронғо йолалар һәм ышаныуҙар менән бәйле.

Беҙҙең балалар баҡсаһында балаларҙың төрлө яҡлап үҫешенә айырым иғтибар бирелә. Был процестың мөһим өлөштәренең береһе булып физкультура дәрестәре тора, унда балалар әүҙем хәрәкәт итеүҙән тыш, төрлө халыҡтарҙың уйындарын да өйрәнә.

Беҙҙең программа сиктәрендә башҡорт халыҡ уйындарына айырым иғтибар бирҙек. Рәсәйҙең төп халыҡтарының береһе булған башҡорттарҙың традицион уйындар өлкәһендә бай мираҫы бар, уны беҙ балаларыбыҙға шатланып тәҡдим итәбеҙ.

Физкультура дәрестәре башҡорт халҡының уйындары менән танышыуҙан башлана. Балалар башҡорттарҙың мәҙәниәте һәм йолалары, уларҙың мираҫын һаҡлау һәм хөрмәт итеүҙең мөһимлеге хаҡында белә. Артабан улар төрлө уйын элементтары менән таныша, һәр уйын тураһында төп мәғлүмәт, башҡарыу ҡағиҙәләре һәм техникаһы йыйыла.

Артабан балалар башҡорт уйындарында әүҙем ҡатнашҡан практик өлөш килә. Улар уйын төркөмдәренә бүленә һәм һәр уйын ҡағиҙәләренә ярашлы көс, тиҙлек, оҫталыҡ һәм аҡыл менән үлсәнә башлай. Был уйындарҙа, физик үҫештән тыш, команда рухы, хеҙмәттәшлек итеү һәләте, шулай уҡ хәлде анализлау һәм ҡарарҙар ҡабул итеү һәләте үҫешә.

Һәр дәресте балалар өсөн мауыҡтырғыс һәм ҡыҙыҡлы итергә тырышабыҙ. Балаларға физик күнекмәләрҙе генә түгел, ә уйынды эмоциональ ҡабул итеүҙе лә тапшырырға тырышабыҙ, шулай итеп, ҡатнашыусыларға дәрестәрҙә ваҡыт үткәреү ҡыҙыҡлы була.

Беҙҙең балалар баҡсаһында физкультура дәрестәрендә башҡорттарҙың халыҡ уйындары балаларҙың физик потенциалын үҫтереүгә булышлыҡ итеүҙән тыш, уларға башҡорт халҡының мәҙәни мираҫына һәм йолаларына ҡушылырға ла ярҙам итә. Был беҙҙең белем биреү программаһының мөһим өлөшө булып тора, ул балаларҙа төрлө мәҙәниәттәрҙе хөрмәт итергә һәм уларҙың толерантлығын һәм үҙ-ара аңлашыуын үҫтерергә ярҙам итә.

Башҡорт уйындарының үҙенсәлеген иҫәпкә алып, һәр бала үҙен ошо ғәжәйеп мәҙәниәттең бер өлөшө итеп тойһон өсөн, улар тирәләй иғтибар һәм ихтирам атмосфераһы булдырырға тырышабыҙ.

«АҠ ТИРӘК, КҮК ТИРӘК» – күптәргә таныш һәм яратып уйналған уйындарҙың береһелер. Уның асылы шунда: балалар ике төркөмгә бүленеп, бер-береһенән 20-30 метр алыҫлыҡта ҡулға-ҡул тотоношоп, ҡапма-ҡаршы баҫалар. Беренсе яҡтағылар һамаҡлай:

Ҡабыр-ҡабыр ҡабырсаҡ,

Ат башында кимерсәк.

Аҡ тирәк, күк тирәк,

Беҙҙән һеҙгә кем кәрәк?

Икенсе яҡ яуаплай:

Аҡ тирәк, күк тирәк

Ал да кәрәк, гөл дә кәрәк,

Беҙгә иң матур йырсыбыҙ

Зөһрә атлы ҡыҙ кәрәк.

Исеме аталған уйынсы ҡаршы яҡҡа йүгереп барып тотоношҡан ҡулдарҙы өҙөп сығырға тырыша. Өҙөп сыға алһа, үҙ яғына бер уйынсыны алып ҡайта. Кире хәлдә ҡаршы яҡта ҡала. Уйын шул тәртиптә бер яҡта уйынсылар бөткәнсе дауам итә. «Аҡ тирәк, күк тирәк» – балаларҙың аяҡ, ҡул мускулдарын нығытыуға, сыҙамлылыҡты тәрбиәләүгә нигеҙләнгән[2: 68].

«ҠУЯНДАР МЕНӘН ҺУНАРСЫЛАР» йәки «ӨЙРӘК АТЫШЛЫ» уйынында туп файҙаланыла. Ике «һунарсы» ике яҡҡа тора, улар араһына «ҡуяндар (өйрәктәр)» урынлаша. Бер яҡтағы бала икенсе яҡҡа туп бәрә. Маҡсаты – ҡуяндарҙы (өйрәктәрҙе) «атып алыу», кемгә туп тейә, шул уйындан сыға. Әгәр ҙә инде урталағы бала тупты ҡулы менән тотһа, уға «ғүмер өҫтәлә». Уйын бар ҡуяндар (өйрәктәр) атып алынғансы дауам итә.

Онотолоп барған уйындарҙың береһе – «12 ТАЯҠ». Ергә ҙур ғына таш йә түмәр һалына, униң өҫтөнә таҡта. Таҡтаның бер яҡ башы ергә терәлә, шунда 12 таяҡ йыйып өйөлә. Һанашмаҡ ярҙамында күтөүсе билдәләнә. Уйын бер ҡатнашыусының таҡтаның икенсе яҡ осона килтереп баҫыуынан башлана. Көтөүсе осоп киткән таяҡтарҙы йыйып, таҡтаны рәтләп, барыһын да кире урынына урынлаштырғансы, ҡалған ҡатнашыусылар тирә-яҡҡа ҡасып, йәшенеп бөтә. Көтөүсенең маҡсаты – йәшенгәндәрҙе эҙләп табыу. Берәйһен тапҡас та йүгереп килеп таҡтаның осона ҡулы менән тейһә генә йәшенеүсе тотолған иҫәпләнә. Әгәр ҙә инде йәшенгән кеше отҡорораҡ булып, алдараҡ килеп, таҡтаның осона ҡабаттан баҫһа, таяҡтар яңынан туҙа, көтөүсе яңынан йыя, ә шул арала тотолған ҡатнашыусылар ҡабаттан йәшенеү хоҡуғына эйә. Әммә көтөүсе таяҡтарҙың берәүһен булһа ла осоп барышлай ҡулына тотоп өлгөрһә, баҫыусы үҙе көтөүсегә әүерелә һәм хәҙер ул таҡтаны ҡороп халыҡты эҙләй башлай. Тәүге көтөүсе «штраф» алмай бөтәһен дә теүәл генә тотоп сыҡһа, беренсе табылған бала көтөүсе ролен ала. Йәшенмәк уйынының бер төрө булараҡ «12 таяҡ» бер яҡтан иғтибарлылыҡҡа, икенсе яҡтан таяҡтарҙы йыйыу аша етеҙ булырға өйрәтә.

«ҠАП ТА ҠОП» уйыны.

Балалар түңәрәк яһап теҙелешеп ултыралар һәм һамаҡлайҙар.

Беҙ, беҙ, беҙ инек,

Беҙ ике ҡыҙ инек,

Баҙға төштөк, май ашаныҡ,

Аҡ келәттә бал ашаныҡ.

Бер таҡтаға теҙелдек,

Таң атҡансы юҡ булдыҡ.

Әпсен, төпсөн, ҡап та ҡоп!

«Ҡоп» һүҙе әйтелгәс тә бөтә балалар ауыҙҙарын йомоп шым ҡала һәм бер-береһен көлдөрөргә тырыша. Көлөп ебәреүсе наказ үтәй [2: 112].

«АЛЫРМЫН ҠОШ, БИРМӘМ ҠОШ» уйыны.

Уйындың маҡсаты: иғтибарлылыҡты, сослоҡто, етеҙлекте, хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереү; ойошҡанлыҡ тәрбиәләй.

Балалар был уйынды яҙ көндәре, ҡаҙҙар бәпкәләрен сығарғас, уларҙы көткән саҡта уйнаған.

Уйында «ҡаҙ», уның «бәпкәләре» һәм «төйлөгән» ҡатнаша. Төйлөгән булған бала ерҙе соҡоп ултыра. Ҡаҙ, бәпкәләрен эйәртеп уның эргәһенә килә һәм:

– Төйлөгән, төйлөгән, ни эшләйһең? -тип һорай.

Төйлөгән:

– Бына һинең балаларыңды атып алырға ултырам, – ти.

Ҡаҙ:

– Мин һиңә балаларымды бирмәйем! – ти.

Төйлөгән урынынан тора ла:

– Алам, алам, атар ҡош! – тип, ҡаҙ бәпкәләренә ташлана.

Ҡаҙ:

– Бирмәм, бирмәм битәр ҡош! – тип, бәпкәләрен ҡурсалай башлай.

Ә бәпкәләр, ҡаҙ артынан бер-бер артлы тотоношоп: Сип-сип-сип, -тип йөрөйҙәр. Төйлөгәндең ҡулы тейгән бала уйындан сыға бара. Уйын ҡаҙ бәпкәләре тотолоп бөткәнсе дауам итә [2: 72].

«ЙӘШЕРӘМ ЯУЛЫҠ» уйыны.

Балалар түңәрәк яһап ултыралар, араларынан көтөүсе һайлана. Ул яулыҡ ала. Балалар йырлай:

Йәшерәм-йәшерәм яулығымды<br>
Йәшел ҡайын аҫтына.<br>
Һиҙҙермәйсә һалып китәм<br>
Бер иптәшем артына.

Көтөүсе булған бала түңәрәкте уратып йөрөй һәм бер уңайлы ваҡытта һиҙҙермәй генә яулыҡты бер иптәшенең артына һалып китә. Ә үҙе һаман яулыҡты йәшереп тотҡан һымаҡ йөрөй.

Артында яулыҡ ятҡан бала, көтөүсе түңәрәкте әйләнеп килгәнсе, үҙенең артында яулыҡ ятҡанын һиҙмәй ултырһа, көтөүсе уның янына килеп еткәс, яулыҡты ала ла уға яулыҡ менән һуға. Был бала көтөүсе булып ҡала. Әгәр ҙә түңәрәктәге бала артына яулыҡ һалынғанын һиҙеп ҡалһа, тиҙ генә тороп, көтөүсе артынан йүгерә. Ә көтөүсе яулыҡтан һуғылмаҫ өсөн, түңәрәк буйлап йүгереп, уны баҫтырған иптәшенең урынына ултырырға тырыша. Әгәр ултырып өлгөрмәһә, ул тағы көтөүсе була һәм уйын яңынан башлана.

Шулай итеп, балалар баҡсаһында балалар өсөн башҡорт халыҡ уйындары күңел асыу сараһы ғына түгел, ә балалар психикаһын һәм физик үҫешен тәрбиәләүҙең мөһим ҡоралы булып тора. Улар әүҙем тормош позицияһын формалаштырыуға, социаль күнекмәләрҙе үҫтереүгә һәм

коллективта эшләү оҫталығын үҫтереүгә булышлыҡ итә. Был уйындар ярҙамында балалар үҙҙәренең потенциалын асырға, үҙ-үҙҙәренә ышаныс табырға һәм ауырлыҡтарҙы еңеп сығырға мөмкинлек ала.

**Әҙәбиәт:**


1. Башҡортостан – тыуған илем: мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн Башҡортостан Республикаһын өйрәнеү программаһы / Ф.Ғ. Аҙнабаева, Г.Ш. Әлбәкова, Ә.Р. Буранбаева, К.Ф. Мортаева. Өфө: Китап, 2017. 129 б.

2. Ғәләүетдинов И.Ғ. Уйнайыҡ, дуҫтар, бергәләп. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1987. 128 б.

3. Хөсәйенова Г.Р. Башҡорт халыҡ уйындары. Өфө: Ғилем, 2006. 72 б.


© Әсәҙуллина Г.Ҡ., 2024.

**УДК 372.881.1**

***Әхмәдйәнова Фидания Тәфкил ҡыҙы,***

*башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы,*

*«94-се лицей», Өфө ҡ., БР*

## Башҡорт теле дәрестәрендә метапредмет компетенциялар формалаштырыу ысулдары

Тормош еңелме, ҡатмарлымы? Ер йөҙөндә күпме кеше – шунса фекер. Минең уйлауымса, бик үк ҡатмарлы ла, артыҡ ябай ҙа түгел. Йыш осраҡта беҙ уны үҙебеҙ ауырайтабыҙ һәм унан сығыу юлын табыу ҡыйынғараҡ тура килә. Сәбәптәре ниҙә һуң? Ни өсөн уны аңлар өсөн мәктәптә, бер нисә юғары уҡыу йортонда алған белемдәр ҙә етмәй... Ошо мәсьәләләрҙе хәл итеү юлдарын эҙләү мәғарифтә яңы стандарттарҙың индерелеүенә килтерҙе.

Яңы быуын дөйөм белем биреү стандарттарының мөһим ҡиммәти ориентиры – уҡыу-уҡытыу процесына компетентлыҡлы ҡараш булдырыу. Мәктәп уҡыусыларында метапредмет, дөйөм, предмет компетенциялар комплексын формалаштырыу бурысы тора. Улар инде үҙ сиратында метапредмет һөҙөмтәләргә килтерә.

Башланғыс кластарҙа был бурысты атҡарыу, ниндәйҙер кимәлдә, еңелерәк кеүек. Сөнки, башлыса, төп предметтарҙы бер уҡытыусы уҡыта. Уҡыусыларының үҫешен, һөҙөмтәләрен даими рәүештә күҙәтеп барыу мөмкинлеге бар. Ә бына 5–11 класҡа тиклем уҡытҡан предмет уҡытыусыларына ҡыйынғараҡ тура килә. Башҡорт теле уҡытыусылары был осраҡта бәхетлерәк кеүек, сөнки күпселек осраҡта башланғыстан алып сығарылыш класына тиклем эшләү мөмкинлеге бар.

Балаларҙың тырышып уҡыуында ҡыҙыҡһыныу төп урында тора. Әлбиттә, быға тәбиғи һәләт тә сәбәпсе. Шулай ҙа һәләтте асыу өсөн тейешле шарттар булдырыу мөһим. Билдәле педагог Л.Г. Занков: «Һәр яҡлы үҫешкә, рухи байлыҡҡа көсләп өлгәштереп булмай. Кеше үҙе ынтылырға тейеш», – ти. Ә белемгә, яңылыҡҡа бала ҡыҙыҡһыныу булғанда ғына ынтыла. Балаларҙың киләсәктә фекерләү үҙ аллылығы, теоретик материалды практика менән бәйләй алыуы һәм алған белемен яңы шарттарҙа файҙалана белеүе уларҙың башҡорт теле

һәм әҙәбиәте дәрестәрен ни ҡәҙәре аңлы, мауығып, ижади һәм теләк менән өйрәнеүенә бәйле. Танып белеүгә ҡыҙыҡһыныуы иғтибарҙы, ихтиярҙы, хәтерҙе, аҡыл эшмәкәрлеген, ижадты активлаштыра, яңы материалды тиҙерәк һәм еңелерәк иҫтә ҡалдырырға ярҙам итә. Шуға күрә лә дәресте төҙөгәндә уҡыусыларҙы төрлө эшмәкәрлеккә өйрәтеүҙең мөһим икәнен онотторға ярамай. Яңы стандарттарға ярашлы уҡыусыла тирә-яҡты танып белеүгә мотивация булдырыу, мәктәптә алған белеменең тормоштан айырмалы рәүештә алынған белем түгел, ә киреһенсә, уны тормошҡа әҙерләү, тейешле мәғлүмәтте эҙләп табыу, алған белем һәм күнекмәләрҙе тормошта ҡуллана алыу мөмкинлеген күрһәтеү [1].

Әгәр уҡытыусылар дәрестәрендә метапредмет компетенциялар формалаштырыуҙың төрлө алымдарын ҡулланһа, башҡорт теле дәрестәре ҡыҙыҡлыраҡ, йөкмәткелерәк һәм һөҙөмтәле буласаҡ. Ғөмүмән, башҡорт теле уҡытыусыһы уҡыусыларҙың ижади фекерләүен үҫтереү, тел шәхесен тәрбиәләү эшмәкәрлегендә әллә күпме яңы ысулдар, ҡыҙыҡлы эш төрҙәре, алымдар уйлап сығара ала. Яңылыҡтар, асыштар яһағанда, әлегә тиклем билдәле булғандарын белеү, берләштереү, таныш булғандарын күҙ уңында тоторға тейеш.

Эшмәкәрлегебеҙҙең төп маҡсаты – һөҙөмтә. Уҡыусыларға теоретик белем, мәғлүмәт кенә биреү заманы үтте. Уларҙы үҙ аллы эҙләнеүҙәргә килтереүсе, төрлө сығанаҡтар менән эш итергә өйрәтер һәм иң мөһиме уларҙы тормошонда кәрәк буласағын аңлауға килтергән алымдар, технологиялар ҡулланыу төп маҡсатым. Шуларҙың бер нисәһенә туҡталып үтмәксемен.

Башҡорт теле дәрестәрендә интерактив (пассив һәм актив) алымдарҙы урынлы ҡулланыу бик отошло (төркөмләп, шәхсән эшләгәндә лә) [3]. Бигерәк тә юғары сифатлы презентация, аудио-видеояҙмалар ҡулланыу кәрәкле һөҙөмтәләргә килтерә. Уҡыусыларҙың иғтибарын көсәйтер өсөн, был мәғлүмәтте ҡарағандан һуң планлаштырылған биремдәрҙе уҡыусыларға алдан уҡ әйтеп ҡуйыу дөрөҫ. Уларҙы ҡарағандан һуң дискуссия, фекер алышыуҙар, кәрәк икән яҙма (ижади йәки һорауҙарға яуап формаһында) эштәр башҡарғанда уҡыусы күргән, ишеткән мәғлүмәтте аңларға, кәрәк урында ҡулланырға, анализларға өйрәнә, ҡыҙыҡһыныуын арттыра. Бындай эш төрҙәре уҡыусыларҙың материалды үҙләштереү кимәлен билдәләү, фекерләү ҡеүәһен күҙаллау, ҡыҙыҡһыныуҙарын аңлау кеүек бик күп һөҙөмтәләргә килтерә, метапредмет компетенциялар формалаштырырға ярҙам итә.

Уйын технологияларын ҡулланыу ҙа уҡытыу эшмәкәрлегендә бик отошло. Уларҙы бөтә кластарҙа ла уңышлы ҡулланып була. Әҙер уйындарҙы ғына уйнауҙан тыш, балалар үҙ тәҡдимдәрен дә индерә ала, хатта яңы уйындар ҙа уйлап табырға һәләтле. Был технология уҡыусыларҙы ижади яҡтан асырға, уларҙың көслө һәм көсһөҙ яҡтарын, лидерлыҡ, ойоштороу һәләтен билдәләргә ярҙам итә. Артабан уҡытыусы уҡыусыларҙың шәхси үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып эшмәкәрлеген планлаштыра ала. Клиплы фекерләү сәскә атҡан осорҙа уйын технологиялары ҡулланып яңы идеялар бирергә һәләтле, асыштар яһарлыҡ аналитик фекерләй белгән быуын тәрбиәләп була.

Бөгөнгө көндә, төрлө сәбәптәр арҡаһында, уҡытыуҙы дистанцион формала ла ойоштороға тура килә. Төрлө белем биреү платформаларында эшләйбеҙ. Уҡыусылар өсөн

был ҡыҙыҡлы һәм ҡайһы саҡ отошло ла. «Интерактив башҡорт теле», «Башҡорт телен өйрәнәм» кеүек дәрестәрҙе уҡыусылар бик яратып ҡабул итһә, «Якласс» платформаһы өҫтәмә билдәләр алыуҙы ябайлаштыра. Унда теоретик материалдар ҙа урынлаштырылған. Бигерәк тә милли мәктәптәр өсөн шәп платформа. Уның эшләү принцибы (функционал) башҡа предметтар менән бер кимәлгә күтәрелде.

Мобиль телефондар ҙа башҡорт телен өйрәнеүҙә ярҙамсы булып китте. Сөнки байтаҡ мобиль ҡушымталар уҡыусыларҙа башҡорт телен өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу уята. Бигерәк тә «Сәләм» ҡушымтаһын юғары баһалайҙар. Бигерәк тә дистанцион уҡытыу осоронда уларҙың ярҙамы тейҙе. Был турала минең мәҡәләм «Башҡортостан уҡытыусыһы» журналында баҫылып сыҡты [2].

Уҡыу-уҡытыу технологияларының уңышы объектив һәм субъектив факторҙарға бәйләнгәне һәр кемгә мәғлүм. Шулар араһында мотлаҡ факторҙар булып уҡыусыларҙың һаулығы, психологик үҙенсәлектәре тора. Алда ҡарап үткән алым, технологияларҙы ҡулланып эшләү миңә дәрестәремде төҙөгәндә психологик комфорт булдырыу, уҡыусыларҙың шәхси үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып, уҡыусыларҙың ваҡытын һәм көсөн артыҡ күп сарыфламай оптималь һөҙөмтәләргә ирешергә мөмкинлек бирә.

Һәр баланың ҡыҙыҡһыныуы һәм мөмкинселектәренән сығып уңышҡа өлгәшеү – шәхес үҫтереү ул. Уҡыусының үҙләштерелгән материалға таянып үҙ фекерен ҡыйыу рәүештә башҡаларға еткереүе, уны яҡлай белеүе. Беҙҙең, ата-әсәләренең етәкселегендә проект эштәре эшләй алыуҙары – алда әйтеп үткән бар ысул, алым, эшмәкәрлектең ижад емеше тип ҡарайым. Шул уҡ ваҡытта яңы Федераль дәүләт белем биреү стандарттарына яуап бирә.

Нигеҙле итеп һөйләй белеү, тимәк, фекерләй белеү тигән һүҙ. Фекерен башҡаларға еткерерлек итеп телмәрен төҙөй белгән кеше йәмғиәттә үҙен юғалтмаясаҡ, уның тулы ағзаһы буласаҡ, үҙ урынын таба аласаҡ.

**Әҙәбиәт:**

1. Ғәбитова З.М. ФГОС индереү шарттарында башҡорт теле дәрестәренә талаптар. URL:https://uchbash.com/articles/nachalnaya-shkola/2018-10-01/bash-ort-tele-d-rest-rend-metapredmet-kompetentsiyalaryn-formalashtyryu-metodtary-199599?ysclid=lscouxhnv352073990.

2. Әхмәдйәнова Ф.Т. Башҡорт телен уҡытыуҙа мобиль ҡушымталар ҡулланыу. URL: https://uchbash.com/articles/common_material/2020-08-28/bash-ort-telen-u-ytyu-a-mobil-ushymtalar-ullanyu-228761?ysclid=lsj41keb5p540972834.

3. Интерактивные методы обучения в современной педагогике: примеры и рекомендации по использованию. URL: https://niidpo.ru/blog/interaktivnyie-metodyi-obucheniya-v-sovremennoy-pedagogike-primeryi-i-rekomendat.

© Әхмәдйәнова Ф.Т., 2024

**УДК 372.882**

***Юлдашбаев Наил Яхъя улы,***
*башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы,*
*Ф. Солтанов исемендәге мәктәп,*
*Иҫәнгол ауылы, Ейәнсура районы, БР*

# Башҡорт әҙәбиәте дәрестәрендә тәнҡитле фекерләү һәләтен үҫтереү

***Баш һүҙ***

Бөгөнгө көндә беҙ мәғлүмәттәр донъяһында йәшәйбеҙ. Һәр бер тишектән: телевизорҙан, интернеттан, радионан, газета-журналдарҙан бөтмәҫ-төкәнмәҫ яңылыҡтар, төрлө-төрлө тәҡдимдәр, ниндәйҙер фәнни асыштар, төрлө рекламалар, сәйәси һәм дини идеялогиляар бер туктауһыҙ беҙҙең башыбыҙға аға ла аға. Бындай мәғлүмәт ташҡынынан күптәр аптырап ҡала, йыш ҡына алданалар, хаталаналар, ниндәйҙер яңылыш юлға баҫалар. Мошенниктарҙың ҡапҡанына эләгеп, байлыҡтарынан һәм аҡсаларынан ҡолаҡ ҡағалар, ниндәйҙер партияның йәки сектаның ҡолона әүерелә‌ләр һ. б. Бындай күренештәрҙең бер сәбәбе: күп кешеләрҙә тәнҡитле фекерләү түбән кимәлдә йәки бөтөнләй ундай һәләткә эйә түгелдәр.

Ә тәнҡитле фекерләү нисек барлыҡҡа килә һуң? Эйе, кешелә ул тәбиғи юл менән формалашырға тейештер, әгәр бөтә шарттар ҙа уның үҫешенә ыңғай булһа. Ләкин бөгөнгө тормош ниндәйҙер ҙур һабантуйҙы хәтерләтә: кешеләр мәктәп эскәмйәһенән башлап ярыша башлай, бөтә ерҙә лә беренсе булырға ынтыла, ҡайҙалыр ашыға, нимәгәлер эйә булып ҡалырға тырыша... Ә бындай тормош когнитив һәләттәрҙең формалашыуына ыңғай шарт була алмай. Сөнки фекерләү бик яй формалашыусы күренеш, уның өсөн йүгереп китеп барған ерҙән туктап, уйланып ултырырға кәрәк. Шуға бөгөнгө көндә тәнҡитле фекерләүҙе үҫтереү өҫтөндә маҡсатлы итеп эшләү талап ителә. Фекерләү һәләте 3 йәштән 16 йәшкә тиклем осорҙа әүҙем формалашыуын иҫәпкә алғанда, әлбиттә, мәктәп бының өсөн иң уңайлы урын. Бына шуға мин тел һәм әҙәбиәт дәрестәрендә ошо йүнәлештә эшләйем дә инде.

***Методиканың теоретик нигеҙҙәре***

Тәнҡитле фекерләүҙе үҫтереү методкаһы өҫтөндә эшләү өсөн уҡытыусы түбәндәге фән өлкәләрен яҡшы белергә тейеш: беренсеһе, тәнҡитле фекерләүҙе һәм уның закондарын; икенсеһе, бала фекерләүенең үҫешен; өсөнсөһө, үҙенең уҡытҡан предметын. Бына ошоларҙы бергә ҡушып синтезлаһаң, беҙгә кәрәкле методика барлыҡҡа килә. Ә яңы һанап киткән темалар буйынса фәнни хеҙмәттәр бихисап, тиһәң дә була. Был сығышта бөтәһен дә һөйләп тороу кәрәкмәйҙер, ә беҙгә кәрәкле булғандарының ҡайһы берҙәренә ҡыҫҡаса ғына туҡталып үтәм.

Нимә ул тәнҡитле фекерләү? Был һорауға яуаптың бик күп варианттары бар. Мин шуларҙың бөтәһенә лә уртаҡ булғанын тәҡдим итәм: тәнҡитле фекерләү – ул ниндәйҙер мәғлүмәттең ысынбарлыҡҡа тап килеүенә шик белдереү, артабан шуның дөрөҫлөгөн йәки түгеллеген иҫбатлау өсөн кәрәкле мәғлүмәттәрҙе йыйыу, уларҙы анализлау, артабан уларҙы

синтезлап, ниндәйҙер һығымта яһау. Ул һығымта шулай уҡ ниндәйҙер ижади асыш йәки проблеманы хәл итеү юлы булырға ла мөмкин.

Тәнҡитле фекерләү закондары тулыһынса формаль логика закондарына тап килә, уларҙы беҙ юғары уҡыу йорттарында өйрәнәбеҙ. Шуға улар тураһында һөйләп тороу кәрәкмәйҙер. Тик бер генә әйбер: шул логик фекерләү шикләнеү тойғоһонан башланырға тейеш. Йәғни нимәгәлер тәнҡит күҙлегенән ҡарау уға шикләнеүҙән башлана. Шунһыҙ тәнҡитле фекерләү булмай. Шуға шикләнергә лә өйрәтергә кәрәк. Быны нимәнән башларға һуң?

Шикләнеү кешенең үҙ аҡылында булырға тейеш, йәғни үҙенең уйлаған фекеренә үҙе шикләнеп ҡарап өйрәнһен. Башта ниндәйҙер фекер әйтһен, артабан, киреһенсә, уның дөрөҫ түгеллеген иҫбатлап ҡараһын. Бына шулай кешелә диалектик фекерләү барлыҡҡа килә, ул үҙ-үҙе менән бәхәсләшергә өйрәнә. Йәғни үҙенең ниндәйҙер идеяһын әүеш-тәүеш килтереп анализлай һәм һығымта яһай. Артабан бындай һәләт тышҡы тормошта сағыла башлай – кеше таныш булмаған мәғлүмәттәрҙе тәнҡит күҙлегенән ҡабул итергә ғәҙәтләнеп китә. Бындай шикләнеү нигеҙендәге фекерләүҙе үҫтереүҙең бер алымы ошолай: ниндәйҙер уҡыған әҫәр буйынса уҡыусыға үҙ фекерен әйтергә ҡушаһың, артабан әйткән фекеренә үҙе ҡаршы килһен, йәғни дөрөҫ түгел тип иҫбатлаһын. Ғәҙәттә, бындай бәхәсте класты ике төркөмгә бүлеп ойошторалар. Ә беҙҙең осраҡта бәхәс бер баланың башында бара. Тағы бер мөһим әйбер: иҫбатлау өсөн дәлилдәр ни тиклем күп, шул тиклем яҡшы икәнен уҡыусылар белергә тейеш.

Ә хәҙер бала фекерләүенең үҫешенә туҡталып китәйек. Был күренеште күп ғалимдар өйрәнгән, уларҙың araһында иң яҡшыһы һәм педагогтар араһында иң популяры булып Швейцария психологы Жан Пиаженың «Бала фекерләүе» исемле хеҙмәте иҫәпләнәләр. Уның теорияһы буйынса, бала фекерләүенең үҫеше дүрт этап аша үтә:

1. ***Сенсомотор этабы*** (1 йәштән 3 йәштәргә тиклем). Был осорҙа бала хәрәкәттәр ярҙамында фекерләй.

2. ***Эгоцентрик фекерләү этабы*** (3–8 йәштәр). Был осорҙә бала үҙен тормоштоң уртаһы тип иҫәпләй. Ул фекерен әйткәндә, үҙен уны тыңлаған икенсе кеше урынына ҡуя белмәй.

3. ***Трансдуктив фекерләү этабы*** (7–12 йәштәр). Бер аргументҡа нигеҙләнеп, икенсе аргументҡа килә ала. Тик дөйөмләштерелгән һығымта эшләй белмәй. Логиканың индукция һәм дедукция кеүек һығымта яһау формаларына әле эйә түгел.

4. ***Логик фекерләүҙең барлыҡҡа килеү этабы*** (*12*–16 йәштәр). Был осорҙа инде бала логиканың формаларына һәм закондарына эйә була башлай.

Әйтергә кәрәк, балаларҙа трансдуктив әллә логик фекерләү кимәлеме икәнен тикшереү өсөн 5-се кластар өсөн башҡорт теле дәреслегендә бик матур бер күнегеү бар. Ул – «Һөйләмдең тиң киҫәктәре» темаһына ҡараған 68-се күнегеү. Унда бер-береһенә оҡшаған бер нисә һөйләм бирелә лә, уларҙан бер тиң киҫәкле һөйләм төҙөргә кәрәк. Мәҫәлән, ошондай һөйләмдәр: «***Беҙҙең мәктәптә яҡшы итеп йыһазландырылган оҫтахана бар. Беҙҙең мәктәптә бай китапхана бар. Беҙҙең мәктәптә спорт залы бар.*** » Әгәр уҡыусы: «***Беҙҙең мәктәптә яҡшы итеп йыһазландырылған оҫтахана, бай китапхана, спорт залы бар*»,** – тип яҙа икән, унда логик фекерләү формалаша башлаған. Ә инде: «***Беҙҙең мәктәптә яҡшы***

***итеп йыһазландырылған оҫтахана бар, беҙҙең мәктәптә бай китапхана бар, беҙҙең мәктәптә спорт залы бар***», – тип яҙһа, ул балала трансдуктив фекерләү кимәле. Сөнки дөйөмләштерә белмәй әле.

Һәм иң мөһиме: бала фекеренең үҫеше һанап киткән этаптарҙың бөтәһен дә үтергә тейеш. Сөнки уларҙың һәр береһе икенсеһе өсөн нигеҙ булып тора. Шуға тәнҡитле фекерҙе үҫтереү өҫтөндә эшләгәндә, баланың логик фекерләү этабына еткәнен көтөргә кәрәк. Ҡайһы берҙә башланғыс синыф уҡытыусыларының: «Беҙ балаларҙы логик фекерәләргә өйрәтәбеҙ», – тип һөйләгәндәрен ишетергә тура килә. Шуны иҫтә тоторға кәрәк: фекерләүе эгоцентрик йәки трансдуктив осоронда булған баланы логик фекерләргә өйрәтергә маташалар икән, уның фекерләү һәләтенең формалашыуын бөтөнләй тотҡарлаясаҡтар.

***Әҙәбиәт дәрестәрендә тәнҡитле фекерләү алымдары***

Йыш ҡына, математика дәрестәре генә фекерҙе үҫтерә, ә башҡалары артыҡ түгел, тигән һүҙҙәрҙе ишетергә була. Беренсенән, математика үҙенән үҙе фекерҙе үҫтермәй, бында уҡытыусының оҫталығынан тора. Икенсенән, бөтә дәрестәрҙә лә фекерҙе үҫтерергә була, әгәр уҡытыусы маҡсатлы эш алып барһа.

Әҙәбиәт дәрестәрендә лә тәнҡитле фекерҙе бик яҡшы итеп үҫтерергә мөмкин. Быны һәр бер теманы үткәндә эшләргә булалыр. Һаман да әҙәбиәт дәреслектәрендә шундай әҫәрҙәр бар, улар үҙҙәренән үҙҙәре тәнҡитле фекерләүҙе һорайҙар. Мәҫәлән, Д. Юлтыйҙың «Бәләкәй Ҡотош», Ғ. Туҡайҙың «Шүрәле», З. Биишеваның «Һөнәрсе менән Өйрәнсек», Т. Ғиниәтуллиндың «Бала менән әсә», Ә. Әминевтың «Ҡытайгород» (һ. б) әҫәрҙәрен атап китергә була. Ә бына фәлсәфәүи ҡарашлы фекерҙе үҫтереү өсөн «Урал батыр» эпосы иң яҡшыһылыр. Хәҙер шуларҙың ҡайһы берҙәренә туҡталып, тәнҡитле фекерҙе үҫтереү процесын күрһәтеп үтәм. Дөрөҫөрәге, үҙемдең тәжрибәм менән уртаҡлашам.

***Ғабдулла Туҡайҙың «Шүрәле» әкиәтен өйрәнгәндә***

Был әҫәр 6-сы класта өйрәнелә. Йөкмәткеһе бөтәбеҙгә лә яҡшы билдәле. Әҫәрҙең аҙағында һорауҙар бирелгән. Шуларҙың 4-се һорауы ошолой яңғырай: «Егеттең ҡыйыулығы һәм зирәклеге низә күренә?» Мин ошо һорауҙарҙы шик аҫтына ҡуям «Ысынлап та, егет зирәкме? Әйҙәгеҙ, беренсе сиратта, шуның киреһен иҫбатлайыҡ», – тип эш ҡушам. Башта үҙҙәренә әҫәрҙән кәрәкле дәлилдәр табып, фекер йөрөтөргә ирек бирәм. Әгәр укыусылар үҙҙәре эшләй алмаһа, үҙем ярҙам итә башлайым.

– ***Егет кискеһен урманга китеп бара... Был аҡыллы кешенең эшеме?*** – Әлбиттә, ҡала балалары урман эшен белмәй. Ә бына ауыл балалары яҡшы белә. Улар аталары менән урман йығырға йөрөһә, ағасты кискеһен йәки төндө йығыуы ҡурҡыныс икәнен яҡшы беләләр. Мәҫәлән, мин үҙем мәктәпкә тиклем төҙөүсе булып эшләнем, шуға йыш ҡына урман йығырға йөрөнөк. Ә хәүефһеҙлек техникаһы буйынса эңер төшөү менән ағас йығырға ярамай ине. Сөнки ағаста ҡороған ботаҡтар булырға һәм ағасты йыға башлау менән улар осоп төшөп, башты тишергә мөмкин. Ғөмүмән, аҡыллы кеше кискеһен урманға йөрөмәй.

Артабан уның ҡыйыулығы буйынса һөйләшергә мөмкин. «Егет ысынлап та ҡыйыумы?» – тигәнерәк һорау ҡуйырға һәм уҡыусыларҙың үҙҙәренә эҙләнергә мөмкинселек бирергә кәрәк. Әгәр килеп сыҡмаһа, уҡытыусы: «***Егет шүрәле менән асыҡ көрәшкә***

***сыкмай, хәйләле юл менән уның бармаҡтарын бүрәнәгә ҡыҫтырып, исемен әйтергә ҡурҡып, ҡасып ҡайтып китеүен ҡыйыулыҡ тип әйтеп буламы?»*** – тигәнерәк һорау ҡуйырға мөмкин... Балалар, был ҡыйыулыҡ түгел, ә хәйләкәрлек, тип яуап бирәсәктәр. Ошо урында ҡыйыулыҡ сифаты тураһында һөйләшеү ойошторорға кәрәк. Ғәҙәттә, ҡыйыу кеше асыҡ көрәшкә сыға...

***Дауыт Юлтыйҙың «Бәләкәй Ҡотош» әҫәрен өйрәнгәндә тәнҡитле фекерҙе үҫтереү***

Әҫәрҙең аҙағында Ҡотлояр байҙың һаранлығы тураһында бер һорау бар. Унда: ***«Халыҡ Ҡотлояр байға ни өсөн «Урыҫ Ҡотлояр, «Һаран Ҡотлояр» тигән ҡушаматтар биргән? Текстан миҫалдар менән иҫбатлағыҙ»*** – тигән эш бирелгән. Уҡыусыларға уның һаранлығын шик аҫтына ҡуйып: ***«Ысынлап та, Ҡотолояр бай һаранмы? Әйҙәгеҙ, уның һаран түгеллеген иҫбатлап ҡарағыҙ. »*** Уны иҫбатлау өсөн Ҡотлояр тураһындағы 5-се бүлекте бик ентекләп уҡып, дәлилдәр табырға кәрәк.

Бик иғтибар менән уҡыһалар, улар шундай юлдарҙы табасаҡтар***: «Уның өйөндә йылына ике генә мәжлес була. Ураҙала бөтә-тирә якты саҡырып, бер ифтар яһай, Ҡорбан байрамында бер нисә ҡорбан салып, бөтә ауылды тиерлек ҡунаҡ итә».*** Иғтибар итегеҙ: бөтә ауылды тиерлек ҡунаҡ итә... Йылына ике тапҡыр... Ауылдың иң һаран кешеһе... Башҡа йомарт ауылдаштары ауылды ай һайын ҡунаҡ итәләрме икән ни? Бөгөн мин бөтә ауылды ике түгел, бер тапҡыр ҡунаҡ иткән байҙарҙы ишеткәнем юҡ.

Артабан дауам итәбеҙ. ***«Сәми ҡарт үлгәс, Тимеркәйҙе бераү ҙә тәрбиәгә алманы. (...) Уны ауылда ла бер кеше лә йортона индермәне. (...) Һис бер урын юҡ. Бөтә ишектәр ябыҡ...»*** Ғөмүмән, бөтәһе лә уны ишек алдынан ҡыуып сығара. Хатта күптәр уның үлеүен теләй. Ә шул ваҡытта Ҡотлояр бай уны өйөнә индерә, ашата, йылы һүҙҙәр әйтә, эш бирә. Тимеркәй ҙә быдай йылы һүҙҙе атаһы үлгәндән һуң беренсе тапҡыр ишетә. Ауылдың иң һаран кешеһенән ишетә... Ә ауылдың йомарт тип иҫәпләнгән кешеләре өйөнә лә индермәй, йылы һүҙҙәр ҙә әйтмәй. Аҙаҡтан уҡыусылар менән шундай һығымта яһайбыҙ: бер нисек тә Ҡотлоярҙы һаран кеше – кире образ тип әйтеп булмай...

Бына ошолай итеп фекер йөрөтөү йәки анализлау тәнҡитле фекерләү тип атала ла инде. Әлбиттә, быының өсөн, беренсенән, йөкмәткене яҡшы белергә; икенсенән, үҙеңә тәнҡитле фекер йөрөтә белергә; өсөнсөнән, дөрөҫ һорау бирергә кәрәк.

© Юлдашбаев Н.Я., 2024

**УДК 372.881.1**

***Jepbarova Ayna Batyrovna,***
*teacher of the department, Seyitnazar Seydi*
*Turkmen State Pedagogical Institute,*
*city Turkmenabat, Turkmenistan*

**The effective methods of teaching German language**

The teaching of foreign languages has witnessed a lot of dynamic changes in the methods used in the teaching and acquisition of foreign languages. It is either an extension or modification of the existing methods, in order to meet the demands of communication. These methods can either be

didactic based or taken into consideration other factors like the specific needs of the learners and the learning situation. The choice of a method depends on the creativity of the teacher to understand the learning needs of the students and the environment in which the learning takes place. The change in method according to language planners will depend on the need to reappraise the curriculum content, in order to improve the standard of the language learners. The effect of redefining new goals for the curriculum content for language learning ensures flexibility and introduction of new methods to make improvement in language acquisition. Invention of new methods in foreign language has become a part of the teaching system. The proliferation of methods is a prominent characteristic of contemporary second and foreign language teaching. The need for proficiency in communication created opportunities for efficiency in the teaching of languages. With the above background, we shall briefly discuss some other methods of language teaching.

**The grammar translation method** is the very first known traditional method of language teaching. It centres on the traditional concepts of teaching grammar and vocabulary. This process includes grammatical rules, procedures for selecting vocabulary, and social conventions governing speech [3: 101].

**The direct method** also known as the natural method is a radical change from the Grammar-Translation Method by the use of the target language as a means of instruction. There is avoidance of the use of first language as a means of communication in the classroom and its use as a translation technique. The Direct method advocates the spontaneous and direct learning of a foreign language in the class rather than the procedural rule and analytical procedure of learning grammar. The learner can deduce the rule and pattern of grammar. It gives priority to speaking and pronunciation. Familiar words are used to teach new vocabularies using pictures and demonstration. This method follows the principle and observation of the natural approach in which a child naturally acquires its mother tongue.

**The audio-lingual method** derived its pattern from linguistics and psychology, which assumes that learning a language, entails the study of grammar from the view of syntax. It is characterized by the separation of four basic skills of language learning, which are: listening, speaking, reading, and writing. This method uses dialogues as the main means of presenting the language and emphasizes certain practice techniques, such as repetition, drills and memorization.

**The audio visual method** as the name implies is a mixture of audio and visual presentation of foreign language materials with a view of improving comprehension and retention. Language instruction is made possible by the use of audio visual aids like filmstrips, pictures microforms, slides, projected opaque materials, PowerPoint, television educational series tape recording and flashcards. The goal of audiovisual aids is to enhance teacher's ability to present the lesson in simple and effective pattern. The language teacher uses this method to enhance teaching and learning of foreign language especially in a nonnative environment. The visual materials make the students to make use of the sensory organs of seeing and hearing, thus making it easier for the learners to understand.

**The communicative language teaching** aims to make communication the goal of language teaching and creates techniques for teaching the four skills of language learning. It encourages

activities that involve real communication. Language learners are expected to be negotiators, teachers to be organizers. It is no doubt that the communicative language teaching gained popularity and dominated language teaching in many countries, because it makes language learning more interesting and helps learners to develop linguistic competence as well as communicative ability [3: 93].

If we compare two languages while teaching German, students can learn foreign language effectively. Students are convinced that German and English have a lot in common:

1) a Latin font

2) in the field of vocabulary and word usage

3) in the structure of a simple sentence (the presence of a verb-ligament);

*Deutsch – English*

*Mein Name ist Merdan. My name is Merdan.*

*Sie ist krauk. She is ill.*

*Er spricht Deutsch. He speaks German* [2: 35].

4) In the formation of tenses (from the three main verb forms and the use of the auxiliary verb haben = to have);

*Deutsch – English*

*Kommen – kam – gekommen come – came – come*

*Bringen – brachte-gebracht  bring – brought – brought*

*Sprechen – sprach – gesprochen speak – spoke – spoken*

modal verb;

*müssen – must, to have to*

*konnen – can, to be able to*

*dürfen – may, to be allowed to*

*wollen – to want/wish to, be intended to*

*sollen – to be supposed to*

*mogen – to like to*

the usage of articles;

*the Clown = der Clown (m)*

*a clown = ein Clown*

*the car = das Auto (n)*

*the garage = die Garage (f)*

*a garage = eine Garage*

The usage of relative pronouns in compound sentences with subordinate determinants;

*Einige Relativpronomen – Some relative pronouns*

*Singular, Personen Persons (Singular)*

*die Frau, die… the woman,*

*der Mann, der… the man, who…*

*das kind, das… the child,*

*Plural, Personen Persons (Plural)*

*Die Leute, die… the people, who…*

*Singular, Sachen Things (Singular)*

